ЙӨКМӘТКЕ


§1 БАШҠОРТТАР ХАҠЫНДА БЕРЕНСЕ МӘҒЛҮМӘТТӘР....3
§2 ИСЛАМ СЫҒАНАҠТАРЫНДА БАШҠОРТТАР....4
§ 3 ИБН ФАДЛАН КҮРГӘН БАШҠОРТТАР....5
§4 ИҘРИСИ ХЕҘМӘТЕНДӘ БАШҠОРТТАР....6
§5 БАШҠОРТТАРҘЫҢ КИЛЕП СЫҒЫШЫ....7
§6 МАДЬЯРСТАНДАҒЫ БАШҠОРТТАР....8
§7 БАШҠОРТТАРҘА ИСЛАМИӘТТЕҢ ТАРАЛЫУЫ....9
§8 МОНГОЛ ДӘҮЕРЕНДӘ БАШҠОРТТАР....10
§9 МОНГОЛДАР ХЕҘМӘТЕНДӘГЕ ҺӘМ МЫСЫРҘАҒЫ БАШҠОРТТАР....11
§10 БАШҠОРТ ИЛЕНДӘ ХАНДАР....11
§11 ТУРА ШЕЙБАН ХАНДАРЫ....12
§12 ТӨМӘН БЕЙҘӘРЕ ҺӘМ НУҒАЙ МЫРҘАЛАРЫ....12
§13 РУСТАРҘЫҢ ТӘҮГЕ БАҪЫП ИНЕҮҘӘРЕ....14
§14 ҺУҢҒЫ ТУРА СОЛТАНДАРЫНЫҢ РУС БАҪҠЫНСЫЛАРЫНА ҠАРШЫ СЫҒЫУЫ. ҠАЛМАҠТАР ҺӘМ НУҒАЙҘАР. УРТА БАШҠОРТОСТАНДЫҢ РУС ҠУЛЫ АҪТЫНА ИНЕҮЕ....15
§15 КӨНЬЯҠ-КӨНСЫҒЫШ БАШҠОРТОСТАН. ҠАҘАҠ ҺӘМ ҠАРАҒАЛПАҠ ХАНДАРЫ....17
§16 БАШҠОРТ ИЛЕНЕҢ ЭСКЕ ТОРМОШ ҠОРОЛОШО....17
§17 ЫРЫУ-ҠӘБИЛӘӘ ТӨҘЛӨШӨ....18
§18 СИНФИ ҠОРОЛОШ....20
§19 "ИҠТА" АҪАБА СИСТЕМАҺЫ....21
§20 БАШҠОРТОСТАНДА РУС ХАКИМИӘТЕ....22
§21 СӘЙЕТ БАТЫР....22
§22 КҮСЕМ ХАН УЛДАРЫНЫҢ БАШҠОРТОСТАНДА ЭШМӘКӘРЛЕКТӘ БУЛҒАНДАРЫНЫҢ ШӘЖӘРӘҺЕ....23
§23 ДӘҮЛӘТ ГӘРӘЙ, АБУҒА ҺӘМ КЕСЕ СОЛТАНДАР....24
§24 СӘЙЕТ БАҺАДИР....31
§25 КҮСЕМ АҠАЙ МЕНӘН АЛДАР ТАРХАН КҮТӘРЕЛЕШЕ (1705–1741 ЙЫЛДАР)....33
§26 МОРАТ СОЛТАН ХӘРӘКӘТЕ....35
§27 ҠӘЙЕП ХАН ХӘРӘКӘТЕ ҺӘМ ТЫРЫШЛЫҠТАРЫ....39
§28 ҠАЛМАҠТАР ҺӘМ БАШҠОРТТАР....47
§29 ПЕТРҘЫҢ ТӨРКӨСТАНДЫ БАҪЫП АЛЫУ ПЛАНЫ. ҠӘЙЕП ХАН ҺӘМ БАШҠОРТТАР....50
§30 БЫЛ ДӘҮЕРҘӘ БАШҠОРТ ИЛЕНЕҢ ЭСКЕ ХӘЛЕ....53
§31 КҮСЕМ УЛЫ АҠАЙ, АЛДАР ТАРХАН ҺӘМ КИЛМӘК АБЫҘХӘРӘКӘТТӘРЕ....55
§32 ҠАРАҺАҠАЛ – БАЙБУЛАТ СОЛТАН ХӘРӘКӘТЕ....64
§33 БАТЫРШАҺ КҮТӘРЕЛЕШЕ....69
§34 ҠАЛМАҠТАРҘЫҢ КӨНСЫҒЫШҠА КҮСЕНЕҮЕ....77
§35 ЮЛАЙ МЕНӘН САЛАУАТ....78
§36 ДИНИ ИДАРА....79
§37 БАШҠОРТОСТАНҒА РУСТАРҘЫҢ КҮСЕП УЛТЫРЫУЫ....80
§38 КАНТОНЛЫҠТАР....80
§39 РӘСӘЙ ХӨКҮМӘТЕНДӘ БАШҠОРТ ҒӘСКӘРЕ....81
§40 ҺУҢҒЫ РУС ИНҠИЛАПТАРЫ ДӘҮЕРЕНДӘ БАШҠОРТТАР**....84

§41 ҺУҢҒЫ УРЫҪ ИНҠИЛАПТАРЫ ДӘҮЕРЕНДӘ БАШҠОРТТАР ....... 86
§42 МӨХТӘР БАШҠОРТ ИЛЕ ....... 87
§43 МӘСКӘҮ СЪЕЗЫ ....... 87
§44 БАШҠОРТ ӨЛКӘ ШУРАҺЫ ....... 88
§45 БЕРЕНСЕ БАШҠОРТ ҠОРОЛТАЙЫ ....... 88
§46 ИКЕНСЕ БАШҠОРТ ҠОРОЛТАЙЫ ....... 90
§47 БАШҠОРТОСТАН МӨХТӘРИӘТЕ ИҒЛАНЫ ....... 91
§48 ӨСӨНСӨ БАШҠОРТ ҠОРОЛТАЙЫ ....... 92
§49 БАШҠОРТ ХӨКҮМӘТЕ ҺӘМ СОВЕТТАР ....... 94
§50 ТАУҘАРҘА ҺУҒЫШҠА ӘҘЕРЛЕК ....... 95
§51 ЧЕХОСЛОВАКТАР КҮТӘРЕЛЕШЕ ....... 97
§52 БЕРЕНСЕ БАШҠОРТ ПОЛКТАРЫНЫҢ ОЙОШТОРОЛОУЫ ....... 98
§53 СЕМИПАЛАТИНСКИҘА АЛАШ УРҘА МЕНӘН КӘҢӘШМӘЛӘР ....... 99
§54 ҺАМАРҘАҒЫ КӘҢӘШМӘЛӘР ....... 100
§55 ӨФӨ ДӘҮЛӘТ ШУРАҺЫ ....... 101
§56 БАШҠОРТТАР ҺӘМ ТАТАРҘАР ....... 101
§57 ҠАТМАРЛЫ БЕР ЗАМАНДА КИҢ ПЛАНДАР ....... 102
§58 ДЕМОКРАТИЯНЫҢ ЮҠҠА СЫҒЫУЫ ....... 104
§59 ЙӨҘБАШЫ ИСМӘҒИЛ ШӘРИПОВТЫҢ ХӘТИРӘЛӘРЕ ....... 108
§60 ПОКРОВСК ҺУҒЫШЫ ....... 110
§61 ӘХМӘР ҺУҒЫШЫ ....... 111
§62 ЙӨРӘКТАУ – ЯҢЫРЫҪ ҺУҒЫШЫ ....... 112
§63 СӘРМӘН ҺУҒЫШЫ ....... 113
§64 СОВЕТТАР МЕНӘН КИЛЕШЕҮ ....... 114
§65 СОВЕТТАР ЯҒЫНА СЫҠҠАН БАШҠОРТОСТАНДЫҢ ТӘҮГЕ КӨНДӘРЕ ....... 115

§1 Башҡорттар хаҡында беренсе мәғлүмәттәр

Птолемей[1] әҫәрендә Дон буйы тирәһендә көн итеүсе бер ҡәүемдең исеме булараҡ телгә алынған Пасиртай атамаһы башҡорт исеме булған кеүек, Волга һәм Урал буйҙарында йәшәгән ҡәүемдәрҙе аңлатыусы Гновивой, Табивой, Боровской исемдәре лә башҡорт ырыуҙары Ғәйнәне, Табынды, Борачты (Буржан-Барачтан)[2] күҙ уңында тота булһа кәрәк... Шул уҡ авторҙың әҫәрендә тағы ла көнсығыштараҡ, Уралдың көньяғында йәшәүсе ҡәүем тип иҫкә алынған Савобнвой[3] башҡорттар араһындағы ҡыпсаҡтарҙың бер өлөшөн тәшкил итеүсе суундарҙың исеменә яҡын. Шулай булғас, был төрки ҡәбиләләрҙең төп нигеҙен тәшкил иткән өлөштәре Птолемей заманында, йәғни миләди (христиан) йыл иҫәбе буйынса икенсе быуатта, хатта Птолемей өсөн төп сығанаҡ булып хеҙмәт иткән Марин де Турҙың әҫәре яҙылған дәүерҙә, тимәк, миләди йыл иҫәбе буйынса беренсе быуатта уҡ, хәҙергә тиклем йәшәгән ерҙәрен, йәнә унан бер аҙ көнбайыш һәм көньяҡ тарафтарҙағы өлкәләрҙе биләүе хаҡында һығымта яһарға мөмкин. Шул уҡ ваҡытта башҡорт риүәйәттәренән уларҙың һәм болғарҙарҙың иң боронғо ата-бабалары булған Кенжеләрҙең Бохара тарафынан килгәнлеге әйтелә[4]. Птолемей ҙа Хорасанда Парттар өлкәһендә Пасакартия[5] булыуын күрһәтә, Иран дастандарында һәм көнбайыш сығанаҡтарында сағылған Башгирд[6], Термез янында Башҡорт тауы һәм Памирҙың Читрал тарафында Башҡорт[7] исемле ер кеүек географик исемдәр ҙә, боронғо болғарҙар һымаҡ[8], башҡорттарҙың да шул заманда Төркөстандың көньяҡ-көнсығыш тарафында йәшәүен дәлилләй. Иран әкиәттәрендә осраған Гюрксар, йәғни "ҡурт баш" һүҙе лә асылда "баш гур" тигәнде аңлатыуы ихтимал[9]. "Башҡорт" һүҙенең "ҡуртбаш" һүҙенән килеп сығыуы хаҡындағы халыҡ араһында таралған этимологик фараз итеүҙәр ҙә[10] был һүҙҙең боронғо бер форманан барлыҡҡа килеүен күрһәтә[11]. Төрк риүәйәттәренең иң боронғоһо булған Уғыҙ дастанында[12] башҡорттар Иҙел буйында һәм уға яҡын болғарҙар менән сиктәш бер таулы өлкәлә йәшәгән ҡеүәтле һәм хәйләкәр (көслө һәм ғәйәр) халыҡ тип танылған һәм үҙенең ғорурлығы, ҡыйыулығы арҡаһында һис бер йыһангирға баш эймәгән ҡәүем сифатында иҫкә алынған. Улар йәшәгән таулы өлкә (Урал тауҙары) был дастанда "Башҡорт тауҙары"(ҡуһһаи Башҡурт) тип аталған һәм уларҙың рәйестәрен фулус тип атауҙары хаҡында әйтелгән. Был һуңғы һүҙҙең ҡулавуз тигән һүҙ булыуы ла мөмкин[13]. Дастанда, бөтә төрк ҡәбиләләре иҫкә алынған хәлдә лә, "Болғар" ҡәбиләһе иҫкә алынмай. Ҡеүәтле ҡәбилә булараҡ, тик башҡорттар хаҡында һүҙ бара. Уларҙың түрәһе Ҡарашит исемле, имеш, уның Балугур тигән бер ҡәлғәһе, нығытмаһы бар. Ул Уғыҙ хан менән һуғышҡан, еңелгән һәм башын эйгән. "Балугур" "лир" төрксәһе буйынса "биш огур" тигәнде аңлата*. Шулай булғас, ошо уҡ мәғәнәләге "Билгар" (Булгар) башта ҡәүем исеме түгел, бер ҡәлғә исеме булған. "Башгур" (өлөштәре "баш-гур-т) "чаз" төрксә һүҙ булған. Йәғни башҡорттар — боронғо болғар һәм хәзәрҙәр кеүек, "лир" төрксәһендә түгел, "чаз" төрксәһендә һөйләшкән ҡәүем. "Ҡара-шит" Фирғәнәлә һәм Сәмәрҡәндтә исламдан тәүҙә осраған "Аҡшид"ҡа (Ахшид, Ахшад) оҡшаш, йәғни "шад" (щид) һүҙенә "ҡара" һүҙе ҡушылған һүҙ. Ҡарашид Оғузнамәлә саманиҙарҙың ата-бабалары дәүерендә шул уҡ төньяҡта йәшәгән көслө ҡәүем хөкөмдарының исеме, йәки ҡушаматы булараҡ иҫкә алына[14]. Иҙел — Урал — Алтай регионында Болғар һәм Суварҙарҙың әлегә ниндәйҙер сәйәси берләшмә сифатында иҫкә алынмаған замандарында уҡ башҡорттарҙың иҫкә алыныуы бик әһәмиәтле. Уғыҙ дастанының был тәүге өлөшө иһә миләди йыл иҫәбенән алдағы быуаттарҙа барлыҡҡа килгән риүәйәттәрҙе үҙ эсенә алған[15].

Боронғо башҡорттар хаҡындағы иң ышаныслы мәғлүмәттәр Ҡытай сығанаҡтарында күренә. Ләкин был сығанаҡтар ҡытайҙар тарафынан ҡәүем исемдәре булараҡ

---

*Лир һәм Шаз төрөксәһе хаҡында ҡара: Ғөмүми төрөк тарихына кереш. Истанбул.1970.22,24-се биттәр.

иҫкә алынған бәғзе исемдрәрҙе "башҡорт" исеменә яҡынлаштырыуҙан башҡа бер ни ҙә түгел. Шундай бер самалап ҡарау өлгөһөн проф. Чанг-Лангта табабыҙ. Христиан йыл иҫәбе буйынса 643 йылда үлгән бер автор тарафынан яҙылған Суи династияһының генеологик тарихында Урта Азия ҡәүемдәре хаҡында һүҙ алып барыла. Унда Көнбайыш Төркөстанда Хәзәр диңгеҙенә ҡәҙәр йәйелеп йәшәүсе "Тие-ле" төрк ҡәбиләләренең "Ба-шу-ки-ли" тип аталған бер тармағы, проф. Чанг-Ланг фекеренсә, "башҡорт" тигәнде аңлата. Ошо "Суи-шу", йәғни Суи династияһы тарихында "Тие-ле"ләр боронғо Һиуйнг-ну (йәғни Һун) ҡәүеменең туранан-тура нәҫеле, тип раҫлана[16]. Был ҡәүем исеменең төрксә асылы Төлес йәки Төләс булып яңғырай һәм Орхон яҙмаларында иҫкә алына. Тимәк, башҡорттар, Гөктөрктәр заманында Төләс составына ингән төрки ҡәбилә булып, һундар нәҫеленән иҫәпләнгән. Телестәр иһә Алтай – Иртыш тарафтарында йәшәгән ҡыпсаҡ ҡәүемдәренән тора. Ҡыпсаҡтарҙың да миләди йыл иҫәбенең беренсе быуаттарында көньяҡ Төркөстанда йәшәүен күрһәтеүсе дәлилдәр бар[17]. Һуңынан был ҡәүемдәр һундар дәүерендә Көнбайыш Европаға таралған. Птолемей заманындағы Пасиртай ҙа шул уҡ авторҙа күренгән Һун һәм Сувындар кеүек[18], һун донъяһы ҡарамағында булараҡ, миләди йыл иҫәбенең беренсе быуатында уҡ Урал тауҙарына килгән булһа кәрәк. Төрк башҡорттарҙың берләшеүенән алда Урал тарафтарында бәғзе Иран Сармат ҡәүемдәре йәшәүен географик атамаларға нигеҙләнеп белергә мөмкин[19]. Башҡорттарҙың ҡыпсаҡ төркөмөнә ҡараған бер ҡәбилә булыуы башҡа тарихи сығанаҡтарҙан да күренә. Ҡыпсаҡ һөм Ҡаңлы ҡәбиләләре бөгөнгө башҡорттарҙа ла иң ҡөҙрәтле ырыуҙар икәнлеген бер аҙ һуңыраҡ аңлатып үтербеҙ. Улар араһында Емек исемен йөрөткән фамилиялар ҙа бар[20].

Ҡытай профессоры Мау-Цай Волга буйында VIII быуатта боронғо һундарҙың нәҫелдәре сифатында иҫкә алынған ҡәүем һәм ҡәбиләләрҙе атап сыға: шуларҙан А-де (йәғни Иҙел) йылғаһы буйында Хо-тзе (йәғни хәзәрҙәр), Го-ти (йәғни ғуздар), Пи-тзен (йәғни печенегтар, бәжәнәктәр), Субе (сабирҙар), Йевей (йәғни ибирҙар), Бо-хон (бәлки, болғарҙарҙыр), Бей-дид (ихтимал, башҡорттар), Ен-гу (ихтимал, уғыр ҡәүемдәре), Алан һәм Хун (йәғни һун) ҡәбиләләре һанап кителә[21]. Боронғо башҡорт риүәйәттәре был халыҡтың тәү ата-бабаларының башта Бохара тарафтарында йәшәүен һәм ҡәүем исемдәре лә "Кенже" тип аталыуын сағылдыра, тип иҫкә алғайныҡ инде[22]. Был риүәйәттәрҙе лә иғтибарһыҙ ҡалдырып булмаҫ, сөнки Арал күле тирәһендә Кенже һәм Кенжак исемле ҡәбиләләр йәшәгән[23]. Башҡорттар араһында ла "Кенжек" тигәнгә тартым фамилиялар осрай[24]. Риүәйәттәр башҡорттарҙың Урта Азиянан һәм Арал күле тирәһенән килеүҙәрен күрһәтеп тора. Мәхмүт Ҡашғари Сындыки Талас тирәһендәге "Кенжез Синизи" исемле ер хаҡында һүҙ йөрөтә. Кенжактар Халач һәм Ҡарлуҡтар менән берлектә эфталиттар менән берләшкән. Кенжактар Ҡаңлы һәм Гурҙар менән бергә ҡәрҙәш ҡәүемдәрҙе тәшкил иткән.

## §2 Ислам сығанаҡтарында башҡорттар

Ғәрәптәр башҡорттарҙы хәҙерге өлкәләрендә йәшәүселәр тип белә. Тик тарихсы Масуди ғына бәжәнәктәр һәм тағы өс ҡәбилә менән берлектә Бажгурд исемле бер ҡәбиләнең, Арал күле янында Уғыҙ, Ҡарлуҡ һәм Кимәктәр менән һуғышып еңелгәндән һуң, Төньяҡ Кавказға, Хәзәр өлкәһенә, сигенеүҙәре хаҡында иҫкә ала[25]. Был ваҡиғаның 840 йылдарҙа булыуы билдәле. Мосолман милләттәр ошо ҡәүемде Башжирт[26] һәм Башгурд[27] исемдәре аҫтында таный. Мосолман тарихсылары тарафынан "һифчаҡтарға күрше"[28] булған мадьярҙар[29] тип иҫкә алынған мәғлүмәт башҡорттарға ҡарай. Шулай уҡ "Аз-һифчаҡтарҙың күршеһе" булған Ясу-Ягсун[30] кимәктәренең Иҙел менән Иртыш араһында ултырған бер өлөшө тип аталған, һәм Ибраһим әл-Истаһри "кимәктәрҙең ҡибла тарафында йәшәгән мадьяр[31] ҡәбиләһе" тип иҫкә алған мәғлүмәттәр ҙә башҡорттарға ҡарай булһа кәрәк. Истаһри башҡорттарҙы "уғыҙҙарҙың аръяғында", йәғни Арал – Хәзәр диңгеҙҙәре аралығын билгән

уғыҙҙарҙың төньяҡ тарафында, уларға күрше йәшәүсе, бер кем менән дә яҡынлашмаҫтан, үҙҙәренең уңдырышлы ерҙәрендә болғарҙарға буйһоноп көн итеүсе, ә һандары (йәғни ғәскәр иҫәбе) 2000 ирҙән артмаҫ бер ҡәүем сифатында тасуирлай[32]. Әл-Бируни ҙа башҡорттар йәшәгән өлкәне "Башҡорт тауҙары" (Жидал-и башхырт) тип атай һәм был ҡәүемдең, Ибн Фадланда әйтелгән кеүек үк, Яйыҡ бәжәнәктәренә күрше булып, Иҙел болғарҙарының һәм суварҙарының көнсығышында йәшәүе хаҡында иҫкә ала[33]. Был тауҙарҙың исеме булған "Урал" һүҙе беренсе тапҡыр Әбүлғази хандың XIII быуатта Сыңғыҙ нәҫеле Шейбан улдары улустарының сиктәрен билдәләп яҙған тарихында һәм нуғай дастандарында[34] телгә алына. Гардизи башҡорттарҙы, хәзәрҙәргә буйһоноп, хәзәрҙәр менән кимәктәр араһындағы таулы ерҙә (йәғни көньяҡ Урал тауҙарында) йәшәгән 2000-гә тиклем атлы ғәскәр тотҡан, ҡырғыҙҙар менән (йәғни Йәнәсәй ҡырғыҙҙары менән) дуҫ булған ҡәбилә сифатында тасуирлай[35]. Ләкин был мәғлүмәт ҡырғыҙҙарҙың Йәнәсәй буйында түгел, унан көнбайыштараҡ Алтай тауҙарында һәм Көнбайыш Себерҙә Урал тауҙарына күрше өлкәлә йәшәгән дәүерҙәренә ҡараған боронғо Иран риүәйәтенән алынған булһа кәрәк[36]. Хәзәрҙәргә буйһонған 2000 ғәскәрле башҡорттар һәм, Истаһри иҫкә алыуынса, шундай уҡ ғәскәр менән болғарҙар ҡул аҫтында йәшәгән башҡорттар ҙа был халыҡтың Иҙел буйына яҡын, йәғни Урал тауҙары менән Иҙел йылғаһы араһын биләгән өлөшөн тәшкил иткән булһа кәрәк. Бынан аңлашылыуынса, ислам дәүерендә мосолман авторҙар тарафынан башҡорттар хаҡында бирелгән мәғлүмәткә уларҙың исламиәттән әүәлге замандағы тормошона ҡарған риүәйәттәр ҙә ҡушылып киткән, һәм уларҙы бер-береһенән айырыу мөмкин түгел.

## § 3 Ибн Фадлан күргән башҡорттар

Яҡут Хамауи хеҙмәтендә ентекле ҡулланылған Ибн Фадлан юлъяҙмаларының ҡулъяҙма нөсхәһе Мәшхәдтә табылғандан һуң, башҡорттар тураһында Ибн Фадландың үҙ әҫәрендә булған мәғлүмәт Хамауи килтергәнгә сағыштырғанда байтаҡ тулыраҡ булыуы асыҡланды[37]. Ибн Фадлан кәтиб булып хеҙмәт иткән ғәрәп илселеге һәм уларға ҡушылған сауҙа каруаны Хорезмда алынған ғәскәрҙәр һағында 922 йылдың яҙында Үстйорттоң Чимы аша хәҙерге Урал виләйәтендәге Уғыҙ хәрби башлыҡтарының урҙаһына килгән. Унда бер ни тиклем ваҡыт булғандан һуң, юлдарын дауам итеп, Ягынды (хәҙерге Явинди) йылғаһына еткәс, каруанды аръяҡҡа турһыҡтар өҫтөндә абайлап ҡына сығарып алдынан, башҡорттарҙың һөжүменә эләкмәҫ өсөн, һағауылдарҙың бер өлөшөн йылға аша алдан сығарып, һаҡлыҡ саралары күрергә мәжбүр булалар. Һуңыраҡ илселек Чим (Эмба, бөгөнгө төрөксәһе Жим) һәм Жайыҡ (Яйыҡ) йылғалары араһындағы бәжәнәктәрҙең үҙәгенә килгән. Артабан Кинел, Соһ (Соҡ) һәм Кижлеү йылғаларын кисеп, башҡорт йәйләүҙәренә еткән. Тимәк, Урал тауҙарында йәшәгән башҡорттар көньяҡта Моғажар тауҙарында уғыҙҙарға, Яйыҡта бәжәнәктәргә һәм көнбайышта Соһ һәм Черимшанда болғарҙарға күрше булған. Илселек Соһ менән Черимшан араһында, йәғни хәҙерге Һамар виләйәтендә йәшәгән башҡорттар янында туҡталған, һәм Ибн Фадлан да шунда был ҡәүемдең ғөрөф-ғәҙәттәре хаҡында мәшһүр яҙыуҙарын яҙған. Уның әйтеүенсә, ул замандағы башҡорттар ысын шамансы булған. Автор күргән йолалар әле булһа шамансы булып ҡалған башҡа төрктәрҙең ғөрөф-ғәҙәттәрендә беҙҙең заманға тиклем шул уҡ хәлдә һаҡланған. Иң боронғо шамансылар кеүек (быны башлыса алтайҙар араһында борон да, бөгөн дә осратырға мөмкин), Ибн Фадланға замандаш башҡорттар ҙа үлгән кешенең әруахын кәүҙәләндереүсе кейеҙ йәки ағас һын яһап, уны "төс" тип атағандар. Быны Ибн Фадлан башҡорттарҙың әруах күсеүенә ышаныуы менән аңлата[38].

Шулай уҡ сәйәхәтсе башҡорттарҙың тотемдары булған хайуан һәм ҡоштарҙы атап сыға, улар башҡорт шәжәрәләренән дә мәғлүм. Ибн Фадлан ун ике тотемды билдәләй, был башҡорттарҙың ун ике ырыу тармағына тап килә. Бөрйән ҡәбиләһенең тотемы булараҡ шәжәрәләрҙән мәғлүм булған торна ла Ибн Фадлан тарафынан тотем

сифатында иҫкә алына[39]. Уның әйтеүенсә, башҡорттар "төрк ҡәбиләләре араһында иң яуыз, иң көслө, инсан үлтереүҙе һис бер нәмәгә ҡуймау яғынан иң алда йөрөүсе" булғанлыҡтан, илселек уларҙан нық ҡурҡҡан. Ибн Фадлан уларҙың һаҡал ҡырыуын телгә ала. Шулай уҡ, башҡа күсмә халыҡтар кеүек, башҡорттарҙың да күлдәк һәм тун йөйөндәге бетте теш менән сәйнәп үлтереүен бет ашау ғәҙәте тип аңлатҡан. Башҡорттар шамансы булған хәлдә лә, араларынан береһе, ислам динен ҡабул итеп, илселеккә хеҙмәт иткән.

Истаһри ҙа болғарҙарҙан "эске башҡорттарға" ҡәҙәр 25 көнлөк юл барлығын һөйләй, ләкин "тышҡы башҡорттар" хаҡында һүҙ йөрөтмәй. Болғарҙан 25 көнлөк юл көньяҡ Урал тауҙарындағы бер үҙәк нөктәне күрһәтә булһа кәрәк. Истаһри болғарҙарға буйһонған тип иҫәпләгән башҡорттар, ихтимал, Ибн Фадлан Соһ буйында күргән көнбайыш башҡорттарҙыр. Әбү Хәмит Әл-Андалузи 1135 йылда (һижри буйынса 530 йыл) Иҙел болғарҙарына сәйәхәт иткән саҡта башҡорттарға ла барғанлығын иҫкә ала[40]. Был сәйәхәтсе унда оҙон итеп ҡаҙылған ҡәберҙәр күреүен һәм ул заманда уҡ мосолман булған башҡорттарҙан Анатолияға барып килгән Дауыт ибн Ғәли исемле береһенең Конъя тарафында оҙон ҡәбер ҡаҙылыуы хаҡында һөйләүен иҫкә ала.

## §4 Иҙриси хеҙмәтендә башҡорттар

Географ Шәриф Иҙриси (үлеме 1162 йыл) әҫәренең V, VI, VII климат һыҙаттарын тасуирлап яҙған бүлегенең 7-се өлөшөндә башҡорттар хаҡында әле булһа бер кем тарафынан лайыҡлы өйрәнелмәгән тулы мәғлүмәт бирә. Әҫәрҙең V. 7 өлөшөндә ул Иҙел йылғаһының көнсығыш тармағы (йәғни Ағиҙел), "Башҡорт өлкәһенән ағып сыҡҡандан һуң, бәжәнәктәр менән болғарҙар араһынан үтеүен"; V. 8 өлөшөндә лә "Эске башҡорттар" (әл-башжирт әл-даһила) менән уғыҙҙар өлкәһен бейек һәм урманлы Маргар тауы айырыуын билдәләй. Бартольд был тауҙы Могажар тауы тип иҫәпләй[41]. VI. 7 өлөшөндә Иҙриси "Тышҡы башҡорт" (әл-башжирт әл-харижа) өлкәһен тасуирлай. Уның фекеренсә, башҡорт өлкәһе халыҡ аҙ йәшәгән даланан һәм сүллектән ғибәрәт. Ауылдары һәм халҡы бик самалы, юлдары бик насар. Эске Башҡортостанда таулы ерҙән сыҡҡан Суҡан (бәлки, Яйыҡ)[42] йылғаһынан 8 көнлөк юл алыҫлығында көнсығышта (тимәк, Яйыҡ йылғаһы баштарында) кескәй Немжан ҡалаһы бар, уның менән яҡшы хөкөмдар тип танылған бер династия нәҫелдән-нәҫелгә идара итә. Был ҡаланан 8 көнлөк юл алыҫлығында көнсығышта Аржыҡа (һәр хәлдә Ирәндек) тауы бар. Унда баҡыр мәғдәне сығарыу усаҡтары янында 1000-дән ашыу инсан мәшғүл. Был ятҡылыҡтарҙан сығарылған баҡыр Хорезм һәм Шаш (Ташкент) өлкәләренә оҙатыла. Бындағы төлкө һәм ҡондоҙ тиреләре Хәзәр диңгеҙе яғына һәм Дейлем тарафтарына алып барыла, тауҙарында һәм йылғаларында бик күп ҡиммәтле таштар табыла. Немжан ҡалаһында кәмәләргә ултырып (Яйыҡ Суҡан йылғаһы буйлап) Хәзәр диңгеҙе ярына килгәндән һуң, диңгеҙ яры буйлап Иҙел ҡалаһына (Хәзәрҙең пайтәхетенә) килеп була. Немжан ҡалаһынан 8 көнлөк юл алыҫлығындағы Гурхан исемле ҙур һәм төҙөк ҡалаға килергә мөмкин, ул иһә Табаристан (Хәзәр) диңгеҙенә ҡойған Иҙел йылғаһының төньяғында урынлашҡан. Был йылға буйлап сауҙа кәмәләре йөҙә. Матурлығы һәм төҙөклөгө менән айырылып торған шул ҡалала башҡа төрк өлкәләрендә ише күренмәгән сәнғәт өлгөләре, башлыса эйәр һәм ҡоралдар эшләнә. Бында Асҡунья батша хакимлыҡ итә. Шул уҡ Иҙел йылғаһы буйында 8 көнлөк юл алыҫлығында Ҡораҡыя (ихтимал, Ҡараҡая) йылғаһы булыр, ул шул уҡ Иҙел буйындағы Болғарҙан 16 көнлөк юл алыҫлығында юғарыраҡ. Ҡаланың йорттары ағас биналарҙан һәм тирмә өйҙәрҙән (харгаһат) ғибәрәт. Болғар халҡы Ҡараҡыя халҡына ҡаршы изге һуғыш алып бара. Эске башҡорт иле иһә был Ҡараҡыянан 10 көнлөк юл алыҫлығында төньяҡта урынлашҡан. Эске башҡорт иленең уртаһына тиклем 11 көн алыҫлығындағы юл. Башҡорттар ныҡ ихтыярлы һәм батыр инсандар, өҫ-баштары болғарҙарҙыҡы кеүек, оҙон ҡартуҡ кейәләр. Әҫәренең VII. 7-се бүлегендә Иҙриси "Башҡорт өлкәһенең

бер өлөшө" сифатында Маистра һәм Кастра ҡалалары хаҡында һүҙ йөрөтә, улар Иҙелгә ҡойған бер йылға буйында урынлашҡан булһа кәрәк. Иҙриси был тәңгәлдә, Истаһриҙың Урал башҡорттары менән Дунайҙағы мадьярҙарҙы "башҡорттарҙың ике төркөмө" тип күрһәткән һүҙҙәрен үҙгәртеп, Урал тауҙарында ике "башҡорт ырыуы" йәшәй, тигән мәғәнәлә аңлатып иҫкә алған. Әүлиә Челебиҙең һуңыраҡ иҫкә алынасаҡ бер хеҙмәтенән күренеүенсә, "Эске башҡорт иле" хатта XVII быуатта ла буласаҡ, ләкин Истаһри "эске башҡорттарҙың" ҡапма-ҡаршыһы сифатында "тышҡы башҡорттар" тип X быуатта Дунай мадьярҙарын күҙ уңында тота булһа кәрәк[43]. Был тәңгәлдә Иҙриси "Тыш башҡорт" тип Мадьярстандағы, йәки Иҙел йылғаһының юғары ағымында йәшәүсе "Ока мадьярҙары" тип атарға кәрәк булған мадьярҙар[44] өлкәһендәге, ҡала һәм ҡасабаларҙы (мәҫәлән, Кастра)[45] Урал тауҙарындағы башҡорт иленә күсереп иҫкә алған булһа кәрәк. XIII быуатта Франция короле тарафынан Монголияға ебәрелгән Рубрук, ғәрәп авторҙары Ибн Фадлан менән Истаһри кеүек, башҡорттарҙа ҡала һәм ҡасабалар булыуын иҫкә алмай. Рубрук уларҙы күсмә ҡәүем сифатында тасуир итә. Ибн Фадлан кеүек үк, Рубрук та дала башҡорттары өлкәһе аша үтә. Башҡорт өлкәһендә Иҙриси тарафынан иҫкә алынған ҡала һәм ҡасабаларҙың мәғдән сығарырлыҡ урындары булған таулы өлкәләрҙә генә барлыҡҡа килгәнлеге күренеп тора. Был төбәктә шуның ише һөнәр һәм баҙар урындарының теләһә ҡайһы ваҡыт барлыҡҡа килеүе ихтимал. Рустар тарафынан XVII һәм XVIII быуаттарҙа төҙөлгән фабрикалар, риүәйәттәрҙән күренеүенсә, бында электән үк булған, аҙаҡ ташландыҡ хәлгә килгән мәғдән эшкәртеү урындарында яңынан ҡоролған. Иҙриси төньяҡ тарафы хаҡындағы мәғлүмәттәрҙе Иртыш буйында йәшәгән кимәктәр хаҡанының улы Жанаҡ исемле берәһенән алған. Шулай ҙа Иҙриси тарафынан бик тулы бирелгән был мәғлүмәттәр ҙур һаҡлыҡ менән ҡабул ителергә тейеш. Птолемей әҫәрендәге мәғлүмәттәргә үҙ заманындағы исемдәрҙе һаҡһыҙ йәбештереү ғәҙәте булған был авторҙың[46] Урал һәм Себер тарафтары хаҡында мәғлүмәт биреүсе Жанаҡ ибн Хаҡандың риүәйәттәрен дә Птолемейҙағы исемдәргә йәбештереүе мөмкин. Уның "билдәле сығанаҡтары" ла — һис шөбһәһеҙ уйҙырма. Шулай ҙа Иҙриси көньяҡ Уралдағы һәм Яйыҡ баштарындағы Немжандың, көнсығыш Уралдағы Аҡ Иҙел буйында тип күрһәтелгән Гурхан һәм Ҡараҡыя ҡалаларының, Аржыҡа тауының тасуирланышын, Урал тауҙарынан Хорезмға, Шашҡа, Хәзәр буйҙарына һәм Дейлемгә тауар, мәғдән сығарыу, эйәрҙәр һәм ҡорал эшләү хаҡындағы мәғлүмәттәрҙе Жанаҡтанмы йә иһә беҙгә мәғлүм булмаған башҡа бер сығанаҡтанмы алған булһа кәрәк. Һуңғыраҡҡы замандарға тиклем Хорезмға алып киленгән бәғзе башҡорт өлкәһе аҙыҡтары һәм тауарҙары әле Бируниҙа уҡ "Төрк өлкәһенән килтерелгән мал" сифатында иҫкә алына. Шуларҙан Урал тауҙарынан Хорезмға ҡыш көндәрендә унда яратып ашалған "ҡаҡ", йәғни балан емешенән әҙерләнгән пастила[47] һәм саған ағасынан[48] биҙәп, нағышлап эшләнгән табаҡ-көрөшкәләр[49] килеүе хаҡындағы мәғлүмәттәр бик мөһим.

## §5 Башҡорттарҙың килеп сығышы

Бөйөк монгол дәүләте ҡоролғандан һуң, Европанан Монголстан ҡағанына илсе сифатында килгән Папа илсеһе Плано Карпини (1243), Уралдың көньяғынан үтеп, башҡорттарҙы басжарт исеме менән, ә Франция илсеһе Рубрук (Рубрукуис, 1253) баскатур исеме менән иҫкә алғандар. Һәр ике юламан башҡорт өлкәһен, уларҙың үҙҙәренән алда Иҙел буйына сәйәхәт иткән мадьяр доминикан монахтары һөйләүенә эйәреп, "Бөйөк Хунгария" ("Magna Hungaria") менән берләштергән. Был иһә Урал башҡорттарының сығышы хаҡында яңылыш фекер барлыҡҡа килеүенә сәбәп була. Монах Юлиан, "Бөйөк Булғария" ("Magna Bulgaria") янындағы мадьярҙар күсеп киткәс, көнсығышта ҡалған мадьярҙар өлкәһенә сәйәхәт итеүен, уларҙың мадьярса һөйләшеүен билдәләй һәм был өлкәне "Бөйөк Венгрия" тип атай[50]. Монахтың был аңлатмаһына ҡарап, Уралдағы башҡорттарҙың XIII быуатҡа тиклем телдәрен онотмаған мадьяр булыуҙары, аҙаҡ төркләшеүҙәре XIII быуаттан һуң булған ваҡиға,

тигән фекер тыуҙы[51]. Ләкин мадьяр ғалимы Гуйла Месарош Юлиан сәйәхәтнамәһенең ялған булыуы хаҡындағы фекерҙе әйтте[52]. Әммә был сәйәхәтнамәне хәҡиҡи тип иҫәпләгән тәҡдирҙә лә, теге монахтарҙың Иҙел булғарҙарынан Урал тауҙарына түгел, булғарҙарға шулай уҡ яҡын булған мадьярҙарҙың боронғо ватандарынан береһе Ока мадьяр өлкәһенә (русса Мещера) барып сығыуы бик ихтимал[53]. Һәр хәлдә, башҡорттарҙың миләди буйынса VII быуатта Тиелле-Төләс төркөмөнә ҡараған ҡәбилә булыуы һәм шул нигеҙҙә төрксә һөйләшеүе – иҫбат ителгән хәҡиҡәт.

Әбү-л Ғази хан яҙғанса, Сыңғыҙ улы Джучи хан тарафынан еңелеп, ҡыуып ебәрелгән ҡыпсаҡтар башҡорт ерҙәренә ҡасып киткәнлектән, иштәк, йәғни башҡорттарҙың күпселеге ҡыпсаҡтарҙан ғибәрәт була[54]. Был сығанаҡ беҙҙең өсөн башҡорт өлкәһендә ҡыпсаҡтарҙың күплеген раҫлауы менән мөһим. Ғәрәп авторҙарының башҡорттарҙы кимәктәргә яҡын төрк ҡәбиләһе, хатта кимәктәрҙең бер тармағы итеп күрһәтеүҙәре кеүек юғарыла иҫкә алынған сығанаҡтар ҙа ҡиммәтле. 1075 йылда яҙған әҫәрендә Мәхмүт Ҡашғари, башҡорттарҙың һөйләше төрксәнең йемек (йәғни кимәк-ҡыпсаҡ) һөйләше лә ингән тел төркөмөнә ҡарай, тип иҫәпләй[55]. Шәмсетдин Демашки (үлеме 1327 йыл) башҡорттарҙы, ҡыпсаҡ ырыуына инә, тип иҫәпләй[56]. Алда аңлатыуыбыҙға ярашлы рәүештә, бөгөнгө көндә башҡорттарҙың иң күп һанлы ҡәбиләһе – ҡыпсаҡтар һәм сығышы ҡаңлыларҙан булған үҫәргәндәр.

Мадьяр монахтарының урал башҡорттары тураһындағы мәғлүмәттәре нигеҙһеҙ булһа ла[57], башҡорттар менән мадьярҙарҙың Иҙелдең көнбайышында көн иткән заманда аралашып йәшәүҙәре, башҡорттарҙың мадьярға ҡушылыуы һөм, киреһенсә, башҡорттар араһына мадьярҙарҙың килеп инеүе бик мөмкин. X быуатта мадьярҙар өҫтөнән хакимлыҡ иткән төрк ҡәбиләләренән бишәүһенең исеме Византия сығанаҡтарында Коиртоюрматон тип аталған һәм был кәлимә Корт һәм Диюрматы тип уҡыла. Был һуңғы кәлимә башҡорт ҡәбиләһе Юрматы исеменә тап килә. Алтынсы ҡәбиләнең исеме лә Йенех тип уҡыла һәм башҡорт ҡәбиләһе Йәнәй исеменә тура килә[58] һәм мәсьәләгә тамам асыҡлыҡ индерә.

## §6 Мадьярстандағы башҡорттар

Мажгар һәм Башгар атамалары бер-береһенә оҡшағанлыҡтан, улар, X быуат ғәрәптәрендәге кеүек үк, монголдар дәүерендәге авторҙар тарафынан да буталды. Быға Дунай мадьярҙары араһында X быуатта ғына түгел, унан һуңыраҡ та бер төркөм башҡорттар йәшәүе сәбәп булды. Башҡорттар хатта исламиәтте ҡабул иткәндән һуң да, төрлө шарттар арҡаһында, Уралдағы ватандарынан айырылып, Мадьярстанға килеп ерләшә. Был хаҡта Әбү Хәмит әл-Андалузи мәғлүмәт бирә[59]. Уның ике әҫәре бар: береһе – "Туһфат әл-албаб" үткән быуаттан бирле мәғлүм, Дорн һәм Фраэн тарафынан тикшерелгән. Уны Габриэль Ферранд 1924 йылда Парижда нәшер итте[60]. "Әл-Му'риб ән ба'д-и агаиб-и'л -Магриб" исемле икенсеһе күптән түгел табылды, һәм уны доктор К. Дублер 1954 йылда Мадридта баҫып сығарҙы, ә 1955 йылда был әҫәр доктор Й.Хрбек тарафынан өйрәнелде[61]. Әҫәрҙең тағы бер нөсхәһе 1957 йылда Америкала Принстон университеты китапханаһында табылды. Бынын һында Мадьярстандағы башҡорттар хаҡында әүәлге нөсхәһендә булмаған ҡиммәтле мәғлүмәттәр бар. Ул Дунай башҡорттарына 1150–1155 йылдар араһында сәйәхәт иткән. Улар мосолман булған, хатта Әбү Хәмиттең Хәмит исемле улы был башҡорт бейҙәренең бер ҡыҙы менән өйләнгән. Уның әйтеүенә ҡарағанда был Дунай башҡорттары Мадъяр батшаһына буйһоноп, гүйә уларҙың һәр береһе Исфахан йәки Бағдад ҙурлығындағы һәм бай 78 ҡалалары бар имеш. Был арттырылған иҫәпкә мосолман башҡорттар менән бергә мосолман булмаған мадърҙар ҙа ингән булһа кәрәк. Әбү Хәмит Мадьярстан башҡорттары араһында байтаҡ йылдар йәшәй, ике улы башҡорт ҡыҙҙарына өйләнә, һәм уларҙан ейәндәре була. Ул 1158 йылда "Гур Керман" тип атаған Киевҡа, унан күрше Волгалағы "Саҡсын" ҡалаһына, унан Хорезм юлы менән Бағдадҡа һәм Һижазға килгән, хаж ҡылған, 1160 йылда Анатолиялағы Конья

аша ҡабат Мадьярстанға ғаиләһе янына әйләнеп ҡайтҡан. Конъя янында ул Даут ибн Али исемле бер башҡортто күреп һөйләшкән. Мадьярстандағы мосолман башҡорттар араһынан бәғзе заттарҙың ислам ғилемдәрен өйрәнеү өсөн Халеб ҡалаһы мәҙрәсәһенә килеүҙәрен Яҡут әл-Хамауи ҙа иҫкә ала. Әбү Хәмит төп мадьярҙарҙы ла башҡорт тип таныта һәм королен "башҡорт падишаһы" тип атай. Телдәре төрксә булған башҡорттарҙан исламиәтте ҡабул итмәгәндәре лә булған һәм улар тәре йөрөтөүселәр походтарында христиан мадьярҙар менән берлектә ҡатнашҡан. Мосолман башҡорттар иһә мадьярҙарҙың мосолмандарға ҡаршы яуҙарына ҡушылмаған, бары тик христиан дошмандар менән булған һуғыштарҙа ғына ҡатнашҡан. Мадьярстандағы мосолман күскенселәр араһында мосолман хорезмлылар ҙа булған. Бер-береһенә яҡын булған башҡорт һәм хорезмлылар хәнәфи мәҙһәбенә (йүнәлешенә) ҡараған. Киевтағы меңәрләп иҫәпләнгән бәжәнәк (Бечне) төрктәр араһында ла исламиәт таралған. Әммә улар мәғрибтәге остаздарынан өйрәнгән "мәғриби", йәғни "мәлики", мәҙһәбенә ҡараған. Мысыр авторҙары тәре йөрөтөүселәрҙең Франция короле Луи IX етәкселегендә Тунис һәм Аҡаяға (1269–70 йылдар) яһаған бөйөк походынан христиан башҡорттарҙың ғәйрәте һәм батырлығы тураһында һөйләйҙәр. Ошо хаҡта мәғлүмт биреүсе Ҡаратай Хазинадар христиан башҡорттарҙың барыһы ла төрксә һөйләшеүен, тәре йөрөтөүселәр араһында иң яуыз һәм уҫал булыуын, үҙҙәренең етди дәүләт тәшкиләте юҡлығын, бай сауҙагәр венециандар ҡаршыһында фәҡир, әммә аяуһыҙ һуғышсанлығы менән танылған милләт булыуҙары арҡаһында, ҡайһы падишаһҡа буйһонһалар, шул падишаһтың еңеү ҡаҙанғанлығын, изге ер өсөн үлемде донъяла йәшәүгә ҡарағанда хәйерле һәм сауаплы күреүҙәрен аңлата[62].

Луи IX походтарында мадьярҙарҙың ҡатнашлыҡ итеүе Европа мадьяр сығанаҡтарынан да билдәле[63]. Унда иҫкә алынған христиан башҡорттар, мадьярҙар хакимлығы аҫтында булыуға ҡарамаҫтан, төрксәне онотмаған. Башҡорт исеме ғөмүмән мадьяр мәғәнәһендә ҡулланылғанлыҡтан, Ҡаратай Хазинадар тарафынан һүҙ алып барылған башҡорттарҙың башҡорт булыуы ла, мадьяр булыуы ла мөмкин. Ибн Сәйет әл-Мәғриби (үлеме 1274 йыл) Дунай көнсығышындағы мадьярҙарҙы Һунгар исеме менән атай һәм уларҙы башлыса был йылғаның көньяғында ерләшкән мосолман башҡорттар менән ҡәрҙәш ҡәүем тип иҫәпләй. Һунғарҙар пайтәхетенең исемен Тртбуа йә иһә Трбтуа тип атай. Мосолман башҡорттарҙың баш ҡалаһы исеме иһә Карт тип яҙылған, Кран тип уҡырға кәрәктер. Ибн Сәйет билдәләүенсә, уларҙы бер төркмән фәҡихы (дин ғалимы) мосолманлыҡҡа йөгөндөргән[64]. Әбү Ғөбәйҙулла әл-Бәкри Мадьярстанда йәшәгән бәжәнәктәрҙең 12 меңенең һижри буйынса 400-сө, миләди буйынса 1009–1010 йылдарҙа әсир төшкән бер мосолман ғалимы тәьҫирендә мосолманлыҡ ҡабул итеүҙәре, әммә мәжүси бәжәнәктәрҙең күпселекте тәшкил итеүе, ә был мосолман бәжәнәктәрҙе әл-Хавалис тип атауҙары тураһында һөйләй[65]. Йәғни Мадьярстанда мосолман булғандар яңғыҙ башҡорттар ғына түгел, бәжәнәктәр араһында ла мосолмандар булған. Хавалис һүҙе Хорезм тигәнде аңлатҡанға күрә[66], бында төп хорезмлыларҙың да йәшәүе мөмкин[67].

## §7 Башҡорттарҙа исламиәттең таралыуы

Башҡорттарҙа исламиәтте бер төркмән фәҡихы таратыуы хаҡындағы мәғлүмәттең Дунайҙа түгел, Уралда булған хәлде күрһәтеүе ихтимал. Яҡут әл-Хамауи Мадьярстандағы мосолман башҡорттарҙан Халебҡа уҡырға килгән берәү менән һөйләшеүе хаҡында яҙа. Был башҡорттоң әйтеүенә ҡарағанда, Мадьярстандағы башҡорттарҙың барыһы ла хәнәфи мәҙһәбенә ҡарай, имеш. Уларҙы мосолманлыҡҡа бик борон заманда Болғар мәмләкәттәренән килгән ете кеше өйрәткән. Был риүәйәтте ул атай-олатайҙарынан ишеткән. Тимәк, улар исламиәтте Уралдағы Башҡортостанда булған саҡта уҡ ҡабул иткән. Берәүҙәре – Болғар мәмләкәттәренән килгән ете кеше, ә бүтән өлөшө төркмән фәҡихы тарафынан мосолманлыҡҡа йәлеп ителгән. Төркмән тип

Сырдарья буйында йәшәгән уғыҙҙар күҙ уңында тотола булһа кәрәк. Төркмән араһында исламиәт тараткан миссионерҙарҙың күбеһе, шул иҫәптән Йәсәүи шәйехтәре, шунан сыҡҡан. Яҡут әл-Хамауи күргән башҡорт Дунай башҡорттарының 30-ға тиклем ҡәрйә тәшкил итеп йәшәүен, уларҙың һәр береһе ҡала хәтле ҙур булыуын, тик Мадьяр падишаһтарының, башҡорттарҙың күтәрелешенән ҡурҡып, ҡәлғә төҙөргә рөхсәт бирмәүен һөйләгән. Телдәре лә инде төрксә түгел, европаса (йәғни мадьярса) булып бөткән, ҡиәфәттәре лә европаса, имеш, һәм улар, ғәскәр сифатында мадьяр короле хеҙмәтендә булып, мадьярҙар менән берлектә мосолман булмаған ҡәүемдәргә ҡаршы һуғыштарҙа ҡатнашҡан; һаҡалдарын ҡыралар, имеш, бәғзеләре, ислам ғилемдәрен өйрәнеп фәҡих булыу өсөн, Халебҡа килә икән68. Зәкәриә Казвини ҙа (үлеме 1283 йыл) бер башҡорт фәҡихын күргән. Ул да башҡорттарҙы күпселеге христиан, әммә араларында хәнәфи мәҙһәбендәге мосолмандар ҙа булған ҙур бер милләт сифатында һүрәтләй һәм уларҙың христиандарға ҡаршы һуғыштарҙа ғына ҡатнашыуын билдәләй. Башҡорт исеме менән мадьярҙарҙы һәм ундағы мосолман башҡорт, бәжәнәктәрҙе атай һәм башҡорттарҙы сатырҙарҙа (йәғни тирмә өйҙәрҙә) йәшәгән, ҡалалары булмаған бер милләт сифатында тасуирлай. Был осраҡта һүҙ Урал башҡорттары хаҡында бара булһа кәрәк. Сөнки Зәкәриә Казвини заманында Мадьярстандағы мадьяр һәм башҡорттар сатырҙарҙа түгел, ауыл, ҡалаларҙа ғүмер итә. Ләкин был авторҙың сатырҙарҙа йәшәгән башҡорттар хаҡындағы мәғлүмәте Уралдағы башҡорттарға ла, Дунай башҡорттарына ла ҡарарға мөмкин: "Башҡорт халҡы тирмә өйҙәрҙә (һерғаһ) йәшәй. Ҡалалары юҡ. Аймаҡтарҙың шәфҡәтле етәкселәренең иҡталары (ер биләү танытмалары) бар. Күп ваҡыт араларында иҡталар арҡаһында бәрелеш барлыҡҡа килә. Башҡорттарҙың падишаһы был низағтарҙы туҡтатыу уйы менән, иҡталарҙы тартып алып, уларға (ғәскәр хеҙмәте өсөн) хазинанан түләү тәғәйенләгән. Татарҙар килгәндә, башҡорт падишаһы уларға ҡаршы торорға әҙерләнгән. Башҡорттарҙың хәрби етәкселәре "беҙгә иҡталарыбыҙҙы кире бирмәһәң, һуғышмайбыҙ" тигәндәр. Падишаһ иһә: "Мин хәҙер уларҙы һеҙгә бирмәйем, һуңынан үҙегеҙгә һәм балаларығыҙға тапшырырмын", — тигән. Бынан аҙаҡ башҡорттар таралышҡан һәм татар ҡылысы ла уларҙы бер ни ниндәй ҡаршылыҡһыҙ ҡырған[69]. Бату хан идараһындағы монголдар Мадьярстанға ингән ваҡытта Мадьяр короле Бела IV-кә буйһонған мадьяр хәрби етәкселәре араһында ла шундай уҡ низағтар була[70]. Иҡталарын алып, урынына хаҡ түләү мәсьәләһе, татарҙарҙың Мадьярстанға һөжүме ваҡытында сатырҙарҙа йәшәгән башҡорттарҙың иҡталары хаҡындағы мәғлүмәт Урал башҡорттарына ҡарай булһа кәрәк, сөнки мадьярҙар һәм улар араһында мадьярлашҡан мосолман башҡорттар өсөн XIII быуатта сатырҙа йәшәү мөмкин булмаҫ ине. Мадьяр сығанағында ла бындай мәғлүмәт һаҡланмауы хаҡында әйтелә.

## §8 Монгол дәүерендә башҡорттар

Монгол яуҙары дәүеренә ҡараған ислам сығанаҡтарында, мадьярҙар ҙа башҡорт исеме аҫтында иҫкә алынып, буталыш барлыҡҡа килгән[71]. Урал башҡорттары монгол хөкөмдарҙарына бик иртә итәғәт иткәндәр. Монголдарҙың "Йәшерен тарих"ына ҡарағанда, Урал башҡорттары Сыңғыҙҙың беренсе баҫып алыу хәрәкәтендә үк, 1207 йылда, Джучи ханға буйһонғандар, һәм был хәл "Телес" исемле бер ҡәүемдең, йәғни алтайҙарға күрше йәшәгән ҡәүемдең, итәғәте рәүешле телгә алына[72]. Шуға күрә башҡорттарҙың монгол хандарына ҡаршы һуғыш алып барыуы хаҡында һүҙ юҡ, уларға үҙ ихтыярҙары менән буйһонғандар, тип уйларға нигеҙ бар. Бату хан заманында һуғыша-һуғыша буйһонған башҡорттар хаҡындағы мәғлүмәттәр[73] Дунай мадьярҙарына ҡарай, тип уйларға кәрәк[74]. Фәҡәт Рәшидитдин тарихында, был авторҙың Европалағы фекерҙәштәренең тырышлығы арҡаһында барлыҡҡа килтерелгән франктар тарихына бағышланған өлөшөндә генә, Мадьярстанда ла татарҙарға ҡаршы һуғышҡан ҡәүемдәр сифатында башҡорттар, мадьяр һәм сасан (йәғни саксондар) айырым-айырым ҡәүемдәр итеп иҫкә алынған һәм ул мәмләкәт Мадьярстан тип аталған[75]. Йәғни Мадьярстанда монголдарға, Бату ханға ҡаршы мадьярҙар менән берлектә Дунайҙағы

мосолман башҡорттар ҙа һуғышҡан. XIII быуаттың һуңғы яртыһында мадьяр королдәре, Дунай башҡорттарының диндәрен ҡыҫыу сәйәсәте үткәреп, даими эҙерлекләүҙәр һөҙөмтәһендә улар христиан мадьярҙарға ҡушылып, тамам юғалғандар.

## §9 Монголдар хеҙмәтендәге һәм Мысырҙағы башҡорттар

Урал башҡорттары монголдар заманында, Алтын Урҙа хандарына ғәскәр сифатында хеҙмәт иткән саҡтарында, күптән мосолман булғандар. Ләкин араларында шаманиҙары ла осраған булһа кәрәк.

XV быуатта Шейбан улдарынан мәшһүр Әбелхәйер ханға буйһонған Жығыз һәм Жал баһадир исемле башҡорт әмирҙәре бөйөк бейҙәр иҫәбендә иҫкә алына[76].

Күренекле һәм мөхтәбәр башҡорт әмирҙәре Иранда илһаниҙар хеҙмәтендә лә була. Шуларҙың береһе башҡорт генералы Ғазан хан 1299 йылда Анатолияға Сүлемиш күтәрелешен баҫтырыу өсөн барған Ҡотлоғшаһ нойан һәм Чобан нойан янында өсөнсө бөйөк әмир сифатында иҫкә алына[77]. Шулай уҡ Олжайту хан заманынла Сыраҡан Башҡурт исемле бер күренекле башҡорт генералы телгә алына, уның хаҡында "улустан килгән" тип әйтелә[78]. Йәғни Джучи улусынан килгән тигән мәғәнәлә була. Башҡорттарҙың бер өлөшө ҡыпсаҡтар менән бергә Мысырҙа һәм Сирияла мәмлүктәр сифатында хеҙмәт иткәндәр, һәм араларынан күренекле дәүләт эшмәкәрҙәре сыҡҡан. Шуларҙан айырыуса Насретдин әл-Насыри әл-Башҡурди, Сәнжәр әб-Рукны әл-Башҡурди, Алаитдин Башҡурд әл-Насыри, Ғилметдин әл-Башҡурди Беркундарҙың бөйөк әмир булыуҙары, йәнә Сарын әл-дин әл-Башҡурди тарихи сығанаҡтарҙа күп иҫкә алына. Араларынан Насретдин әл-Насыри ғәрәпсә гүзәл шиғырҙар һөйләгән ғалим әмир булған. 1322 йылдың 3 мартында Дамаскта донъя ҡуйған[79]. Мәмлүктәрҙең бөйөк падишаһы Ҡыратай Хазинадар Ғилметдин әл-Башҡурдиҙы ғәйәт аҡыллы дәүләт кешеһе, ғалим һәм әхләҡи йәһәттән өлгө булырлыҡ шәхес тип баһалай[80]. Ғилметдин Сәнжәр әл-Башҡурди — уның замандашы[81]. Ғилметдин Башҡурд әл-Насыри — мысырҙарҙың илһаниҙарға ҡаршы һуғышы ваҡытында 1303 йылда вафат булған бөйөк әмир[82].

## §10 Башҡорт илендә хандар

Монголдар заманында Башкурт иле йә иһә Ибир-Сибир тип аталған Көнбайыш Себерҙең Сулман (Кама) йылғаһы буйында Джучи улдарынан Шейбандың вафаты хаҡында ҡиссалар булған. Был өлкәләрҙе Тура ере, ә хөкөмдарҙарын Тура хандары тип йөрөткәндәр[83]. Улар бында мәмләкәттәрен рустар килеп баҫып алғанға тиклем хакимлыҡ иткәндәр. Ләкин шул уҡ ваҡытта алтын Урҙаның бөйөк хандары, ҡыш айҙарын Сарай һәм Сарайсыҡ ҡалаларында йәшәп, йәй айҙарын күбеһенсә Урал тауҙарында уҙғарғандар. Мысыр авторы Ибн Фадлаллаһ әл-Ғүмәри (үлеме 1348 йыл) әйтеүенә ҡарағанда, "ҡышын Сарайҙа, йәй айҙарын, Туран (йәғни Тура) хандары кеүек, Арҡтач йәки Ураҡ-Үректә үткәрәләр"[84]. Үтәмеш Хажи әйтеүенсә, Тура тигәне Көнбайыш Себер һәм Башҡортостанда ултыраҡ хәлгә күскән манғыттарҙың ауыл һәм ҡасабалары тигән һүҙ[85]. Тура хандарының Көнбайыш Себерҙә ҡалалары булһа ла, төп үҙәктәре Башҡортостанда, Өфө тирәһендә, айырыуса хәҙерге Шишмә станцияһы һәм Тирмә ауылы янындағы "Хан урҙаһы"нда, йәки "Тура хан төрбәһе", Стәрлетамаҡ янындағы "Торатау" һәм Хажи Мәсете янындағы "Хан түбәһе" иҫәпләнгән[86]. Ибн Фадлаллаһ әл-Ғүмәриҙең "Себер ҡалалары башҡортҡа буйһона" тип яҙыуы ла иғтибарға лайыҡлы[87]. Шул уҡ авторҙың раҫлауынса, Себер һәм Сулман өлкәһе бик һыуыҡ, алты ай ҡар аҫтында була, был саҡта уларҙың тауҙарын, йорттарын, ҡалаларын ҡар ҡаплай. Ибн Фадлаллаһта бирелгән мәғлүмәт буйынса, Хорезмға яҡын Манғышлыҡ ярым утрауында йәшәгән төрктәр ҙә Буржан нәҫеленә ҡараған бер нисә

ҡәбиләнән ғибәрәт икән[88]. Әгәр ҙә был Буржан һүҙе яңылыш яҙылмайынса, көньяҡ башҡорттарҙың иң ҙур ҡәбиләһе булған Бөрйәндәр тигәнде аңлатһа, башҡорттарҙың бер өлөшө – Пермь тарафында, ә башҡа бер мөһим өлөшөнөң бик алыҫ көньяҡта, Манғышлаҡта йәшәүен раҫлай. Бөрйән башҡорттары беҙ унда йәшәгән заманда ла боронғо Хорезм культураһына иң тоғро ҡалған бер ҡәбилә ине. Туйҙа Хорезм ысулында эшләнгән аҡһыл һары тиренән тегелгән тун һәҙиә ителә ине; ирҙәр һаҡалдарын эйәк аҫтында ғына ҡалдырып, эйәк өҫтөн ҡырып, хәс тә Хорезм халҡындағы һәм Арал Хәзәр араһындағы уғыҙҙар ҡиәфәтендә йөрөй торғайны[89].

§11 Тура Шейбан хандары

Башҡорт ырыуҙары менән идара иткән Шейбан улдарына Көнбайыш Себер һәм Сулман буйынан тыш булғарҙар менән Алатыр тарафтары ла буйһонор була. Шейбан улы Джучи Буканан һуң Бадаҡул, унан һуң Миң Тимер (йәки Мәлик Тимер) хандарҙың шәжәрәләрендә барыһы ла Шейбан улының инсеһе* менән идара итеүселәр сифатында иҫкә алына. Миң Тимерҙән һуң Алтын Урҙа тарихында фитрәт** дәүере башланғанлыҡтан, айырым шаһзадәләр инсеһендәге илдәр үҙ аллы ханлыҡҡа әүерелә башлай. Миң Тимерҙең Булат исемле улынан тыуған Ғәрәпшаһ солтан нәҫеле һуңынан Хиуала, Ибраһим Оғул исемле улы нәҫеленән Әбелхәйер хан һәм уның ейәндәре Мәүреннаһрҙа идара итеп, үзбәк хандары династияһын барлыҡҡа килтергәндәр. Миң Тимерҙең Илбәк исемле улы, Илбәктең Ҡанбай исемле улы башҡорт тарафында ханлыҡ иткән, ә Илбәктең Әли бай атлы улы Булғар һәм Ҡазан яғында ханлыҡ иткән. Ҡанбай Туҡтамыш хандың замандашы булып, хакимдарлыҡ иткән сағында

---

*Инсе – кемгәлер тәғәйенләнгән милек, мал, байлыҡ.("Был атты һиңә инселәйем, балам".–Ә.Ю.)

**Фитрәт – батшалар алмашынған бола дәүер.

Башҡортостандың Күгәҙе буйын үҙенең мәркәзенә әүерелдереүе мәғлүм. Унан бәғзе тәңкә аҡсалар ҙа ҡалған. Ҡанбай улы Мәхмүдек Хужа, шул уҡ Миң Тимерҙең Бекконды исемле улының улы Ғәли һәм был Ғәлиҙең улы Хажи Мөхәммәт хан кеүек үк, Башҡорт һәм Тура виләйәттәрендә хан булған. Иҫкә алынған Хажи Мөхәммәт хандың улы Мәхмүдек хан барлыҡ Тура һәм башҡорт илдәренең ҡеүәтле ханы булараҡ танылған. Уның улдарынан 1499 йылда вафат булған Ибәк хан (Ибраһим) да, Тура ханлығы менән ҡәнәғәт булмайынса, дөйөм Алтын Урҙа эштәрендә ҡатнашҡан. Уның ҡәрҙәше Мамыҡтың иһә бер ваҡыт Ҡазан эштәрендә ҡыҫылышы була. Ибәктән һуң уның улы Мортаза хан XVI быуаттың беренсе яртыһында хаҡимдарлыҡ итә, ә улы Күсем хан 1563–1598 йылдарҙа Көнбайыш Себер һәм башҡорт иленең ханы була. Ләкин ул заманда башҡорт иленең Урал тирәһе көнбайышындағы өлөшөндә нуғай мырҙаларының идараһы көслөрәк була. 1577 йылда рус казагы Ермак Күсем ҡулындағы Себер ҡалаларын баҫып ала. Күсемдән һуң уның улдары Ғәли хан, Ишем солтан башҡорт иленең урта һәм көнсығыш өлөштәрендә рус хакимиәтенең өҫтөнлөк алыуына ҡаршы көрәшә. Ишем солтандың улдарынан Абылай солтан (үлеме 1635 йыл) һәм уның туғаны Абуға солтан (1659 йылда ла иҫән булыуы мәғлүм) үҙ хакимиәтен һаҡлау маҡсатында рустарға ҡаршы өҙлөкһөҙ һуғыш алып бара.

§12 Төмән бейҙәре һәм Нуғай мырҙалары

XIV быуаттың өсөнсө сирегенән башлап, Джучи улусының башҡа өлөштәрендәге кеүек үк, Тура һәм башҡорт өлкәһендә лә мәмләкәт менән идара итеү хандар ҡул аҫтындағы төмән бейҙәре ҡарамағына күсә башлай. Улар башҡорт ырыу бейҙәренән

тыш нәғеҙ (асыл) хандар менән бергә килгән монгол ырыуҙары һәм шул ырыуҙарҙан ойошторолған төмәндәрҙең бейҙәре араһынан ҡалҡып сыға. Иҫкә алынған Ҡанбай заманында дүрмән әширәте бик билдәле була[90]. Ҡанбай улы Мәхмүдек Хужа хан заманында ҡуңғрат һәм салжавут төмән бейҙәре мәшһүрлек ҡаҙана Үтәмеш Хажи Мәхмүдек хаҡында: "Ул ҡеүәтле һәм танылған хан булды. Тура иле әширәттәре менән ҡуңғрат һәм салжавут төмәндәренә ҡаршы һуғышты, уларҙы еңеп, мәмләкәтте үҙенә буйһондора алды", – тигән[91]. Шулай Күсем ханда салжавут төмәненең бейе Тайбуғаның улы Йәҙегәр мырҙа менән һуғышты. Ләкин иң ҡеүәтлеләре манғыт ырыуы төмәндәре ине. Манғыттарҙан Нуретдин бей (Нурадын), атаһы Манғыт Әбүғә бей (Туҡтамыш хандың нәҫеле) менән Илек йылғаһында булған ҙур һуғышта еңелгәндән һуң, "диван башлығы Ҡатай Ғәли бей" менән бергә Башҡортостанға килә, ошонда йәшәп вафат була[92]. Диван бейе, алда аңлатҡаныбыҙса, бөйөк вәзир тигән һүҙ. Нуретдиндың бөйөк диван бейе – Ҡатай ырыуы әширәтенән. Был ҡәбилә Башҡортостандың хәҙерге Тамъян-Ҡатай кантонында ла, Арғаяш кантонында ла мөһим әширәт иҫәбендә. Нуретдин бей башҡорттар араһында Мораҙым исеме менән билдәле, уның хаҡындағы тарихи шиғырҙар һәм уға бағышланған көйҙәр халыҡ араһында әле лә йәшәп килә[93]. Иҫкә алынған Шейбан хандарынан Хажи Мөхәммәт хан ибн Ғәли хаҡында Үтәмеш Хажи былай ти: "Ул бөтөн башҡорт, алатыр, муҡшы һәм шәһре Болғар тарафындағы, йәнә Тура ҡалаһы исеме аҫтындағы мәшһүр манғыт ҡәриәләрен баҫып алып, был виләйәттәрҙә оло падишаһ булған[94]. Ул заманда Тура һәм башҡорт илендә манғыттар (нуғайҙар) ауылдарҙа ерләшкән. Башҡорт дастанында иҫкә алынған, башлыса көнсығыш һәм урта Башҡортостанда Байыҡ, Мача, Иҫкин, Бүздәк һәм башҡа ерҙәрҙә татарса һөйләшкән, ә башҡорт улустарында (мәҫәлән, Бөрйән, Үҫәргән һәм Юрматыла) башҡортса һөйләшкән нуғай һәм төмән ауылдары ошо ултыраҡ манғыттар булһа кәрәк. Был ултыраҡ нуғай ырыуҙары нуғай-манғыт мырҙаларының таянысы булған. Нуғай бейҙәре һуңғы Шейбан хандары заманында киң хакимлыҡ итә. Иҫкә алынған Нуретдин мырҙаның ейәне Муса мырҙа һәм уның улдары Шихмамай, Исмәғил һәм Исмәғилдең улдары Урус менән Тиңәхмәт, Тиңәхмәттең улы Иштирәк мырҙалар Башҡортостанда һәм бөтә Яйыҡ буйында хөкөм һөргән нуғай мырҙалары булараҡ мәшһүр.

Муса бейҙең улы Мамай мырҙа атаһының йәйҙе Башҡортостан уртаһында Аҡ Иҙел буйында Йеремен (йәки Ирәмәл) тауҙары тирәһендә һәм Яйыҡ башы Ҡара урман тип аталған ерҙәрҙә үткәреүен, ҡышты иһә Яйыҡ тамағында (Хәҙәр буйында) Өйшөк һәм Биштамаҡ исемле ерҙәрҙә уҙғарыуын шиғыр менән аңлатҡан:

Эдил башы Эремен тау
Менин атам Мусанын
Эли ҡонған ери иди
Яйыҡ башы Ҡара орман
Менин атам Мусаның
Яз яйлаған ери иди
Ҡызыл Өйшөк, Бештамаҡ
Менин атам Мусаның
Ҡыш ҡышлаған ери иди[95].

Бында иҫкә алынған Эремен, йәки Ирәмәл – Урал тауҙарының бейек түбәһе, Аҡ Иҙел (русса Белая) йылғаһының башы. Ҡара урман йәйләүҙәре лә Яйыҡ башында. Өйшөк-бөгөнгө Гурьев ҡалаһы урыны. Биштамаҡ иһә – шул яҡта Яйыҡ буйындағы бер түбә[96]. Шихмамай (Шыҡмамай) мырҙа хаҡында Бөрйән башҡорттары араһында яҙыулы "шәжәрә" риүәйәттәре бар, ул хаҡта әле алда һүҙ булыр. Ҡышты Яйыҡтың ҡойған урынында, йәйҙе Яйыҡ һәм Аҡ Иҙелдең юғары тарафтарында йәшәү йолаһын тотҡан нуғай мырҙалары башҡорттарҙың "Дүртьюл башҡорттары" тип аталған үҙегендә хөкөмдарлыҡ иткән. Быларҙы алда аңлатырбыҙ, ил дүрт юлға: Нуғай, Себер, Ҡазан

һәм Уса юлдарына бүленә. XVII быуаттың башына ҡәҙәр нуғай мырҙаларынан исеме иҫкә алынған Муса мырҙаның улдары Сайдаҡ мырҙа (1540 йылға тиклем), Шихмамай (1540–48), Йософ мырҙа (1548–1555), Исмәғил мырҙа (1555–1563), һуңынан Исмәғилдең улы Тиңәхмәт мырҙа (1563–1580), Тиңәхмәттең улы Ормәмбәт мырҙа (1580–1601) билдәләләр. Был мырҙалар шул тиклем абруй ҡаҙана ки, Тура, Ҡазан, Әстрхан, Ҡаҙаҡ һәм Шейбан хандары уларҙың ҡыҙҙарына өйләнгәндәренә бик ғорурланыр була. Тура һәм Башҡорт иле ханы Күсем хан да Тиңәхмәттең кейәүе булыу бәхетенә ирешә. Ормәмбәт бей заманында Башҡортостандың көньяҡ-көнсығыш һәм көньяҡ өлөшөндә Исмәғил мырҙаның улы Урус мырҙа хакимдарлыҡ итә. Ханлыҡ үҙәге Уй һәм Тубыл йылғалары араһында була һәм ул Күсем ханға рустарға ҡаршы көрәштә ярҙам күрһәтә. Урус мырҙа заманында урта Башҡортостанда Табын ырыуында Бурнаҡ мырҙа, Өфөлә Аҡкилембәт мырҙа, Дим йылғаһы буйында йәшәгән мең аширәте араһында Ҡаракилембәт мырҙа хөкөм һөргән саҡта, был мырҙалар араһында низағтар булыуы һәм нуғайҙарҙың ҙур бер өлөшө, ыҙғыш-талаш һәм аслыҡ һөҙөмтәһендә боҙолошоп, Төньяҡ Кавказға, Кубань тарафтарына күсеп китеүе, улар киткәндән һуң, Ҡаракилембөткә буйһонған илдәрҙә – Бүкәй исемле бер солтандың, Аҡкилембәткә буйһонған илдәрҙә Ҡазанфәр исемле мырҙаның (кенәз) етәкселек итеүе башҡорт шәжәрәләрендә иҫкә алына[97]. Был иһә рус сығанаҡтарында ла дөрөҫләнә[98]. Иҫкә алынған Аҡкилембәт – Тиңәхмәт мырҙаның, Ҡаракилембәи Ормәмбәт мырҙаның улдары булыуы билдәле, быны Ҡырым сығанаҡтары ла раҫлай[99]. Бүкәй солтан иһә Шейбан улдарынан, йәғни Тура Шейбандарынан булһа кәрәк. Был дәүерҙә нуғай улусы ике ҙур һәләкәт кисергән һәм шуның һөҙөмтәһендә Иҙел көньяғындағы Оло Нуғай улусы тарҡалып, Кубань һәм Ҡырым тарафына күсенгән. Һәләкәттең береһе – 1558 йылда Иҙел буйындағы ҙур аслыҡ. Уның һөҙөмтәһендә Исмәғил мырҙа рус батшаһының ҡул аҫтына инә. Икенсеһе иһә – 1600 йылдағы аслыҡ, низағтар арҡаһында, өҫтәүенә, ул саҡта Оло Нуғайҙың һуңғы бөйөк бейе Ормәмбәт мырҙа ла вафат булғанлыҡтан, нуғай улусының башына килгән һәләкәттең тағы ла артыуы. "Он сан ногай бүлгенде. Ормәмбәт бәк өлгенде", йәғни "бер миллион нуғай һәләк булғанда һәм Ормәмбәт бей үлгән заманда" тип, был һәләкәт нуғай һәм башҡорттар өсөн мөһим бер тарихи ваҡиға сифатында иҫкә алына[100].

## §13 Рустарҙың тәүге баҫып инеүҙәре

1558 йылда Нуғай улусын баштан-аяҡ солғап алған һәләкәттән файҙаланып, Рәсәй нуғай һәм башҡорт улустарын ҡыҫа башланы[101]. 1584 йылда рус казактары, был эске ҡаршылыҡтарҙан файҙаланып, Яйыҡ йылғаһының түбәнге ағымына тиклем етеп, Яицк, йәғни Яйыҡ (хәҙерге Уральск, төрксәһе Теке) ҡалаһын бина иттеләр. 1586 йылда иһә Ҡанышлы Һамар йылғаһының Иҙелгә ҡушылған урынында Һамар ҡалаһын һәм, тағы ла алғараҡ китеп, Бөрө (руссаһы Бирск) ҡалаһын нигеҙләнеләр һәм Ҡариҙел менән Ағиҙел йылғаларының берләшкән ерендә электән барлыҡҡа килгән Өфө (русса Уфа) нығытмаһын баҫып алып, уны рус ҡалаһына (нығытмаһына) әүерелдерҙеләр. Иҫкә алынған 1586 йылға ҡәҙәр Һамар һәм Өфө тарафының барлыҡ башҡорттары менән остяктар, Урус мырҙаға буйһоноп, һалымды ла уға түләй ине. Рустар, ошо ҡалаларҙа ерләшеп, тирә-яҡ башҡорттарҙан түләм талап итте. Ошо арҡала Урус мырҙа: "Башҡорт һәм остяктар минең ҡарамағымда, һалымды миңә түләргә тейеш, рус ҡалаһы менән хакимлыҡ итеүселәрҙең үҙҙәренә буйһондорорға тырышыуына ҡаршы аяуһыҙ ҡаршы торасаҡмын", – тип рус хөкүмәтенә протест белдерҙе[102]. 1572 йылға ҡараған бер рус сығанағында ла Кама йылғаһы буйындағы сирмеш, остяк һәм башҡорттарҙың рус Строгановтарға итәғәт итеүҙәре билдәләнә, йәғни остяк исеме башҡорт исеме менән бергә иҫкә алына. Һуңғы ваҡытта фин ҡәүемдәренән береһенең атамаһы булған был Иштәк, Истәк һүҙе ҡайһы саҡта төньяҡ башҡорттарҙың, ҡайһы саҡта барлыҡ башҡорттарҙың исеме булып йөрөнө (ҡаҙаҡ-ҡырғыҙҙарҙа, Ҡырым төрктәрендә һәм, уларға эйәреп, Осман төрөктәрендә)[103]. Урус мырҙаның рус

батшаһына яҙған хатында был исем менән Өфө вилайәтендәге башҡорттарҙан тыш унда йәшәгән типтәрҙәр ҙә аталған булыуы ихтимал.

Исмәғил мырҙа заманында 1557 йылғы аслыҡтан һуң нуғай-манғыт улусы хәлһеҙләнеүҙән Джучи хан нәҫеле Туҡайтимер улдары булған ҡаҙаҡ хандары ла файҙаланды. Шулар иҫәбенән бөйөк ҡаҙаҡ-ҡырғыҙ ханы Хаҡназар 1570 йылда Башҡортостандың көньяҡ һәм көньяҡ-көнсығыш улустарын үҙ ҡул аҫтына алды[104]. Әммә Исмәғилдең улы Урус мырҙа Көнбайыш Себер һәм Башҡорт улусында Нуғай хакимиәтен тулыһынса урынлаштырҙы. 1586 йылда, рустар Ағиҙел буйлап Өфө тирәһенә тиклем килгәнгә ҡәҙәр, барса Башҡортостанда нуғай мырҙалары хакимлыҡ ҡылды. Иҫкә алынған йылда русҡа баш эйгән башҡортар бик аҙ һәм фәҡир-фоҡаранан ғибәрәт булып, йорт башынан йылына бер-ике һуҫар тиреһенән торған символик һалым түләй, ә күп ваҡыт хатта уныһын да бирмәй. Борондан, ханлыҡ заманынан уҡ: ғәскәри синыф булған башҡорттарҙы рустар үҙ ғәскәрҙәренә йәлеп итеү юлына баҫа. Шулай итеп, 1606 йылдарҙа уларҙан бәләкәй генә ғәскәр туплана. Ләкин рус хакимиәтен ҡабул иткән көнбайыш башҡорттар рус идараһынан сыға. 1608 йылда рустар уларҙы яңынан үҙ хакимлығы аҫтына инергә мәжбүр итә[105]. Ләкин рус хакимлығын ҡабул иткән башҡорттар 1629 йылда ни бары 888 йорт тәшкил итә, улар Аҡ Иҙел һәм Кама йылғалары, йәғни рустарҙың һыу юлдары буйында йәшәгән башҡорттарҙан ғына ғибәрәт була. Рус хакимлығын ҡабул иткән башҡорттар иҫәбе 1635 йылда 2217 йортҡа етә, ә дөйөм иҫәбе 14 000 йорт була. Башҡортостандың иң насар һаҡланған өлөшө финдар менән күрше йәшәгән төньяҡ ҡәбиләләре булды.

XVII быуаттың уртаһында рустарҙың көнбайыш Башҡортостанды үҙ ҡул аҫтына күсереү юлындағы ғәйрәттәре байтаҡ көсәйҙе. Нуғайҙарҙың Иҙел йылғаһының көнбайышына күсеүе һәм көнсығыштан ҡалмаҡтар килеүе урта һәм көнбайыш Башҡортостанда нуғай мырҙалары менән Тура солтандарының рустарға ҡаршы алып барған көрәшен аҡрынлап йомшартты. Был иһә рус баҫымы көсәйеүгә сәбәп булды.

## §14 Һуңғы Тура солтандарының рус баҫҡынсыларына ҡаршы сығыуы. Ҡалмаҡтар һәм нуғайҙар. Урта Башҡортостандың рус ҡулы аҫтына инеүе

Көнбайыш монголдар тип аталған Ойрат ҡалмаҡтары 1600 йылда Көнбайыш Ҡаҙағстанға күпләп килеп ерләшә башлай. 1618 йылда уларҙың 50 000 йорто Тубыл һәм Ишем йылғаһы үҙәндәрен биләп ала. Бер өлөшө 1630–32 йылдарҙа Иҙел ярҙарына тиклем тарала. Рәйестәре Хоорлуҡ Тубыл һәм Яйыҡта ерләште. Ундағы нуғай ырыуҙары Башҡортостан эсенә үтте. Иҙелдең көнбайышына, Ҡырым тарафына күсеп киткән Тура солтандары нәҫеленә ҡараған Күсем хандың улдары һәм нуғай сығышлы Урус мырҙа улдары, ошо ҡалмаҡтар ярҙамында рустарҙы Тура өлкәһенән ҡыҫырыҡлап сығарырға өмөтләнеп, күп йылдар дауам итәсәк көрәшкә тотондо. Күсем хандың хәләфе* булған улы Ғәли хан 1601–1606 йылдарҙа ҡалмаҡтар ярҙамында, 1608 йылда Урус мырҙа һәм уның улдары менән бергә рустарға ҡаршы һуғышты һәм Өфө

---

*Хәләф – тәхеткә ултырасаҡ хан улы. (Ә.Ю.)

ҡалаһына һөжүм итте. Янындағы ғәскәре Шырын һәм Табын ырыуынан ине. Башҡорттарға ҡушылып, уға Өфө татарҙары ла ярҙам итте. Ләкин Урус мырҙа улдарына ҡаршы булған Иштирәк мырҙа Ғәли хандың ниәтен боҙҙо. Тиңәхмәт мырҙаның улы Иштирәк мырҙа Мәскәүҙең юғары хакимиәтен ҡабул иткән һәм батша тарафынан Оло нуғай улусының Оло бейе тип танылған. Ғәли хан Башҡортостандағы, башлыса Өфөләге, рустарҙы ҡыуып сығарыуҙа Иштирәк мырҙанан ярҙам һорай. Ләкин Иштирәк мырҙа уның пландарын боҙа, хатта уның үҙен талаттыра. Ғәли хан уның янынан ҡайтҡан саҡта, Яйыҡ йылғаһының Йән Сөйөк кисеүендә улы үлеп, мәйетен

Өфө янындағы хан зыяраты булған ергә дәфен итә. Хандың ҡайғылы хәленән файҙаланып, рустар уға көтмәгәндә һөжүм яһап, әсир иткәндәр[106].

Уның урынына килгән Ишем солтан нуғайҙарҙан бигерәк ҡалмаҡтарға таяна, хатта Хоорлуҡ менән йәшерен мөнәсәбәт булдыра. 1616 йылда ул Өфөнө яулап ала. Үҙенә Тубыл буйындағы иң гүзәл ер булған Аман Ҡарағайҙы үҙәк итеп һайлай. Янындағы ғәскәре тик Табын ырыуынан булған. Улар (йәғни уларҙың бер өлөшө) хан менән бергә Тубыл буйында йәшәгән. 1622 йылда Ишем хан тағы ла Ағиҙел ярына килгән. Ҡәрҙәше Ҡанай солтан да рустарға ҡаршы һуғышҡан. Шейбан солтандары нәҫелендә ҡәрҙәштәр араһында самими эш берлеге һәм тоғролоҡ бөтә тарихтарынан күренә. Ишем солтан менән Ҡанай солтан да шулай уҡ. Һәр ике ҡәрҙәш Мәүереннаһрҙағы Әстрхан династияһы хандары менән йылы мөнәсәбәттә булып, уларҙан да ярҙам алған. Ишем хандың һәм улы Абылай солтандың, шулай уҡ Абылай улы Кесе солтандың Мәүереннаһрҙағы хандар менән яҙышҡан хаттары беҙҙең заманға тиклем һаҡланған[107].

Абылай солтан Мәүереннаһр ярҙамы менән Томск һәм Өфө араһындағы боронғо биләмәләрен кире яулап алыу маҡсатында рустарға һөжүм итә. Ләкин был көрәш партизан хәрәкәттәренән ғибәрәт була. Уға Томск тирәһендәге Сат татарҙарының бейҙәре Абаҡ һәм Тарлап мырҙалар, башҡорттар һәм Өфө татарҙары ярҙам күрһәтә. 1630 йылда был ике мырҙа үлтерелгәндән һуң да, Абылай солтан һаман Башҡортостан ерендә эшмәкәрлеген дауам итә әле. Уның үҙәк урҙаһы көнсығышта Ишем буйындағы Ҡушҡарағай исемле ерҙә, көнбайышта Башҡортостандағы Стәрлетамаҡ янындағы Торатау исемле тау янында урынлаша. Уға ҡалмаҡ ханы Хоорлуҡ та бер аҙ ярҙам итә. Абылай солтан 1633 йылда Исәт юлы башҡорттарын һәм Ҡатай ырыуын рус хакимлығынан ҡотҡарырға тырышты. Ҡалмаҡтарҙың бер төркөмө Абылай солтанға ярҙам һылтауы менән Башҡортостандың Дыуан тигән еренә инә, ул тарафтарҙа ерләшергә тырышҡан рустарҙы юҡ итә, әсир төшөрә. Абылай солтан рустар менән туҡтауһыҙ һуғыша. 1636 йылда ул Дыуандағы ҡалмаҡтар һәм ҡәрҙәше Түкә солтан менән бергә тағы ла Өфөгә һүжөм итә. Был рустарҙы ошо тирәнән ҡыуыуға иң күп ғәйрәт сарыф ителгән хәрәкәт була, ләкин уңышһыҙ тамамлана. Абылай үҙе лә, ҡәрҙәше Түкә лә рустар тарафынан әсир ителә. Был ваҡиға рустарға ҡаршы көрәшкән Табын, Мең һәм Юрматы башҡорттарының рухына ҡот осҡос тәьҫир яһай.

Абылай солтандың хәләфе һәм ҡәрҙәше Дәүләт Гәрәй солтан – Тура һәм Башҡортостанда рустарға ҡаршы һуғышҡан, киң фронт йәйелдереп көрәшкән һуңғы Тура ханзадаһы ул. Унан һуң ҡәрҙәше Абуға солтан менән Абылайҙың улы Кесе солтандар көрәшкә күтәрелә, ләкин был алыш партизан һуғышы хәлендә ҡала. Көнбайыш Башҡортостанда көрәштә иң күп ҡатнашҡан Табын һәм Юрматы улустары күпләп әсир төшә һәм йонсоп хәлдән тая. Ҡалмаҡтар ҙа ярҙам һылтауы менән башҡорттарҙы талай, аҙаҡ сиктә, рустар менән бәйләнешкә инеп, башҡорттарға ҡарата хыянатсыл сәйәсәт башлай.

Дәүләт Гәрәй Өфөнө, Исәт юлын һәм Тураны азат итеүгә 1646–1648 йылдарҙа күп ғәйрәт сарыф итә. Ләкин хәҙерге Урал һәм Әстрхан виләйәттәренә боронғо нуғайҙарҙың Оло Нуғай өлөшөн тәшкил иткән Иштирәк, Урус һәм Ормәмбәт улдары 1646 йылда, ҡалмаҡтар менән һуғыша-һуғыша Иҙелдең көнбайышына күскәндән һуң, Урал виләйәтендә тик бәләкәй Едисан һәм Алтыул Жимбойлоҡ нуғайҙары ҡала. Улар аҙ һәм хәлһеҙ була. Башҡорттарҙың ҡалмаҡтарға бағлаған өмөттәре лә бушҡа сыға. Ниһәйәт, уларҙың бер өлөшө 1655 йылда рус хакимлығын танып, Иҙелдең көнбайышына күсә. Дәүләт Гәрәй ҙә ҡалмаҡтарҙы дошман күреп, улар менән һуғыша. Ошо ваҡытта көнбайыш башҡорттарының иң мөһиме булған Юрматы улусы 1649 йылда рус хакимлығын ҡабул итә.

Уларҙың рәйесе Тәтегәс мырҙа менән Аҙнай бей, Илсектимер менән Ҡармыш ошо улусҡа ҡараған 300-гә тиклем йорт исеменән русҡа буйһона. Был бейҙәр рус хөкүмәтенә йылына ни бары йөҙ һуҫар тиреһе түләргә тейеш була. Рустар Тәтегәскә мырҙалыҡ дәрәжәһе, Аҙнайға бейлек (русса старшина) вазифаһы бирә[108], йәғни

элекке дәрәжәләрен раҫлай. Ҡармыш менән Аҙнай – Һикәҙе һәм Һәләүек йылғалары буйында ултырған Маҡар һәм Аҙнай исемле башҡорт ауылдары бейҙәренең олаталары. Илсектимер иһә – беҙҙең түбә исеме. Йәғни беҙҙең түбәнең олатаһы, ырыуыбыҙҙың тимер оҫтаһы булған кеше олатайыбыҙ булған. Шулай итеп, 1649 йылда көнбайыш һәм үҙәк башҡорт өлкәһе рус хакимлығын ҡабул итә. Урал виләйәтендәге Едисан һәм Алты нуғай мырҙаларынан Севинч мырҙа ла рус хакимлығы аҫтына инә. "Оло Нуғай" нуғайҙарының, ҡалмаҡтар хакимлығы аҫтында булған килеш, Иҙелдең көнсығышында ҡалған өлөштәре лә 1696 йылда Яһши Саат һәм Ағыш мырҙаларҙың идараһында, шулай уҡ Едисандар менән Жимбойлоҡ нуғайҙары менән бергә Иҙелдең көнбайышына сығып, Кубань һәм Ҡырым тарафтарына китә. Иҙелдең көнсығышында ҡалмаҡтар ғына ҡала. Уларҙың бөйөк хөкөмдары Аюка хан да (1672–1734) 1673 йылда рустың юғары хакимиәтен ҡабул итә. Был иһә көнсығыш һәм көньяҡ башҡорттарҙың да "рус хакимиәтенән ҡасыу мөмкин түгел" тигән фекергә килеүенә сәбәп була.

## §15 Көньяҡ-Көнсығыш Башҡортостан. Ҡаҙаҡ һәм Ҡарағалпаҡ хандары

Ҡалмаҡтарҙың күпселеге шул арала Иҙелдең көнбайышына күсеп киткәнлектән, Кесе Жуз (йөҙ) ҡаҙаҡ хандары аҡрынлап көнбайышҡа шыла башлай һәм башҡорттарҙы үҙ йоғонтоһо аҫтына алырға тырыша. Был иһә башҡорттарҙың көньяҡ-көнсығыш улустарына, айырыуса Үҫәргән, Бөрйән һәм Ҡыпсаҡ улустарына, рус дәғүәһенә ҡаршы сығып үҙаллылыҡты һаҡлау мөмкинлеген аса. Кесе Жуз хандарының көньяҡ-көнсығыш башҡорттар өҫтөнән хакимлыҡ иткән, ҡарағалпаҡ хандары тип аталғандары ҙур йоғонтоға эйә булды. Бәғзе башҡорт бейҙәре, рустарҙың баҫымы арҡаһында уларҙың ғәскәренә ҡушылһа ла, ундайҙар бик аҙ була. Ҡарағалпаҡтарҙың Баһадир ханы менән уның улы Ҡәйеп хан Үҫәргән һәм Бөрйән башҡорттары тарафынан хан итеп танылa, башҡорт ханы тип танылған Ҡәйеп хан ҡарағалпаҡтарҙың да ханы була. Ҡарағалпаҡтар араһында бөгөнгә тиклем Иштәк төркөмө бар[109]. Уларҙың шул заманда уҡ ошо хандар хеҙмәтендә булып, ерләшеп ҡалыуҙары ихтимал[110]. Ҡарағалпаҡтарҙағы кеүек, башҡорттарҙа ла ғәскәрлектә ҡаһарманлыҡ күрһәтеп имтияз (өҫтөнлөк) ҡаҙанған рәйестәргә "ҡашҡа" ләҡабе бирәләр, шулай уҡ идара итеү уңайлығы йәһәтенән ырыуҙарҙы "түбә"ләргә бүлеү ысулы ҡулланыла[111]. Ниһәйәт, кесе Жуз хандары 1732 йылда рус хакимлығын ҡабул иткәс, көньяҡ-көнсығыш башҡорттар ҙа, алда аңлатыуыбыҙса, тамам рус хакимлығы аҫтына инә.

Ҡыҫҡаһы, башҡорт иле сәйәси идара йәһәтенән айырым бер ханлыҡ тәшкил итмәйенсә, Тура менән берлектә, йә иһә Тура, Булғар, Ҡазан һәм Алатыр менән бергә дөйөм идара аҫтында Шейбан улдарына буйһона. Өлкәнең көньяҡ-көнбайыш өлөштәре XVI быуатта һәм XVII быуаттың беренсе яртыһында нуғай мырҙалары, ә көнсығыш өлөшө шул уҡ Тура ханы һәм солтандары идараһына буйһондоролоп, тик ҡыҫҡа ваҡытҡа ҡаҙаҡ хандары ҡул аҫтына инә.

## §16 Башҡорт иленең эске тормош ҡоролошо

Башҡорттарҙың аҡрынлап рус хакимлығы аҫтына инеүе уларҙың идара ҡоролошо хаҡында төрлө замандарға ҡараған мәғлүмәттәр яҙылыуға шарт тыуҙыра; хәлбүки, ислам һәм төрки сығанаҡтарҙа ла быға бағышланған (сикләнгән булһа ла) ҡайһы бер мәғлүмәттәр табыла.

Башҡа Алтын Урҙа хандары кеүек, Тура Шейбандары ла мосолманлыҡ ҡабул итә. Бынан һуң уларҙа ла монголса дәүләт ҡоролошо, Иран илһанлыларындағы һәм Мәүреннаһр сығатайҙарындағы һымаҡ, исламлашҡан төҫ ала. "Хан"дың айырым виләйәттәрендә вәли сифатында идара иткән ҡәрҙәштәре солтан була. Ғөмүмән, боронғо "уғлан" урынына "солтан" атамаһы ерләшә. 1430 йылда уҡ Тура ханы булған мәшһүр үзбәк ханы Әбелхәйер хаҡында: "Шейбанлы принцтарҙан береһенә йәдкәргә

Ҡияна солтанлығын бирҙе" – тип әйтелгән мәғлүмәт бар[112]. Был осраҡта "солтанлыҡ" – вәлилек, вассаллыҡ тигәнде аңлата. Шуның менән бергә, мәҫәлән, Бохара хандары төркмәндәргә биргән кеүек, Тура хандары ла башҡорттар өсөн "ҡаҙый" тәғәйен иткәндәр. Был хаҡта Ибн Фадлаллаһ әл-Ғүмәри былай ти: "Улар (башҡорттар) өҫтөнән бер мосолман ҡазый булыр"[113]. Ысынлап та, Өфө янындағы Шишмә ҡәрйәһендә ҡазыйлығы аңлашылған Хөсәйен бей исемле бер әмирҙең ҡәбере бар. Ғәрәпсә яҙылған ҡәбер ташына ҡарағанда, был зат 744 йылда мөхәррәм айының 7-һендә, йәғни 1343 йылдың 2 июнендә, тимәк, Йәнебәк хан заманында вафат булған. Яҙыуҙа "Төркөстани" тигән һүҙ бар. Ихтимал, тәғәйенләнгән тигән мәғәнәләләр. Ҡазый, йәки хөкөм йөрөтөүсе булыуы "хөкөмдәрендә ғәҙел булды" тип тасуирланыуынан да аңлашыла[114]. Был Хөсәйен бей, әлбиттә, ғәләмәнән түгел, улай булһа, ҡәбер ташына башҡа атамалар яҙылыр ине; ул, һәр хәлдә, мосолман "бей" йәғни хаким, хөкөм итеүсе һәм вәли дәрәжәһндәге зат булһа кәрәк, һәм ерләнгән урыны ла Башҡортостандың идара үҙәге булған "Хан урҙаһы" (Тура хан төрбәһе) урыны. Бында Тирмә ауылы янында "Тура хан төрбәһе"ндә һәм был төрбәнең стенаһында уҡып булған дата зыяраттың 887 йылға, йәғни 1482 йылға, ҡарағанлығын[115], бында ерләнгән исеме билдәһеҙ Тура ханының ошо йылда вафат булыуын күрһәтә. Ихтимал, был ҡәбер исеме иҫкә алынған Ибәк, йәғни Ибраһим хандың атаһы, Үтәмеш Хажи әҫәрендә яҙылған "бөтә Тура һәм башҡорт илдәренең ҡеүәтле ханы" Мәхмүдек хандың ҡәберелер.

Рус дәүеренә ҡараған яҙыуҙарҙан билдәле икенсе бер идара ойошмаһы – башҡорт йыйыны. Йыйын Юрматы кантонындағы Һәләүек йылғаһы ҡушылдығының Хажи Мәсете, йәки "Хажи" янындағы гүзәл тәбиғәтле "Хан түбәһе" исемле ерҙә тупланған. XVIII быуатта рустарға ҡаршы күтәрелештәр заманында был шулай ине. Борон, ихтимал, Өфө янындағы Хан урҙаһында тупланғандарҙыр. Ул йыйындың вазифаһы ни булғандыр – мәғлүм түгел, тик башҡорттарҙың һуғыш башлау хаҡындағы ҡарарҙары ошонда ҡабул ителгән. Рустың ҡатын батшаһы көнсығыш Башҡортостанды тамам Рәсәй идараһына буйһондора, һәм 9.6.1739 йылдағы фарман был "йыйын"дың артабан тупланыуын тыя.

Тағы бер идара ойошмаһы булараҡ "диван" мәғлүм, тик уны "дыуан" тип йөрөтәләр. Башҡортостандағы Дыуан кантонының исеме шунан килә. Юғарыла нуғай бейе Нуретдиндең вәзире Ҡатай Ғәли бейҙең диван башлығы булараҡ иҫкә алынғанын күргәйнек. 1549 йылға ҡараған рус сығанағында Ҡарадыуан һүҙе бар[116]. Башҡорт иленә Дыуан атамаһы 1636 йылда күсә[117]. Дыуан хөкүмәт даирәһе тигәндле аңлата. Ҡазан, нуғай һәм башҡорттарҙа иһә дыуан бейе булған юғары вазифа кешеһенең үҙен дә диван тип атағандар.

Бынан тыш, хандарҙың ҡаҙна башлығы йәки хазинадарҙары булған, һәм Нуретдин бейҙең улдары хаҡындағы дастандарҙа ғәскәри хеҙмәт өсөн хаҡ биреүсе мәғәнәһендә "алапа" йәғни "улуфе" атамаһы ҡулланылған[118]. Ғәскәрлек, вәлилек һәм байраҡ бейе мәғәнәһендә "даруга"лыҡ атамаһы Әбелхәйер хандың Тура ханлығы заманына ҡараған сығанаҡтарында күренә, сөнки Ченги Тура ҡәлғәһенең даругалыҡ дәрәжәһен бейҙәренә биргән[119]. Төп башҡорттар иһә улус (йәғни русса әйтелеше волость), йорт һәм түбәләргә бүленеп идара ителгән.

## §17 Ырыу-ҡәбилә төҙөлөшө

Хандарҙың таянысы булған дөйөм "Карачы" исеме менән танылған хаким ҡәбиләләр – Ҡуңғрат, Найман, Ҡошсо, Уйғыр, Салжавут, Ҡыпсаҡ, Манғыт, Мең әширәттәре. Улар айырым "төмән"дәр тәшкил иткән. Үзбәк хандары башлыса Һырдарья буйына, һуңынан Хорезмға һәм Мәүреннаһрға күсенгәндән һуң, ғәскәри һәм хаким әширәттәрҙең күбеһе лә шунда һарҡыла. Ҡуңғрат, Уйғыр ырыуҙары, мәҫәлән, шул тарафҡа китә. Турала, башҡорт илендә уларҙан бер кем ҡалмаған. Был төр ҡәбиләләрҙән Башҡортостанда ҡалғандары ла йә ҡыпсаҡтың "татарса" тип йөрөтөлгән

билдәле һөйләшендә аралашҡан "Өфө татарҙары"на әүерелеп, төмән исемен һаҡлаған, йәки күпселеге – Ҡатай, Салжавут, Табын, Барын, Мең, Меркит, Дөрмән, Ҡыпсаҡ, Чурас һәм Нуғай исемлеләре – башҡорт ҡәбиләләренә әүерелгән һәм башҡорт һөйләшен ҡабул иткән. Улар хәҙер башҡорттарҙың "Савры"һы, йәғни әшрәфе, булып иҫәпләнә.

Төп башҡорт ҡәбиләләре, Өфө янындағы Хан урҙаһын үҙәк итеп, көньяҡ-көнсығыш, көньяҡ, көнбайыш һәм төньяҡ йүнәлешкә киткән Нуғай, Себер, Ҡазан һәм Уса исеме менән дүрт юлға бүленгән һәм дүрт юл башҡорттары исемен алған. Был ҡәбиләләр түбәндәгеләр: Нуғай юлы: Мең, Меркит, Табын, Һарт, Юрматы, Ҡыпсаҡ, Бөрйән, Үҫәргән (Ҡаңлы), Чурас, Тамъян, Тиләү, Ҡатай, Себер юлы: Көҙәй, Табын, Ҡушчы, Суын, Танып, Онлар, Йәнәй, Мырҙалар, Һарт, Ҡыуаҡан, Барын-Табын, Ҡара-Табын, Ҡыпсаҡ-Табын. Ҡазан юлы: Ҡарши, Ҡаңлы, Ҡайлы, Элдит, Кирәй, Йәнәй, Байлар, Йылан, Ҡырғыҙ, Бүләр. Уса юлы: Таҙлар, Уран, Иректе, Ғәйнә, Саһауыш, Ҡараөйлө[120]. Был ҡәбиләләрҙең ваҡ тармаҡтарында төрөк һәм монгол әширәттәренең бер ни тиклеме лә бар. Иң ҙур һәм күп халыҡлы ырыуҙар – Ҡыпсаҡ, Үҫәргән (Ҡаңлы), Бөрйән, Табын ырыуҙары, Әбүлғази хандың башҡорттарҙың күпселеген ҡыпсаҡтар тәшкил итеүе хаҡында әйткәнен юғарыла иҫкә алып үткәйнек инде. Үҫәргәндәр, – уларҙың үҙ риүәйәттәренә ҡарағанда, сығышы буйынса Ҡаңлыларҙың, йәғни Ҡыпсаҡтарҙың, бер тармағы. Ағиҙел һәм Дим йылғалары буйында хандарҙың боронғо Урҙа ерҙәрендә йәшәгән Табын, Мең ырыуҙары боронғо хандарҙың иң ышаныслы таянысы булған. Табындар һуңғы дәүергә тиклем Тура хандарына (Күсем улдарына) тоғро ҡалдылар. Меңдәр ҙә – шулай уҡ. Меңдәр хаҡында "төмәндең Мең бейҙәре" тигәндәр[121], улар Әбелхәйер хандың терәге була. XVIII быуатта Фирғәнә идараһын ҡулына алған Коканд ханлығына тоғро Туран Мең ҡәбиләһе Тура һәм Тубыл тарафынан Чемиш бей исемле берәү етәкселеге аҫтында күсеп килгән[122]. Һарттар – Нуғай һәм Себер юлдарында иҫкә алынған ҡәбилә. Тубыл яғындағы бохаралылар кеүек үк, былар Мәүреннаһрҙан сауҙа һәм колонизациялау маҡсаты менән килгәндәр. Уларҙың был өлкәләге мәҙәниәткә йоғонтоһо ҙур була[123]. Башҡортостанда 1771 йылда Бохар улусы (волосы) ла булған. Кешеләрен һарт тиҙәр ине. Ул заманда һарт һүҙе "каруан менән йөрөгән сауҙагәр" тигәнде аңлатҡан[124]. Тарихи асылы ла шул. Өфө тарафында 1771 йылда 50 ғаилә, Исәттә 52 ғаилә, Ырымбур вилайәтендә иһә ирҙәр иҫәбе генә 20 меңгә еткән[125]. Был һарттар бөгөн бик аҙ ҡалған, татар һәм типтәрсә, күпселеге башҡортса һөйләшә. Хандар заманында Ҡарачы төркөмөн тәшкил иткән төмән, йәғни ғәскәр төмәне әширәттәре менән бер рәттән һәр ерҙә "яһаҡлы"лар ҙа күренә. "Яһаҡлы"лар – синыф мәғәнәһендә, монголдарҙа "тулы хоҡуҡлы" һәм "идара итеүсе" тигән һүҙ[126]. Сығатайҙар һәм Тимер вариҫтары яһаҡлылар сифатында, Джучи улусындағы кеүек үк, регуляр хеҙмәттәге халыҡ тип иҫәпләнә[127]. Өфө вилайәте хандары һәм Күсем улдары хеҙмәтендәге Өфө татарҙары шулар иҫәбенән. Яһаҡ татарҙары – оҙайлы ваҡыт ғаиләләре менән бергә ғәскәрҙә хеҙмәт иткән төркөмдәр. Бөгөн уларҙың Өфө тарафында йәшәгәндәре Бүздәк, Ҡарғалы, Ташлыкүл, Ишанлыкүл, Табанлыкүл һәм Ҡалмаш ауылдарында ғүмер итә. Быларҙан тыш, борондан Башҡортостанда йәшәгән һәм ғәскәрҙә хеҙмәт иткән мишәрҙәр була. Улар 1745 йылда бөтә Башҡортостанда 1510 йорттан ғибәрәт ине. Башҡорт халҡы быуаттар дауамында төрлө төрк һәм монгол ҡәбиләләре ҡушылыу һөҙөмтәһендә барлыҡҡа килгән халыҡ булғанлыҡтан, ҡабилә һәм аймаҡтарының идара бүлектәрен тәшкил иткән "түбә"ләрҙең тарихы төрк ҡәүемдәре этнографияһын өйрәнеүҙә бик мөһим урын алып тора. Уларҙың 1750 йылдағы хәлен капитан Рычков, беҙҙең заманда һаҡланған формаларын проф. Руденко һәм башҡорт белгестәренән Харис Кузеев* яҡшы яҙып ҡалдырған[128].

§18 Синфи ҡоролош

Халыҡ синфи йәһәттән мырҙа, бей, тархандарға, ә ер биләү хоҡуғы буйынса аҫаба, типтәр, бобыль, "туснак" кеүек төркөмдәргә айырылған.

Мырҙа синыфы Мангыт (нуғай), Салжавут (сыжыват) кеүек хаким итеүсе татар ҡәбиләләрҙең бейҙәренән һәм бейзадаларынан барлыҡҡа килеп, күбеһе татар мөхитендә йәшәгәнлектән, татарса һөйләшкән, уларҙы рустар ҙа, үҙ синыфтары миҫалында, кенәз йә иһә мурза, йәғни мырҙа, тип

---

*Һүҙ проф. Раил Ғүмәр улы Кузеев хаҡында бара. З. Вәлиди хеҙмәттәрендә ғалимдың "Башҡорт шәжәрәләре" китабын бер нисә тапҡыр иҫкә ала. (Ә.Ю.)

атаған. Рустар менән бик яҡын мөнәсәбәткә ингәндәренең бәғзеләрен XVII-XVIII быуатта уҡ христианлыҡҡа күсергәндәр. Ураков (Урак мырҙа улдары) һәм Рудал мырҙа улдары 1591 йылда уҡ рус хеҙмәтенә ингән һәм христианлыҡ ҡабул иткән. Мырҙаларҙан Шиғай улдары (1635) Аҡмәмбәт улдары (Акимбәтов, 1673 йыл) христиан тип телгә алына. Мосолманлыҡҡа тоғро ҡалғандары — Аҡһаҡ улдары, Авдий улдары, Аҡсулпан улдары, Атай улдары, Әхмәт улдары, Айыт улдары, Аҡсура улдары, Биксура улдары, Баһмет (Бахметов, йәғни Бей Әхмәт) улдары, Дашҡа улдары (Дашкин), Еникей улдары, Сөләймән улдары, Йәнбулат улдары[129]. ШуларҙанУраҡ, Шиғай, Аҡмәмбәт, Бейәхмәт, Солтан улы мырҙалары, — һис шикһеҙ, нуғай мырҙалары нәҫеленән. Юғарыла уларҙың Бөрйәндән Шихмамай һәм Юрматынан Тәтегәс мырҙаларын иҫкә алғайныҡ. Юрматы башҡорттарынан 1700 йылда Умрәс мырҙа билдәле. Ул Ишәй ҡәбиләһенән Сумәмәт мырҙаның улы икән. Ә Шихмамай мырҙаның нуғай Муса мырҙа улы булыуын әйткәйнек инде. Тәтегәс тә нуғай мырҙаларынан булһа кәрәк. Ләкин улар, башҡорт араһында ҡалып, башҡортлашҡан мырҙалар. Аҡимбәт менән Аҡсулпандар ҙа аҙаҡ башҡорт мырҙаларына әүерелгән. Ҡатайҙар кеүек, Салжавуттар ҙа бөгөн башҡортлашҡан. Татарса һөйләшкән Дашҡа улдары (Дашкин) Арғаяшта Мөслим ауылын, Тамъян, Түңгәүерҙә Ахун ауылын нигеҙләгән. Быларҙы нигеҙләгән Мөслим бине Ғәли, әл-Мөхәммәт бине Жайинжал мырҙа, бине Дервиш мырҙа 1794 йылда вафат булған. Уның мырҙалыҡ хоҡуғы башҡорт һәм татар ауылдарына имам тәғәйенләүҙән ары китмәгән[130].

Бейҙәр ғәскәри төркөмдә генә әшрәф, хаким түгел, ҡәбиләләрҙең дә әшрәфе була. Улар — ҡанунға әүерелгән ғөрөф-ғәҙәткә ярашлы эш итеүсе халыҡ хакимдары һәм улус башлыҡтары. Рустар уларҙы старшина тип тәржемә иткәнгә, ҡағыҙҙарын да шулай яҙғандар. Был төр бейҙәр башҡорттарҙағы бәғзе улус берлешмәләрендә мырҙалар булған осраҡта, яндарында бей ҙә булған, ә бәғзе улустарҙа иһә мырҙа юҡ, бейҙәр генә күренә. Бейлек (старшина) 1739 йылға ҡәҙәр ҡәбилә рәйестәре араһында нәҫелдән-нәҫелгә күсеп килде. Һуңынан был ҡанун үҙгәрҙе, рус хөкүмәте тәғәйен иткән бейҙәр генә хакимлыҡ ҡылды.

Башҡорттар араһында шулай уҡ тархандар ҙа була. Улар, хандар заманында барлыҡҡа килеп, әшрәф ҡатламын тәшкил иткән. Тархандар — мәмләкәт алдындағы ҙур хеҙмәттәре өсөн түләмдәрҙән азат ителгән һәм башҡа ҡайһы бер ижтимағи өҫтөнлөктәргә (привилегияларға) лайыҡлы булған төркөм. Уларҙы батша хөкүмәте лә таныған һәм үҙ исеменән бәғзе файҙалы кешеләренә тарханлыҡ биргән. Бөрйән улусындағы тархандарҙан 1734 йылда иҫкә алынған Исәкәй улы Алдарбай шундайҙарҙан. Рустарҙың Азаҡ һәм Ҡырым походтарында ҡатнашҡан Ҡайсыҡ улы Шимәй батыр хаҡында иһә: "Уның олатаһы Бейеш, боронғо яҙыуҙар (йәғни ярлыҡтар) буйынса, тархан ине", — тиелә. Йәғни батырҙың ғаиләһендә хандар заманында уҡ тарханлыҡ булыуын иғтибарға алып, рустар ҙа уның дәрәжәһен таныған. Себер юлында Ҡаратабында Таймас улдары 1733 йылда, Нуғай юлы Юрматы улусында Кебес улдары, Апас улдары, Ҡыпсаҡ улусында Муаитбаш улы Иҫәнғол һәм Тамъян

улусында Тәнәкәй улдары 1755 йылда тархан була[131]. Һуңғылары ғәскәри хеҙмәттәге батырлыҡтары өсөн тарханлыҡ ала. XVIII быуат аҙағында ысын тарханлыҡтың әһәмиәте бөтә.

§19 "Иҡта" аҫаба системаһы

Башҡорттар рус хакимлығы заманында хәрби синыф булараҡ танылғанлыҡтан, 17 йәштән алып 43 йәшкә тиклемге барса ир-егет ғәскәри тип иҫәпләнде. Был хаҡта һүҙ алдараҡ булыр. Хандар дәүерендәге ғәскәри хеҙмәттең рус замандағы дауамы булараҡ, был хеҙмәт бәрәбәренә башҡорттар үҙ ерҙәрен нәҫелдән-нәҫелгә биләү хоҡуғынан һәм "иҡта"нан файҙалана. Ошо хоҡуҡка эйә булған башҡорттар һәм мишәрҙәр аҫабалар тип йөрөтөлә. Рустар ул төшөнсәне, үҙҙәренә лә хас булған "иҡта" хужаларына оҡшатып, "вотчинник"ка әүерелдергән[132]. "Тирмә өйҙәрҙә йәшәгән башҡорттарҙың һәр айырым төркөмө ғәскәри хеҙмәттә булғанлыҡтан, уларҙың әле XIII быуатта уҡ "иҡта"ларға хужа булыуын" Зәкәриә Казвиниҙың юғарыла иҫкә алынған өҙөгөнән дә аңларға мөмкин.

"Аҫаба" — нәҫелдән-нәҫелгә тапшырыла торған милек хужаһы мәғәнәһендәге ҡанун төшөнсәһе. Күрәһең, был хоҡуҡ мәмләкәттәге мосолман ҡазыйҙан раҫлатыла торған булғандыр. Хандар заманында ғәскәрҙә оҙайлы хеҙмәт иткән яһаҡлылар менән шундай уҡ хеҙмәттәге аҫаба башҡорттар араһында хоҡуҡи айырма ниндәй булғандыр, быны билдәләү өсөн ҡулыбыҙҙа етерлек мәғлүмәт юҡ. 1708 йылға ҡараған рус документтарында "башҡорттар һәм башҡа яһаҡлылар: тип әйтелгән кеүек, рус хөкүмәтенең 1737 йылғы ваҡиғалар һөҙөмтәһендә аҫаба башҡорттарҙы, ерҙәрен тартып алып, "яһаҡлылар синыфына күсерергә" ниәтләүҙәре лә мәғлүм. Башҡорттарҙың рус дәүерендә лә ерҙе административ өлөштәргә борондан һаҡланған документтарға нигеҙләнеп бүлеүҙәре Ҡәнзәфәр тигән мырҙа исеменә бәйле рус документтарынан мәғлүм булды[133].

Мырҙалар һәм башҡорттар араһында йәшәгән бер төркөм ауыл кешеләрен типтәр һәм бобыл тип атайҙар. Типтәр һүҙе төп асылы буйынса грек һүҙе булып, төрөктәргә ғәрәп һәм фарсы теле аша ингән "дәфтәр" тигән һүҙҙән килә булһа кәрәк. Был һүҙ дәфтәр формаһында Сыңғыҙ хан хакимлығының беренсе йылдарында Монголстанда ла ҡулланыла[134]. Диванда (дәүләт етәкселегендә) халыҡ араһынан кадровый хәрби хеҙмәттә булған кешеләрҙе дәфтәргә теркәп, тәғәйенләп ҡуйыу формаһы[135]. Бөгөн башҡорт менән татар теле араһындағы бер диалектта һөйләшкән типтәрҙәр рус хакимиәте дәүерендә Ҡазан тарафынан ҡасып килгән күскенселәр ҡушылыу сәбәпле күбәйһә лә, борон уларҙың күп һанлы булмауы аңлашыла. Уларҙың да үҙҙәренә айырым "бейҙәре" (старшиналары) була[136]. "Типтәр" һүҙе ҡәүем исеме түгел, синыф исеме, типтәр төркөмөнә ингән сыуаштар ҙа, финдар ҙа була. Хандар заманында Башҡортостанда Тура тип аталған Манғыт ҡәрйәләре лә был мәмләкәттәге мәҙәниәт үҙәктәрен тәшкил итеүе мәғлүм. Әммә ултыраҡлашҡан манғыттар, типтәр булмайынса[137], бәғзеһе татарса, күпселек ерҙә башҡортса һөйләшкән нуғай ауылдары булһа кәрәк. Бобыл, Богул[138] — әсир һәм буйһонған мәғәнәһендә башлыса фин ҡәүемдәренә ҡараған атама. Вогул тигән ҡәүем исеме лә, ихтимал, шунан сыҡҡандыр. Бобылдар ҙа башҡорттар һәм мырҙалар хеҙмәтендә була, фәҡәт ерҙәре һәм ғаиләләре булмауы, буйһоноп, йәғни ҡол хәлендә йәшәүе күренә[139]. Башҡорттар араһында шулай уҡ тоснаҡ төркөмө лә була[140]. Улар ҙа башҡорттар хакимлығы аҫтындағы бер төркөмдө тәшкил иткән, ләкин ниндәй хоҡуҡта булыуҙары мәғлүм түгел. Ихтимал, ҡырғыҙ-ҡаҙаҡтарҙағы "түленгут"тар ишелер. 1772 йылда, Рәсәй иҫәпләүе буйынса, дәфтәргә теркәлгән аҫаба башҡорттар 14942 йорт, 1745 йылда Башҡортостандағы мишәрҙәр 1510 йорт, типтәр һәм бобылдар иһә 5655 йорт булған[141].

## §20 Башҡортостанда рус хакимиәте

Башҡортостанда рустар үҙ хакимиәттәрен, был өлкәгә тулҡын-тулҡын килгән рус күскенселәрен берләштереп, рус ҡалалары, нығытмалары төҙөп, йәғни хакимлыҡтарын бер тарафтан хәрби саралар менән, икенсе яҡтан күскенселәрҙе ерләштереү менән һаҡлап, тормошҡа ашырырға тырышты. Рус воеводалары башҡорт һәм татар мырҙаларын рус дворяндары синыфына алыу, башҡа бейҙәрҙе һәм тархандарҙы ла төрлө кейем һәм дәрәжә менән бүләкләү юлы менән ҡулдарында тотоу сәйәсәте алып барҙы. Башҡорттар рус хакимлығын улустарҙың эске үҙаллылығы, ер хоҡуҡтарының һаҡланып ҡалыу шарты менән ҡабул иткән. Ләкин был өлкәгә бер туҡтауһыҙ рус күскенселәре ебәрелеүе ҡала һәм нығытмалар төҙөләүе, рустарҙың бында күпселек тәшкил итеп, мәңгегә хаким булырға берләшеү ниәтендә булыуҙарына һис шөбһә ҡалдырмай. Бойондороҡһоҙлоҡҡа бөтә йәне менән ынтылған башҡорттар аҡрынлап һәләк булыу ҡурҡынысынан ҡотолорға теләне. Шул сәбәпле XVII-XVIII быуаттарҙа өлкәнең яйлап рус идараһына инә барыуы эҙмә-эҙлекле киңәйә һәм көсәйә барған күтәрелештәр, хәрби хәрәкәттәр менән берлектә күҙәтелә. Рус баҫып алыуына ҡаршы был тиклем оҙаҡ һәм ныҡышмалы, аяуһыҙ көрәшкән башҡа һис бер ҡәүем һәм һис бер төрк ҡәбиләһе юҡ. Был күтәрелештәрҙең күплеген, оҙайлылығын һәм көсөргәнешлелеген күҙ уңында тотоп, рус тарихсыһы Дубровин башҡорттарҙы "рус хакимиәтенең көнсығыштағы иң дәһшәтле дошманы" тип баһалаған[142]. Тик XVIII быуаттың икенсе сирегендә, ҡаҙаҡ хандарының Рәсәй юғары хакимиәтен ҡабул итеүҙәренә таянып, рустар был нигеҙҙә Яйыҡ буйында төрлө нығытмалар төҙөгәс кенә, көрәш баҫыла төшә, шул уҡ быуаттың һуңғы сирегендә ниһәйәт туҡтала.

Башҡорттар Рәсәйҙең сит илдәр менән мөнәсәбәтендәге ҡыйынлыҡтан һәр саҡ файҙаланырға тырыша һәм баш күтәреүҙәрҙе шул ваҡытҡа тап килтерә. Көнсығыш тарафтағы башҡорттар, ҡаҙаҡ хандары менән бәйләнеш тотоп, үҙаллылыҡтарын һаҡлаған хәлдә, рус хакимлығын XVII быуаттың беренсе яртыһында уҡ ҡабул иткән көнбайыш һәм урта башҡорттар бер-бер артлы көрәшкә күтәрелеп тора. Бөтә болаларҙа ла Тура шаһзадалары, Күсем улдары беренсе ролде уйнай. 1635 йылда рустар, урта Башҡортостанда үҙ хакимлыҡтарын тамам нығытыу өсөн, көнсығыш башҡорттарҙы ҡул аҫтына алырға тырышты һәм уларҙан ваҡыты-ваҡыты менән ялланған ғәскәр йыйҙы, Себер юлындағы Ҡошсо, Бала Ҡатай, Салжавут, Ҡаратабын һәм Әй улустарын үҙҙәренә ҡаратып, Уралдың көнсығышынан көнбайышына күсерергә тырышты. Монгол заманы төмәндәренә ҡараған был хаким ҡәбиләләр Күсем улдарына ҡаршы торҙо. Ләкин Тура шаһзадалары, Күсем хандың улы Абылай Солтан ҡалмаҡтар менән берләшеп, уларҙың көнбайышҡа күсеү юлдарын киҫте[143], рус тарафын алған ырыу бейҙәрен дә язаланы. Шулай итеп, рус яҡлыларҙы юҡ иткәндән һуң, Рәсәй хакимиәте урынлашҡан ерҙәрҙә лә дөйөм күтәрелеш башлау мөмкин булды.

## §21 Сәйет батыр

Башҡорттарҙың рус баҫҡынсыларына ҡаршы беренсе ҙур һәм етди хәрәкәте 1661 йылда Садыр улы Сәйет баһадир, йә иһә Сәйет Йәғәфәр баһадир[144] етәкселегендә көнбайыш Башҡортостанда башланды. Сәйет батырҙың маҡсаты "Тура хандарының хакимиәтен" аяҡҡа баҫтырыу ине. Ул ҡаҙаҡ хандары менән дә бәйләнеш булдыра. Рус сығанаҡтары 1661–1683 йылдар күтәрелешенең башында һәм аҙағында Сәйет баһадирҙы иҫкә ала, ә хәрәкәттең уртаһындағы осорҙа Күсем хан улдары исемдәрен билдәләй, ә Сәйет баһадир исемен телгә алмай. Һәр хәлдә хәрәкәттең башына Күсем улдары баҫҡан дәүерҙә Сәйет баһадир күләгәлә ҡала. 1661 йылда Сәйет баһадир рустарҙың Ағиҙел һәм Каманың көнсығышында ҡорған нығытмаларын тотошлай

емерә. 1662 йылда Мәскәү уға ҡаршы Языков исемле воевода етәкләгән ҡеүәтле ғәскәр ебәрә. Сәйет баһадир уны еңә.

1663 йылда Мәскәү генерал Зеленский етәкселегендә, күп һанлы Дон, Яйыҡ һәм Украина казактарын да ҡушып, ҙур рус ғәскәре ебәреп, был күтәрелеште ҡыҫҡа ваҡытҡа баҫтырһа ла, хәрәкәт туҡтамай. 1663 йылда Ҡазан воеводаһы Куракин үҙенә буйһонған көнбайыш башҡорттарҙы, "боласылар ҡалмаҡтар менән берләште" тип, йәшәгән ерҙәренән көсләп Ҡазан виләйәтенә күсендерә. Ләкин үҙәк һәм төньяҡ-көнсығыш башҡорт улустары, Ҡатай һәм Барын ырыуҙары, Өфө (түбән) татарҙары 1662–1663 йылдарҙа Тура шаһзадалары етәкселегендә һәм ҡалмаҡтар ярҙамында көрәште дауам итеп, бөтә башҡорт ырыуҙарын аяҡҡа баҫтыра. Ҡалмаҡтар һәм Едисан, Алты ул (Алтавул) нуғайҙарының бер төркөмө баш күтәреүселәргә ғәскәр менән ярҙам итә. Көнбайыш башҡорттарҙың рәйесе Дәүләтбирҙе улы Ишмәмәт ярҙамға килеп, был көстәр менән берлектә Өфө ҡалаһына һөжүм итә һәм тирә-яғындағы рус ауылдарын баҫып ала[145].

1640 йылдан һуң Өфө виләйәтендәге Юрматыға ҡараған ҡәбиләләр үҙҙәрен русҡа буйһонған тип иҫәпләһәләр ҙә, ул саҡтағы бәйләнештәре тик "аманат" ебәреүҙән ғибәрәт була. Быны иһә башҡорттар үҙҙәре өсөн хурлыҡ тип иҫәпләй. Нуғай юлы башҡорттарының бейҙәре тарафынан Өфө воеводаһы кенәз Волконскийға "аманат" мәсьәләһе буйынса 1663 йылдың ноябрендә төрөксә яҙып ебәрелгән бер хат Башҡортостан Йөмһүриәте тарихи материалдарында (I том, 166-сы бит) нәшер ителде. Унда башҡорт бейҙәре шуны әйткән: "Оло падишаһ хан Алексей Михайлович беҙҙән ниндәй яҡшылыҡ көтә? Әүәле былай аманат алмай торғайны, тоғро һүҙ нигеҙендә идара итә ине. Хәҙер падишаһ беҙҙең менән үҙ ҡарамағындағы кешеләр сифатында идара итергә теләһә, беҙҙән алынған аманаттарҙы ҡайтарһын. Беҙгә илселәрегеҙ килгәндә, уларҙы һис тотҡарламайынса кире ҡайтарҙыҡ, һеҙ иһә, беҙҙән илсе барһа, аманат итәһегеҙ. Хәҙер беҙҙең вәкилебеҙ булған Аҡтай Дуҫмөхәммәт улын һәм Күсеш Бекиш улын тиҙ көндә ҡайтарығыҙ. Беҙгә лә илсе ебәрһәгеҙ, ышаныслы кешеләрегеҙҙе ебәрегеҙ. Мәҫәлән, беҙ таныған Юрий Алпаутты йә иһә Иванауҙы. Беҙҙең зарур мөрәжәғәтебеҙҙе башҡа юл менән мәшәҡәтләнмәйенсә белерһегеҙ. Мәҫәлән, Бәкер Полат ҡыҙы һеҙгә әсир төшкәйне. Уны алмашыу юлы менән ҡотҡарыу өсөн һеҙгә бер әсирегеҙҙе ҡайтарҙыҡ, әммә беҙҙең был әсирҙәребеҙҙе бирмәнегеҙ". Ғәмәлдә бындай хат алышыуҙарҙан һуң рустар, ыңғай яуап бирмәйенсә, һуғыш башлай.

Был хатты Өфөгә яҡын йәшәгән башҡорт ҡәбиләләренең бейҙәре ебәрә. Уларҙың Рәсәй менән мөнәсәбәте ярым мөстәҡил өлкә хөкүмәтенең мөнәсәбәте кеүек.

## §22 Күсем хан улдарының Башҡортостанда эшмәкәрлектә булғандарының шәжәрәһе

Башҡортостандың үҙаллылыҡ өсөн хәрәкәттәренә етәкселек иткән Күсем хан улдарының шәжәрәһе, Үтәмеш Хажи, хиуалы Бабажан Манғыт, Мунис, Агеһи күрһәтеүенсә, шулай уҡ ҡарағалпаҡ һәм башҡорт шәжәрәләренә ҡарағанда, рустарҙың Себергә, ҡарағалпаҡтарға һәм нуғайҙарға бәйле архив мәғлүмәттәренә ярашлы рәүештә түбәндәгесә булыр:

Күсем хан 1598 йылдың 4 августында вафат була. Улдарынан Ғәли хан, Ишем Солтан һәм Сыуаҡ Солтан билдәле. Ғәли хан 1616 йылда үлә. Улдары Арыҫлан Солтан, Хансүвер менән Жансүвер, рустар тарафынан әсир ителеп, Мәскәүгә ебәрелә һәм Ҡырым ханы теләге буйынса Ҡырымға күсерелә. Хансүверҙән мәшһүр Әхмәт Гәрәй Солтан тыуған, ул Ҡырым, Хиуа, башҡорт һәм ҡарағалпаҡ дауҙарында ҡатнашҡан.

Күсем хандың икенсе улы Ишем Солтан эшлекле хан булды, уның улы Аблай Солтан (Әбелхәйер, нуғай риүәйәттәрендә Аблайыр). Уның оло улы Абуға Солтан, ә кесеһе мәшһүр Кесе Солтан, ул ағаһы менән берлектә башҡорт һәм ҡарағалпаҡтарҙың ханы була. 1678 йылда ҡалмаҡ ханы Аюка менән һуғышта һәләк була. Абуғаның улы – Дудубәк. Кесе Солтандың улы Морат Солтан (башҡа исеме менән Ҡәйеп Солтан) Ҡырымға һәм Истамбулға барып килә, Дағстанда Терек ҡалаһы өсөн һуғышта яраланып, рустарға әсир төшә, Әстрханда хөкөм ителеп, йәшерен рәүештә Ҡазанға килтерелеп язалана. Кесе Солтандың бер улы ҡарағалпаҡ ханы Бушай Солтан, уның улы Ырыҫ Мөхәммәт Солтан бөрйән, түңгәүер һәм тамъянда ханлыҡ ҡыла. Күсем хандың өсөнсө улы Сыуаҡ Солтан һәм улы Дәүләт Гәрәй хан да мәшһүр. 1661 йылда үлеменә ҡәҙәр Аблай Солтан һәм улдары Абуға һәм Кесе Солтан был Дәүләт Гәрәйҙең улы хан тип танығандар. Дәүләт Гәрәйҙең улы "Ишем-Сүвек Солтан" Ургенчта ҡарағалпаҡ ханы булған, уның улы Хәсән Солтан ҡалмаҡ хандары янында ҡалған, улы Байбулат Солтан (Ҡырым һәм Истамбулға барғаны) Рәсәйгә ҡаршы баш күтәргән башҡорттарҙың солтаны була. Рустарҙың ҡулына эләкмәҫ өсөн, йәшерен йәшәй һәм ялған исемдәрҙә йөрөй, шуларҙың береһе – Ҡараһаҡал. Уның туғаны Ишем Солтан, Ишемдең улдары Шәйбәк һәм Үбәйд (Ғөбәйҙулла) ҡарағалпаҡ солтандары булды. Байбулат Солтан ғилемлелеге һәм матурлығы менән мәшһүр. Үбәйд Солтан иһә Ҡарат (Йәиһә Ҡарай) ҡәбиләһе солтаны була. Байбулат Башҡортостанда рустарға ҡаршы һуғышҡан осорҙа Шәйбәк хан ҡарағалпаҡтарҙың ханы булды. Һәр хәлдә, ул Байбулаттың ярҙамсыһы, ә әсәһен Ғәйшә Байбулаттың һөт әсәһе һәм тәрбиәсеһе була.

## §23 Дәүләт Гәрәй, Абуға һәм Кесе солтандар

Сәйет баһадир тарафынан башланған был хәрәкәт Күсем улдарының хәрәкәте лә ине. Күсем хандың Сыуаҡ исемле улының улы булған Дәүләт Гәрәй Солтан үҙенең улусы, йәғни аталары заманынан бирле улар ҡарамағында ҡалған халҡы менән бергә ҡаҙаҡ һәм ҡалмаҡтар араһында Иртыш йылғаһы буйында йәшәгән. 1661 йылда был зат, Соловьев файҙаланған сығанаҡтарҙан күренеүенсә, Ҡырым хандары менән (йәғни Мөхәммәт Гәрәй III менән) бәйләнешкә инеп, башҡорттарҙың Табын һәм Ҡатай ырыуҙары ерҙәрҙе баҫып алған, ундағы рус ауылдарын үртәгән[146]. Башҡорттар 1663 йылда Дәүләт Гәрәйҙе Тубылда хан тип иғлан итергә әҙерләгәндәр[147]. Абуға һәм Кесе Солтандарҙың хәрәкәте был ваҡыттағы ваҡиғаларҙы, бер яҡтан, Ҡарағалпаҡтағы Ургенчҡаса, икенсе яҡтан, Ҡырым һәм Кавказ тарафтарына тиклем киңәйтеп, Башҡортостандағы көрәште халыҡ-ара ваҡиғалар кимәленә күтәрҙе.

Ваҡиғалар ағышының дөйөм тасуирын ҡыҫҡаса түбәндәгесә һүрәтләй алыр инек:

Кесе Солтан 1662–64 йылғы алыштарҙы төньяҡ Башҡортостандың Себер юлы һәм Уса юлы яҡтарында башланы. Ҡалмаҡ принцы Дайчан һәм кейәүе Аюка Кесе Солтан яғын тота. Был эштә Ҡырым менән Төркиә лә алыҫтан ҡатнаша. Нуғай юлы башҡорттарынан Ҡыпсаҡ ырыуы бейе Ишмәмәт тархан, Ҡунушаҡ һәм Дыуанай улустарында Дәүләтбай улдары, Себер юлы тирәһендә Һары Мәргән исемле халыҡ ҡаһарманы бөтә рус колонистарының ауылдарын үртәп бөтөрҙөләр. Көнгөр тирәһендәге колонист рус ауылдары Кама йылғаһының көнбайышына күсенде. Батша 1662 йылдың яҙында Ҡазан вәлийе кенәз Волконский менән кенәз Черкасский етәкселегендә күп һанлы ғәскәр ебәрҙе һәм Көнбайыш Себерҙән рус ғәскәрен дә көнсығыш Башҡортостанға йүнәлтте. Был Себер ғәскәре башҡорттарҙы Иртыш күле янында булған һуғыштарҙа еңә алды. Ләкин Нуғай юлында Кесе Солтан үҙе, Ҡазан һәм Уса юлдарында Һары Мәргән, Киләй Тәнәкәй улы, Әтегәс, Бикйән Туҡтамыш улы, Арыҫлан Бекбакты улы, Кесе Солтан етәкселегендә рус ғәскәрҙәренә ҡаршы тороп, көнбайыш Башҡортостанды уңышлы һаҡлай алдылар. Әммә 1663 йылдың йәйендә Волконский менән Черкасский ғәскәрҙәре бер нисә урында башҡорттарҙы баҫтырҙы. Ғажиз ҡалған Нуғай юлы башҡорттары 1663–64 йылдың ҡышында Мәскәүгә өс

кешенән торған бер һәйәт* ебәреп, итәғәт белдерҙеләр һәм солох һоранылар[148]. Рәйестәре Юлай улы Тиңмөхәммәт ине. Көнбайыш Себер һәм Өфөнөң түбән татарҙары, йәғни Бүздәк һәм башҡалар, ҡулдарынан килгәнсә Кесе Солтанға ярҙам күрһәттеләр. Кесе Солтан Өфөнө ҡамап, баҫып алырға тырышһа ла, уңышҡа өлгәшә алманы. Батша башҡорт өлкәләрендә рус колонистарына көс менән ер кәсеп итеүҙе тыйып, башҡорттарҙың талаптарынан бер өлөшөн ҡабул итте. Ләкин Нуғай юлындағы тоҙ фабрикаһы (Усольский) менән Бөрө нығытмаһын төҙөүҙе дауам иттерҙе. Был иһә Рәсәйҙең

*Һәйәт – делегация.

Башҡортостанда ҡалыу ниәтендәге ҡарары ныҡлы булыуын күрһәтте, һәм көрәш яңынан тоҡанды.

1662–1667 йылдарҙағы күтәрелешкә Дәүләт Гәрәй Солтандың ҡустыһының балалары Абуға һәм Кесе Солтандар етәкселек итеүе күренә. Һәр ике солтан 1646 йылдан бирле үк Көнбайыш Себерҙә рустарға ҡаршы һуғышҡан[149]. 1664 йылда был көрәш тағы ла киңәйә. Рус сығанаҡтары ошолай һөйләй: "Өфө һәм сирмеш татарҙары, башҡорттар менән вогулдар Себер шаһзадаларына алданды. Хыянатсыл башҡорттарҙың рәйесе Туҡмәмәт Минзәләгә һөжүм итте. Был хәрәкәттә 4 меңгә тиклем ҡалмаҡ, бер ни тиклем нуғай ҡатнашты. Едисан һәм Алты ул нуғайҙары боронғо нуғайҙарҙың хәҙерге көнбайыш ҡаҙаҡ далаһында һәм Хиуа сигендә ҡалған өлөшө ине"[150]. Тимәк, улар ҙа башҡорт хәрәкәтендә ҡатнашҡан. "Өфө татарҙары"ның Ағиҙел һәм Дим йылғалары ҡушылған ерҙәрҙә йәшәгән боронғо татар түбәндәре булыуын аңлатҡайным. "Сирмеш татарҙары" тип рус сығанаҡтарында Ҡазан татарҙарының сирмеш тарафында булғандары күрһәтелә[151]. Был юлы ла уларҙың Өфө тирәһендәге сирмештәр, йәки Ҡазандан күсеп килгән һәм сирмештәргә күрше йәшәгән татарҙар тигәнде аңлатыуы мөмкин. Бөтә был ҡәүемдәр, рус сығанаҡтарынан күренеүенсә, "Себер шаһзадаларына алданған", йәғни был шаһзадаларҙың етәкселегендә баш күтәргән. Боласылар, Ҡырым һәм Төркиә менән элемтә урындаштырып һәм ҡалмаҡтарҙан Дайчин Тайшы менән берләшеп, 1665 йылда Әстрхан аша Дағстандағы Терек ҡалаһына һөжүм иткән. Был ҡаланы казактар 1573 йылда уҡ бина иткән. Аҙаҡ, казактар Мәскәүҙең юғары хакимлығын ҡабул иткәндән һуң, ҡала Мәскәү тарафынан нығытылған. Башҡорттар һәм Себер шаһзадалары, уны баҫып алып, емерә. Был шаһзадаларҙың Күсем хандың Ишем Солтан исемле улының улы Абуға (йәиһә Буғай) Солтан һәм уның туғаны Абылай Солтандың улы Кесе Солтан булыуын билдәләргә мөмкин. Ошо ике ҡәрҙәш 1648 йылда, башҡорттарҙың Исәт һәм Ҡатай ырыуҙарының башында тороп, Өфө тарафындағы башҡорттар araһына килеп ерләшкән рустарҙың ауыл һәм ҡасабаларын емереп, үртәп, халҡын ҡырған. Шул уҡ заманда "Тау черкестары" өлкәһенә, йәғни Төньяҡ Кавказдағы Дағстанға тиклем етеп, баҫҡын яһаусы ҡалмаҡ принцы Хоорлуҡтың улы (исеме иҫкә алынған) Тайчин Тайша менән бергә булғандар[152]. Абуға һәм Кесе Солтандың бергәләп рус ҡасабаларына һөжүм итеү яуаплылығын үҙ өҫтөнә алмауы хаҡында Дәүләт Гәрәй рус илсеһенә һөйләгән[153]. Был Кесе Солтан башҡорттарҙа хан итеп танылған. Ул 1665 йылда башҡорт һәм ҡалмаҡтар башында Көнбайыш Себерҙә Ҡырғыҙ (Киргинск) исемле рус ҡасабаһына һөжүм итеп, уның тирә-яғындағы рус ауылдарын туҙҙырған[154]. Рус сығанаҡтарында уларҙың, 1665 йылда Дағстанға яһаған барымтанан тыш, 1667 йылда үҙҙәренең ҡул аҫтындағы башҡорттар менән берлектә Черкес (Дағстан) тарафынан ҡайтҡас, 2000-гә тиклем ғәскәр менән (Төньяҡ Ҡаҙағстанда) Ишем тармағындағы Апар тауы янына ерләшеп, рөхсәтһеҙ һис бер яҡҡа китмәйәсәктәренә ышандырыр өсөн, суверендары булған ҡалмаҡ рәйесе Абылай Тайшаға аманат ебәреүҙәре хаҡында иҫкә алына[155]. Был Абуға һәм Кесе Солтандарҙың Тайчин Тайша менән бергә 1648 йылда уҡ "Тау черкестары"на сәфәр яһарға тырышыуҙары ла сығанаҡтарҙа сағыла. Тимәк, был Себер принцтарының Төньяҡ Кавказ һәм Ҡырым менән бәйләнештәре борондан килә. Иҙелдең көнбайышындағы ҡалмаҡтарға (Мунжаҡ) күрше башҡорттарҙың (әле алдараҡ быға туҡталырбыҙ): "был өлкәнең (йәғни Көньяҡ Рәсәйҙең) оло һәм кесе

юлдарын, бөтә йылғаларҙың кисеүҙәрен белеүебеҙ арҡаһында ҡалмаҡҡа юл күрһәтеүсе булып хеҙмәт итәбеҙ" тип әйтеүҙәре лә – ошо бәйләнештәрҙең бик боронғо һәм ҡеүәтле булыуына дәлил. Ваҡиғаларҙан күренеүенсә, башҡорттар ул замандарҙа бәғзе ваҡыт Ҡырымға тиклем килгән. Мадьяр сығанаҡтарындағы мәғлүмәттәргә ҡарағанда, башҡорттар, төрөктәр (төркиәләр) һәм ҡырымдар берлектә 1666 йылда Мадьярстанға инеп, Дебрецен ҡалаһына һөжүм иткән[156].

Ҡалмаҡтарҙың рәйесе Дайчан Тайша һәм улы Мунжаҡ башҡорттар өсөн ышаныслы союздаш булмай. Уларҙың һәр икеһе бер үк ваҡытта рус батшаһына итәғәт күрһәтеү йөҙөнән Ҡырым һәм башҡорттарҙың хәле хаҡында хәбәр биреп торған. 1661 йылда рус вәкиле Горохов Яйыҡта Дайчын Тайша менән осрашҡан саҡта рустарға ҡаршы һуғышҡан башҡорттарҙан Гаур (Ғәфүр) Аҡбулат улының һәм 30-лап бүтән баш күтәреүселәрҙең ул саҡта Иҙелдең көнбайышында күсеп йөрөгән Мунжаҡ янында булыуҙарын әйтеп шикәйәт* иткән. Горохов Иҙелдең көнбайышына сығып, ул мәлдә рустарҙың дуҫы иҫәпләнгән Едисан нуғайҙарының бейҙәре һәм Мунжаҡ менән осрашып, уларҙың батшаға ҡарата тоғролоҡ һаҡламауҙары, Мунжаҡҡа үҙ янында баш күтәреүсе башҡорттарҙы тотоуы өсөн үпкә белдергән. Мунжаҡҡа: "Мосолмандар һеҙгә ҡаршы булған ҡырымдар менән союздаш. Шулай булғас, һеҙ ҡалмаҡтар, барып, Ҡырымды үҙ ҡулығыҙға алырға тейеш инегеҙ", – тигән. Йәғни уларҙы Ҡырымға ҡаршы ҡотортҡан. Шул уҡ заманда (Горохов), бындағы Ғәфүр Аҡбулат улы һәм башҡа башҡорт етәкселәре менән күрешеп, уларҙы ҡалмаҡтарға ҡаршы ҡотортҡан һәм мәмләкәттәренә кире ҡайтырға тәҡдим иткән. Улар иһә: "Кире ҡайтһаҡ, аҫырһығыҙ. Беҙ бында хеҙмәт итәбеҙ. Ҡалмаҡтар ҙа беҙҙән ҡәнәғәт. Сөнки беҙ бөтә ҙур юлдарҙы һәм кескәй һуҡмаҡтарҙы, йылға кисеүҙәрен беләбеҙ. Уларға юл күрһәтеүсебеҙ", – тигәндәр. Горохов уларға бер ни тиклем бүләк биргәндән һуң: "Тимәк һеҙ, батша мәмләкәтенә ҡалмаҡтарҙы килтереп, беҙгә яуызлыҡ эшләргә теләйһегеҙме?" – тигән. "Тап шулай, юҡһа һеҙ күрһәткән яуызлыҡҡа ҡаршы яҡшылыҡ эшләйекме инде?" – тип яуап биргәндәр улар[157]. Горохов башҡорт бейҙәренең, биргән бүләктәрҙе алып та, ошолай егеттәрсә яуап биреүҙәренән һуң бик уңайһыҙ хәлдә ҡалған. Башҡорттар шул көндәрҙә ҡалмаҡтарҙың 2000-гә тиклем аттарын ҡыуып алып киткән. Мунжаҡ та үҙ дошмандары булған татарҙар (йәғни нуғайҙар) менән башҡорттарҙың Ҡырым хандары менән хәбәрләшеүен асыҡлап, батшаға хәбәр итәсәген белдергән[158].

Был Ғәфүр Аҡбулат улы һәм уның яуҙаштары, ҡалмаҡтарға Рәсәйгә ҡаршы юл күрһәтеүсе булыуҙан тыш, Ҡырым менән башҡорт иле һәм Себер шаһзадалары араһында бәйләнеш тәьмин иткән булһа кәрәк. 1664 йылда Мунжаҡ: "Башҡорттар, әстрхандар, Ҡырым хандары һәм Азаҡ (Османлы) пашаһы менән берләшеп, килешеү төҙөнөләр", – тип рустарға хәбәр ебәргән һәм уларға башҡорттарҙы үҙҙәренең дә дошманы итеп күрһәткән[159]. 1665 йылда Мунжаҡ рустарға: "Башҡорттар һәм Ҡазан татарҙары, 1564 йылда

---

*Ялыу иткән йәки үпкә белдергән.

Ҡырым ханына илсе ебәреп, беҙ әүәлдән дә Ҡырым хандарына ҡарай инек, хәҙер рустар менән бергә йәшәп, мосолманлығыбыҙҙан айырылыу ҡурҡынысына дусар булдыҡ. Хан беҙҙе үҙенә ҡабул итһен һәм беҙҙең менән берлектә рус батшаһы ҡалаларына һөжүм итһен", – тип тәҡдим яһауҙары хаҡында яҙған. Тағы ла шул уҡ Мунжаҡ: "Әстрхан татарҙары һәм башҡа мосолмандар Ҡырым ханы Аҙаҡтағы паша даими бәйләнештә, Таркофтағы Сурҡай Савчал (Шамһал) һәм Кабарда рәйестәре лә Әстрхан менән Терек араһында ҡала һәм нығытма бина итергә теләйҙәр. Хан да Ҡара Яр (Черный Яр) менән Царицын араһында ғәскәр булдырырға, Әстрхандың Йорт (Юртовский) татарҙары һәм нуғайҙары менән мөнәсәбәт тәьмин итергә ниәтләй", – тип яҙған160.

Башҡорттарҙың һәм Күсем улдарының 1662–1663 йылдарҙа Көнбайыш Себер, Дағстан һәм Ҡырым араһында русҡа ҡаршы хәрәкәттәре һижри буйынса – 1076, миләди буйынса 1665–66 йылдарҙа Дербенд, Дағстан һәм Әстрхан юлынан үткән. Был

Төркиә сәйәхәтсеһе Әүлиә Челебиҙең сәйәхәтнамәһендә лә иҫкә алына. Ул башҡорттарҙы Һишдәк, йәғни Иштәк йәки Истәк, тип атаған һәм уларға етәкселек итеүсе шаһзаданың рустарға ҡаршы һуғыш барышында Муйик ҡалаһында күренеүен билдәләгән161. Сәйәхәтсе Дайчын Тайшаны Тайса тип атай, Мунжаҡты Муйинжаҡ ти һәм уларҙы ҡалмаҡ принцтарының союздаштары сифатында иҫкә ала. Былай исемдәрен атап яҙыу сәйәхәтсе мәғлүмәттәренең дөрөҫлөгөнә162 дәлил.

Әүлиә Челеби, һишдәктәрҙең тормошон оҙаҡ һәм ентекле тикшереп, уларҙың, рус ҡул аҫтында булараҡ, ғәскәргә алыныуҙарын һәм баш күтәреүҙәрен, Ғәли Османға тоғро ҡол булыуҙарын аңлатҡан163 һәм: "Һишдәк ҡәүемендә булған тиклем ат, һыйыр, дөйә, һарыҡ башҡа һис бер падишаһта юҡтыр. Ғәжәйеп аттары һәм ҡылыстары бар. Улар бөтәһе лә күсмә ҡәүем. Араларында Дадуяндан (?) ике шаһзадалары бар һәм ғөләмәләре күп. Көнө-төнө ҡалмаҡ менән һуғышалар. Сөнки ғәйәт батыр һәм ғәйрәтле һуғышсан егеттәре бар. Йөҙ меңе уҡ атыусы булһа, йөҙ меңе кемандарҙарға* ярҙам итеүсе, алты дала (полевой) туптары ——————

*Был һүҙҙе тәржемә итеп булманы. (Ә.Ю.)

бар. Хатта был шаһзадалар, Муйик ҡалаһына баш эйеп килеп: "Османлы беҙгә Йәшел әләм бирһен, был виләйәттәрҙе Мәскәүҙән алып һеҙгә буйһондора алырбыҙ", – тигән. Һишдәк ҡәүеме "Алтых саҡуни" исемле ерҙә берләштерелһә, Аҙаҡ виләйәте, Мәскәү һәм ҡалмаҡтан ҡурҡмай, тыныс йәшәр ине. Һишдәктәр ғәйәт фанатиктар, ғәйәт батырҙар, ҡылыстары үткер. Үҙҙәре ат ите ашай, араҡы эсмәй һәм баштарына сүрәһи* кеүек ҡалпаҡ кейәләр"164.

Бында исеме телгә алынған Мөхәммәт Гәрәй хан Суфый Мөхәммәт Гәрәй исеме менән билдәле Мөхәммәт Гәрәй IV булыр. Ул 1641–1644 һәм 1654–1665 йылдарҙа хан була һәм, рус ҡурҡынысын аңлап, уларҙы Украинаға, Дон буйына индер-

мәү юлында күп ғәйрәт сарыф ҡыла. Истамбул хөкүмәте уны 1665 йылда тәхетенән төшөрөп, уның урынына поляк ҡатыны нәҫеленән килгән һәм рустарға дуҫ булған Әҙел Гәрәйҙе хан итте. Ул иһә, рус батшаһы Алексей Михайловичҡа күп бүләктәр ебәреп, дуҫлыҡ тәҡдим иткән165. Истамбул был сәйәсәттең хаталы булыуын аңлап, 1671 йылда Ҡырымдың русҡа ҡаршы элекке барымталарында ҡатнашҡан Хажи Сәлим Гәрәйҙе хан итеп тәғәйенләгән. Ләкин Ҡырым менән Төркиә ошо мәлдәге бөйөк бер форсаттан файҙалана алманы. Был форсат Стенька Разиндың батшаға ҡаршы баш күтәреүе ине.

Күсем улдары һәм башҡорттар Теректан кире ҡайтҡан 1667 йылда Дон казагы Разин батшаға ҡаршы бола байрағы күтәрҙе. 1668 йылда, Иҙелдең көнсығышына үтеп, Яйыҡ (Урал) казактары, башҡорт һәм ҡалмаҡтар менән бәйләнешкә инде, кәмәләрҙә Хәзәр диңгеҙе аша сығып, Иран ярҙарын баҫып алды. 1669 йылда бөтә түбәнге һәм урта Волганы, Әстрхан, Сарышын (Царицын), Һарытау, Һамар һәм Сембер ҡалаларын биләне. Ҡазан мосолмандарын үҙ яғына йәлеп итергә тырышты. Сембер янындағы һуғыштарҙа көнсығыштан Сәйет баһадир башҡорттар менән килеп ҡатнашҡан. Ибраһим кәтиб һөйләүенә ҡарағанда, Стенька Разин Ҡазан татарҙары һәм Нуғайҙар, "ҡырғыҙ" исеме аҫтында берләштерелгән ҡаҙаҡ-башҡорттар менән союздаш булараҡ, улар менән берлектә Осман дәүләтенә мөрәжәғәт итеп, Мәскәү тарафынан баҫып алынған татар өлкәләрен уларға кире ҡайтарыу юлында

—————

*Графин кеүек.

бергәләп эш итергә тәҡдим яһаған, әммә Истанбул быға илтифат итмәгән166. Ҡырымдан һәм Төркиәнән һис ярҙам күрмәгән Разин, 1670 йылдың октябрендә Ҡазандың көньяғындағы Зөйә йылғаһы буйындағы һуғыштарҙа еңелгәс, Донға кире ҡайта һәм унда батша яҡлы казактар тарафынан тотолоп, Мәскәүгә тапшырыла, 1671 йылдың 6 июлендә язалана.

1661–67 һәм 1707–1711 йылдарҙағы ваҡиғаларҙа башҡорттарҙың һәм Күсем улдарының Ҡырымда, Дағстан тарафында булыуы билдәле. Әүлиә Челеби, Әстрхан

һәм Ҡазан ҡалаларында һишдәктәр (йәғни иштәктәр, башҡорттар) йәшәй, тип күрһәткән167. Шуның менән бергә Әүлиә Иҙел һәм Ҡырым тарафтарында ҡалмаҡтар һәм нуғайҙар менән ҡатнашҡан һишдәктәрҙең артында ҡалған башҡорттарҙы "Эс ил һишдәктәре" тип атай168. Быға ҡарағанда, Иҙел тарафтарындағы башҡорттарҙы "Тыш ил һишдәктәре" (йәғни башҡорттары) тип исемләргә кәрәк, ләкин ул замандағы сығанаҡтарҙа бындай атаманы осратманыҡ. Тик Төркиә сығанаҡтарында Кубань тарафтарында "Һишдәк кисеүе" иҫкә алынған кеүек169, Төньяҡ Кавказда ла "Һишдәк төрөктәре" исеме осрай170. 1724 йылда Бөйөк Петрҙың Әстрхан һәм Өфө виләйәттәрендә йәшәгән башҡорттарҙан һалым һәм ғәскәр алыу маҡсатында сығарған фарманы171, шулай уҡ 1724 йылда ҡалмаҡ рәйесе Дорьяның, Бүкәй урҙаһындағы Үҙән йылғаһында башҡорт, ҡарағалпаҡ һәм ҡырғыҙҙарға һөжүм итеп, уларҙы еңеүе хаҡындағы хәбәре172 бер аҙ алдараҡ "Кәмәлек башҡорттары" тураһында яҙыласаҡ мәғлүмәттәргә тап киләсәк. Был йәһәттән, Әүлиәнең "Әстрхан һищдәктәре" лә, боронғо ғәрәп географтары иҫкә алған "Тыш башҡорттар" ҙа XVIII быуаттың беренсе сирегендә башҡорттарҙың Үҙән йылғаһына ҡәҙәр еткән көньяҡ тармағы булыуы мөмкин. Шулай итеп, Ибн Фадлан да башҡорттарҙың "алдағы сафтарын" хәҙерге Ҡаҙағстандағы Уральск виләйәтенең көньяғында күргән.

Ике башҡорт шаһзадаһының Терек ҡалаһындағы һуғыштары ла, ихтимал, был ваҡиғанан һуңғыраҡҡы Морат Солтандың һуғыштары менән берләштерелеп, нуғай дастандарында иҫкә алынғандыр. Дастандарҙың был өлөшө нуғай Мөхәммәт Усман улының 1883 йылда Петербургта нәшер иткән "Нуғай хрестоматияһы"на индерелгән:

Албыйыр Бий'нин баласы
Эр Күчүкнин оглу айтар
Ҡадемсиз булган анавы
Ҡайып Султан өзү айтар:
"Султан эдик биз өзимиз ҡам болдыҡ
Сулпурлар эдик биз өзимиз ҡам болдыҡ,
сонында аскер ийерттик.
беририне келгенде
Кесме кесем сары алтын
Кесмәй берген султанмын
Кесилген яман арыҡга
Ял байлаган султанмын
Тувасы йоҡ ялгызга
тувган булган султанмын,
ат йыгылыб йер авса,
эр алдырган күн тувса,
ҡабыргадан ҡара ҡанлар субурса
тувганы йоҡ ялгызга
тувган булыб ат айдашҡан Султанмын
"Тура"да булур илимиз
"Тинбуйуҡлы" булур һалҡымыз
тунган балдай булур сувымыз
Яйыҡ'нын башы "Көк Шымай"
 эрте атландык кеч түшдүк
бу гевирнин ор'ындан

Чабувил Мескев төринден
"Ока"деген сувындан
"Башкынчак" деген йеринден
басыб чабыб өткенмиз
ягасына биткен талларын
кырыб көпүр эткенмиз
Бу гевирнин узун чепкен салдатын
ҡысҡа чепкен майорын
дөрт күпжык ҡадалаҡга йүклетип
Паша агама мен өзим
бүлек савгат эткенмин
Бу гевирнын чет ҡаласы "Терек"ни
айланасы шымлаб сокган берик ни
ичиндеги аз мүслүман көб гевир
Һаллиси Ҡырым өтди деб
ичиндеги һалсизи
гевир булмай не этти деб
кайтавулга баҡганда
тен ҡувветсиз ҡайта чабыб өкиндим173.

Йәғни: "Албыйыз (Албыйыр?) бейҙең балаһы ҡаһарман Кесе хандың улы булған шул бәхетһеҙ Ҡәйеп Солтан үҙе ошолай һөйләй: "Беҙ башта бер солтан (принц) инек, хан булдыҡ. Түбән һәм ярлы хәлдә инек, байыныҡ, һулаҡай ҡулдан буталып эш иткәндең, йәғни эшмәкәрлектәрендә гел уңышһыҙлыҡҡа осрағандарҙың, береһе инек, уңған (йәғни уңышлы) һәм бәхетле булдыҡ. Ниһәйәт, артыбыҙҙан ғәскәр йөрөтөүгә лә ирештек. Һәҙиәләр бирергә кәрәк булғанда, иң ҙур киҫәк һары алтынды бүлгеләмәҫтән биргән солтан мин. Яралы, ябыҡ, хәлһеҙ малды (һимертеп) аяҡҡа баҫтырған солтан мин, әҡрәбәһе, ҡәрҙәштәре булмаған яңғыҙҙарға, етемдәргә әҡрәбә булған солтанмын мин. Менгән аттары йығылыр хәлгә килеп аяуһыҙ һуғыштар булһа, ҡаһарман ирҙәрҙең хайран ҡалыр көндәре килһә, һуғышта яраланған ҡаһармандарҙың ҡабырғаларынан шыбырлап ҡара ҡандар аҡһа, (шундай бер ҡаһарман) тыуған ватанынан айырылып, яңғыҙ башына ҡалһа, шундайҙарға ҡарындаш булараҡ, уның менән бергә (сәфәрҙәрендә) атта һыбай йөрөгән бер солтанмын мин. Илебеҙ "Тура" тигән ерҙә булған кеүек, беҙгә буйһонған халыҡҡа ла "томбойоҡло" тиҙәр. Беҙ эскән йылғаның һыуы бал шәрбәте кеүек саф һәм татлы. Яйыҡ йылғаһының башы булған Күк Шымай исемле ерҙән (бер көн) иртә менән атҡа атланып сығып, кисенә аттарыбыҙҙан тәшә инек һәм рустың Мәскәү исемендәге ҡалаһы ҡаршыһына сығып. Ока исемле йылғаны кистек, Баскунчак исемле ергә килдек. Уны баҫып алып сабып киткәнбеҙ. Был Баскунчаҡ ситтәрендәге бөтмәҫ тал ағастарын киҫеп күпер яһаныҡ. Рус батшаһының оҙон шинелле һалдаттарын, ҡыҫҡа шинелле майор (йәғни офицерҙарын) әсир итеп, дүрт тәгәрмәсле

кудалаҡлы* арбаға тейәп, өлкән ағайым падишаһ Ағаға (Аҡай Солтанға) ҡоллоҡҡа һәҙиә иттем мин. Рустарҙың сик ҡалаһы булған Терек әйләнәһендәге ҡала стеналарына һөжүм иттек. Эсендә мосолман аҙ, кафыр күптер тип, хәле (аттары, хайуандары, күсенеү мөмкинлектәре) булғандары Ҡырымға күсте (рус әсирлегенән ҡотолдо), фәҡәт хәле булмаған ярлылар (күсенеү мөмкинлектәре булмағандар), кафыр беҙгә нимә эшләй алһын, тип ҡалды. Ҡайтауылға (йәғни ғәскәрҙең йөгөн

ташыусы аръергадҡа) әйләнеп ҡарағанда174, үҙем хәлһеҙ, ҡеүәтһеҙ була тороп (уларҙы ҡотҡарайым тип), һәр дошманға һөжүм итеүемә үкендем".

Бында асыл ватаны Тура өлкәһе булған "Ҡаһарман" Кесе Солтан" улы Ҡәйеп Солтандың Көнбайыш Себерҙән, Туранан ҡалҡып, көнсығыш Башҡортостанда Яйыҡ йылғаһы баштарындағы Күк Шымай исемле ерҙәрҙән үтеп175, Мәскәү йүнәлешенә китеүе, Волганың уң ҡушылдығы булған Ока йылғаһына еткәндән һуң, Башҡунсаҡ исемле ергә килеүе, унан Рәсәйҙең сик ҡалаһы булған Терек ҡалаһында һуғышыуы аңлашыла... Уфа тип яҙылған һүҙҙең артынан шундуҡ "Сувыны", йәғни рус йылғаһы исеменең һүҙе килеүе был йылғаның исеме Өфө тип уйларға урын ҡалдырмай. Тирәһендә тал ҡороған Башҡунсаҡтың иһә æур урҙалағы Башҡунсаҡ булыуына шөбһә юҡ. Һәр хәлдә, Себерҙән, Яйыҡ башынан Мәскәүгә киткән был башҡорт һәм түмән ғәскәрҙәре Оканан әйләнеп, Иҙелдең ҡалмаҡтар йәшәгән тарафына юлланғандар, унан да Терекка барғандар. Был һүҙҙәрҙе һөйләгән Ҡәйеп Солтан (ҡаһарман Кесе Солтандың улы) исеме иҫкә алынған Күсем хандың юғарыла телгә алынған ейәне Абылай бине Ишемдең улы Кесе Солтан булып сыға176. Абылайҙың (Әбелхәйер, Аблайып) улы Кесе Солтан 1671 йылда яҙылған Язухиндың рапортында "башҡорт ханы" тип иҫкә алынған177. Был Кесе Солтан 1663–1667 йылдарҙа башҡорт күтәрелештәренә етәкселек иткән. Уның Дағстан һәм Кубань сәфәрҙәрендә минең ата-олатайҙарымдың бәғзеләре лә (ихтимал, Көҙән һәм Баҡы) ғәскәр сафында булғандар. Әстрхан тарафтарында йөрөгән саҡта Кесе Солтанды һәм

---

*Был һүҙҙең мәғәнәһен асыҡлап булманы. (Ә.Ю.)

уның ағаһы Абуға Солтанды Осман Төркиәһе сәйәхәтсеһе Әүлиә Челеби ҙә күргән. Рустар был һуғыштарҙа ҡалмаҡтарҙы файҙаланып еңеп сыға һәм баш күтәреүселәрҙе баҫтыра.

Бынан һуң Кесе Солтан ҡарағалпаҡтарға китә һәм ҡарағалпаҡ ханы булып танылa. Уның улы Морат Солтандың хөкөм алдында биргән яуаптарынан Кесе Солтандың Аюка ҡалмаҡ менән һуғышта 1678 йылда үлтерелеүе билдәле178. Башҡа сығанаҡтарҙа179 ошо һуғыштың 1724 йылда булыуы хаҡында яҙылһа ла, был дөрөҫ түгел. Көнбайыш Себерҙә Тубыл воеводаһының 1709 йылдың 14 майында ебәргән рапортында башҡорттарҙың етәксеһе Алдар тархандың Кесе Солтан урынына (яңылыш) "Ҡарағалпаҡтан Күсем ханды" саҡырып килтереүе хаҡында яҙылған180. Ләкин уның Морат Солтандың атаһы Кесе Солтан менән бер ниндәй ҙә мөнәсәбәте юҡ. Иҙел йылғаһының көнсығышындағы нуғайҙар, Едисандар ҙа был Кесе Солтанға буйһонған. 1664 йылда рустарға ҡаршы һуғышта уның янында 6400 нуғай ғәскәре булыуы сығанаҡтарҙан билдәләнә181. Кесе Солтан тулыһынса үҙаллылыҡҡа ынтылды, уның идараһындағы башҡорттар, рустар менән һөйләшкәндә: "Күсем хан заманында ниндәй үҙ аллы дәүләт булһаҡ, хәҙер ҙә шундай уҡ бойондороҡһоҙлоҡҡа өлгәшеү өсөн һуғышасаҡбыҙ", – тигәндәр182.

Әле иҫкә алынған Кесе Абуға дастанында "Ҡәйеп Солтан" исеме менән телгә алынған Кесе Солтан рус һалдаттарын һәм майорҙарын арбаларға тейәп алып, ағай тейеш "Батша ағайына", йәғни Абуғаға, тәҡдим итеүен һөйләй һәм уны "Аҡай Солтан" тип атай. Был иһә өлкән ағайҙы "хан" тип, кесе туғанды "ҡалғай" сифатында атап, "икәүләп король булыу"ҙы күрһәтә. Һәр хәлдә был "Аҡай Солтан" Кесе (Ҡәйеп) Солтандың өлкән ағаһы булған һәм "Аҡай" атамаһы был осраҡта бер ләҡәп. Ошо мәсьәләне ентекле аңлатҡан Кесе нуғай дастанының өҙөгө башҡорттар һәм Күсем улдарының тарихы өсөн ғәйәт ҙур әһәмиәткә эйә. Һәр хәлдә, Күсем улдары, боронғо төрк дәүләттәренең төп тәртиптәренә ярашлы рәүештә183, "икәүләп Солтан булыу" формаһында идара иткән. Әбелхәйер исемен ҡыҫҡартыбыраҡ Абылай тип әйтеү ғәҙәткә ингән. (Ҡара: Бөгөнгө Төркөстан, 318–319-сы биттәр.) Шағир асылда "Аблайыр" хандың балаһы ир Кесенең үҙе әйтер" тигән булһа кәрәк. Һуңыраҡ хан һүҙен бей һүҙенә алыштырғандар һәм бөтә был ваҡиғаға Морат Солтандың эшмәкәрлеген дә өҫтәгәндәр. Шағирҙар Абылай улы Кесе Солтандың һәм Абуғаның 1666 йылда, барса

Волга буйын ғәскәр һәм ҡалмаҡтар менән гиҙгәндән һуң, Дағстанға Терек ҡалаһына килеүен, ләкин тулы уңышҡа өлгәшә алмайынса кире ҡайтыуын икенсе бер ваҡиға менән – Кесе Солтандың улы Морат Солтандың, 1707–1708 йылдың ҡышында Теректы яулап алырға күп тә ҡалмаған саҡта яраланып, рустар ҡулына әсир төшөүе менән бергә ҡушҡандар.

Мәмләкәтебеҙҙә "Кесе Солтан" заманынан ҡалған бер нисә шәжәрә Асҡар ауылында йәшәүсе Һиҙиәт суфый исемле затта була торғайны. Советтар заманында быңдай ҡағыҙҙарҙың береһе – Кесе Солтандың Бөрйәндәге Татлыбай исемле бейгә биргән ярлығы – "Башҡортостан Йөмһүриәте тарихына ҡараған материалдар" китабында (Материалы Башк., I, 180-се бит) нәшер ителде. Тик ғәрәпсә яҡшы уҡый алмаған кеше тарафынан күсерелгән был фармандың мәғәнәһе шул: "Йыраҡ йуртдин яҡын күңгил бирле мен Султан сөзим ол турур: "Тейчинден келсе өз атам, ол тиймес, Ишиммет келсе тиймесин, бу халайыҡҡа тиймесин. Ат алса тилеб (бәлки, түләп, йәғни аҡсаһын биреп) алсын, күч этмесүнлер. Бу Татлыбайға, Эллүв ағасы Хафиз ҡолум ҡойдум", "Атам килһә" тигәне бей, бәлки, ҡалмаҡ бейе Дайчын Тайшалыр, ә "Ишиммет", йәғни Ишмөхәммәт тигәне – Кесе Солтан янында йөрөгән бейҙәрҙән. Ғәмәлдә, был ҡағыҙҙа уларҙың халыҡтан мәжбүри рәүештә ат алырға хаҡтары булыуы хаҡында әйтелә. Татлыбай – түңгәүер башҡорттарынан, Кесе Солтанға яҡын кеше. Нәҫелдәштәре Татлыбаевтар мин Башҡортостанда саҡта ла бар ине. Бында яҙылған фарман "илле башы" дәрәжәһендә булған Хафиз исеменән белдерелә, фарманға мөһөр баҫылған. Ишмәмәт бейҙең Кесе Солтанға ҡараған башҡа яҙыуҙары ла осрай (шул уҡ том, 37-се бит).

## §24 Сәйет баһадир

Күсем улдарының, Сыңғыҙ нәҫелдәренән булған Ҡырым хандары менән берлектә милли хәрәкәт булдырып, төрки халыҡтарҙы рус хакимиәтенән азат итеү маҡсатында Башҡортостанда күргән хәстәрлегенең һөҙөмтәһе өлкә ваҡиғалары кимәлендә ҡалды. Шулай ҙа, көрәш бер аҙ тынысланыуға ҡарамаҫтан, башҡорттар юғарыла иҫкә алынған Садыр улы Сәйет баһадир етәкселегендә яңынан күтәрелде. Был күтәрелеш Төркиә һәм Ҡырымдың Рәсәйгә ҡаршы яуҙары менән бер ваҡытҡа тура килеүе йәһәтенән әһәмиәткә эйә. Сәйет баһадир нуғайҙар һәм бер төркөм ҡалмаҡтар менән берләшә, бынан тыш, ҡаҙаҡ-ҡырғыҙҙарҙың ярҙамына ла өлгәшә. Рустар үҙҙәренә яҡын йәшәгән башҡорттарға ҡорал яһауҙы 1675 йылда уҡ тыйһалар ҙа, талаптарын тулыһынса тормошҡа ашыра алманылар. Истамбул хөкүмәте, электән үҙ ҡул аҫтындағы Запорожье (Украина) казактарының Мәскәү тарафына ауышыуы сәбәпле уларҙы һынап ҡарау һәм Өзи (Үзи?) йылғаһы буйында төрөк хакимиәтен һаҡлап ҡалыу маҡсатында, казактарҙың үҙәге булған Чиһиринды (русса Чигирин) баҫып алыу өсөн бөйөк вәзир Мезифоглу Ҡара Мостафа паша етәкселегендә ҙур ғәскәр ебәрҙе. Мәскәү батшаһы был ваҡытта үҙ ҡул аҫтында булған мосолмандарҙы ғәскәренә ҡушты. Осман тарихсылары "Ҡырҡ дүрт тайфа"* тип атаған һәм күпселеге ҡәүем исемдәрен ҡабатлаған был ғәскәри төркөмдәр түбәндәгеләр: Тура татары, Искер (Тубыл) татары, Чөмүкәй татары, Төмән татары, Себер халҡы, Минзәлә халҡы исемдәре менән билдәләнгән Көнбайыш Себер татарҙары; Ҡазан татары, Алатар (алатыр) татары, Салатыр** татары, Бойлуҡ татары, Зуйег татары тип аталған урта Иҙел төрктәре; Ҡасим татары, Мангырман татары, Күнфәк татары исемдәре менән иҫкә алынған Ҡасим татарҙары; мишәрҙәр, нуғайҙарҙың "Заман (һәр хәлдә Едисан) нуғайҙары" тип аталған төркөмө менән бер нисә мең ҡалмаҡ татары184, Тургаут ҡалмағы һәм Турин ҡалмағы, ошо "ҡалмаҡ татарҙарының башлығы булған Ҡасбулат исемле кафыр" иҫкә алына. Былар Рәсәй хакимлығын ҡабул иткән һәм уға ғәскәр биргән мосолмандар. Шулай уҡ рус сығанаҡтарында черкестар рәйесе Ҡазбулат мырҙа Мотсаловтың был сәфәрҙә рус ғәскәре сафында

---

*Ырыу мәғәнәһендә. (Ә.Ю.)

**Балатыр? (Ә.Ю.)

булыуы хаҡында хәбәр итеlә185. Черкес бейе. Был шәхес рус хеҙмәтендә булып, Разинға һәм Ҡырым хандарына ҡаршы хәрәкәттә ҡатнашҡан186.

Осман ғәскәре, Чигиринды 33 көн ҡамауҙа тотҡандан һуң, 1678 йылдың 11 авгусында яулап алып емерә. Чигирин һуғышында рустар тарафында башҡорттар булмай, сөнки улар был мәлде рустарға ғәскәр бирмәйҙәр ине. Ҡырым хандары менән Төркиә тәьҫире арҡаһында булһа кәрәк, ул саҡта башҡорт илендә көрәш ҡырҡыулашҡайны. 1677 йылда башҡорттар, Аят ҡасабаһы (Аятская слобода) исемле ерҙә йыйылып, русҡа ҡаршы тупланмаҡта ине. 1678 йылда азатлыҡ хәрәкәте бөтә Кама, хатта Чардын виләйәтенә тиклем йәйелде. Был йылда тотош көньяҡ Башҡортостандан рустар ҡыуып сығарылды. Төрөктәрҙең һәм Ҡырымдарҙың Чигиринға ҡаршы һөжүме баш күтәреүселәргә дәрт бирҙе. Башҡорттар 1679 йылда бер үк ваҡытта Кама буйында Көңгөр һәм урта Иҙелдә Сембер (Симбирск) ҡалаларын ҡамауҙа тотто. Соловьев файҙаланған сығанаҡтарҙан күренеүенсә, башҡорттар, Семберҙе ҡамауға алғас, рустарға шундай һүҙҙәр әйткән: "Чигиринда төрөктәр менән ҡырымдар рус батшаһы ғәскәрен еңеп тарҡатҡан, беҙ ҙә һеҙгә ҡаршы һуғышабыҙ, сөнки беҙ улар менән бәйләнештә, динебеҙ һәм йәнебеҙ улар (төрөктәр һәм ҡырымдар) менән бер"187. Шул уҡ йылдың 15 декабрендә Көңгөр түбәнендәге Арйе исемле татар ауылына килгән башҡорттар унда осраған рустарға былай тигән: "Йәйен беҙ килеп Көңгөр һәм Себерҙе һеҙ рустарҙан алырбыҙ. Чигиринды төрөктәр менән ҡырымдар алған һәм рус ғәскәрен юҡ иткән. Беҙ төрөктәр һәм ҡырымдар менән бер милләт. Төрөктәр Чигиринда һуғышһа, башҡорттар менән татарҙар ҙа Себерҙә һеҙ рустарға ҡаршы һуғышырбыҙ". Был хәбәрҙе батша хөкүмәтенә еткереүсе рус хеҙмәткәре Арапов, башҡорттар Көңгөрҙәге татарҙарҙы берләшергә саҡыра, тип аңлатҡан. Ул шулай уҡ башҡорттарҙың йәй һуғышыу өсөн ат һимертеүҙәре, мылтыҡ һәм башҡа ҡоралдарының күплеге, хатта һәр кешенең бер мылтығы һәм револьверы булыуы, ул ваҡытта "Себер ҡасабалары" тип йөрөтөлгән Пермь, Чарын һәм Соликам ҡасабаларындағы рустарҙы яҡлау өсөн уларға ҡорал таратыу зарурлығы хаҡында хәбәр итә.

Башҡорттарҙың азатлыҡ хәрәкәте киңәйеү өҫтөндә ине. Уларға татарҙар ҙа ярҙам итте. Соловьев әйтеүенсә: "Барса башҡорттар һәм татарҙар аттарын тәрбиәләй, уҡ-һаҙаҡ әҙерләй, тигән хәбәр килде. Унан һуң, татарҙар һәм ҡаҙаҡтар менән бергә килеп, Көңгөр ҡалаһын баҫып алып үртәнеләр"188. Төньяҡ башҡорттарға ҡорал, бәлки, Аҡ диңгеҙ* буйҙарынан килгәндер. 1680 йылда ҡалмаҡ ханы Аюка Ҡырым ханы менән солох төҙөнө һәм Өфө башҡорттары менән килеште, улар бергәләп Һамарҙы яулап алырға ниәтләнеләр. Июлдең 30-да 3000 татар (нуғай), ҡалмаҡ һәм черкес Пенза тирәһендәге рус ҡасабаларын үртәне. Башҡорттар ҙа Иҙелдең көнбайышына сыҡты. 1681 йылда Тубыл тарафындағы рустар ҡурҡыныс аҫтында ҡалды. Сөнки башҡорттарҙың барыһы ла күтәрелгәйне189. "Башҡортар 1682 йылда Нуғай юлындағы Суртанлы күл янында ҡоролтайға йыйылды. Ҡалмаҡ ханы Аюка

һәм Абуға улы Дудибәк 40 000 тирәһе ҡалмаҡ ғәскәре менән

башҡорттарға ярҙамға килде190. Ер эшкәртеү менән мәшғүл булған татарҙар, сыуаш һәм сирмештәр, был һуғыштарҙан зыян күргәнлектән, рустар яҡлы ине, шунлыҡтан башҡорт һәм ҡалмаҡтарҙың һөжүме аҫтында ҡалдылар. Шул уҡ ваҡытта "Өфө татарҙары" тип йөрөтөлгән Өфө янындағы "төмән татарҙары" (йәғни борондан хандар заманында ғәскәр сафындағы төмән-бүҙәк татарҙары) менән Көнбайыш Себерҙең "төмән татарҙары" башҡорт күтәрелешенә ҡушылды"191.

1683 йылда рустар ҙур көс менән килеп, ҡалмаҡтарҙы үҙ яғына ауҙарырға иреште һәм хәрәкәт баҫтырылды. Был азатлыҡ көрәшенә 23 йыл буйы етәкселек иткән Сәйет Баһадир (Сәйет Жафер) үҙе ҡаҙаҡ-ҡырғыҙ илдәренә күсеп йәшеренгән булһа кәрәк, сөнки уның улы һуңғыраҡҡы башҡорт болаларында ҡаҙаҡ иленән килеп ҡатнашҡан192.

*Урта диңгеҙ.

§25 Күсем Аҡай менән Алдар тархан күтәрелеше (1705–1741 йылдар)

Рәсәйҙең эске һәм тышҡы ҡыйынлыҡтарынан файҙаланырға әҙер генә торған башҡорттар Бөйөк Петрҙың эске һәм тышҡы һуғыштарынан да файҙаланмай ҡалманы. Үҙ-ара ла даулашырға тура килгән ҡалмаҡтар менән берләшеп, улар 1705–1709 йылдарҙа рус вилайәттәренә һөжүм иттеләр. Тәүҙә баш күтәреүселәр урта Иҙелдең көнсығышындағы Һамар һәм Кама йылғалары араһындағы барлыҡ рус ҡасаба һәм ауылдарын баҫып алып емерҙе йәки үртәне. Ҡалмаҡтарҙың көньяҡ башҡорттар менән дөйөм ҡарарғаһтары (идара үҙәктәре) хәҙерге Бүкәй урҙаһының төньяғындағы Үҙән, Кесе һәм Оло Ырғыҙ йылғалары араһында була193. Үҙән буйындағы башҡорттарға бәйле бер сығанаҡты үрҙә иҫкә алғайныҡ инде. Уларға яҡын Кәмәлек башҡорттары әле лә үҙ ерҙәрендә ғүмер итә. Ырғыҙ һәм Кәмәлек буйын төйәк иткән башҡорттар, ҡалмаҡтар менән бергә Иҙелдең көнбайышына сығып, ундағы рус ауылдарын һәм ҡасабаларҙы баҫып алып, кешеләрен әсир төшөрөп, Хиуа баҙарҙарына килтереп һатыр була. Рус һөжүменән башҡорттар Кәмәлек буйында ҡарауыл ҡуйып һаҡланғандар. Ул хаҡтағы риүәйәттәр кәмәлек башҡорттары араһында әле лә йәшәй. "Кәмәлек" исемле киң билдәле башҡорт йыры сығышы менән шул заманға ҡарай булһа кәрәк. Һарытау ҡалаһы тирәһендәге рус ауылдары һәм ҡасабалары башҡорт менән ҡалмаҡтарҙың һөжүмен күп татый. Башҡорттар менән берлектә яу сапҡан ҡалмаҡ ханы Аюка 1708 йылда Пенза һәм Тамбов вилайәттәрендәге 100-ҙән артыҡ рус ауылын яндырҙы. Башҡорттар менән бергә Аюканың был хәрәкәте Петрҙың Швеция короле Тимербаш Шарл* менән һуғыш алып барыуынан файҙаланыу маҡсатында башлана. Аюка мосолман башҡорт һәм нуғайҙарҙан Истамбулға илселәр ебәреп, Осман дәүләтенән ярҙам алырға, һис юғында рухи теләктәшлеккә ирешергә ынтыла. Петр 1707 йылда А. Сергеев исемле бер воеводаны ҙур ғәскәри ҡеүәт менән Өфөгә ебәрә. Сергеев башҡорт бейҙәрен саҡырып, ҡурҡытырға тырыша һәм Рәсәй хөкүмәтенең эшен тағы ла мөшкөлләндерә. Башҡорттар Сергеевҡа уның янауҙарынан ҡурҡмауҙарын белдерә. Был воевода Петр мәмлкәтенән ҡасып башҡорт илендә йәшеренгән 1000 ҡасҡындың тотоп бирелеүен, рус ғәскәре өсөн 500 ат тапшырылыуын талап итә. Сергеев Өфөгә башҡорт бейҙәрен, батырҙарын, тархандарын йыйып, ике яғынан туптар, ҡоралллы ғәскәрҙәр теҙеп, саҡырылғандарҙы тере коридор аша үткәреп, Рәсәйҙең ҡеүәтен күрһәтеп маташа. Бының менән дә ҡәнәғәтләнмәйенсә, бер төркөм рус ғәскәре менән Өфөгә яҡын башҡорт улустарында йөрөп, Рәсәй батшаһының ҡөҙрәтен һәм ҡеүәтен күрһәтергә була. "Башҡорттар һәм башҡа яһаҡлылар", Сергеев ғәскәре яҡынлашыу менән, йорттарын ташлап, бала-сағалары менән тау-урмандарға ҡаса. Өфөгә килгән башҡорт күренеклеләренә көсләп араҡы эсереү менән дә үҙ көсөн күрһәтергә ынтыла194. Былдай яуызлыҡтарға башҡорттар түҙеп тора алмай, Алдар Исек улы һәм Күсем Аҡай етәкселегендә баш күтәрә. Маҡсаттары – Рәсәйҙән тамам айырылып, яңынан үҙаллылыҡҡа өлгәшеү195.

Батша тарафынан көнсығыштан ебәрелгән ваҡ көстәрҙе баш күтәреүселәр тар-мар ҡылды. Күсем башлыса төньяҡтағы башҡорттар араһында, Уса юлы, йәғни Өфө һәм Пермь тирәһендәге башҡорттар араһында эш итә. Адлар тархан иһә Нуғай юлы башҡорттарын күтәрҙе. "Ҡазан юлы" башҡорттары менән Исмәғил исемле берәү етәкселек итә. Рустар боласылар менән бер нисә йыл буйына мәшғүл була. Баш күтәреүселәр Ағиҙел, Кама (Сулман), Һамар йылғалары буйына һалынған рус ауылдарын тулыһынса яндыра һәм бер нисә ерҙә кешеләрен үлтерә, йә иһә әсир итеп

Хиуаға алып барып һата. Улар Рәсәй губернаһы үҙәге булған Ҡазанды баҫып алырға ниәтләнәләр. Ҡалаға 30 саҡрым ҡалғас, Тиле** Петр батшаның генерал-губернаторы Кудрявцев башҡорттарға һәм "Өфө татарҙары"на ҡалмаҡтарҙан һөжүм иттерҙе. "Ҡазан виләйәте яһаҡлылары" тип аталған ғәскәри крәҫтиәндәр синыфы ла тулыһынса баш күтәреүселәр ғында ине196. Сыуаштар ҙа уларға ҡушылды. Ҡазандарҙан бәғзе мырҙалар, сауҙагәр һәм ваҡ кибетселәр даирәһе рус яҡлы

---

*Швед короле Карл XII.

**Был һүҙ, Петр I-нең эпилепсия ауырыуына ишара итеп, төрөктәр биргән ҡушамат.

булды, һәм Ишбулат мулла исемле берәү етәкселегендә татар ғәскәри төркөмдәре рус ғәскәренә ҡушылып, баш күтәреүселәргә ҡаршы аяуһыҙ һуғыша башланы. Ҡалмаҡтарҙан да 20000-гә ҡәҙәр (ике төмән) көс Башҡортостанға инеп, төрлө башҡорт ҡәбиләләрен баҫып алып таланы. Был күтәрелештәргә ҡараған архив ҡағыҙҙарын тикшергән рус тарихсыһы Н. Поповтың197 һәм Н. Фирсовтың198 аңлатҡандары түбәндәгесә: Күсем йәки Күсмәт* асыл ватаны булған Тамъяндан сығып, Себерҙәге башҡорттарҙы үҙ тирәһенә туплап, Пермь виләйәтендә Уса юлы башҡорттары араһында хәрәкәт итә башлаған. Һәр хәлдә, ул Көнбайыш Себер тарафынан килгән. Ваҡиғаларға ҡағылышлы рус һәм төрки сығанаҡтарын ентекле тикшереүҙән күренеүенсә, Күсем (Күсмәт Аҡай) сығышы буйынса Күсем хан тирәһендәге көнсығыш Башҡортостан йәиһә төркмән татар бейҙәренән булһа кәрәк. 1738–1741 йылдарҙа ҙур күтәрелеш менән етәкселек иткән Күсем улы Аҡай тураһында фекер йөрөткәндә, уның элгәререкке ҙур күтәрелеш етәксеһе булған Күсемдең улы булыуы сығанаҡтарҙан күренә199.

Күсемдең атаһы Түләкәй исемле була. Ул Уралдың көнсығышындағы Тамъян улусында200 донъя ҡуйған. Аҡай менән Күсемдең сығышы буйынса башҡорт булмай, татар булыуын201 күрһәткән дәлилдәр бар. Ләкин Ҡыпсаҡ, Тамъян, Бөрйән, Пежаҡ (йәғни Бабсаҡ), Оран, Ҡаршын, Гәрәй, Суран кеүек башҡорт ырыуҙары – улар өсөн үлергә лә әҙер булған ҡәбиләләр202.

Һәр хәлдә, күтәрелештең иң тәүге яуаплы етәксеһе ошо Күсем була. Алдар йәки Алдар тархан иһә – был ваҡиғаларҙан 30 йыл һуңыраҡ ҡупҡан азатлыҡ хәрәкәтендә лә ҡатнашып, рустар ҡулына эләгеп, Минзәләлә язаланған Алдар тархандың үҙе инде. Алдарҙың атаһы Исәкәй, уның атаһы Ҡадирбаҡы, уның атаһы Байбаҡты – Бөрйән ырыуы әшрәфтәренән. Алдар һуңыраҡ Бөйөк Петрға итәғәт ҡабул итеп, ғәскәрендә ҡатнаширға мәжбүр була һәм батшаның Азаҡ ҡалаһына ҡаршы һөжүмендә ҡатнаша. Унда ла батырлыҡ

---

*Күсмөхәммәт (?)

өлгөһө күрһәтергә тырышҡан, биш черкес бейе менән бергә-бер ҡаршы һуғышып еңгәндән һуң, ғәскәри дәрәжә алған мажаралы яҙмыш эйәһе ул. Шул айҡанлы юғалып ҡалған боронғо тарханлыҡ ҡағыҙын 1734 йылда яңыртҡан203. Был заттың көньяҡ-көнсығыш башҡорттар араһындағы киң йоғонтоһонан файҙаланыу маҡсатында, рустар уның төрлө заманда үҙҙәренә ҡаршы күтәрелеп, ауыл һәм ҡасабаларын баҫып алып, талап, емереп йөрөүе, кешеләрен үлтереүе хаҡында иҫкә алмаҫҡа тырыша.

§26 Морат Солтан хәрәкәте

Күренеүенсә, был Солтан Ҡырым һәм Осман дәүләттәре менән үҙ мәмләкәте араһында – Дон һәм Терек буйҙарында – рус ҡәлғәләре төҙөлөү уның мәнфәғәтенә ярашлы булмауын яҡшы аңлап, быға ҡаршы сыҡҡан. Рус сығанаҡтары ул саҡта башҡорттарҙың ҡалмаҡтар менән берлектә Төньяҡ Кавказдағы рус ҡалаларына һөжүм итеүе хаҡында һөйләй. Петр үҙ ҡарамағындағы мосолмандарҙан ғәскәр йыя. Рус хакимлығындағы көнбайыш һәм көнсығыш башҡорттарҙан тупланған ғәскәрҙе батша Балтик буйындағы һуғыштарҙа файҙалана. Төркиәгә ҡаршы һуғыштарҙа иһә, башҡорттарға ышанмағанлыҡтан, ғәскәренә айырым кешеләрҙе генә ала. Рустар Башҡортостанда мәғдән фабрикалары ҡорҙора башлай. Петр был эштәргә Татищевты вазифаландыра. Ул Исәт йылғаһы буйында рус ҡасабалары һәм һуңыраҡ Екатеринбург исемен алған (хәҙер Свердловск) ҡала урынында Уктус заводын төҙөй һәм унда тау, мәғдән эштәре инженерҙары әҙерләү мәктәбе аса. Татищев үҙ сәйәсәтен башҡорттарға ҡарата яҡшы мөнәсәбәт юлында алып барҙы. Тиле Петрҙың һәм уның ярандарының айырыуса сит ил эштәре мөшкөл замандарҙа үткәргән хәйләле-мөләйем сәйәсәте башҡорттарҙы алдай алманы. Күсем хан улдарынан булған Морат Солтан исемле бер шаһзада етәкселегендә улар йәнә баш күтәрҙеләр. Был Солтан рус сығанаҡтарында "Морат Солтан" йәки "Мөҡәддәс Солтан", йә иһә тик "Солтан" исеме менән телгә алына. Ул Ҡырым һәм Төркиәгә барып, бәйләнеш урынлаштыра. Шулай уҡ ҡалмаҡ ханы Сивен Рабтан янында булып, Ҡытай, Тибет һәм Азия мәсьәләләре буйынса ла мәғлүмәт туплай. Ләкин бөтә уйы Кесе хандың мәмләкәте булған Башҡортостанда була. Ҡасып Башҡортостанға килә һәм атаһынан ҡалған йәйләүҙәрҙә ҡала. Башҡортостанға килгәс, был ил менән Ҡырым араһындағы, бигерәк тә Дағстандағы хәлдәрҙе белә. Осман тарихсыһы Сәләхдараға (Носратнамә Маниса нөсхәһе, V т., 88) шул ваҡытта нуғайҙарҙан 10 000 һәм нуғайлыларҙан 2000 ғаиләнең, "ҡалмаҡ араһынан сығып", черкес тарафтарына китеүе һәм Едисан нуғайҙарының "Солтан Морат мырҙа менән" берлектә шулай уҡ Дағстанға китеүе хаҡында яҙа. Бында "мырҙа" тип аталған Морат Солтан, ихтимал, беҙ һүҙ алып барған Морат Солтандыр. Был тәңгәлдә Осман тарихсыһының "нуғай" янында "нуғайлы" һүҙен ҡулланыуы ҡыҙыҡлы. Ҡаҙаҡтар ҙа уларҙың икеһен айырып телгә ала. "Нуғайлы" тип бары тик Волганың көнсығышындағы "Оло нуғай" өлкәһендәге нуғай һәм ҡаҙаҡтар, башҡа ҡыпсаҡ ҡатыш төркөмдәрҙе атайҙар. Ихтимал, был "Солтан Морат мырҙа" башҡа бер шәхестер, йәғни Едисан мырҙаһылыр. Һәр хәлдә бөтә был ваҡиғалар беҙҙең Солтан бине Кесене ҡыҙыҡһындырған. Уның Истамбулға сәйәхәт хикәйәһен рус тарихсыһы Соловьевтан һәм Морат Солтандың үҙенән белә алабыҙ.

Соловьев уның хаҡында былай ти: 1707 йылда бер Өфө башҡорто, "Солтан" исеме алып, Истамбул һәм Ҡырымға барҙы, үҙ диндәштәренән ярҙам һораны. Бынан һуң ул Кубань вилайәтенә, чечен, мичнис, аҡсайҙарға барып, үҙен бер мөҡәддәс шәхсиәт һәм башҡорттарҙың солтаны тип танытып, уларҙы үҙенә йәлеп итте. Таулылар уны үҙҙәренең хакимы итеп иғлан ҡылды. Ара-тирә уға ҡумыҡтар һәм Әстрхан казактары (йәки боронғо раскольниктар), Теректағы күсмә "окачен"дар һәм татарҙар ҡушылды. Был мөҡәддәс Солтан, шул ҡәүемдәрҙе үҙ тирәһенә туплап, 1708 йылдың 12 февралендә Терек ҡалаһына яҡынлаша. Уның янындағы ҡасабаларҙы һәм төрмәне үртәй. Терек воеводаһы Роман Вельяминов, байтаҡ ваҡыт ҡаршылыҡ күрһәткәндән һуң, юғары ҡалаға сигенде, унда ла ҡамауға алынды. Әстрхан воеводаһы Апраксин ҡамауҙа ҡалыусыларға ярҙамға Терекка диңгеҙ аша 1200 һалдат (йәғни регуляр ғәскәр), ҡоро юлдан рустарға тоғро татарҙарҙан бер нисә йөҙ кеше һәм 3 мең ҡалмаҡты ебәргән. 26 февралдә бөтә был ҡеүәт Терекка етеп, дошманға көтмәгәндә һөжүм яһап, тар-мар итте. Солтан үҙе һуғышта яраланды һәм әсир ителде204.

Әсир ителгәндән һуң Әстрханға алып киленгән һәм Ҡазанда язаланған Морат Солтандың Әстрханда һорау алғандағы яуаптары был ваҡиғаларҙы бөтә ентеклелеге менән аңлата205. Ул былай ти: "Атайым ҡарағалпаҡ, ҡырғыҙ һәм башҡорттарҙың ханы

булған Кесе хан ине. Ул бынан 30 йыл элек (йәғни 1678 йылда) ҡалмаҡ ханы Аюка менән һуғышта Грежун тирәһендә үлде. Һуңынан ағайым Ишем Солтан хан булды. Икенсе ағайым Ибраһим Солтан Ҡалмаҡ ханы Сивен Рабтандың янында ине. Атайым үлгәндән һуң 20 йыл үткәс (йәғни 1698 йылда), Өфө янында атайымдың милке булған Башҡортостандан Бечин һәм башҡалар килеп, мине Башҡортостанда "Солтан" булырға үҙ мәмләкәттәренә саҡырҙылар, һәм мин был тәкдимде ҡабул иттем. Яйыҡ башына килдем. Ул тирә атайым биләмәһе ине. Унда 3 ай йәшәнем. Бынан әүәл башҡорттарҙа минең әҡрәбәм (йәғни Күсем улдарынан булған) Сунчәләй Солтан хакимдар (владелец) ине. Уны рустар әсир итте. Мин дә бындағы башҡорттарҙы Ҡырым ханының ҡул аҫтына индереү өсөн имзалар туплап, үҙем 2000-гә ҡәҙәр башҡорт менән Ҡырымға йүнәлдем. Ләкин юлда артабан уларҙан тик 50 һаҡсы алып китергә ҡарар ҡылдым. Иҙел йылғаһын Царицын менән "Ҡара яр" араһында кисергә тейеш инек. Унда ла һаҡсыларҙан 42-һен йылғаның көнсығыш ярында ҡалдырып, 8 кеше менән Кубанға киттем. Бында мин Едисан нуғайҙарының мырҙаһы Аллағыуат мырҙаға башҡорттарҙың минең хан улы икәнемде, уларға солтан булыуымды белдергән хатын бирҙем. Һуңыраҡ, Ҡырымға барып, ханды күрҙем һәм башҡорттарҙың үҙ хакимлығына ҡабул итеүҙе һорап яҙған үтенеү ҡағыҙҙарын тапшырҙым. Рустар менән килешеүебеҙ бар, һеҙҙе үҙ хакимлығыбыҙға ҡабул итмәйбеҙ, Истамбулға падишаһҡа барығыҙ, тине. Уның янында 8 көн булғандан һуң, Исбамбулға киттем. Вәзире Мәхмүт Паша мине падишаһ менән күрештерергә теләмәне. Шулай ҙа падишаһ яҡындарының береһе ярҙамында уның ҡулына ғаризамды тапшырҙым. Падишаһ ҡабул итте һәм миңә 2000 левге (флорин) менән ярҙам бирҙе. Беҙгә булышлыҡ күрһәтеү бурысын Ҡырым ханына йөкмәтте. Ай ярым ваҡыт унда булғандан һуң, Ҡырымға кире ҡайтарҙы. Ләкин Ҡырым ханы падишаһтың әмерен тыңламаны. 2 ай үткәс, яныма һаҡсылар биреп, Кубанға ебәрҙе. Ҡыш айында шунда килдем. Кубандарҙы Башҡортостандағы русҡа ҡаршы һуғышҡа ҡушылырға өндәп ышандырҙым. Һуғыш башламағанда ла, рус ҡалаларын баҫып алырһығыҙ, тинем. Уларҙың мырҙаларынан һәм ғәскәрҙәренән 96 кеше алып, Царицын менән Ҡара яр араһында Иҙелде боҙ аша сығырға йыйынған мәлдә беҙгә әсир төшкән ҡалмаҡтан ҡаршы ярҙа батшаның хәрби етәкселәренән Шереметев ғәскәр менән тороуын белдек һәм Кубанға кире боролдоҡ. Унан да 8 башҡорт һәм 22 татар менән Кабардаға, унда 4 көн булғандан һуң, чечендарға килдек. Хан улы булыуымды белгәс, ундағы нуғайҙар, чечендар, кумурҙар, черкестар яныма тупландылар. Терек ҡалаһын ҡамарға ҡарар иттек. Аюка ла һеҙҙең яҡлы булғанлыҡтан уға ла һөжүм итергә булдыҡ. Мәгәр Иҙел йылғаһының өҫкө яғына буйлаған төркөм сифатында хәрәкәт итеп, 1600 кеше менән Терек ҡалаһын яуланыҡ, 10 туп ғәнимәт* алдыҡ. Рустар кремлгә, йәғни эске нығытмаға, сигенде. Черкес бейе Дивей русҡа һатылды. Эске ҡаланы 10 көн ҡамауҙа тоттоҡ. Әммә ҡамау барышында окоп һәм траншеяларҙы 10 кеше менән бергә тәфтишләгән саҡта, рустар ҡапыл һөжүм итте һәм мине мылтыҡтан атып яраланы. Бынан һуңғы хәлемде белмәйем"206.

Морат Солтан һуңыраҡ Ғәйеп (йә иһә Ҡәйеп) Солтан исеме менән билдәле булды. Был һүҙҙең солтандың үлмәүенә, тик ғәйеп булып, әруахтар сафына инеүенә һәм ҡайтанан кире килеүенә инаныу билгеһе тип ышанам. Һуңынан ошо исем ҡаҙаҡ хандарының һәм Күсем улдарының бәғзеләренә бирелде. Үзбәктәрҙән Абдрахман исемле береһе, мин Ҡәйеп Морат Солтан, тип уның исеменән ҡайһы бер хәрәкәттәргә етәкселек иткән. Һәр хәлдә, Морат халыҡ араһында бик һөйөклө бер зат була. Атаһы Кесе Солтан хаҡындағы алдараҡ телгә алған дастан өҙөгөндә һүҙ асылда ошо Морат хаҡында бара. Әммә атаһына ҡараған хәтирәләр менән бергә ҡушылып китә. 1937 йылда нәшер ителгән "1705–1711 йылдарҙағы

---

*Трофей.

башҡорт күтәрелеше" исемле әҫәрендә был солтандың тормошон һәйбәт аңлатҡан рус тарихсыһы В.И. Лебедев207 Моратты хөкөмгә тарттырыу айҡанлы уның яуҙаштарынан да һорау алыу һөҙөмтәһендә тупланған мәғлүмәттәрҙән дә

файҙаланған. Ул биргән мәғлүмәттең ҡыҫҡаса асылы шул: башҡорттар Кесе Солтандың улы Морат Солтанды хан тип иғлан итте. Атаһы Кесе Солтан ҡалмаҡ ханы Аюка менән һуғышта һәләк булғас, ағаһы Ишем (йәғни Жувек бине Дәүләт Гәрәй) хан булды. Мораттың ағаһының улы алаш* Ибраһим Солтан ҡалмаҡ хандары янында ине. Ҡайһы саҡта Башҡортостанға килеп, ундағы ваҡиғаларға ҡатнашты. Рустар уны Овзан ти торғайнылар. Уның кәңәше буйынса Морат та ҡалмаҡ ханы Сивен Рабтанға китте. Һуңыраҡ башҡорттар Моратты үҙҙәренә саҡырып хан иттеләр. Ул, эште яйға һалыу өсөн ситтән ярҙам тәьмин итергә теләп, Ҡырымға һәм Истамбулға барҙы. Төркиә Солтаны (Өсөнсө Әхмәт) уны ҡабул итеп, халат һәм 2000 флорин бүләк иткәндән һуң, Төркиәнең ҡайтышлай, Ҡырымдан Кубанға килеп, үҙенә бирелгән 96 кеше менән бергә Башҡортостанға йүнәлде. Ләкин Петр тара-

фынан башҡорт күтәрелешен баҫтырыу өсөн ебәрелгән кенәз Шереметев уның ҡаршыһына сыҡты. Ташлы Яр (Каменный Яр) исемле ерҙә Волганан кире әйләнеп, йәнә Кубанға килде. 1708 йылдың 12 февралендә Терек ҡалаһын һәм уның нығытмаһын ҡамауға алды. Әстрхан виләйәтенән диңгеҙ юлы менән ебәрелгән 1200 кешелек ғәскәр Терек ҡалаһын һаҡлаусыларға ярҙамға етеште. Улар менән һуғышҡан саҡта 28 февралдә Солтан яраланып әсир төштө. Ошо һуғышта Дон казагы Булавин кешеләре лә Морат менән бергә ине208. Был ваҡиғалар үҙәгендә бөрйән башҡорттарының баш хәрби етәксеһе Алдар тархан менән тамъяндан Күсем батыр торҙо. Морат Солтан үлгәндән һуң батша бында Хохлов етәкселегендәге ҙур ғәскәр ебәрҙе. Башҡорттар был ғәскәрҙе еңеп тар-мар итте.

Дон казактарының батшаға ҡаршы бола күтәргән башлығы Булавин башҡорттарҙың союздашы ине209. Был хаҡта мәғлүмәттәр Татарстан һәм Ҡарағалпаҡстан

---

*Һылыу

йөмһүриәттәре тарихы хаҡындағы "Материалдар"ҙа ла нәшер

ителде. Кубань нуғайҙары, бигерәк тә Едисандар, башҡорттарҙың союздашы булды. 1707 йылдың декабрь айында уҡ (йәғни Морат Солтан Ҡырым һәм Төркиәгә сәйәхәт иткән дәүерҙә) башҡорттар, Кубанға кешеләр ебәреп, уларҙың улусында булған ханзадаларҙың береһен үҙҙәренә хан итеп ебәреүҙәрен үтенделәр. Мораттың үлеү хәбре килеү менән, Алдар тархан ҡарағалпаҡтар менән һөйләшеү башланы. Улар ҙа, Башҡортостандың Нуғай юлы яғына кидеп, Юрматы башҡорттары илендә ҡала торған булғандар. Бында Хузей Солтан исемле берәүҙе алып килгәндәр. Башҡорттар уны үҙҙәренә хан итеп иғлан иткән. Был зат халыҡ һәм бейҙәр менән һөйләшкәндән һуң рус хәрби етәкселәренә: "Был тирә мосолман мәмләкәте, Ҡазан–Шағали хан, Өфө Гәрәй (йәғни Дәүләт Гәрәй) ере, һеҙ был ерҙәрҙе баҫып алғанһығыҙ, һис кисекмәҫтән уларҙан баш тартығыҙ, юҡһа һуғышыр урынды билдәләгеҙ" тигән мәғәнәле хат ебәргән. Рустарҙың архив ҡағыҙҙары араһында был заман ваҡиғаларына ҡараған бер сығанаҡ бар:

"1700* йыл башында Күсем батыр, дүрт юлдың да күре-

неклеләре менән кәңәшләшеп, Алдар тарханға Рәсәй хөкүмәте менән солох төҙөргә тәҡдим итте һәм үҙе Ҡазан губернаторы Апраксин менән аңлашты. Хузей Солтан Урал аръяғындағы башҡорттар янында ҡалды. 1709 йылдың 23 майында хәл ошондай ине. Ул арала башҡорт ханының улы Ырыҫ Мөхәммәт килде. Улар Исәт һәм Миәс тарафындағы рус ауылы һәм ҡасабаларына һөжүм итеп, баҫып алды. Ҡалмаҡ Аюка Петр батша менән килеште, рустарға ярҙам итеп, башҡорттарға ҡаршы ғәскәр ебәрҙе. Башҡорттарҙың бер өлөшө ҡарағалпаҡтарға сигенде. 10 000 йорт яһаҡлы татар башҡорттарға ҡушылғайны. Хәҙер түләмдәрен башҡорттарға бирә башланылар, беҙгә (йәғни рустарға) бирмәйҙәр. Был һуғыш барышында 4 фин ҡәүеменән мари (сирмеш) һәм удмурттар ҙа башҡорттарға ҡушылды".

Исеме телгә алынған Хузей Солтан кем булған? Ҡарағалпаҡ солтандары араһында быңдай исем осрамай. Был Хузей ҙа,

*1709 йыл булһа кәрәк. (Ә.Ю.)

Морат Солтан кеүек үк, Дон казактарының етәксеһе Булавин менән бәйләнеш урынлаштырған. Башҡорт бейҙәре Хузейҙы Кубань тарафынан килтергәйне. Ә уның Кубань тирәһенә ҡайҙан килеүе мөмкин? Ул бында Морат килгән

яҡтарҙан, Һырдарья, Арал тарафтарынан килгән булһа кәрәк.

Үҙаллы Башҡортостан хөкүмәтенә Дон казактары үҙҙәренең автономия иғлан итеүен белдереү һәм беҙҙекен

дә тәбрикләү өсөн вәкил ебәргәйне. Беҙ ҙә яуап итеп уларға вәкил ебәргәйнек. Улар, Булавин заманындағы ваҡиғаларҙа башҡорттарҙың тоғролоғон юғары баһалап, махсус билдәләгән. Мин дә 1957 йылдың аҙағында, Нью-Йоркта Дон казактары вәкилдәре тарафынан саҡырылып, хөрмәт күрҙем. Уларҙа был боронғо хәтирә бик аныҡ һаҡланған, һәм Морат Солтандың исеме элеккеге казак тарихы ҡағыҙҙарында иҫкә алына. Һәр хәлдә, Дон казактары батшаға ҡаршы көрәштәрендә бик самими булып, Рәсәйҙән ҡотолоп үҙаллылыҡ ҡаҙаныrға теләгән башҡорт һәм ҡарағалпаҡтар менән эш берлегенә өлгәшкән. Икенсе яҡтан, рус сығанаҡтары был Хузейҙы "яңы башҡорт ханының улы" тип атай. 1708 йылда "яңы башҡорт ханы" Ҡәйеп хан ине. Ҡәйеп хан рустарға яҙған хатында Хузей хаҡында "алдан ебәргән улым" тип әйтә. Хузей – "Хужа" тигән һүҙ210. Тимәк, был Хузей – Кесе Йөҙ ҡаҙаҡ хандарының береһе. Левшинда, Ҡайып бине Тобырчык (Кирев) улы, Ҡәйеп I-нең ейәне булараҡ, "Худай Менгу Солтан" исеме менән иҫкә алына. Тимәк, Ҡырым, Төньяҡ Кавказ, Кубань тарафын Күсем улдары ғына түгел, ҡаҙаҡ хандары ла тотҡан.

Морат Солтандың бөтә көсөн Терек ҡалаһына ҡаршы йүнәлтеүендә мәғәнә ҙур. Әле Тимер менән Туҡтамыш дәүерендә үк Терек был ике хакимдар араһында булған икенсе ҙур һуғыш майҙаны булды. Әле ул заманда уҡ төрктәрҙе бер дәүләт идараһында берләштереү маҡсатына ынтылған Тимергә ҡаршы рустар үҙ полктары менән Туҡтамыш ғәскәрен яҡлап һуғышта ҡатнашҡан. Тимер уларҙы тамам тар-мар иткәс, "рус" атамаһы менән берләштереп, кеше өҫтөнән хакимлыҡ итеү форсатын эҙләүсе инсандар тип баһалаған211. Яуыз Иван Ҡазан менән Әстрханды алыр-алмаҫтан уҡ күҙен Кавказға төбәне. Черкес һәм Кабарда мырҙаларына таянып, был өлкәне хәйлә һәм интригалар, йәшерен мөнәсәбәттәр ярҙамында үҙ ҡулына төшөрөргә тырышты. Хәйлә һәм мәкер менән 1567 йылда, рус сауҙагәрҙәренең мәнфәғәттәрен яҡлау йөҙөнән, Терский городоҡ исемле бер ҡәлғә төҙөү өсөн рөхсәт алды. Ләкин Ҡырым хандары был ҡәлғәне емерттеләр. Исламлашҡан Агырхан сәфәренә бәйле рәүештә икенсе (...)* менән Иван, Ҡырым һәм Баҡара хан менән нуғай мырҙалары араһында бер нисә һуғыш булды, хатта Иван был ҡаланың ҡолауына риза булды, ләкин барыбер ҡолаттырманы. Истамбул да талап итмәне. Был хаҡтағы мәғлүмәттәрҙе проф. Акдес Нимет Курат нәшер итте. XVII быуатта был эшкә рус батшалары бик ҙур әһәмиәт биргән. Шул быуаттың беренсе яртыһында бындағы ҡумыҡ бейҙәренән Полат мырҙа менән бәйләнешкә инеп, уға күп һәҙиәләр бирҙеләр һәм сауҙагәрҙәрен һаҡлау, сауҙа мөнәсәбәттәрен үҫтереү һылтауы менән рус ғәскәрен килтерергә рөхсәт алдылар. Хөкүмәт үҙеге булған Буйнаҡтағы Дағстан шамһалдары был эшкә ул саҡта тейешле әһәмиәт бирмәне. Ҡәфәле Ибраһим кәтиб мәсьәләгә иғтибар итә. Уның әйтеүенә ҡарағанда, рустар, 1636 йылда бында Корнелиус һәм Фламанс исемле ике фламанд инженерын килтереп, ысын хәрби нығытмалар төҙөткән. 1670 йылда унда-

ғы рус (казак) ғәскәре 20 000-гә тиклем күбәйгәс, Полаттың үҙен ҡыуып ебәрәләр. Әүлиә Челеби "Муйиҡ ҡалаһы" тип атаған ҡалаға Морат Солтандың атаһы Кесе Солтан менән ағаһы Абуға ла килгән. Морат Солтан кубандар һәм дағстандар менән берлектә уны рус ҡулынан кире алырға тырышҡан ваҡытта, Дағстан шамһалы

Төркиәгә мөрәжәғәт итә. "Терек ҡалаһын рус ҡулынан мотлаҡ ҡотҡарырға кәрәк" тип, Истамбулға илсе ебәрә. Был ҡала Кавказ һәм Урта Азия мосолмандары өсөн Төркиә һәм башҡа ислам мәмләкәттәре менән бәйләнеш тотоу йәһәтенән, шулай уҡ хажға йөрөү уңайы менән кавказдар өсөн бик мөһим. Шул уҡ ваҡытта ул Төркиәнең үҙе өсөн дә әһәмиәтле булғанлыҡтан, Истамбул хөкүмәтенең дә диҡҡәтен йәлеп итте. Ысынлап та, Терек Рәсәйҙең Кавказға үтеп инеү юлында беренсе нөктә булды, мосолмандар араһындағы бәйләнештәрҙе рустар тап ошонда үҙ контроле аҫтына алды. Мосолман ҡәүеме һәм ҡәбиләләре ————

*Ҡулъяҙмала һүҙ төшөп ҡалған. (Ә.Ю.)

араһында низағ тыуҙырыу, бейҙәргә ришүәт биреү ошонан башҡарылды. Шамһалдың Төркиә хөкүмәтенә мөрәжәғәте Сәләхдарағаның Носратнамәһендә (Маниса нөсхәһе, 153-сө бит) һәм дағстанлы Чобан улдары булған шамһалдар тарихы

хаҡындағы әҫәрҙәрҙә яҙылған. Морат Солтандың Истамбулдан Терек ҡалаһына ебәрелеүенең сәбәбе лә был ҡаланың Дағстан өсөн генә түгел, ҡарағалпаҡ, Хорезм, ҡаҙаҡ һәм башҡорттар өсөн дә шундай уҡ әһәмиәткә эйә булыуында тора. Кесе Морат һәм Хузей солтандар, башҡорт хәрәкәтенең тик Ҡырым, Хорезм һәм ҡаҙаҡ хандары менән берлектә барғанда ғына уңышҡа өлгәшәсәгенә ышанғанлыҡтан, көстәрен Кубанда туплауға һәм рустарҙы Төньяҡ Кавказдан ҡыҫырыҡлап сығарыу эшенә әһәмиәт биргәндәр.

§27 Ҡәйеп хан хәрәкәте һәм тырышлыҡтары

Морат Солтандың әсир төшөүе һәм үлтерелеүе Башҡортостандағы азатлыҡ көрәшен һүрелдермәне.

Киреһенсә, үҙ башҡорттары менән бәйләнеш тотҡан был Солтанды үлтереү ваҡиғаһы бөтә Башҡортостанда яңы күтәрелеш башланыуға сәбәп булды. (Әстрхан губернаторы Апраксиндың 1708 йылдың 20 мартында ебәргән рапорты.) Морат Солтан Дағстанда саҡта Башҡортостанда икенсе бер хандың азатлыҡ хәрәкәтенә етәкселеккә килеүе аңлашыла. Соловьев былай ти: баш күтәреүселәргә бер хан етәкселек итте, уны "изге солтан" тип атайҙар ине. Был ханды тотоу өсөн 1707 йылдың 16 ноябрендә Петр Хохлов етәкселегендә 900 һалдаттан торған отряд ебәрелде. Ҡазандан да Сидор Аристов етәкселегендә 700 атлы ғәскәр ярҙамға килде. Һуғыш Йөрәктауҙа (йәғни Ағиҙел буйындағы ошо исемле тау янында) була, уның эргәһендә хандарҙың боронғо үҙәге урынлашҡан Тура тау ҙа бар. Хохловтың хеҙмәтендә батша ғәскәренә йәлеп ителгән башҡорттар ҙа булған. Улар батшаға хыянат итеп, хан тарафына күскән. Хохлов отрядынан 400 кеше хан тарафынан әсир ителде, рус ғәскәренең ҡоралдары, һуғыш кәрәк-яраҡтары тартып алынды. Хохлов үҙе 500 һалдаты менән тоҙ сығарыу заводына (хәҙерге Усолкалағы заводҡа) сигенде. Был яҡта урынлашҡан рус ауылдары тотош яндырылды. Башҡорттар (Кама буйындағы) Алабуға ҡалаһын ҡаманылар һәм Ҡазандан 200 саҡрым булған Заинский ҡалаһын үртәнеләр (1708 йылдың ғинуар айында). Башҡорттар Ҡазан татарҙарын һәм сыуаштарҙы үҙ яғына йәлеп итергә тырышты. Урал казактарына ла барып (былары ла раскольниктар ине), улар менән дә һүҙ ҡуйыштылар. Швед короленә ҡаршы һуғышҡа әҙерләнгәнлектән, Петр батша башҡорт болаһын тиҙерәк туҡтатырға бөтә көсөн һалды200.

Соловьев "изге солтан" тип атаған зат – Кесе Солтан улы Морат Солтан. Хохловҡа ҡаршы Йөрәктау янында һуғышҡан "хан" да ҡаҙаҡ-ҡарағалпаҡ ханы Ҡәйеп Солтан була. XVIII быуатта өс Ҡәйеп хан булыуы билдәле. Уларҙың береһе бында һүҙ барған Ҡәйеп Солтан, ул рус сығанаҡтарында "Тобурчук улы Ҡәйеп Солтан" тип атала һәм Хиуа тарихсыларының сығанаҡтарына тап килә. 1707 йылда Башҡортостанға килгәндә ул 25 йәшлек егет була212. 1684 йылда тыуа. Атаһы Тобурчук иһә 1696 йылда, Хиуаға мосафир сифатында килеп, был ҡаланы баҫып алған Ҡабаҡлы хан тарафынан хаиндарса үлтерелгән213. Ҡәйеп хан 1729 йылда Хиуала аттан йығылып

үлгән214. Һуңырак "Һарыайғыр хан" исеме менән телгә алына. Ҡаҙаҡтарҙа ул дастан ҡаһарманы иҫәпләнә һәм "Ир Ҡәйеп" тип ихтирам ителә. Был Ҡәйеп хандың улы Баһадир хан Кесе Йөҙ хандарынан иҫәпләнә.

Баһадир хандың улы иһә "Икенсе Ҡәйеп хан"215, ул күп мажаралар кисергән. Кесе Йөҙҙөң иң мөхтәбәр хандарынан береһе. Надир шаһ менән дуҫ булып, Иранда уның хеҙмәтендә була, хатта Муган конгресында ҡатнаша. Надир шаһҡа бәйле тарихи сығанаҡтарҙа ла иҫкә алына. Ҡәйеп Солтан хаҡында тулы мәғлүмәт биргән сығанаҡтарҙан "Ҡадирнамә" исемле әҫәрҙе 1956 йылда Карачи ҡалаһында Ғәбделхәй Хәбиби ҡулында күрҙем. Был солтан Күсем хан нәҫеле Дәүләт Гәрәй хандың улы Ишем Чүвек Солтандың улы Ҡәйеп хан була. Ҡарағалпаҡтарҙа ханлыҡ ҡыла һәм 1731 йылда Рәсәй хакимиәтен ҡабул итә216. Уның башҡорт хәрәкәттәре менән бәйләнеше күренмәй. Бөйөк (йәғни икенсе) Ҡәйеп хан иһә Ҡараһаҡал (Байбулат Солтан) күтәрелешендә Урта һәм Кесе Йөҙ ҡаҙаҡтарына ҡасҡан боласы башҡорттарҙы үҙ ҡанаты аҫтына ала. Ләкин уға буйһонған Элим улы эширәте башҡорт ҡасаҡтарына һөжүм иткән. Ҡәйеп ҡалмаҡтар менән һуғыш хәлендә булған, тик тиҙҙән солох төҙөгән, хатта улар менән йәшерен мөнәсәбәт булдырырға теләгән217.

Баһадир хан218 Төркиә менән 1735, 1737219, Рәсәй менән 1728 һәм Ҡытай менән 1750 йылдарҙа220 бәйләнеш тотоусы сифатында билдәле. Баһадир хандың атаһы Ҡәйеп хан иһә – 1708–1729 йылдар араһында Ҡаҙағстандың иң бөйөк ханы һәм халыҡта иң ныҡ ихтирам ителгән хөкөмдар221. Рәсәй һәм Төркиәгә ебәрелгән ҡағыҙҙарға баҫылған мөһөрҙә исеме "Ғәйеп Баһадир хан" тип яҙыла222. Ҡаҙаҡтарҙың Рәсәй хакимлығын ҡабул иткән мәшһүр Әбелхәйер ханы Ҡәйеп хан заманында уның ҡул аҫтында булды. Ҡәйеп хан ҡаҙаҡтар араһында "Ир Ҡәйеп" исеме менән билдәле. Ҡалмаҡтар менән күп һуғышып, 1717 йылда Унгүз йылғаһы буйындағы һуғышта еңелеп, Төркөстан ҡалаһына тик ике кешеһе менән әйләнеп ҡайтҡас, 1718 йылда рус батшаһы Петр менән дуҫлыҡ мөнәсәбәте урынлаштырырға тырышыуы, ләкин быға өлгәшә алмауы223, һуңынан хәлен төҙәткәндән һуң, күп ваҡыт Хиуа тарафында йәшәүе һәм 1729 йылда унда хан булған сағында аттан ҡолап вафат булыуы224 мәғлүм. Ҡәйеп хан, ғәскәре менән Башҡортостанға килеп еткәс тә, башында генерал Хохлов торған рус хәрби етәкселәренә һәм Ҡазан губернаторына хат ебәреп, улы Хузей Солтандың талабын ҡеүәтләне. Беҙгә руссаға бик насар тәржемә ителгән хәлдә генә билдәле булған был мөһим хат "Башҡортостан Йөмһүриәте тарихы материалдары"нда (I том, 265-се бит) ентекле рәүештә эшләнеп нәшер ителде. Документ түбәндәге баш аҫтында бирелгән: "Ҡәйеп Мөхәммәт хандың (бине Тобурчук) 1708 йылда 7 башҡорт бейе менән бергә имза ҡуйып Рәсәй хөкүмәтенә ебәргән хаты". Йөкмәткеһе: "Бер аллаға ғибәҙәт ҡылам, бөтә инсанлыҡты, күк һәм ерҙе яратҡан аллаға, бөтә әнбиә* һәм әүлиәләргә салауат. Алланың берлегенә, пәйғәмбәрҙәренә, сәхәбәләренә, инсандарға доға ҡылам.

Һеҙгә килгән Хузей һәм Ете йорттоң бейҙәре менән кәңәшләшкәндән һуң, иттифаҡ төҙөп, 700 000 ир ебәрелде. Беҙ килгәнгә тиклем мосолмандарҙы мосолман булмағандарҙан айырырға тейешһегеҙ. Шулай булмаһа (йәғни _______________

*Пәйғәмбәр

арағыҙҙа йәшәгән хаиндарҙы диненә, милләтенә тоғро мосолмандарҙан айырмаһағыҙ), бының яуаплылығы тик һеҙҙең өҫтөгөҙҙә булыр. Шулай уҡ мәғлүм булһын, Ҡазан–Шығалы хандың йорто, Өфө Гәрәй хандың йорто ине, уларҙың һәр икеһе мосолман мәмләкәт ине. Һеҙ, кафырҙар, был мосолман иленән сығып китегеҙ, йәиһә мосолманлыҡ ҡабул итегеҙ, инде үҙ динегеҙҙә ҡалып, беҙҙең хакимлыҡ аҫтында ҡалырға теләһәгеҙ, беҙгә йән башынан хараж* түләгеҙ. Әгәр был шарттарҙы ҡабул итергә теләмәһәгеҙ, һуғыш урынын күрһәтегеҙ, һуғыша торған көстәрегеҙҙе туплағыҙ. Беҙ һеҙҙе эҙләп табып, өҫтөгөҙгә ябырылырбыҙ. Был хәл булмаҫ, тимәгеҙ, тап шулай булыр. Мосолмандарҙан, милләтенә хыянат итеп, һеҙҙең сафығыҙға күскәндәр булһа, уларҙы һәм исемлектәрен бирегеҙ. Алла насип итһә, язаһын табырбыҙ. Үткәндәге гонаһтарығыҙҙы ғәфү иттек, артабан ғәфү юҡ. Был хатты һеҙгә

(йәғни Башҡортостанға) килтергән кеше – минең улым, һеҙ уға һәм уның менән бергә килгән бейҙәргә итәғәт итегеҙ. Алланың берлегенә, пәйғәмбәрҙәренә инанып та, мосолман падишаһына итәғәт итмәйенсә, һеҙгә ҡушылғандар һеҙ кафырҙар ҡаласаҡ ауыр яҙмышҡа дусар булыр. Ҡыяматта ла йәндәре йәһәннәмдә булыр".

Хаттың төп нөсхәһенә хандан башҡа ете бей ҙә мөһөр

баҫҡан. Хандың үҙ мөһөрөндә "Ғәйеп Мөхәммәт Баһадир хан" тип асыҡ яҙылһа ла, башҡа мөһөрҙәрҙәге яҙыуҙар уҡырлыҡ түгел. Бында иҫкә алынған "Гәрәй хан" Күсем хандың, Ҡырым хандары кеүек, "Дәүләт Гәрәй" тип үҙ исеменә Гәрәй исемен ҡушыу ғәҙәтенә эйәреүенән килә. Хохлов нәҫеленән ҡалған берәү батшаның урман идараһында хеҙмәт иткән сағында олатаһының беҙҙең ауыл янынан аҡкан Шыйҙы йылғаһы буйындағы һуғышта еңелеп ҡалыуы хаҡында бер риүәйәт һөйләй торған булған. Ауылыбыҙҙың был йылғаға яҡын урынын электән бөгөнгә тиклем "Урыҫ ҡырылған" тип татайҙар ине. Ҡәйеп хан менән улы Хузей Солтандың халыҡты ҡоролтайға (йыйынға) туплаған "Хажи мәсете" исемле ер ҙә унан 15 саҡрым алыҫлыҡта урынлашҡан. Хузей Солтанды Ҡәйеп хан "улым" тип атай. Ул башҡа сығанаҡтарҙа ла

---

*Мосолман дәүләтендә мосолман булмаған кешеләрҙән алына торған түләү.(Ә.Ю.).

(Матер. Каракалп. 280–284-се биттәр) Ҡәйеп хан улы тип атала. Левшиндың "Хузей Менгу Солтан" тип атағаны ла Ҡәйеп I-нең түгел, уның улы Баһадир хандың улы, йәғни Ҡәйеп I-нең ейәне сифатында билдәле принц шул уҡ зат булһа кәрәк. Морат Солтан Дағстанда рустар ҡулына әсир төшкәндән һуң, Алдар тархан Күсем Күсмәт (йә иһә Күсмәмәт) һәм Уразай бейҙәр менән бергә Истамбулға һәм Ҡырымға илселәр ебәреп, "солтан" тәғәйенләргә үтенеүҙәре һәм уларға Кубандан "солтан Хазе"ның Башҡортостан ханы сифатында ебәрелеүе, был принц Башҡортостанға килгәс, бейҙәр һәм халыҡ уға Ҡөрьән үбеп тоғролоҡҡа ант итеүҙәре хаҡында сығанаҡтарҙа мәғлүмәт бирелә (Матер. Каракалп. 225-се бит). Йәғни Шейбанлы Күсем улдары кеүек үк, ҡаҙаҡ хандары, башҡорттар был солтанды мөҡәддәс солтан буларак ҡабул итә. Сығанаҡтарҙа хатта уның Истамбулға барып етеүе, башҡорттарҙың был принцты "мөҡәддәс солтан" итеп таныуҙары, уны күргәс, ололап итеген үбеүҙәре, Ҡазан татарҙарының да уға хөрмәт һәм итәғәт итеүҙәре хаҡында иҫкә алына. Башҡа сығанаҡтарға ҡарағанда, халыҡ был ханға Нуғай юлындағы Юрматы илендә "Хажи Мәсете"ндә ант иткәндәр. Был заттың Кубандан килтерелеүе, уның да, Морат Солтан кеүек, Стамбулға һәм Ҡырымға барыуы күрһәтелә. Ҡәйеп хандың үҙе 1708 йылдың июнендә барлығы 56 һаҡсы менән бергә Нуғай юлы башҡорт улусына барыуы, ул саҡта ни бары 25 йәштә булыуы, халыҡтың уға ант итеүе иҫкә алына. Уны бында шул уҡ Алдар тархан менән Кесе батыр, Нуғай, Ҡазан, Себер юлдары башҡорттары менән берлектә саҡырып килтереп, Ҡәйеп хандың 1709 йылдың 27 июнендә барса башҡорт бейҙәрен һәм ғәскәрҙәрен Ырғыҙыҡ күле янына йыйыуы, бейҙәрен һәм ғәскәрҙәрен Ырғыҙыҡ күле янына йыйыуы, ҙур туй һәм тантана уҙғарылыуы хаҡында хәбәр ителә (Материалы Каракалп. 159-сы бит). Ҡәйеп хан һәм Хузей Солтан, генерал Хохлов ҡул аҫтындағы рус ғәскәренә ҡаршы Шыйҙы йылғаһы буйында һәм Йөрәктау итәгендә һуғышып, был ҙур алышта рус ғәскәрен тар-мар итә. Хохлов ни бары 340 һалдаты менән Табынаҡ тоҙ фабрикаһына һәм монастырға ҡасып ҡотола.

Шул уҡ Алдар Тархан менән Ураҡай батыр исемле көрәштәшенең 1709 йылда Ҡарағалпаҡтан "Күсем ханы"н

саҡырып килтереүҙәре, хандың Себер юлындағы Сыбаркүл буйына килеүе, янында 40 000-гә ҡәҙәр башҡорт һәм ҡарағалпаҡ ғәскәре тупланыуы, май айында рус нығытмаларына һәм ауылдарына һөжүм итеүҙәре билдәле (Матер. Каракалп., 160-сы бит). Был зат шул уҡ сығанаҡтарҙа Бошай улы ырыҫ Мөхәммәт Солтан тип тә иҫкә

алына. Бошай иһә – Кесе Солтандың улы һәм Морат Солтандың туғаны. Атаһы Бошай Солтан уны рустарға ҡаршы ҙур һөжүмгә әҙерлек алып барыу өсөн ебәргән, имеш. Себер юлы башҡорттары уны хан тип иғлан итеп, Ҡөрьән тотоп ант биргәндәр, имеш, һәм был ант тантанаһында Ҡәйеп хан кешеләре лә ҡатнашҡан. Ырыҫ Мөхәммәт ғәскәре бик әҙерлекле, ҡоралдары ла бик етеш булған, имеш. Бының да Ҡырым тарафтарынан килгән ҡорал булыуы мөмкин. Хандың идара үҙәге Ирәмәл тауҙарында урынлаша, алда ла был хаҡта һүҙ булыр. Шул тәңгәлдә башҡорт ҡәбиләләренең Хузей Солтанға, атаһы Ҡәйеп ханға һәм Ырыҫ Мөхәммәт Солтанға, йәғни өс ханға ант итеп, тантаналарҙа Ҡәйеп хан вәкилдәренең дә ҡатнашыуы эштең Ҡәйеп хан тарафынан ойошторолоуын күрһәтә. Дүрт юл башҡорттарының Нуғай юлына ҡарауы, Ҡәйептең үҙенә һәм уның улы Хузей Солтанға ант итеүе, Себер юлы башҡорттарына Ҡәйептең ризалығы буйынса боронғо Күсем хан нәҫеле Ырыҫ Мөхәммәт хандың тәғәйенләнеүе аңлашыла. Нуғай юлы башҡорттары, Алтын Урҙа ханлығы тарҡалғандан һуң, нуғай мырҙалары хакимлығында ҡала, 1580 йылда нуғай дәүләте лә тарҡалғас, ҡаҙаҡ хандары һәм Хаҡназар хан көньяҡ (йәғни нуғай) башҡорт илдәрен үҙ идараһына ала. Ҡәйеп хан 1729 йылда Хиуала вафат була, уның хәләфе сифатындағы Әбелхәйер хан да көньяҡ башҡорттарҙы "үҙ хөкөмөндәге" халыҡ тип иҫәпләй. Себер юлында Ырыҫ Мөхәммәт башлыса Табын улусы рәйесе Ураҡай баһадирға таянған (PSJ П., 377)225.

Рус колонизацияһына ҡаршы башланған был һуғыштар рус тарихтарында күбеһенсә Аҡай Күсмәт улы хәрәкәттәре булараҡ иҫкә алына.

Ҡәйеп хандың Башҡортостанда генерал Хохлов ғәскәрен еңгәндән һуң унда күпме ваҡыт ҡалыуын белгерткән бер сығанаҡ та осратманым. Фәҡәт Хиуала ул эшләткән бер мосафирхананың вакуф* ҡағыҙынан Ҡәйеп хандың һижри буйынса 1127, миләди буйынса 1712 йылда Хиуала хан булыуын белдем. Был вакуфнамә Мугла ҡала китапханаһында

581-се һанлы мәжмүғәнең 238-се битендә һаҡланған. Мосафирхана иһә юлаусылар һәм дәрүиштәр өсөн бина ителеп, төҙөүсеһе булған Сәйет Ғәйеп Мөхәммәт Баһадир хан тарафынан вакуф тәғәйенләнгән. Уны ҡуңғраттарҙан "Ивад Мөхәммәт Инаҡ" һижри буйынса 1208, миләди буйынса 1793 йылда үҙ исеменән дә вакуф билдәләп, яңынан нығытҡан.

Ҡәйеп хан I 1729 йылда вафат була. Урынына ҡалған улы Баһадир (Батыр) хан ҡыҫҡа ғына ваҡытта Хиуала хөкөмдарлыҡ ҡыла. Уның Беренсе Мәхмүткә һижри буйынса 1148, 1149 (миләди буйынса 1735 һәм 1736) йылдарҙа яҙған хаттары Хазинаи Эвракта (Намеи Хумайун, 7-се дәфтәр, 340, 431, 436-сы биттәр, 9-сы дәфтәр, 107-се бит) һаҡлана. Бында ул Солтанды Надир шаһҡа ҡаршы өгөтләй.

Баһадир хан был йылдарҙан һуң Хорезмды ҡалдырып, далала кабаил араһында 1770 йылға тиклем йәшәгән, урынына 1735 йылда уҡ улы Ҡәйеп хан II ултырып, шул йылда башланған башҡорт һуғыштарында ситтән ҡатнашлыҡ иткән. Бының дәлиле: Кинель башында һуғыштарҙа еңелгән башҡорттар "Хиуа ҡайҙа?" тип һорашып, шул тарафҡа күсеп

киткәндәр. Был Ҡәйеп II, Бохара хөкөмдары Әбелфәйез хандың кейәүе Надир шаһ килгәс, уға ҡушыла һәм уның менән бергә Иран һәм Муған барымталарында ҡатнаша. 1745–1756 йылдар араһында өҙләкһеҙ, 1741–1761 йылдар араһында ваҡыты-ваҡыты менән Хиуа ханы була226. 1785 йылда иһә ул – бөтә Кесе Йөҙ ҡаҙаҡтарының ханы227. Вафаты 1793 йылда.

Юғарыла телгә алынған Күсем хан улдарына килгәндә, Мәржәни уларҙан Күсемдең тик Ғәли һәм Ишем исемле улдарын "ул мәмләкәттә булған хандарҙың һуңғылары" тип иҫкә ала. Абылай, Абуға, Кесе һәм Ишем Чүвек, Ырыҫ Мөхәммәт, Морат бине Дүскәйҙәр хаҡында мәғлүмәте юҡ. Асылда иһә уларҙың балалары ла Ҡарағалпаҡта һәм Башҡортостанда төрлө ваҡытта ханлыҡ итә. Башҡортостанда иң һуңғы хан – Күсем нәҫеле Ырыҫ Мөхәммәт бине Бошай. ————

*Изге эш өсөн хәйер сифатында бүленгән милек. Кесе Солтан да

Бында бик ентекле һүҙ алып барылған Морат Солтандың улы (уның хаҡында ла үрҙә һүҙ булды) Ҡәйеп хандан әүәл башҡорттарҙа хан булғандан һуң ҡарағалпаҡтарҙа ханлыҡ итә. Шул сәбәпле үҙе лә улдары һәм Морат Солтан да "ҡарағалпаҡ солтаны" тип йөрөтөлә. Ғөмүмән, Күсем улдары, Көнбайыш Себерҙән айырылғас, күбеһенсә ҡарағалпаҡтарға таянған. Шуларҙан Ишем, Кесе һәм Абылай Солтандарҙың Һырдарья буйындағы эшмәкәрлеге, хатта уларҙан Абылай Солтандың бер ваҡыт Ташкентты алыуы Әстрхандарҙан Вәли Мөхәммәт хандың (1605–1611) ҡаҙаҡ ханы Ишемгә яҙған хатынан һәм бәғзе бүтән хаттарҙан аңлашыла. Былар Йософ Мүнше исемле бер үзбәктең Бохарала яҙған "Бедайи үл Мишам" исемле әҫәренән билдәле228. Күсем нәҫеленән Ғәли хандың Хансүвер һәм Жансүвер исемле улдары һуғышта рустарға әсир төшә һәм, унан ҡасып, Ҡырымға II-се Мөхәммәт Гәрәй Солтан янына килә, уларға Өчкыргыз исемле ер бирелә. Хансүверҙән иһә Әхмәт Гәрәй Хорезм исемле улы ҡала, уның да Ҡырым һәм Дон (Тен) тирәһендә байтаҡ мажараға дусар булыуы хаҡында замандашы булған бер заттың 1601 йылдың июлендә тамамлаған әҫәренең аҙағында әйтелеп кителә229. Йәғни Көнбайыш Себерҙәге Күсем хан улдары – XVII быуат башында Һырдарья һәм Дон йылғалары араһында күп кенә мажара тыуҙырыусы шәхестәр.

Улар ҡалмаҡтар менән килешеп эш итте, ләкин ҡалмаҡ хандары, шул иҫәптән Аюка, Күсем улдарына һәм башҡорттарға ҡарата гел даими үҙгәреп торған, ихлас булмаған сәйәсәт алып барҙы.

Ҡазан губернаторы 1707 йылда түбәндәгеләрҙе яҙған: "Башҡорттар Өфөгә китеп барыусы рус хеҙмәткәрҙәренең тик үҙҙәренә оҡшағандарын ғына үткәрәләр, ҡалғандарын юлда таталар. Аристовты үткәрмәнеләр. Татар, сыуаш һәм сирмеш ҡасаҡтарын һәр саҡ ҡабул итеп яҡлайҙар. Башҡорт болаһы киңәйә, Ҡазан виләйәте татарҙары ла уларға ҡушылды. Беҙ швед һуғышы арҡаһында бында ҙур ғәскәр тота алмайбыҙ. Ҡырағайҙарға ҡаршы ҡырағайҙарҙы файҙаланыу маҡсатында, ҡалмаҡ ханы Аюка ханға офицерҙарҙан Бахметовты ебәреп, 20 000 ҡалмаҡты башҡорттарға ҡаршы йүнәлтергә тәҡдим иттек. Ул быны ҡабул итте. Бола күтәргән Дон казактары, раскольник Некрасов һәм яуҙаштары Камышин ҡалаһын баҫып алды һәм Һарытауға табан йүнәлде. Башҡорттар менән берләшеү ниәтендә инеләр. Аюканан ҡабатлап ярҙам һораныҡ. Ул башҡорттарға ҡаршы ебәреләсәк 20 000 ғәскәрҙең яртыһын Некрасовҡа ҡаршы йүнәлтергә риза булды. Ләкин 13 июндә Яйыҡтағы ҡалмаҡ ғәскәренә килгән хәбәр буйынса, башҡорттар бик күмәк, имеш. Улар ҡарағалпаҡтар, ҡырғыҙҙар, Дон казактары һәм Кубандар (нуғайҙар) менән берләшкән, береһе икенсеһенә булышлыҡ итергә, береһенә зарар эшләнһә, икенселәре уға союздаш сифатында ярҙамлашыу тураһында килешеү төҙөгәндәр. Бахметов, ҡарағалпаҡ, ҡырғыҙҙар менән башҡорттарҙың берләшеүенә юл ҡуймау маҡсатында, Ыҡ йылғаһы буйындағы башҡорттарға 10 000 ҡалмаҡ менән ҡапыл һөжүм итеп, йорттарын үртәне. Боласыларҙың башлығы Исмәғил мулланың улын әсир алды. Һөҙөмтәлә Исмәғил мулла һәм башҡа батырҙар Бахметовҡа килеп, батшаға итәғәт итеү шарты менән солох тәҡдим итте. Улар дүрт юл башҡорттары исеменән Ҡөрьән үбеп, ант бирҙеләр"230 (231, 232, 233).

Ошоноң кеүек интригалар һөҙөмтәһендә был күтәрелештәрҙең башында торған "башҡорт әшрәфе Күсем (йәғни Күсем улы) менән юлдаштары" ла, 1709 йыл башында Ҡазан губернаторы Апраксинға илсе ебәреп, батшаға һалым түләргә риза булыуҙары хаҡында яҙған. Исмәғил мулла менән Күсем ҡалмаҡтарҙың хаинлығы арҡаһында рустарға итәғәт итергә мәжбүр булһалар ҙа, бөтә милләтте рус хакимиәтенән ҡотҡарыу ҡарарынан баш тартманылар.

Ҡазан губернаторы Апраксин 1709 йылдың февралендә Бөйөк Петрға түбәндәгеләрҙе яҙған: "Башҡорттар өс йыл буйы дошманлыҡтарын дауам итә. Хәҙер күренекле бер боласыларының саҡырыуы буйынса уларға ҡарағалпаҡтарҙан бер

боласы килгән, хан улы, имеш. Һөҙөмтәлә 12705 рус кешеһе үлтерелде йә иһә әсир ителде"(234, 235).

Ғәмәлдә, Йөрәктауҙа Хохловҡа ҡаршы һуғышты, тип Соловьев иҫкә алған хан да, губернатор Апраксин "хан улы" тип атаған кеше лә – бер үк шәхес. Ул ҡарағалпаҡ ханы Киреү Солтандың улы – Ҡәйеп Солтан. Йәғни Тимербаш Шарль* һәм Мазепа Украинала Петрға ҡаршы июнь айында һуғышҡан

---

*Швед короле Карл XII.

мәлдә, Ҡәйеп хан етәкселегендә башҡорттар ҙа, Алдар тархан, Исмәғил мулла кеүек түрәләр етәкселегендә рустарға ҡаршы яу асып, колонистарҙың ауылдарын үртәп юҡ иткәндәр. Әле 1706 йылда уҡ Шереметев: "Әстрхан болаһы баҫтырылмаһа, Кубань (нуғайҙар) һәм ҡарағалпаҡтар берләшер, Волганың түбән яғын баҫып алыр ине. Ҡалмаҡ Аюканың хәле мөшкөл булыр ине", – тип яҙған. Электән Ҡырым һәм Истамбул менән бәйләнеш көсәйә килде, быға хаж да булышлыҡ итте, ләкин сәйәхәттәр һәр саҡ сәйәси маҡсаттан башҡарылды. Әле Морат Солтан хәрәкәте башланғас та, башҡорт бейҙәре ҡырым һәм Төркиәгә барып килгәндәр. Уларҙың береһе – Юрматы улусынан Ураҙай улы Сөләймән , юлдаштары менән бергә Истамбулға килеп, ярҙам һораған236. Морат Солтан язаланғандан һуң, уның эшен дауам иткән башҡорт етәкселәренең береһе хаҡында рус сығанаҡтары "Нуғай юлындағы Күсем улдарынан Улах" тип иҫкә ала. Был зат, күп һанлы ғәскәр менән Волганың көнбайыш ярына сығып, Ҡазанға 30 саҡрым ҡалған ергә тиклем етә237 (238, 239, 240). Ул Күсемдең (Күсмәмәттең) атаһы сифатында башҡа сығанаҡтарҙа иҫкә алынған Олаҡай (Оло аҡай, асыл исеме Түбәкәй) булһа кәрәк. Был дәүерҙә башҡорт бейе Алдар тархан менән бергә Себер юлы бейҙәренең береһе сифатында бер "Ураҡай батыр" ҙа иҫкә алына. Ул башҡа бер шәхес булһа кәрәк. Шулай уҡ Күсем улдарынан Солтан Ибраһим исемле ике Күсем нәҫеле иҫкә алына, улары Мораттың ҡәрҙәштәре булған. Улар ҙа Ҡырымдан һәм Истамбулдан күрһәтмәләр алған заттар сифатында теркәлгән.

Шуныһы ла диҡҡәткә лайыҡлы: юғарыла иҫкә алынған Бахметов (Бейәхмәт улы) кеүек, Шереметев та (йәғни Шир Әхмәт улы) христианлыҡҡа күскән татар йә иһә нуғай әшрәфтәренән. Христианлыҡ ҡабул итеп, руслашҡандар. Шереметев Ҡырымда яҙылған "Умдет-үл Тәуарих"та ла (149-сы бит), Осман ҡағыҙҙарында ла (Намеи Хумайун дәфтәрҙәре, VII, 281-се бит) "Ширмәт улы исемле кафыр" тип телгә алына. Рус сығанаҡтарынан билдәле был ваҡиғалар хаҡында бәғзе төрөксә мәғлүмәттәр ҙә табылды.

Османлы авторҙарҙан Рәшит әфәнде "һижри 1122 (миләди 1710) йылда иштәктәрҙән (йәғни башҡорттарҙан) Истамбулға илсе килде, был илсе "ҡара һәм ҡырғыҙ халыҡтары менән бергәләп беҙҙе Мәскәү тәхете ҡәһәренән ҡотҡарыу хаҡына союздаш булырға өндәне, мине Дәүләте Алиәгә рөхсәт алыу өсөн был тарафҡа ебәрҙеләр" тип дәүләт хәҙрәттәренә (йәғни Осман солтанына) теләк белдереп тәҡдим яһаны. Был иштәктәр ҡырғыҙҙар менән бергәләп русҡа ҡаршы һуғыша, Терек ҡалаһында 40 000-гә ҡәҙәр русты ҡыра. Элегерәк тә шул иштәктәрҙән Мөхәммәт Сәлих исемле бер илсе килгәйне, был юлы килгән илсенең исеме Пеһливан Ҡол", тип хәбәр итә241.

Хазинаи Эврактағы Намеи Хумайун дәфтәрҙәрендә, был илсе ҡалмаҡ Аюка тарафынан ебәрелгән, тип күрһәтелә. Сығанаҡтарҙа ҡалмаҡ ханы Аюканан һижри 1116, йәғни миләди 1704 йылда "Мосолмандар ағаһы Ишмөхәммәт Аға" һәм бер төркөм ҡалмаҡ менән ебәрелгән хат һәм уға яуап242, шул уҡ Аюканың бүтән илсеһе Мөхәммәт Сәлих менән Османлы дәүләтенә тоғролоҡ белдереп ебәргән хаты, уға 1122 йылдың мөхәррәм айы аҙағында, йәғни 1710 йылдың март айында яуап яҙылыуы, Аюкаға Ҡырым ханы Дәүләт

Гәрәй менән союздаш булырға кәңәш ителеүе тураһында яҙылған243. Унда шулай уҡ Пеһливан Ҡолдоң сәфәре хаҡындағы мәғлүмәт һәм был заттың үҙ аңлатмалары ла өҫтәп ҡуйылған244. Хатта алып килгән һәҙиәләре лә һанап әйтелгән245. Пеһливан Ҡолдоң аңлатмалары аҫтында "1122 йылдың жемазийел әүүәл айының һуңғы көндәре", йәғни, 1710 йыл июль айының аҙағы, тигән дата тора. Был аңлатмала шундай һүҙҙәр бар: "Аюка хан әүәлерәк килгән илсеһе Мөхәммәт Сәлих аша Солтан (Осман падишаһы) тарафынан ебәрелгән хатҡа бик ҡыуанды һәм: "Падишаһтың был хөрмәте иҫәпһеҙ хазиналар килгәнгә ҡарағанда ла, донъялағы бөтә теләктәрем хасил булыуға сағыштырғанда ла мине нығыраҡ һөйөндөрҙө", – тине. Иштәк ҡәүеменең барыһы ла мосолман. Улар Мәскәү золомо аҫтына төштөләр. Ошо арала улар үҙҙәрендә юғары дәрәжәлә ҡеүәт хис итте. Иштәк ҡәүеменән бер солтан сығып, мәскәүлеләр йылғаһы Иҙел (йәғни Терек) тирәһендә Терек исемле мәшһүр ҡала янында йәшерен рәүештә бер ни тиклем ғәскәр туплап, улар был ҡаланың

---

Автор һылтанмаларында был иҫкәрмә юҡ (Ә.Ю.)

тышҡы өлөшөн баҫып алды, ләкин тырышлыҡтары уңышҡа килтермәне. Эске ҡаланы алырға һөжүм иткән саҡта солтан әсир төштө, һәм рус батшаһы ул солтанды үлтертте. Был ваҡиға иштәк ҡәүеме менән ҡарағалпаҡ һәм ҡырғыҙ-ҡаҙаҡтарҙың берләшеүенә сәбәп булды. Һәммәһе мосолман булған был өс тайфа иттифаҡ һөм берҙәмлек менән ҡарағалпаҡтан иштәк ҡәүеменә бер солтан тәғәйенләне. Беҙҙең ханыбыҙ Аюка хан менән, ошо өс ырыу Мәскәү мәмләкәтенә берҙәм һөжүм итеп һуғышыу маҡсатында 15 йыллыҡ иттифаҡ төҙөп, килешеү ҡабул итте. Хатта Мәскәү батшаһы Аюка ханға ике тапҡыр илсе ебәреп, беренсе илсе аша ярҙам һораны. Аюка хан уға ярҙам итмәне. Батша икенсе илсеһе аша "әгәр ҙә ғәскәр менән ярҙам итмәйһең икән, ул хәлдә һис юғы иштәк ҡәүеменең Мәскәү мәмләкәтенә һөжүм итеүенә ҡамасаула" тигән үтенес белдерҙе. Әммә ханыбыҙ (Аюка) был талапты ла кире ҡағып, һин (батша) иштәктәрҙең солтанын үлтерттең, уларҙың хәҙер һиңә ҡаршы ҡан дәғүәһе бар, шуға күрә мин уларҙы һеҙгә һөжүмдән баш тарттыра алмаҫмын һәм быны эшләргә лә тырышмам, сөнки һәммәбеҙ ҙә Али Сыңғыҙ ырыуынанбыҙ, бер-беребеҙ менән иттифаҡ төҙөгәнбеҙ, тип яуап бирҙе, һәм уҙған йылдың ҡышында (йәғни 1708–1709 йылдарҙа) Иҙел йылғаһын боҙ ҡаплаған айҙарҙа Мәскәүҙән 40 000 ҡәҙәр рус ғәскәре иштәк ҡәүеменә ҡаршы яу асты. Аюка хан иштәккә ярҙам итте. Иштәк тайфаһы рус ғәскәрен ҡорал менән ҡаршыланы. Рус ғәскәре, иштәкккә ҡаршы тора алмайынса, Иҙел йылғаһы өҫтөндә боҙҙа нығынды, иштәктәр боҙ өҫтөнән һөжүм итмәҫ, тип уйланылар. Ләкин иштәктәр, боҙҙо юғарынан да, түбәндән дә телгеләп, рус ғәскәрен аты-йөгө менән бергә йылғаға батырҙы. Аюка хан беҙҙең был эштәребеҙҙе, бер-беребеҙ менән килешеү төҙөүебеҙҙе Дәүләте Алиәгә, белһендәр тип, миңә барыһын да хәбәр итергә әмер бирҙе. Ханыбыҙ Аюка менән Ҡырым татарҙары һәм Дәүләт Гәрәй хан араһы бик яҡшы. Талап йә иһә урлап алынған малдарҙы ҡара-ҡаршы кире ҡайтаралар, иштәк, ҡарағалпаҡ һәм ҡырғыҙ илселәре өсәүһе лә Аюка хан янында саҡта мине Аюка хан һеҙҙең тарафҡа ебәрҙе. Дәүләте Алиә беҙгә ниндәй хеҙмәт тәҡдим итһә лә, был дүрт тайфа иттифағын шул хеҙмәтте тормошҡа ашырырға ниәтләндерә алырһығыҙ. Дәүләте Алиәнең фарманын көтөп, дуҫына – дуҫ, дошманына дошман булырбыҙ тип, быларҙы телдән әйтергә әмер бирҙе. Берҙәмлек килешеүебеҙгә тулы ышаныс хасил итеү өсөн, солтан беҙгә илсе ебәрһен, был иттифағыбыҙҙы үҙ күҙе менән күреп инанһын һәм Дәүләте Алиә лә беҙгә яҡын булһын, тинеләр". Был аңлатмалар аҫтына "фи аваһири жумад әл ула сәнә 1122" тигән дата ҡуйылған, йәғни 1710 йылдың июль аҙаҡтары тигән һүҙ.

Аюка хан ебәргән илселәрҙән Мөхәммәт Сәлихтең нуғай булыуы сығанаҡтарҙан аңлашыла. "Пеһливан Ҡол" менән "Ишмөхәммәт Аға" тигәндәре башҡорт; нуғай булған хәлдә һуңғы исем Исимбәт яҙылыр ине һәм Аға һүҙе ҡушылмаҫ ине. Аюка хан хатында башҡорттарҙы айырым бер солтанға ҡараған ҡәүем тип таный һәм уларҙың Рәсәйгә ҡарата үҙ алла милләт сифатында ҡан дәғүәһе хәлендә булыуын хаҡлы тип иҫәпләй, башҡорттарҙы ҡарағалпаҡ, ҡырғыҙ һәм ҡалмаҡ менән бергә дүрт халыҡ

берләшмәһенә ингән ҡәүем сифатында иҫкә ала, шул уҡ ваҡытта Теректа әсир ителеп рустар тарафынан үлтерелгән башҡорт солтаны Морат Солтандың Сыңғыҙ нәҫеленән булыуын билдәләй.

Был Солтан (йәғни Морат ибн Кесе) 1708 йылдың февралендә әсир ителгәндән һуң, башҡорт, ҡарағалпаҡ, ҡырғыҙ-ҡаҙаҡ ҡәүемдәре араһында иттифаҡ төҙөләүе, Башҡортостан өсөн ҡарағалпаҡ хандарынан бер солтандың хан тип иғлан ителеүе тураһында Соловьев әҫәрендә бирелгән мәғлүмәт Аюканың ошо хатындағы һәм илсеһенең аңлатмаларындағы хәбәрҙәр менән нығытыла. Ул заманда "хан" дәрәжәһе мөстәҡил ҡәүемдәрҙең рәйесенә, "солтан" дәрәжәһе иһә сәйәси йәһәттән башҡа ҡәбиләләрҙең ханына буйһонған ырыуҙар менән идара иткән принцтарға бирелгән. Морат Солтан язаланырҙан алда Әстрханда 1708 йылдың апрелендә унан яуап алған саҡта биргән аңлатмаларында үҙен "хан" тимәйенсә, "солтан" тип атай, шулай уҡ үҙенән алда башҡорттарҙа хакимлыҡ иткән Күсем нәҫеле буларaҡ үҙенә ҡәрҙәш тейеш Сөйөнжәк Солтанды ла "башҡорттарҙың солтаны" тип атай. Соловьев иһә ул саҡта Урта Азия төрктәрендә "хан" һәм "солтан" һүҙҙәре араһындағы айырмаға әһәмиәт бирмәгән, "баш күтәреүсе башҡорттарға бер хан етәкселек итте, уға ҡаршы ебәрелгән Хохлов һәм Аристов ғәскәре менән хан һәм башҡорттар араһында 1707 йылдың 16 ноябрендә Йөрәктауҙа һуғыш булды", – тип рустарҙың еңелеүе хаҡында яҙған саҡта "хан" һүҙен ҡулланған. Был хан иһә ҡаҙаҡ-ҡырғыҙ һәм ҡарағалпаҡ ханы Ҡәйеп Мөхәммәт булыр. Башҡорттарҙың, ошо ханға буйһоноуҙарын белдереп, Төркиәгә Әхмәт III-гә илсе ебәреүҙәре хаҡында юғарыла әйтеп үткәйнек инде. Һәр хәлдә, Ҡәйеп башҡорт мәмләкәтенә башҡорттарҙың солтаны булып түгел, башҡорттарҙы ла үҙ эсенә алған ҡаҙаҡ-ҡырғыҙ һәм ҡарағалпаҡ дәүләте ханы буларaҡ Ағиҙелдәге Йөрәктауға ҡәҙәр килгән. 1707–1708 йылдар ҡышында рус ғәскәренең Йөрәктау янында еңелеүен Соловьевтан беләбеҙ. Аюканың илсеһе Пеһливан Ҡолдоң "уҙған йыл ҡыш" тип 1708–1709 йылдың ҡышында 40 000 рустың Иҙел йылғаһы буйындағы боҙ өҫтөндә башҡорттар тарафынан юҡ ителеүе тураһындағы һүҙе, әгәр ул шул уҡ Йөрәктау ваҡиғаһына ҡарамаһа, рустарҙың 1707–1708 һәм 1708–1709 йылдарҙың ҡыш айҙарында ике тапҡыр ҙур еңелеүгә дусар булыуҙары хаҡында фекер йөрөтөүгә нигеҙ бирә. Шуның менән бергә аңлатмаларын 1710 йылдың июль аҙаҡтарында биргән Пеһливан Ҡолдоң был һүҙҙәре 1709–1710 йылдарҙың ҡышында булып үткән ваҡиғаларға ла ҡарауы ихтимал. Һәр хәлдә, "был ҡыш" тимәйенсә, "уҙған ҡыш" тип әйтеүенә ҡарағанда, 1708–1709 йылдарҙағы ваҡиғаны аңлатыуы һәм уның һүҙендә 1708 йылдың февралендә Теректа булған Морат Солтан ваҡиғаһы сағылыуы бик мөмкин. Рустарҙың 1707–1708 йылдар ҡышында бер, 1708–1709 йылдар ҡышында ике тапҡыр башҡорттарҙан ҙур еңелеүгә дусар булыуы хаҡындағы мәғлүмәтте лә иҫәпкә алырға кәрәк.

Ҡарағалпаҡтан килгән Күсем нәҫеле Морат Солтандың рустар тарафынан үлтерелеүе бөтә боронғо ҡыпсаҡ далаһындағы ҡәүемдәрҙе туҙғытты. Улар араһында русҡа ҡаршы 15 йыллыҡ килешеү төҙөлөү һәм башҡорттарға солтан тәғәйенләп, союз төҙөп хәрәкәткә күсеү Күсем нәҫеле солтандарының был ҡәүемдәр араһында ни тиклем ҙур йоғонтоға эйә булыуын иҫбат итә. Морат Солтан язаланғандан һуң да, үзбәктәрҙән Абдрахман исемле берәү, Нуғай юлы башҡорттарына килеп: "Мин Морат Солтан, мине үлтермәнеләр, ҡасып ҡотолдом", – тип дәғүә ҡылып, халыҡты күтәрергә тырышыуы хаҡында ул заманда йәшәгән бер башҡорттоң рустарға биргән аңлатмаларынан күрергә мөмкин246. Ҡәйеп хан, 1708 йылда Хузей Солтан етәкселегендә башҡартҡан мәшһүр һуғыштан һуң, үҙе лә Башҡортостандың Нуғай юлы өлөшөнә килә, янында ҡарағалпаҡ һәм нуғайҙарҙан тик 56 кеше була, ләкин башҡорттар хан килеү менән уның тирәһенә туплана. Алдар тархан һәм Кесе баһадир (батыр), Ҡәйеп ханға Себер яғынан рус ғәскәрҙәре һөжүм итмәһен тип, үҙ көстәре менән Исәт йылғаһы тарафында урынлаша. Икенсе яҡтан, 1709 йылдың мартында "Алдар тархан улының тәҡдиме буйынса ҡарағалпаҡтарҙың ханы Күсем хан 40 000-гә тиклем ҡарағалпаҡ ғәскәре менән Нуғай юлы башҡорттарына ярҙамға килде", – тип әйтелә. Был "Күсем хан" "Улаҡай улы Күсмәмәт" исеме менән фарсыса бер мәжмүғәлә

иҫкә алынған баш күтәреүсе "Күсем", шулай уҡ Күсем нәҫеле Бошай солтандың улы Ырыҫ Мөхәммәт Солтан, әлеге Алдар һәм Ураҡай батырҙарҙың тәҡдиме буйынса, 400-гә ҡәҙәр ҡарағалпаҡ менән хәҙерге Миәс янындағы Сыбаркүл тирәһенә килеп, рустарға ҡаршы торҙолар һәм Ағиҙел аша Ирәмәл йәйләүҙәрендә йәйләнеләр. Улар май айында 8 000-гә ҡәҙәр башҡорт ғәскәре менән Исәт йылғаһы буйында Ҡатай нығытмаһы тирәһендәге рус ауылдарын юҡ иттеләр. "Ырыҫ Мөхәммәт хан үҙенең ҡартатаһы – ҡарағалпаҡ ханы Кесе хандың әмере буйынса бында килде һәм Кесе хан тарафынан уға тағы ла 10 000 ғәскәр ебәреләсәген иғлан итте. Янында күп ҡорал һәм һуғыш кәрәк-яраҡтары була. Август айында ла Ирәмәлдә ҡалалар, Ҡарағалпаҡтан 100, башҡорт һәм ҡаҙаҡтарҙан 3000 ғәскәр, Ҡара-Табын ырыуынан 250 ғәскәр менән хәҙерге "Златоуст–Миәс" тирәһендәге рус ауылдарын баҫып, юҡ итәләр. Сентябрь айында улар, Ирәмәлдән айырылып, Аят һәм Писим йылғалары буйындағы рус ауылдарын юҡ итәләр. Унда 7000-гә ҡәҙәр ҡарағалпаҡ һәм башҡорт ғәскәре була"247.

Күсем улдарына бәйле ошо ваҡиғалар – солтандар araһындағы боронғо Джучи улусының сәйәси традициялары йәшәп килеүен күрһәтеүсе дәлил, һәм уны беҙ Осман дәүләте архивтарынан өйрәнә алабыҙ. Икенсе тарафтан; был солтандар үҙ хакимындағы ҡәүемдәр менән Ҡырым һәм Осман дәүләте араһына бер шына кеүек ингән рус контролен юҡ итеү өсөн рустың иң алғы сафтағы нығытмаһы Терекка һөжүм итеүе, бөтә был ҙур хәрәкәтте Мазепа күтәрелешенә һәм Тимербаш Шарлдең русҡа ҡаршы һуғышҡан заманына тап килтереүе уларҙың донъялағы сәйәси хәлдәр хаҡында ысынлап та хәбәрҙар булыуын, ә улар ҡул аҫтынағы ҡәүемдәрҙең кәрәк саҡта бик йылдам күтәрелеүен асыҡ күрһәтә. Сөнки Иҙел буйындағы хәрәкәт – Полтава һуғышы осоронда булып үткән ваҡиға.

Петр реформалары Рәсәйҙең сик губерналарындағы раскольник төркөмдәрен бик ныҡ йонсотто. Шул уҡ ваҡытта ер хужаһы булған баярҙарҙан ҡасҡан рус крәҫтиәндәре лә ҡалмаҡ һәм башҡорт далаларына йәшеренә ине. Башҡорттар рустарҙың батшаға тоғро булғандарын тотоп әсир итә, ә баш күтәреүсе казактар һәм боронғо раскольниктар менән союздаш була. Петрҙың реформаларына ҡаршы 1705–1706 йылдарҙа Әстрхандағы рустар ҙа бола күтәрҙе. 1708 йылда Донда шулай уҡ раскольниктар менән ярлы казактар (голытьба) Булавин исемле берәү етәкселегендә баш күтәрҙеләр. Осман дәүләте сығанаҡтарында ла иҫкә алынған Булавин ғәскәрҙәре Царицын, Һарытау, Камышин ҡалаларына һөжүм иткән. Улар Петр батша тарафынан Долгорукий һәм фельдмаршал Шереметев ҡул аҫтында ебәрелгән ҙур ғәскәри көскә ҡаршы торорға тырышҡандар. Әгәр ҙә шәреҡтә башҡорттарҙың, ҡалмаҡтарҙың һәм Күсем нәҫелдәренең Себерҙән Дағстанға тиклемге аралыҡты биләгән көслө күтәрелеше менән Төркиә һәм Ҡырым да файҙаланырға тырышһа, 1709 йылдың 27 июнендә Петр Украинала Полтава янында швед короле Карл XII-сегә ҡаршы һуғышта еңеү ҡаҙана алмаған булыр ине248.

Швед короле менән берләшмәһендәр тип, Петр, бер яҡтан, Төркиә һәм Ҡырымға ҡарата ялған мөләйем сәйәсәт ҡулланһа, көнсығышта башҡорт һәм ҡарағалпаҡтарға ҡаршы ҡалмаҡтарҙы йүнәлтеп, уларҙың кубандар (йәғни Кубань нуғайҙары) һәм ҡырымдар менән берләшеүҙәренә ҡамасауланы. Башҡорттар рус һөжүмен көнбайыштан һәм төньяҡтан көткән хәлдә, ҡалмаҡтарҙың хыянаты һөҙөмтәһендә, һөжүм һис уйламағанда көньяҡ тарафтан башҡорт иленең ҡатын-ҡыҙ һәм бала-сағаларына ҡаршы йүнәлтелде.

## §28 Ҡалмаҡтар һәм башҡорттар

Осман дәүләтенең ҡалмаҡтарға ҡарата мөнәсәбәте һалҡын булыуға нигеҙ бар ине. Хазинаи Эвраҡтағы яҙыуҙарҙан күренеүенсә, ул заманда ҡалмаҡтарҙың Мәүреннаһрға көнсығыш тарафтан һәләкәтле һөжүмдәр яһауы хаҡында Урта Азиянан Осман дәүләтенә хәбәр биргәндәр. Үзбәк ханы Ғәбиҙулла 1117 йылдың 23 зилһиждә, йәғни 1706 йылдың апрелендә, Осман Солтаны Өсөнсө Әхмәткә яҙған

хатында ҡалмаҡтарҙың (Ҡытай баҫымы аҫтында), боронғо ватандарынан айырылып, уңдырышһыҙ ерҙәргә күсеүе, мосолман өлкәләрен баҫып алыуы, мосолмандарҙың (үзбәктәр һәм ҡаҙаҡтар) уларҙы һәр ерҙә ҡылыс менән ҡаршылауы, был ҡурҡыныс ҡаршыһында Хиуа ханының да Бохараға ҡушылыуы һәм Хиуаға һөжүм иткән рус казактарының фетнә һәм болаларына ҡаршы мосолмандарҙың берләшеүе һәм уларҙың мосолман һуғышсыларының ҡылысы тарафынан юҡ ителеүҙәре; һөҙөмтәлә Ҡазан, ҡарағалпаҡ Дәште-Ҡыпсаҡ (һәр хәлдә Башҡортостан һәм нуғай) ҡәүемдәренең үҙ ерҙәрендә нығыныуы хаҡында бөйөк бер ҡаҙаныш сифатында хәбәр ебәргән249. Бында ғәрәп хәрефтәре менән... тип яҙылған был казактар Яйыҡ йылғаһы буйында берләшкән рус казактары булыр. Улар, Петр заманынан бер быуат элек Нечаев исемле бер рәйес етәкселегендә Хорезмға һөжүм итеп, ундағы халыҡты тотош ҡылыс аҫтында тотҡайны. Йәғни Әхмәт Салис дәүерендә Урта Азия һәм Иҙел буйы мосолман төрктәре көнбайыштан килгән рус ҡурҡынысын һәм дала ҡалмаҡтарының һөжүмен ике иң ҙур хәүеф тип иҫәпләгәндәр. Рустарға ҡаршы Аюка менән берләшергә тырышҡандар. Аюка 1671–1724 йылдар араһында 53 йыл хөкөм һөрҙө. 1673 йылдың 27 февралендә рустар менән дуҫлыҡ килешеүе төҙөп, ҡырымдарға ҡаршы рустар яҡлы булды, ләкин үҙен Ҡытай императорына буйһонған хакимдар тип иҫәпләне. Ханлыҡ дәрәжәһен ул Тибеттағы Далай-ламанан алған. Үҙен бөйөк дала хакимы тип иҫәпләгән. Һәр ерҙә ике йөҙлө сәйәсәт үткәргән, үҙен Ҡытай императорының вассалы тип иҫәпләһә лә, рус батшаһына ла, Төркиә солтанына ла итәғәт иткән. 1706 йылда Әстрханда рус гарнизоны баш күтәргән саҡта ҡалмаҡтар Петр яҡлы булһа ла, һуңыраҡ был виләйәткә һөжүм иткәндәр. 1707 йылда шведтарға ҡаршы Петрға ярҙамға тип Мәскәүгә 3000 ҡалмаҡ ғәскәре ебәрһәләр ҙә, улар рус виләйәттәренә һөжүм итеп, кире әйләнеп ҡайтҡан. Ҡалмаҡтар 1708 йылда башҡорттар менән бергә Тамбов виләйәтендә 160 тирәһе рус ауылын үртәнеләр, ә инде 1709 йылда Дон казагы Булавин болаһын баҫтырыуҙа батша ғәскәренә ярҙам иттеләр. Ҡырым ханы ла Төркиәгә ҡарата сәйәсәтендә ҡайсаҡ ике йөҙлө булды. Иҙел ҡалмаҡтары тәүҙә Күсем нәҫелдәре, башҡорттар һәм нуғайҙар менән ҡайһы саҡта союздаш булып, рустарға ҡаршы сәйәсәт үткәрҙе. Аюка хан 40 йыл самаһы ваҡыт Ҡырым хандары һәм Төркиә менән дуҫтарса мөнәсәбәткә өҫтәнлөк бирҙе, ләкин мосолман түгел сит халыҡ булғанлыҡтан, барыбер ят булып ҡалды. Петр Полтава һуғышында еңеп сыҡҡандан һуң, Аюка, рустарға ҡаршы тора алмаясағын күреп, улар менән яҡшы мөнәсәбәт урынлаштырырға булды. 1701 йылда улы Санжи Джаба 15 000 йорт ҡалмаҡты үҙе менән Жунгарияға алып киткәндән һуң, халҡы аҙайғас, ҡаҙаҡ-ҡырғыҙ, Ҡырым, нуғай һәм рус араһында ҡыҫынҡы хәлдә ҡалды. 1711 йылда сәйәсәтен рустар файҙаһына борҙо. Рәсәйҙән йыл һайын 2000 лира һәҙиә һәм ҡорал алып торорға риза булды. 10 000-гә ҡәҙәр ҡалмаҡты рус Ҡырымға буйһонған Кубань нуғайҙарына ҡаршы йүнәлтте. Ҡалмаҡтың хыянаты уның менән русҡа ҡаршы килешеү төҙөгән башҡорт, ҡарағалпаҡ, ҡаҙаҡ хандарын өсөн һәләкәтле хәл ине. Бының ҡаҙаҡ хандарын ғына түгел, хатта Бохара үзбәктәрен дә борсоуға һалыуын ҡаҙаҡ, ҡарағалпаҡ һәм башҡорт ханы Ҡәйеп хандың һәм Бохара хөкөмдары Әбүлфәйез хандың Төркиә солтаны Өсөнсө Әхмәткә яҙған хаттарынан һәм ебәргән илселәре аңлатыуынан беләбеҙ. "Төркөстан хандарынан ҡаҙаҡ ханы Ҡәйеп Мөхәммәттең илсеһе Сәйет Мөхәммәтҡол бей аша Солтан ғали йәнәптәренә ебәргән хаты" тип аталған был хаттар Хазинаи Эвракта һаҡлана. Хан үҙен был хатта пайтәхете Ташкентта булған Ҡаҙағстан хөкөмдары сифатында күрһәткән. Бынан күренеүенсә. Ҡәйеп Мөхәммәт хандың 1793 йылда вафат булған Ҡәйеп хан түгел (ул Баһадир хандың улы), ә 1718 йылда Рәсәй менән бәйләнеш урынлаштырған Ир Ҡәйеп хан (Баһадир хандың атаһы) икәнен беләбеҙ. Был Ир Ҡәйеп – Кирәү (Тубырсыҡ) солтандың улы булған250. Ир Ҡәйеп 1700 йылда уҡ Көнбайыш Себер, Ташкент, Башҡортостан өлкәләре араһында йөрөгән каруандарҙың именлеген тәьмин иткән251. 1709 йылда уға 26 йәш була. Ошо Ир Ҡәйеп, йәғни Ҡәйеп хан Өсөнсө Әхмәткә түбәндәгеләрҙе хәбәр итә:

"Әүәле лә ата-олаталарыбыҙ араһында хат алышыу булған. Бынан алдағы ваҡытта изге Осман солтаны ғали йәнәптәренең әмерҙәре менән был тарафҡа ла

шәфҡәт билдәһе сифатында хаттар ебәрелеп, ҡалмаҡ тайфаһына ҡаршы ғәскәр ебәреү хаҡында хәбәр ителде. Был хаҡта белгәндән һуң, үҙ ғәскәрегеҙ менән ҡалмаҡҡа ҡаршы атланырһығыҙ, тиелгән. Иҫкә алынған Хажи Әстрхандан ҡалмаҡ өлкәһе аша үткән сағында ҡалмаҡтарҙың береһе (Истамбулдан килгән әмер хаҡында) унан мәғлүмәт алып, был хәбәрҙең ысын булыуын белгән. Шул нигеҙҙә ҡалмаҡ иленән ике тапҡыр сабыуыл яһалған. Хәлдәре бик борсоулы. Тарҡаулаштылар. Ҡалмаҡтың был ике тайфаһы (йәғни Иҙелдең көнсығышында һәм көнбайышында булған өлөштәре) бер-береһе менән берләшмәһә һәйбәт булыр ине, шуға күрә ҡалмаҡ өҫтөнә ябырылырға йыйынам"252. Ҡәйеп хандың илсеһе Сәйет Мөхәммәтҡол бейҙең телдән әйткән аңлатмалары ла теркәлгән: "Аюка яуыздың илсеһе (йәғни Пеһливан Ҡол), солтан һарайына килеп, Аюканың итәғәтен белдереп киткәйне. Илсе хатты мәғлүм Аюкаға ирештерҙе, ул саҡтағы ҡаҙаҡ ханы Ҡәйеп Мөхәммәт хан, иштәк һәм ҡарағалпаҡ илселәре Аюка янында инеләр. Ҡәйеп Мөхәммәт хандың илсеһе хатта яҙылған хәбәрҙәрҙе хандың үҙенә ирештерҙе, ләкин бер ни тиклем ваҡыт үткәс, иманһыҙ Аюка, антын боҙоп, рус менән (бер булып) нуғайға (йәғни Төньяҡ Кавказдағы Ҡырымға буйһонған Кубань нуғай улустарына) һөжүм итте; был һөжүмдең маҡсаты тураһында Әстрхан тарафынан килгән хажиҙарыбыҙ Ҡәйеп Мөхәммәт ханға хәбәр итте. Шул сәбәпле Ҡәйеп Мөхәммәт ханға дин ғәйрәте килеп, ул ике тапҡыр Аюкаға ҡаршы яуға сапты һәм Солтан ғәли йәнәптәренә мине ебәрҙе. Мин иһә ҡәрҙәшебеҙ татар ханы (йәғни Ҡырым ханы) менән бергәләп Дәүләте Алиәгә хеҙмәт итер инем. Әмерҙәреңә тоғро ҡалам", – тип Ҡәйеп Мөхәммәт хан миңә телдән әйтергә бойорҙо253. Илсе Сәйет Мөхәммәтҡол бей Бағдад юлы менән килгән, имеш, ҡайһы юлдан ҡайтасағы һоралды. Шул уҡ Бағдад юлы менән254 ҡайтырмын, тигән. Өсөнсө Әхмәттең Ҡәйеп Мөхәммәт ханға яуап хатында 1125 йылдың рабийүл Әүүәл ахыры, йәғни 1713 йылдың марты, тип яҙылған. Бохара ханы Әбүлфәйез хандың шул уҡ ваҡыттарҙа яҙған хатында ла: "Беҙгә мәғлүм булыуынса, ҡалмаҡ берләшеп, бөтә исламға дошман булды, был йөҙҙән мин дә күренеклеләребеҙҙән шәйех Ниғмәтулла әфәндене илсе итеп хозурығыҙға ебәрәм. Беҙ дин ҡәрҙәштәр, беҙҙең дошманыбыҙ булған кафырҙарҙы ҡырыу маҡсатында килешеүгә өлгәшеп, һеҙ унан, беҙ был яҡтан кафыр динһеҙҙәрҙе ҡамауға алайыҡ", – тиелгән. Өсөнсө Әхмәт үҙ яуабында был ғазауат хәбәрен ыңғай ҡаршылауын белгерткән255.

Рәсәй хөкүмәте баш күтәреүсе башҡорттарға ҡаршы ҡалмаҡтарҙы файҙаланды. Аюка ғәскәрҙәре уларға арттан һөжүм итте. Башҡорттар боласы Дон казактары менән союздаш булыуға ҡарамаҫтан, ҡалмаҡтар казактарға ҡаршы хәрәкәт итте. Ләкин башҡорттар ҙа рус өлкәләренә һөжүм итеүҙән баш тартманы.

Ҡазан вәлийе Апраксин 1712 йылда Петрға шуны яҙған: "Беҙгә күрше мосолман мәмләкәттәрендә тыныслыҡ хаким итһә лә, өй эсебеҙҙәге дошманыбыҙ фетнәһен дауам итә. Уларҙан итәғәт көтөү файҙаһыҙ. Беҙ һәр саҡ хәүеф аҫтында йәшәйбеҙ"256.

1715 йылда Кубань солтаны Бәхтегәрәй бине Дәүләтгәрәй, ҡалмаҡтарға һөжүм итеп, ҡеүәттәрен тамам ҡаҡшатты. Аюкаға буйһонған Едисан һәм Жимбойлоҡ нуғайҙарын да тар-мар итте һәм Царицын ҡалаһына һөжүм яһаны257, аюканың ҡарарғаһын (идара үҙәген) баҫып алды. Ул Әстрхандағы рус яғына сигенеп башын ҡотҡарҙы. 1715 йылда ҡалмаҡ ханы Аюка Петрға ошолай тип яҙа: "Башҡорттар, ҡырымдар, кубандар һәм ҡарағалпаҡтар бөтәһе лә миңә дошман. Рус ғәскәрҙәре ярҙам итмәһә, беҙгә, ҡалмаҡтарға, Иҙел менән Яйыҡ араһында йәшәү мөмкин булмаясаҡ". Петр, уның был үтенесенә яуап итеп, билдәле татар бейе стольник Бахметовты 1600 һалдат биреп Аюкаға ярҙамға ебәрҙе. Ләкин Аюканың улы Ҡапдыржап, Кубань татарҙары (нуғайҙар) һәм ҡырымдар менән аңлашып, рустарға ҡаршы сыҡты258.

## §29 Петрҙың Төркөстанды баҫып алыу планы. Ҡәйеп хан һәм башҡорттар

Прут һуғышында Балтажи Мөхәммәт Паша ҡулынан ҡотолғас, Петр ҙур пландар менән мәшғүл булды. Һуғыш арҡаһында ҡаҙнаһы тамам бушағайны. Көнсығыштағы алтын мәғдәненә бай ерҙәрҙе ҡулға төшөрөп, ҡаҙнаһын байытырға уйланы. 1713 йылда Хужа Нәфис исемле төрөкмән сауҙагәре Әстрхандан көнсығышта, Иректе тип аталған ерҙә, бай алтын ятҡылыҡтары барлығы хаҡында һөйләгән. Петр, Хужа Нәфисте Петербурға саҡырып, мәғлүмәт алған. Ятҡылыҡтың Арал күле һәм Һырдарья буйында булырға тейешлеген аңлап, ул ерҙәрҙе ҡулына төшөрөргә ҡарарлаштырған. Был иһә Һиндостанға ла юл асасаҡ ине.

Петрҙың ниәте далаларҙа ла ишетелә. Йәғни рустарҙың башҡорттарҙы уратып алырға тырышыуы мәғлүм була. Петрҙың уйын төшөнгән башҡорт, ҡаҙаҡ-ҡырғыҙ, ҡарағалпаҡтар, Ҡәйеп хан етәкселегендә берләшеп, хәрәкәт итергә ҡарарлаштырған, һәм ҡалмаҡ ханы Аюка ла был юлы уларға ярҙам иткән. Мәсьәләгә ҡағылышлы иң тоғро һәм ышанысҡа лайыҡлы мәғлүмәт Ҡәйеп хандың Истамбулға Ҡорбанбәк Күкелдаш исемле берәү аша ебәргән хатында сағылыш тапҡан. Хазинаи Эвракта (Намеи Хумайун дәфтәрҙәре, VII том, 351–352-се биттәр) һаҡланған был хат "Төркөстан хандарынан ҡаҙаҡ ханы Ҡәйеп Мөхәммәт хандың хаты" тип аталған һәм уның ҡыҫҡаса мәғәнәһе ошондай: "Был мөхлис (йәғни Ҡәйеп хан) Афрасиабтың пайтәхете булған Ташкентта тороп, үҙенең Төркөстан (йәғни Яси), Андижан, Сайрам, Ҡарағалпаҡ һәм башҡа ҡалаларҙан ғибәрәт булған өлкәләре менән бөтә был ерҙәрен шәриғәт ҡанундарына ярашлы рәүештә уңышлы идара итеү юлында көнө-төнө эшмәкәрлектә һәм падишаһҡа (Османлы падишаһына) көнө-төнө доға ҡылмаҡта. Шулай уҡ Солтан ғали йәнәптәренә мәғлүм булһын ки, беҙҙең менән Мәскәү мәмләкәте араһында бер мәмләкәт бар, уны Иштәк (йәғни Башҡортостан) тип йөрөтәләр, һәм уларҙың барса халҡы сөнни өммәтенән. Бынан әүәлерәк заманда виләйәттең ауырлыҡ кисереүенән файҙаланып, уны Мәскәү баҫып алғайны. Бер ни тиклем ваҡыттан бирле Рәсәйгә буйһоноп, һалым түләйҙәр. Ләкин хәҙерге көндә улар, ғәскәр туплап, дошмандың иҙеүенән ҡотолорға тырыша. Ғәмәлдә иҫкә алынған был Иштәк ҡәүемдәре беҙҙең тарафыбыҙға йөҙ тотто һәм, дин өсөн ғәйрәт сарыф итербеҙ, тине. Әгәр һеҙ беҙгә ярҙам итер булһағыҙ, үҙ мәмләкәтебеҙҙе кафыр ҡулынан ҡотҡарырға хәлебеҙҙән килер һәм, һеҙҙең менән берлек булһа, кафырҙың мәмләкәтенә һәр көн һөжүм яһарбыҙ, тинеләр. Беҙ (Ҡәйеп хан) был һүҙҙәр хаҡында уйланлыҡ. Хәҙер ошо арала (Иштәк иленә) һуғыш хаҡында беҙгә яңы хәбәрҙәр килде, һәм беҙ быға бик һөйөндөк. Ваҡиға мөһим булғанлыҡтан, барыһын да һеҙгә белдереү өсөн Ҡорбанбәк Күкелдашты ебәрәм. Әмерегеҙ ни булырын беҙгә белдерерһегеҙ, күҙҙәребеҙ был илсе әйләнеп ҡайтасаҡ юлда булыр. Ул юлдан ниндәй әмер килһә, шуға ярашлы әмәлен күрербеҙ".

Өсөнсө Әхмәттең "128 сәфәр айы уртаһы"нда (1716 йылдың 19 ғинуарында) "Төркөстан хандарынан ҡаҙаҡ ханы Ҡәйеп Мөхәммәт ханға" тип аталған яуап хатында был хан Осман дәүләтенә ҡараған бер әмир һәм дә шул дәүләт өлкәһенең вәлийе, мосолман өммәтенең һәм ҡаһарман көрәшселәрҙең етәксеһе тип танылған. Өсөнсө Әхмәттең мөрәжәғәтендә шундай һүҙҙәр бар: "Хәҙерге ваҡытта үҙ мәмлкәте эсендә барыһы ла ислам диненә ҡараған иштәк йәмғиәте аллаһы тәғәләнең ярҙамы менән һуңғы мәлдә ҡеүәт һәм ғәскәр туплауға өлгәшкән һәм, әүәле Мәскәү кафырҙары тарафынан баҫып алынғанлыҡтан, мәмләкәттәренең боронғо бойондороҡһоҙлоғон ҡабат яулап алыу өсөн тирә-яғындағы дәүләт хакимдарҙарынан ярҙам һәм яҡлау үтенеп хәбәр тараҡҡандар икән", – тип Ҡәйеп ханға Башҡортостандағы был һуғыштарҙа ярҙам итергә кәңәш ителгән.

Сикһеҙ ихтирамға лайыҡлы Осман императорының был самими ҡәрҙәштәрсә мөрәжәғәте барса Төркөстанда һәм далаларҙа тәрән тәьҫир ҡалдыра. Төркиә һәм Төркөстан мөнәсәбәттәренең тарихы күҙлегенән бик мөһим булған ошо хатта Ҡәйеп хандың илсеһенә аҙаҡ сиктә хосуси илтифат күрһәтелеүе хаҡында ла әйтелгән. Хат

Солтандың көнсығышта Рәсәй баҫып алыусыларынан ҡотолоу юлындағы күтәрелеште ихлас рәүештә яҡлауын, был хәрәкәттәр хаҡында хәбәр алып, ул яҡтарҙы үҙ дәүләте өлкәләре тип иҫәпләүен күрһәтә, ә был халыҡтарҙың хөкөмдарҙары (солтанға) бер-бер артлы илселәр аша мөрәжәғәт итеп, ул илселәрҙең ҡайтыр юлынан күҙ өҙмәй көтөп тороуҙары күренә. Башҡорттар хаҡында ла "Алла ярҙамы менән улар хәҙер ғәйрәттәре артып, ҡеүәттәре һәм ғәскәрҙәре күп бер ислам йәмғеһе" тип, уларға "боронғо мәмләкәттәрен ҡотҡарыу юлында" булышлыҡ итергә кәңәш бирелгән.

Был бер-береңә ихлас ҡәрҙәшлек мөнәсәбәттәренең һәм ярҙам ҡулы һуҙыуҙың ыңғай һөҙөмтәһе ҡыҫҡа ваҡытта уҡ һиҙҙерә. Ҡәйеп хандың илсеһе Ҡорбанбәк Күкелдаш Истамбулда булған саҡта уҡ Рәсәй батшаһы Петр ғәскәрҙәре Хиуаға һөжүм итә башлай. Петр, Иректе тирәһен баҫып алыу өсөн, бер тарафтан Хиуаға, икенсе тарафтан Себерҙән Һырдарья йылғаһы башына ғәскәр ебәреп, был ерҙәрҙе Рәсәйгә ҡушырға ҡарар иткән. 1715–1716 йылдарҙа батша Әстрхандан ике тапҡыр Хәзәр диңгеҙе һәм Манғышлаҡ юлынан Хиуаға христиан диненә күскән Кабарда мырҙаһы Дәүләт Гәрәй Бекович, уның ҡәрҙәштәре Суйунч мырҙа менән Аҡ мырҙа һәм Заманов исемле христиан диненә күскән, Хиуа тарихтарында "губернат" тип аталған татар етәкселегендә күп төрлө ҡеүәтле ғәскәри төркөмдәр (4000 йәйәүле, 1000 гвардия кавалерияһы, 2000 казак, 400 моряк һәм башҡалар) ебәргән. 1717 йылда Ҡырым шаһзадаһы Бәхтегәрәй бине Дәүләтгәрәй (йәғни Тиле Солтан) Иҙел йылғаһының көнбайышында Аюка хандың идара үҙәгенә һөжүм итеп, уны тар-мар итә һәм Әстрхан рустарына ҡушылырға мәжбүр була. Был хан рус сығанаҡтарында Александр Бекович Черкасский тигән христиан исеме менән билдәле мырҙа менән көрәшкән. Ләкин Аюка хан рустың Хиуаны баҫып алып нығыныуы үҙе өсөн ҡурҡыныс тыуҙырыуын аңлай. Шуға үҙ илсеһе Ачинсен Кошук аша һәм башҡорттар ярҙамында Хиуа хөкөмдары Ширғази ханға рустарҙың планы һәм Бекович хәрәкәте тураһында хәбәр ебәрә. Аюкаға буйһонған Дарчи солтан да рустарҙың ниәтен Хорезмдағы Ҡуңғырат һәм Найман ҡәбиләләренең бейҙәренә белдерә. Суҡынған Черкесс мырҙаһы, үҙен мосолман күрһәтеп, Дәүләт Гәрәй тип танытып килә һәм ханлыҡҡа рустарҙан дуҫлыҡ сәләме килтергән кеше сифатында Ширғази ханға илселәр һәм хаттар ебәрә. Ширғази ҙа, уның христиан ҡиәфәтен белмәмешкә һалышып, мосолман һәм ғәзиз мосафир итеп ҡабул ҡыласағын, ләкин мәмләкәтендә ҡала һәм ҡасабалар бәләкәй булыуына һылтанып Черкес бей командаһындағы рус ғәскәрҙәрен, Хиуа сығанаҡтарына күрә, иҫәбе 30 меңгә еткән был ят баҫып алыусыларҙы төрлө ҡалаларҙа мосафир итәсәген белдергән һәм Черкесскийҙы ла ышандыра алған. Хиуала хан һарайында мосафир булған Бекович һәм бүтән ҡалаларҙа туҡталған башҡа айырым хәрби частар 1717 йылдың сентябре башында бер төндә тулыһынса юҡ ителгән. Өсөнсө Әхмәттән хат алған Ҡәйеп хан Ширғази менән берҙәм була. Шуға күрә һуңынан хатта уның ейәне Ҡәйеп хан бине Баһадир рустар менән сәйәси мөнәсәбәткә ингән саҡта Хиуалағы был үлтерештең насар һөҙөмтәләренән ҡурҡып эш иткән259.

Ир Ҡәйеп исеме менән мәшһүрлек ҡаҙанған, Ташкент һәм Һырдарья тарафында йәшәп тә, Хиуа һәм башҡорттар өҫтөнән хөкөмдарлыҡ иткән ошо Ҡәйеп тарафынан һижри буйынса 1127 йылдың зулькаде айында, йәғни 1715 йылдың 9 октябренән 27 ноябренә ҡәҙәр, Хиуала хан һарайы янындағы бер мосафирхананың сығымдарын түләү өсөн вакуфҡа тапшырылған ерҙең вакуфнамәһе (документы) Мугла ҡалаһы китапханаһында 581-се һандағы мәжмүғәлә 238–239-сы биттәрҙә теркәлеп һаҡланған (был документ хаҡында алда ла һүҙ булыр). Осман дәүләте сығанаҡтарында "Мөхәммәт

Баһадир хан" исемле бер Хиуа ханының һижри буйынса 1133, миләди буйынса 1720 йылда Истамбулға ике тапҡыр илсе ебәреүе, һижри буйынса 1126, миләди буйынса 1714 йылда Рәсәй менән дуҫлыҡ килешеүен имзалаһа ла, һижри буйынса 1130, миләди буйынса 1718 йылда Рәсәйҙән Хиуаға ебәрелгән ғәскәрҙе юҡ итеүе телгә алына260.

Был ваҡиғалар ҙа Ҡәйеп ханға ҡарай. Һәр хәлдә ҡаҙаҡ ханы Әбелхәйер, 1732 йылда Рәсәй дәүләтенең хакимиәтен ҡабул иткәнгә ҡәҙәр "Ир Ҡәйеп" тигән исем

менән милләттең хәтерендә ҡаһарман сифатында һаҡланған был зат, Төркиә менән тығыҙ бәйләнештә булыу менән бергә, башҡорттарҙың Рәсәйгә ҡаршы баш күтәреүҙәрен дә яҡлаған, ҡалмаҡ баҫып алыусыларына ҡаршы торған һәм бөтә Азия масштабында сәйәсәт йөрөткән бөйөк бер хөкөмдар булған.

Петр шул уҡ йылдарҙа Пухгольц исемле бер офицер етәкселегендә Иртыш йылғаһы буйлап Алтуни Пул Эркети исемле ергә ғәскәр ебәргән. Батша, Бекович шул тирәлә, тип уйлап, Пухгольцҡа Һырдарья йылғаһының башында Бекович ғәскәрҙәре менән берләшергә әмер бирә. Шул рәүешле Арал күле, Иртыш, Һырдарья буйы, бөтә Ҡаҙағстан рус ҡулына төшөп, ҡалмаҡ һәм башҡорттар рус ҡамауында ҡаласаҡ ине. Ләкин Пухгольц был Эркетины көнбайышта түгел, ә көнсығыш Төркөстандағы Яркент ҡалаһы тип уйлаған һәм үҙе юлда төҙөгән бер нығытмала ҡалмаҡтар һөжүменә дусар булып, 4700 кешелек ғәскәренән ҡалған 700 һалдат менән көскә ҡотолоп, Себергә кире сигенгән.

Шул уҡ ваҡытта Төркиә хөкүмәте Ҡырым менән Иҙел араһындағы территорияла актив хәрәкәт итә. Ҡырымдың мәшһүр ҡаһарманы Бәхтегәрәй Солтан менән берлектә Осман дәүләте һалдаттары ла ҡатнашҡан был һөжүм хаҡында Рәсәй сит ил эштәре вәкиле Остерманн 1736 йылдың 12 апрелендә хөкүмәткә тапшырған нотаһында ентекле рәүештә һүҙ йөрөтә. Уның бәйнә-бәйнә яҙыуына ҡарағанда, 1716 йылда "Татар тайфалары менән Осман ғәскәрҙәре һәм Аҙаҡ пашалары" Воронежды, Дмитриевты, Харьковты, Изюмды һәм Дон (Тен) йылғаһы буйындағы Рәсәй ҡәрйә һәм ҡалаларын баҫып алып талай. 1717 йылда иҫкә алынған Солтан (йәғни Бәхтегәрәй Солтан) татар, Осман ғәскәре Аҙаҡ пашалары менән бергә Мәскәү еренә инеп, Царицын (хәҙерге Сталинград), Пенза, Сембер (Симбирск), Саргов (Саратов, Һарытау), исемдәрен яҡшы уҡып булмаған тағы ике ҡала һәм ҡасабалар янына килеп, нисәмә ҡәрйәне баҫып ала, 30 000-гә ҡәҙәр русты әсир төшөрә, 1718 йылда шул уҡ Солтан (йәғни Бәхтегәрәй Солтан) Черкесск ҡалаһын баҫып алырға килеп, ул тирәләге казак һәм ҡалмаҡтарҙы әсир итә, Кубань татарҙары менән Осман ғәскәре ошо уҡ йылда Харьков менән тағы бер ҡаланы баҫып ала261. Башҡорттар ара-тирә килеп баҫып алған был Пенза, Сембер, Һарытау сиктәрендә Ҡырым һәм Кубандағы Сыңғыҙ хан нәҫеле принцтары менән Осман ғәскәрҙәренең берҙәм хәрәкәте Башҡортостандағы күтәрелешкә ғәмәлдә булышлыҡ иткән. Башҡорттар һәм татарҙар араһында шул быуаттан башлап сабыйҙарға "Бәхтегәрәй" исеме бик йыш бирелеүе тап ошо тарихи ваҡиғаларға бәйле, йәғни ул өлкәләрҙә халыҡтың азатлыҡҡа ынтылыу хәрәкәтенең бер билдәһе булыуы шикһеҙ.

Тик был заман шәреҡтә хөкөм һөрөүсе ҡалмаҡтар тыуҙырған хәүеф бермә-бер артты. Хөкөмдарҙары Сивен Рабтан, Ҡытай ғәскәрҙәренән еңелеп, үҙ ҡалмаҡтары менән бөтә шәреҡ, Ҡаҙағстан далаларын баҫып алды. 1720 йылда ҡалмаҡ ғәскәрҙәре ҡаҙаҡ хандарынан Ҡәйеп хан идараһында булған Сайрамды биләне. Ҡәйеп хан 1718 йылда уҡ Энгюз йылғаһы янындағы һуғыштарҙа ҡалмаҡтарҙан еңелеп, ике һалдаты менән пәйтәхете булған Төркөстан (Ясы) ҡалаһына ҡайта. 1723 йылда ҡалмаҡтар Ташкентты ҡаҙаҡтар ҡулынан тартып ала. 1716 йылда Өсөнсө Әхмәткә яҙған хатында Ҡәйеп хан Фирғәнәләге Андижан менән ул заман идара иткән Мин ырыуы бейҙәре уға буйһоноуы хаҡында хәбәр иткән. Петр ҙа, көнбайыш ҡалмаҡтарын алдап, үҙенә тоғро ҡалдырыу маҡсатында, мөмкин булған бөтә сараларҙы күрҙе, 1720 йылда Петр, Иран походына сыҡҡас, Әстрханда Аюканы үҙе янына саҡырып, уға теүәл аудиенция бирә, һый мәжлесе ойоштора. Ҡарт Аюка үлер алдынан тәхетенең Рәсәйгә тоғро буласаҡ йомшаҡ холоҡло улына күсеүен тәьмин итте. Көнсығыш ҡалмаҡтарҙың баҫып алыуы арҡаһында хәлһеҙләнгән Ҡәйеп хан да башҡорттарҙың эшенә бүтән ҡатнашмаҫ булды. Был ханды ул дәүерҙә Хорезм виләйәте тирәһендә генә күрәбеҙ.

1720 йылдан һуң Петрҙың вәлиҙәре һәм башҡа юғары хеҙмәткәрҙәре Башҡортостанда ныҡлап нигеҙләнеү маҡсатында мөләйем сәйәсәт үткәрергә тырышты. Шуларҙан Петр канцлерының улы полковник граф Головкин башҡорт күренеклеләрен Өфөлә йыя һәм уларҙың "әүәлге гонаһтар, бигерәк тә ҡарағалпаҡтар менән берләшеп, хаин Алдарға эйәреп, бола күтәреү кеүек ҙур гонаһтары" ғәфү

ителеүен белдерә һәм "башҡорттар, ана шул Алдар һәм ҡарағалпаҡтар менән бергә меңдәрсә ғәскәр туплап, Өфө виләйәтендәге рус ауылдарын, мордва, сирмеш һәм башҡа яһаҡлы ауылдарҙы үртәне"262, – тип әйтә. Головкин рус золомонан ҡасып Башҡортостанға һыйынған татарҙарҙан һәм сыуаштарҙан 2271 кешене кире Ҡазан виләйәтенә күсергә мәжбүр итте. Бында иҫкә алынған Алдар ҙа, юғарыла иҫкә алынған Исәкәй улы Алдар ҙа, ҡарағалпаҡ ханы Ҡәйеп Башҡортостанға алып килгән ғәскәрҙең башында торған кеше лә, 1709 йыл ваҡиғаларында был ханды эйәртеп алып килеүсе, ләкин исеме иҫкә алынмайынса тик "башҡорт юлбаҫарҙары башлығы" тип аталған зат та ошо бер үк Алдар булған.

Иҫкә алынған Головкин 1720–1722 йылдарҙа Башҡортостан картаһын төшөрә. 1722 йылда ҡасҡын татарҙар менән сыуаштарҙан 19815 кешене Ҡазан яғына күсергә мәжбүр итте. 1724 йылда башҡорттар үҙ мәмләкәтенә ҡасып килеүселәр хаҡында хәстәрлек күргән һәм ҡасҡын татарҙарға: "Ҡазан виләйтендә нисек йәшәрһегеҙ... яҡын арала Рәсәйгә ҡаршы бығаса тиңе булмаған һуғыштар булырға тора, Себер һәм Яйыҡ казактары ла беҙҙең менән бергә буласаҡ", – тигәндәр. Ғәмәлдә улар рустарға яһаҡ түләгән татарҙарҙы был бурыстан ҡотолдорорға тырышҡандар. Башҡорттар шул йылда Өфө виләйәтендәге Бәрҫеүән күле янында ҡоролтай уҙғара. Алдар тархан 700 кешеһе менән, Сәйет баһадирҙың 1707 йылда ҡырғыҙҙарға ҡасып киткән улы 500-гә яҡын ҡырғыҙ менән ошо ҡоролтайға килгән. Һәр тарафтан күл янында йыйылған башҡорттар һәм татарҙар Өфөгә һөжүм итергә ҡарарлаштыра263. Был хаҡта хәбәр итеүсе рус хеҙмәткәре: "Беҙҙең батшабыҙ Себер һәм Камчатка аша Америкаға юл булыу-булмауын асыҡлау менән мәшғүл, ә илбаҫар башҡорттар уға ҡул күтәрә", – тип яҙа. Петр был юлы ла башҡорттарға ҡалмаҡтарҙы ҡаршы ҡуйҙы. 1724 йылдың февралендә ҡалмаҡ ханы Аюка үлә. Урынына Петр тарафынан тәғәйенләнгән Доржа рус әмере буйынса башҡорт һәм ҡарағалпаҡтарға ҡаршы көрәште. Ул хатта ҡалағалпаҡ, ҡырғыҙ һәм башҡорттарҙың берләшкән ҡеүәтен Әстрхан виләйәтендәге Үҙән йылғаһы буйындағы һуғышта еңгәс, 415 үлектең ҡолағын киҫеп, Әстрхан вәлийе Волынскийға килтергән264. Ләкин 1725 йылда ҡарағалпаҡ, ҡырғыҙ һәм башҡорттар Яйыҡ йылғаһы буйында берләшеп, ҡалмаҡтарға һөжүм итә. Боронғо рус раскольниктарының рәйесе Генин да башҡорттар менән берҙәм була. Ләкин башҡорттар, ҡалмаҡтар менән рустар араһы боҙолоуҙы һиҙгәс, яңынан ҡалмаҡтарға барып дуҫлыҡ тәҡдим итер булғандар. 1727 йылда башҡорт рәйестәре, яңы ҡалмаҡ хакимы Дундук Омбоға килеп: "Һеҙ Рәсәйгә ҡаршы көрәш башларға теләйһегеҙ. Ысын булһа, беҙ ҙә һеҙгә ҡушылырға әҙербеҙ. Беҙҙе союздаш сифатында ҡабул итегеҙ", – тигәндәр. Был хаҡта хәбәр алған рустар башҡорттарға ҡарата яңынан мөләйем сәйәсәт үткәрә башлай265. Дундук Омбо 1731 йылда Төркиә подданныйлығын ҡабул итә, тәүҙә Төркиәгә 11 000 йорт ҡалмаҡ буйһонһа, 1728 йылда 28 000 йорт буйһона. Дукдук Омбо тарафынан Төркиәгә ебәрелгән илселәр араһында был юлы ла иштәктәр булыуы күренә. Ләкин рустар 1735 йылда буласаҡ һуғышта Дундуктың османдар яғында булыуына ҡаршы эш алып барҙылар. Шул рәүештә 1707 йылдан башлап 17 йыл дауам иткән башҡорт күтәрелеше Петрҙың ыңғай сәйәсәте һөҙөмтәһендә тынысландырылды. 1728 йылда Йәнсура улы Йәнәй етәкселегендә бер башҡорт күренеклеләре һәйәте Петербургҡа килеп, рус воеводаларына шикәйәт итеп, низағлы мәсьәләләрен солох юлы менән хәл итә. Был талаптарға иғтибар йөҙөнән Петр "Дүрт юл башҡорттары"н 1729 йылда Ҡазан вәлилегенән айырып, Өфөнө үҙәк итеп, айырым виләйәт төҙөтә. Ләкин 1735 йылда Рәсәй – Төркиә һуғышы башланыр ваҡытта рустар Башҡортостан менән Ҡаҙағстан араһында тимер пәрҙә ҡорорға булды. Быға ҡаршы яңы күтәрелеш башланды, ул иһә "Аҡай, йәиһә Килмәк абыҙ күтәрелеше" тип аталды.

## §30 Был дәүерҙә башҡорт иленең эске хәле

Рустар, 1586 йылда Һамар һәм Өфөлә үҙ нығытмаларын төҙөп, Көнбайыш Себерҙә Күсем хан биләмәһен юҡ иткәс, бөгөнгө Һамар – Силәбе тимер юлы

һыҙығының төньяҡ тарафындағы башҡорттар рус идараһына инде. 1649 йылда Юрматы башҡорттары ла буйһонғас, рустар Өфөнөң көньяғында Табында нығытмалар һәм рус ауылдары барлыҡҡа килтерҙе, шул заман көньяҡ-көнсығыш Башҡортостанда ла, исем өсөн генә булһа ла, хакимиәт булдырҙы. Был мәлдә Башҡортостандың Рәсәйгә буйһоноуы тик номиналь формала ине, билдәләнгән түләмдәр ҙә ғәйәт әһәмиәтһеҙ символик рәүештә булды. Ошоларҙың бәғзеләрен дәлилләп үтәйем: Петр 1722 йылда "Башҡорттар араһында рус шымсылары булдырыу" эшен тыйҙы, сөнки башҡорттар был шымсыларҙың кемлеген аңлап, уларҙы төрлө улустарҙан ҡыуып сығарғандар. Шул уҡ йылда һәр ерҙә Рәсәй үҙ тәьҫирен көсәйткәндә "сиккә яҡын булғанлыҡтан башҡорттарҙан ғәскәр һәм һалым алыу хаҡында фарман" сыҡты. Петр 1724 йылда Әстрхан һәм Өфө виләйәте башҡорттарынан һалым түләтеүҙе һәм үҙ ирке менән килгәндәрҙе ғәскәргә алыуҙы тәртипкә индереү буйынса фарман иғлан итте. Ләкин башҡорттар күп ерҙә быға ҡолаҡ һалманы. Өҫтәүенә, 1725 йылда һалдатлыҡтан, яһаҡтан һәм дини эҙәрләүҙән ҡасҡан Ҡазан татарҙары башҡорт өлкәһенә күсеп килгәйне. Шул уҡ 1725 йылда Башҡортостанға һыйынған 3892 мосолмандың тик 92-һен рустар үҙ мәмләкәтенә, йәғни Ҡазанға, кире ҡайтара алды. Башҡорттар уҫал булғанлыҡтан, рустар уларҙы үҙаллылыҡтан мәхрүм итә алмай ине. 1649-1735 йылдар араһында үткән 86 йыл эсендә көньяҡ-көнсығыш Башҡортостандың Өфө һәм Табындан көньяҡ өлөшөндә эске мөхтәриәт көслө ине әле. Рус өгөтләүенә алданып, Рәсәй ғәскәренә ҡушылғандар иһә быға тик үҙ ихтыяры менән риза булғандарҙан, йә иһә һәр төрлө мажара эҙләүселәрҙән генә тора ине. Петр II заманында, 1728 йылда рус воеводалары идараһында булған башҡорттар хаҡында хатта "башҡорттарға золом эшләмәү, уларҙан аманат алыуҙы туҡтатыу", ә 1729 йылда "башҡорттарҙан һалым йыйыу шенә инсафлы һәм киң күңелле, аныҡ фекер йөрөтөүсе һәм шәфҡәтле хеҙмәткәрҙәр ебәреү" хаҡында фармандар сыҡты. 1734 йылда башҡорттар өсөн Ырымбурҙа махсус хакимиәт асылды, был хакимиәт һәйәт (комитет) рәүешендә ойошторолоп, өс хакимдың икеһе башҡорт һәм береһе рус яғынан һайланған, был өсөнсө ағза итеп битараф кеше тәғәйенләнгән. Шул уҡ йылда башҡорттарҙың тархандарын дәфтәрҙәргә теркәү фарманы бирелде. Был көнгә ҡәҙәр башҡорт тархандары, бигерәк тә көньяҡ-көнсығыш Башҡортостанда булғандары, рус тарафынан танылып регистрацияға алынмағайны. 1734 йылда Илектә сығарылған тоҙ хөкүмәт монополияһына алынғас, тоҙ өсөн башҡорттарҙан аҡсалата байтаҡ ҙур түләм талап ителде, шуға күрә башҡорттар был сараларҙы үҙҙәренең хоҡуҡтарына һәм хөрриәтенә ҡул һуҙыу тип аңланы. Ырымбур ҡалаһын төҙөй башлауҙан әүәл үк ғәскәрендә үҙ ирке менән хеҙмәт итеүсе тархандар булған хәлдә лә, Юрматы улусы үҙәге Һикәҙе йылғаһы буйындағы Хажи мәсете исемле ерҙә йыйын – халыҡ ҡоролтайы тупланды. Боронғо хандарҙан Күсем улдары, ҡаҙаҡ хандарынан Ҡәйеп хан һәм уның улдары төрлө күтәрелеш һәм яу ваҡыттарында дөйөм хәрби етәксе һәм хакимдар сифатында танылһа ла, тыныс дәүерҙә был принциптарҙың Башҡортостандағы хакимиәте номиналь рәүештә ҡала ине. Йәғни хандар бөтә башҡорт өлкәһендә танылған дөйөм бер хөкүмәт ҡорманы, һәр улус үҙ тарханына һәм бейенә буйһонды. Ҡазан вәлийе Апраксин 1709 йылда Петрға ебәргән рапортынды башҡорттар тураһында ошолай тип яҙа: "Был мәлғүн башҡорттар күмәк, һуғышсан һәм ғәскәри бер милләт. Ләкин баштары боҙоҡлоҡтан, һис юғында Дон казактарындағы кеүек булһа ла, барыһы ла таныған дөйөм бер атамалары ла, эштәре хаҡында мөрәжәғәт итерлек дөйөм бер үҙәктәре лә юҡ"266. Башҡорттар ғөмүми бер "атаман"ға буйһонмауға ҡарамаҫтан, "Хажи мәсете"ндәге йыйын уларҙың хөкүмәте ине. Рустарға төбәп яҙылған документтар унда йыйылған "ете ырыу бейҙәре" исеменән ебәрелер булған. Абылай хан рус ҡағыҙҙарында "башҡорт ханы" тип аталған кеүек, Кесе хан да (йә иһә солтан) "башҡорт ханы" тип аталған267. Юрматы улусы 1649 йылда рус хакимиәтен бәғзе шарттар нигеҙендә ҡабул итһә лә, ебәргән яҙыуҙарында улар үҙҙәрен мөхтәр, йәғни ярым үҙ аллы өлкәнең хужалары кеүек мөрәжәғәт итә. Мәҫәлән, Нуғай юлы башҡорт бейҙәренең Өфөләге рус воеводаһы кенәз Волконскийға 1663 йылдың 16 ноябрендә яҙған хаты беҙҙең көнгә тиклем һаҡланған. Унда башҡорттар үҙҙәренең батшаға ебәрелгән һәм батшанан уларға килгән "илселәр" хаҡында яҙғанда, "персона

нон грата" булған әҙәмдең илсе итеп ебәрелмәскә тейешлеге тураһында һүҙ алып бара һәм "был шарттар ҡабул ителмәгән тәҡдирҙә беҙ һеҙгә ҡарата дошмандарса эш алып барасаҡбыҙ, асыуланыш булмаһын" тип иҫкәртә268.

## §31 Күсем улы Аҡай, Алдар тархан һәм Килмәк абыҙхәрәкәттәре

Петр I Полтава янында еңеүгә өлгәшкән 1709 йылдан алып уның ҡыҙы Елизавета тәхеткә ултырған 1741 йыл араһында көнсығыш Рәсәйҙәге төрк һәм башҡа мосолмандар тамам ҡоллоҡ хәленә төштө. Петр, швед һуғышында еңгәс, Ладога һәм Вышний Волочок каналдары менән Балтиканан Хәзәр диңгеҙенә караптар йөрөтөү юлын асып, Хәзәрҙе рус диңгеҙенә әүерелдерергә ҡарар итте. Үҙе Волга буйлап кәмәләрҙә Хәзәргә етеп, Дербентҡа тиклем килде. 1723 йылда Ирандан Баҡы, Гилян, Мазандаран һәм Астрабадты тартып алыуға өлгәште. Петр II заманында 1728 йылда Себер юлы аша Ҡытай менән дипломатик мөнәсәбәт булдырылды. Ҡытайҙағы Мин династияһының Ҡанхси исемле бөйөк императоры (1663–1723) Урта Азияны биләү хәрәкәте башлай. 1662 йылда 100 миллион кеше тәшкил иткән ҡытай халҡы 1741 йылда 143 миллионға барып етә. Был иһә уларҙы башлыса төньяҡ-көнбайышҡа таралыу мәжбүриәтенә килтерә. Урта Азияла ҡеүәтле дәүләт ҡорған ҡалмаҡ хөкөмдары Сивен Рабтан (1697–1727) Ҡытай ғәскәрҙәре баҫымы арҡаһында, Монголстанды ҡалдырып, көнбайышҡа сигенде һәм 1714 йылда Илек йылғаһы буйында ерләште, 1720 йылда барлыҡ Һырдарьяны һәм 1723 йылда Ташкент ҡалаһын баҫып алды.

Беренсе Ҡәйеп хандың атаһы Тубырсыҡ әле 1695 йылда уҡ Һырдарья буйындағы Ясаны үҙәк итеп, Кесе Йөҙ ханы вазифаһын үтәй ине. Ә Беренсе Ҡәйеп хан иһә бөтә Һырдарья буйы һәм ҡарғалпаҡ иле менән идара итте. 1724 йылда был тирәне ҡалмаҡ ханы Сивен Рабтан яулап алғас, Ҡәйеп хан Яса (Ясы, Йесе тип тә әйтәләр), Сауран һәм Ташкентты баҫып алыуҙан һаҡлап ҡалды269. Истамбулға Өсөнсө Әхмәткә яҙған хатында ла Яса (Төркөстан) иле Ташкентты ул үҙенең пайтәхете сифатында иҫкә алған. Шул уҡ ваҡытта, Сивен Рабтан Һырдарья буйында көслө ҡалмаҡ ғәскәре менән ерләшкәс, Ҡәйеп хан Хиуаға күсенде. Ҡарағалпаҡтар менән Күсем нәҫеле Ҡәйеп хан бине Ишем (бине Хәсән) идара итте270.

Бөтә ҡаҙаҡ хандары һәм ырыуҙары үҙ тарихтарында "Аҡ табан шубурунду", йәғни "милләт ялан аяҡ ҡасырға мәжбүр булып, таҙа аҡ табандарыбыҙ ҡыҙыл ҡанға буялған көндәр" тип тасуирлаған һәләкәт дәүере башланды. Сивен Рабтандың хәләфе булған Галдан-Цэрэн (1727–1745), ҡытайҙарҙың уңышҡа өлгәшеүе һөҙөмтәһендә Көнсығыш Төркөстан һәм Көнбайыш Монголстандағы ерҙәрен юғалтып, Ҡаҙағстанға һәм Етеһыуға күсте. Ҡаҙаҡ хандарын Рәсәй үҙенең юғары хакимиәтен танырға мәжбүр итте. Кесе йөҙ ҡаҙаҡ ханы Әбелхәйер ҙә 1723 йылда Рәсәйгә буйһонорға булды. Шулай итеп, Иҙел һәм Яйыҡ тарафтарының рустан ҡотолоу өмөттәре киҫелде.

Әммә башҡорттар был юлы ла ҡаушап ҡалманы, һуңғы сиккә тиклем ҡаршы торорға, тигән ҡарарҙарына тоғро ҡалды. Рустар үҙ хәлен нығытыу маҡсатында Рәсәй хакимитен ҡабул иткән ҡаҙаҡ ханы Әбелхәйерҙе: "Һиңә үҙ ҡәбиләләрең һәм дошмандарың өҫтөнән хакимлығыңды тәьмин итеү өсөн ҡала төҙөп бирәйек", – тип ышандырып, башҡорт менән ҡаҙаҡ араһында Яйыҡ йылғаһы буйында нығытмалар ҡора башланы. Беренсе итеп Үр йылғаһы Яйыҡҡа ҡойған ерҙә ҡала бина итергә тейештәр ине. Хан рус мәкеренә алданды, тәҡдимде ыңғай ҡаршыланы, бының хатта ҡәбиләләр өҫтөнән үҙ йоғонтоһон тәьмин тиеүҙә файҙаһы булырына өмөтләнеп, шатланып ризалыҡ бирҙе. Башҡорттар иһә Яйыҡ буйында ҡалалар төҙөлөүҙең нимәгә алып барасағын, бының һөҙөмтәһендә үҙҙәренең һәр тарафтан рус ҡалалары менән ҡамап алынасаҡтарын бик яҡшы аңлай ине271. Шул заманда башҡорт вәкиле сифатында Петербургта булған Түләкәй улы Тоҡсура башҡорттар араһында йоғонтоһо ҙур булған Байлар ырыуы түрәһе Килмәк Абыҙға ебәргән йәшерен хатында был төҙөлөшкә юл ҡуймаҫҡа кәрәклеген иҫкәрткән. Абыҙ тип ул заманда уҡый-яҙа белгән

менәүәр әҙәмгә әйткәндәр, йәғни "баҡшы" тигәнде аңлата272. Килмәк Абыҙға яҙған хатында Түләкәйҙең рустар башҡорттарға ҡаршы үткәрәсәк яңы сәйәсәттең асылын ни рәүешле аңлатыуын белмәһәк тә, был хаттан яңы сәйәсәттең Башҡортостанды көньяҡтан һәм көнсығыштан рус нығытмалары менән ҡамауға йүнәлтелеп, ул планды тормошҡа ашырғанда иң мәрхәмәтһеҙ саралар ҡулланыласағы хаҡында белдереүен күрәбеҙ.

1732 йылда ҡаҙаҡ ханы Әбелхәйер Рәсәйҙең юғары хакимиәтен танып, рустар 1735 йылда Яйыҡ йылғаһы бородошонда Ырымбур (Орск) нығытмаһы төҙөгәнгә тиклемге рус-башҡорт мөнәсәбәтенә килгәндә, хәҙерге Һамар–Өфө–Златоуст тимер юлы һыҙығының көньяғында башҡорттар үҙ мөхтәриәтен һаҡлап килде, ә был һыҙыҡтың төньяғында улар Рәсәй менән тығыҙ бәйләнеш хәлендә булды. Көньяҡтағы башҡорттарҙың рус менән мөнсәбәте "илсе"ләр алышыу аша тормошҡа ашырылды. Алдар тархан һәм Күсем кеүек бейҙәр байтаҡ ваҡыт Рәсәй менән һуғыш хәлендә булғандан һуң батшаның юғары хакимиәтен таныған вассалдар сифатында рус вәлийенә, хатта Петербургка барған осраҡтарҙа әүәлге яу-дау мәлдәрендә ҡылған эштәре, мәҫәлән, рустарҙы әсир итеп Хиуаға һәм Иранға һатыуҙары, Хиуанан, Төркөстандан "хан" килтереүҙәре өсөн яуап тотмай ине. Алдар тархан 1732 йылда ла Әбелхәйерҙең ризалығы буйынса уның илселәре менән берлектә башҡорттарҙың вәкиле сифатында Петербургка барып килә. Анна һәм Петрҙың ҡыҙы Елизавета заманында был сәйәсәт тамырынан үҙгәрҙе: Башҡортостанды һәм Көнбайыш Ҡаҙағстанды тамам Рәсәй виләйәттәре хәленә килтереү өсөн Башҡортостандың төньяҡ, көнбайыш, көньяҡ һәм көнсығышында тотош нығытмалар теҙмәһе төҙөү ҡарарлаштырылды. Был эште тормошҡа ашырыу өсөн рустарҙың иң беренсе география ғалимы булған Иван Кириллов, беренсе тарихсылары Татищев һәм Петрҙың Истамбулдағы илсеһе Неплюев менән уның ҡуштаны Тевкелев, эскпедиция һәм комиссия сифатында ҙур ғәскәри көс һәм бай финанс менән тәьмин ителеп, Башҡортостанға ебәрелде. Кириллов европала диңгеҙ флоты эштәренә уҡыған картограф ине. Рәсәй атласын һәм "Бөйөк Рәсәйҙең данлыҡлы хәле" исемле китап сығарған, "Икенсе Камчатка экспедицияһы"на етәкселек иткән бик эшлекле бер белгес һәм дипломат булған. Татар мырҙаларынан Ҡотломөхәммәт Тевкелев та, Кириллов кеүек үк, Петр һәм уның ҡыҙҙарының һөйөклө һәм ышаныслы тип иҫәпләгән ярандарынан. Рәсми рәүештә христиан диненә күсмәһә лә, Петр янында хеҙмәт иткән сағында уны русса Алексей Иванович тип йөрөткәндәр. Устюгов уны христианлыҡ ҡабул иткән тип иҫәпләй273. Ул үҙе ҡаҙаҡ, ҡырғыҙ, башҡорт телдәрендә бик яҡшы һөйләшкән бер хатип. Петрҙың Дербент сәфәрендә ҡатнашып, Кавказдың менәүәр мосолмандарын батша яғына ауҙарыу юлында уңыш ҡаҙана. Дербент тарихы тураһында мәшһүр әҫәр яҙып, Петрға тәҡдим итә. Ҡаҙаҡтар уны рус шымсыһы тип үлтерергә ниәтләгәс, һүҙ оҫталығы арҡаһында ҡотолоп ҡала алған (Левшин, II, 100-сө бит). Тевкелев Петрҙың бик ышанған хәрби эшмәкәре була һәм генерал дәрәженә үрләтелә. Уның Ҡазан һәм Зөя (Свияжск) виләйәтендә ауылдары, мосолман татар һәм типтәрҙәрҙән торған ҙур биләмәләре була. Бәғзе туған-тыумасаһы христианлыҡҡа күскән. (Мат. Тат., 282-се бит). Шундай уҡ татар мырҙалары иҫәбенән булып, поместьеларын һаҡлап ҡалыу маҡсатында христианлыҡ ҡабул иткән Аксаков Исемле мырҙаларҙың купчий ҡағыҙы "татарса" яҙылған (Мат. Тат., 417-се бит). Тимәк, улар әле боронғо Ҡазан хандары заманынан уҡ поместье хужаһы булған мырҙалар, XVII быуатта уҡ батша ғәскәрендә хеҙмәт иткәндәр. Ҡотломөхәммәт Тевкелев ҡарағкалпаҡтар араһында батша аҡсаһына мәсеттәр төҙөткән, йома намаҙҙарына йөрөгән. Шул уҡ ваҡытта Неплюев Петербургка киткән ваҡытта Ырымбурҙа вәли вазифаһын атҡарған һәм мосолмандарға ҡаршы төрлө золом ҡылған.

Татищев – иҡтисадсы, индустрия үҫтереүсе. Күп ерҙә мәғдән эшкәртеүсе һәм башҡа фабрикалар ҡорҙо. Ихтимал, ул да сығышы буйынса татар нәҫеленән киләлер. Ырымбур виләйәтендә вәли булды, уны был урында сығышы нуғай мырҙаларынан булған Урус бәктең христианлыҡ ҡабул иткән ейәндәренән кенәз Урусов алмаштырҙы. Кириллов 21 нығытма һәм ҡала бина итте. Урусов урынына килгән Неплюев иһә 70-кә

ҡәҙәр ҡала төҙөнө. Бөтә был ғәйәт ҙур эш 1734–1758 йылдар араһында 20 йылдан ашыу ваҡытта башҡарылды.

Аҡай Алдар тархан, Килмәк Абыҙ һәм Күсем нәҫелдәренән Байбулат солтан мәмләкәтте аяҡҡа баҫтырҙылар. Рәсәй хөкүмәтенең яңы сәйәсәте тураһында Түләкәй улының Петербургтан яҙған хатын алыу менән Килмәк Абыҙ башҡорт ырыуҙары күренеклеләренән Йыһанғол улын, Ирәтҡол улын, Кимәт улын (ихтимал, Кимәк улы) саҡырып, "Хажи мәсете"ндә (йәғни хәҙерге Хажи ауылында) ҡоролтай, башҡортса йыйын, тупланы. Унда рустарҙың был эштәренә ҡорал менән ҡаршы торорға ҡарар иттеләр, күтәрелештең планын ҡорҙолар. Рустар "акаевщина", йәғни "Аҡай хәрәкәте" тип аталған был хәрәкәт башҡорттар араһында ла "Күсем улы Аҡай болаһы" исеме менән билдәле. Башҡорт күтәрелештәренең һис береһе хаҡында төркисә яҙма әҫәр һаҡланмаған, әммә Аҡай күтәрелеше тураһында бер төрки рисалә беҙҙең көнгә тиклем етеп, ҡыҫҡаса мәғәнәһе русса нәшер ителгән. Һуңынан аңлашылыуынса, рисаләнең татарсаһында булмаған мәғлүмәттәрҙе лә үҙ эсенә алған фарсыса варианты ла булған. "Хикәйәте Аҡай" исемле был рисалә Аҡай күтәрелешенән, бәлки, 30 йыл һуңыраҡ (XVIII быуаттың һуңғы сирегендә) яҙылғандыр274. Атаһы Күсем Күсмәт, Күсембәт (Күсмәмәт) кеүек, Аҡай яуы ла Мәскәүҙең көнбайыш Башҡортостанды Көңгөр, Сарапул, Минзәлә кеүек ҡала һәм нығытмалар менән төрлө яҡтан ҡамауы, башҡорттарҙың күрше ҡәүемдәр менән бәйләнешен киҫеү маҡсатында бик етди сараларҙың тормошҡа ашырыла башланыуы арҡаһында килеп сыҡҡан. "Хикәйәте Аҡай" рисаләһенән аңлашылыуынса, Аҡай менән рустар араһындағы һуғыш шулай башланған: Аҡай, үҙе көнсығыш Башҡортостандағы Тамъян ырыуының бейе була тороп, Минзәлә янында йәшәгән Йәнәй башҡорттарынан ер биләмәләре алып, был ҡаланан 50 саҡрымда үҙ хужалығын ҡорған. Уның бындай биләмәләре (улар иһә мотлаҡ рәүештә стратегик маҡсат менән ҡоролған булырға тейеш) Нуғай һәм Уса юлдарында ла булған. Рустар уға ҡаршы "Ҡазан сыуашы" тип йөрөтөлгән бер төркөм сыуаштарҙы файҙаланған. 1735 йылда Аҡайҙың атаһы Күсмәт (бында Күсембәк яҙылған) үлгәндән һуң, был сыуаштар аҙған, Аҡайҙың хужалығына килеп, аттарын урлар булғандар. Аҡай бер көндө был бурҙарҙы Ирнә йылғаһы буйында урынлашҡан Ураҙ ауылында тотоп үлтергән. араларынан береһе ҡасып, Минзәләләге рус ғәскәрен Аҡайға ҡаршы алып килгән. Һуғышта яраланған Аҡай рустар ҡулына әсир төшкән. Был ваҡиға бөтә Башҡортостанға мәғлүм булып, дөйөм күтәрелеш башланған. Нуғай һәм Ҡазан юлы башҡорттарынан Бәкәтин, Ҡыпсаҡ, Тамъян, Бөрйән, Аҡҡаҡ, Оран, Ҡыршан, Ҡуры, Ҡубави, Байлар (йәғни Бәйәттәр), Ҡарайҙар (Кирәйәттәр), Шурандар һәм Ҡырғыҙҙарҙан өс ҡәбилә, Яландарҙан (йәғни көнсығыш Уралдағы Ялан ырыуы) дүрт ҡәбиләнең барса күренекле бейҙәре мулла һәм ғалимдары, ҡатын-ҡыҙ һәм балалары бергә йыйылған. Пчҡаҡтарҙан Уразман батыр, Тамъяндарҙан Сәлим батыр, Яландарҙан Ғабдулла батыр, Байларҙан мәшһүр Килмәк Абыҙ был хәрәкәт менән етәкселек иткән дүрт бей булған. Тик ситтә ятҡан Ҡаңны әширәте генә был хәрәкәткә ҡушылмаған. Йыйында рус хәрби етәкселәренә хат яҙып ебәргәндәр: "Аллаһы тәғәлә исеме менән башлайбыҙ. Әүәл әсир алған Аҡайҙы беҙгә тиҙ ваҡыта кире ҡайтарығыҙ. Икенсенән, Минзәләгә кире ҡайтығыҙ һәм уның ситенә сыҡмағыҙ. Беҙҙең был талаптарыбыҙ ҡабул ителмәгән тәҡдирҙә һуғыш башлайбыҙ". Рус етәксеһе шундуҡ яуап биргән: "Миңә Яйыҡ (Урал) йылғаһы аша сығырға юл бирегеҙ, унда падишаһтың әмере буйынса бер ҡала бина итәсәкмен, унан Аҡайҙы һеҙгә ҡайтарырмын: хәҙергә беҙҙең янда ҡалһын". Йыйылған бейҙәр һәм халыҡ: "Әгәр рустар Яйыҡ буйында ҡала төҙөһә, беҙ тулыһынса әсир буласаҡбыҙ тигән һүҙ, беҙҙе бөтә яҡтан ҡамауға аласаҡтар, быға юл ҡуймайыҡ", – тип кәңәш ҡорған һәм рус хәрби етәксеһенә: "Улайһа һуғышҡа әҙер булығыҙ", – тип яуап ебәргән. Рустарға талап ителгән юл бирелмәй. Әлеге һуғышта рустарҙың күбеһе үлтерелә, күбеһе әсир төшә. Ләкин рустар күмәкләп өҫтө-өҫтөнә килеп торғанлыҡтан, һуғыш бер йылға һуҙыла. Рустар Минзәләгә сигенә, әммә Аҡайҙы азат итмәйҙәр. Башҡорттарҙан Тамъян бейе Сәлим һәм башҡа байтаҡ кеше шәһит була.

1736 йылдың яҙында башҡорт ғәскәрҙәре Кинель, Һаҙлы йылға, Кеше ҡырылған йылғалары буйында идара үҙәге ҡорҙо. Күп мосолман һәләк булды. Бигерәк тә Кинелбашы, Һаҙлы йылға һуғышында рус ғәскәре, шымсылар булышлығында башҡорт ғәскәренең идара үҙәгенә төндә һөжүм итеп, ғәскәр генә түгел, ауыл халҡын да аяуһыҙ ҡырҙы. Шәфәҡтә йылға аръяғында ауыр һуғыш алып барған ирҙәргә ярҙам итергә теләгән ҡатындарҙы тупҡа тоттолар. Ҡатындар балаларын һыуға батырып, һуғыш майҙанына ашыҡты. Ләкин һәммәһе лә ҡылыс аҫтында һәләк булды. Был һуғыштар тураһындағы һижри буйынса 1150 йылға ҡараған хәтирәләр Асылыкүл исемле ауылда Әхмәт исемле берәүҙең ҡулында һаҡланған дәфтәргә яҙылғайны. Һуғыш ҡыҙыулығында ирҙәрҙең – ҡатындарын, ҡатындарҙың үҙ балаларын үлтереү осраҡтары боронғо уғыҙҙарҙа һәм шулай уҡ ҡара ҡытайҙар килгәндә Сәмәрҡәнд янындағы Катван исемле ерҙә булған һуғыштарҙа күҙәтелеүе беҙгә мәғлүм. Был "Кеше ҡырылған" һуғышында еңелгәндән һуң, Юрматы иле һәм Туҡ буйы башҡорттары килеп ҡушылғас, Дим, Ашҡаҙар һәм Һайымыш* йылғалары баштарында, Күмертау исемле ерҙә бер нисә аяуһыҙ алыш булды. Ләкин шул арала башҡорттар Ырымбур ҡалаһын төҙөү өсөн ебәрелгән рус полктары менән бәрелеште һәм бер нисә тапҡыр еңелде. Халыҡ, артабан үҙ ватанында йәшәй алмаясағын яңлап, Яйыҡ аръяғына, Ҡаҙағстанға һәм Хиуаға, күсергә булды. Ләкин рустар, быдағы Алим уғлы ҡәбиләһе һәм төкмәндәр араһында "башҡорттар ерегеҙҙе алыу өсөн килә" тип һүҙ таратып, уларға һыйынған башҡорттарға һөжүм иттергән. Был төркмәндәр һуңыраҡ ҡалмаҡтар менән бергә Төньяҡ Кавказға күсә, хәҙер Ставрополь вилайәтендә йәшәгән төркмәндәрҙең ата-олаталары. Ошо һуғыштарҙа иң күп юғалтыуҙы Тамъян, Ҡыпсаҡ һәм Юрматы ырыуҙары кисергән. Ҡыпсаҡтарҙан был заман Аблай һәм Мәләнтәй Йәмәк улдары исемле тархандар иҫкә алына. Йәмәк улдары Емяков, Имаковтар көньяҡ һәм көньяҡ-көнсығыш башҡорттар араһында билдәле әшрәф ғаиләләре ине, боронғо тарихтарҙа күп иҫкә алынған Йәмәк әширәтенең башҡорттар араһында йәшәп ҡалғандары иҫәбенән.

Тамъяндар был һуғыштарҙа башҡорттарҙың иң ҡыйыу һәм иң ныҡышмалы ғәскәре сифатында танылған. Башҡортта "Яу тиһәң, Тамъяндан һора, дау тиһәң (йәғни низағ, ғауға), һарайлынан һора", тигән боронғо һүҙ бар. "Тамъян" һүҙе "тама"нан (йәғни һаран. – Ә.Ю.) килә275, "һарайлы" иһә Һарайл ҡалаһынан килә, ҡала кешеһе тигән һүҙ. Тамъян ҡатындары, Һаҙлы йылғаның аръяҡ ярында ҡалған ирҙәре сафына ҡушылыу өсөн, балаларын йылғаға батырып, ҡаршы яҡҡа йөҙөп сығып һуғышҡан. Ҡыҫҡаһы, Һаҙлы йылға һәм "Кеше ҡырылған" – башҡорттарҙың ватан һөйөү һәм уның өсөн шәһит булырға әҙер тороуҙарының үлмәҫ хәтирәһе ул. Рустар был һуғыштарҙан һуң Аҡай бейҙе Минзәлә ҡалаһында язалай. Икенсе бер риүәйәттән күренеүенсә, уны Петербургҡа алып килеп, шунда язалағандар.

Кеше ҡырылған Һаҙлы йылға, Дим башы тирәһендә барған һуғыштарҙың үтә көсөргәнешле булыуы бер нисә сәбәп менән аңлатыла. Беренсенән, рустарҙың халыҡ бик яратҡан Аҡайҙы азат итмәүе. Икенсенән, рустарҙың башҡорт тупрағын тартып алып, христианлыҡҡа күскән ҡалмаҡтарҙы шунда ерләштеререгә ниәтләүе. Ниһәйәт, өсөнсөнән, Яйыҡ башынан урын биләп, Тоҙтүбәгә тиклемге араны рус нығытмалары менән ҡамап алырға ҡарар итеү. Буддист ҡалмаҡтарҙың рус тотҡонлоғона ҡаршы торорлоҡ һис бер таянысы юҡ ине. Аюка хандың туғаны Догар тайша һәм уның ейәне үҙенә ҡараған бөтә әширәттәре менән берлектә христиан диненә күсте. Бынан һуң ҡалмаҡ принцы "Петр тайша" исемен, ҡатыны "Елена" исемен алды. Башҡорттарға ныҡ дошман булған ҡалмаҡтарҙың рус ҡаршыһында мәртәбәләре ҙур булды. Бөтә был дин алмаштырған ҡалмаҡтар Кинель, Суҡ, Туҡ, Ҡондорса һәм Ыҡ йылғалары буйында, йәғни әле генә һүҙ барған һуғыш майҙандарында ерләшергә тейеш ине276. Христиан ҡалмаҡ ғәскәрҙәре рус һалдаттары менән бергә башҡортҡа ҡаршы һуғышты. Был эш барып сыҡһа, мосолман ҡаҙаҡ өлкәһе мосолман башҡорт өлкәһенән бер фанатик шәреҡ ҡәүеме тарафынан айырыласаҡ, дин алмаштырған бөтә ҡалмаҡтарҙы ошо ерҙәрҙә йорттар ҡороп ерләштерәсәктәр ине. башҡорттарҙың был һуғыштар һөҙөмтәһендә ҡулдарына төшөрә алған берҙән-бер ҡаҙанышы – ҡалмаҡтарҙы

ҡурҡыта алыу, рустарҙың да башҡорт ерендә христиан ҡалмаҡтарҙы ерләштереү эшенән ваз кисеүе, шул рәүешле рус ихтыярын һындыра алыу. Күмәк һәм аяуһыҙ шәрҡи ҡәүем ерләшкән христиан далаһына әүереләсәк был өлкә һуңынан Туҡ-Соран кантонын тәшкил итеп, башҡорттар ҡулында ҡалды.

Ошо ҙур яуҙа башҡорттарҙы ныҡ өҙгөләндергән тағы бер хәл – Минзәлә һәм "Кеше ҡырылған" һуғыштарында Ҡазан татарҙарынан бер төркөмдөң, бигерәк тә Ҡорманай исемле әҙәмдең, һәм Уржум сирмештәренең русҡа ярҙам итеүе, төнөн юл күрһәтеп, башҡорттарҙың идара үҙәгенә көтмәгәндә дошман килтереп, аңғармаҫтан баҫып алыуы булды277. Ихтимал, улар Тевкелевтың агенттары булғандыр. Христиан ҡалмаҡтарҙы ерләштереү һәм төйәк майҙандарын билдәләү хаҡында – Рычков278, ә Тевкелевтың Рәсәй колонизаторлығының иманһыҙ бер хеҙмәткәре279 ролен үҙ өҫтөнә алыуы тураһында Ғабдулла Баттал Таймас280 ентекле яҙған. Хәҙерге Ҡазан тарихсыларынан С. Бикбулатов281 һәм проф. Ғәзиз Ғөбәйҙуллин282 был типтағы шәхестәрҙе, бигерәк тә алда һүҙ буласаҡ Батыршаһ мулла кеүек күтәрелеш менән етәкселек иткәндәрҙе, "буржуаз синыф" вәкилдәре тип баһаланы. Асылда иһә "солох һөйөүсе", "пацифист" бер төркөмдө тәшкил иткән был даирә, Ҡазан ханлығы ҡолағанға тиклем үк русҡа ҡаршы тороуҙың мәғәнәһе булмаған, тип аңлатырға тырышып, үҙ булмышын фаш итте.

Тевкелев менән Ҡорманай кеүек инсандарҙың ата-бабалары уҡ, бәлки, яуыз Иванға хеҙмәт иткәндер. Был батша Ҡазанды баҫып алырға йыйынған саҡта Тевкелевтар ғаиләһе батшаның төп әҙерлек алып барған Свияжск (Зөя) ҡалаһында йәшәүе, бында уларҙың поместьеларында крәҫтиән булған мосолман татарҙарҙың Тевкелевтарҙы һис яратмай, уларға ҡаршы баш күтәреүҙәре тураһындағы (Мат. Тат., 416-сы бит) мәғлүмәт тә шуны уҡ күрһәтеп тора. Ә инде татарҙарҙың ватанға тоғро булғандарынан Батыршаһ мулланы ҙур бер күтәрелештең башында күрербеҙ. Был хаҡта һүҙ алдараҡ булыр.

"Кеше ҡырылған" һуғыштарынан ҡалған ҡәбер таштарының һижри 1148 йылға ҡәҙәр һаҡланыуы хаҡында ишеттем.

Бында Аҡай менән Алдарҙың сығышы һәм кем булыуы хаҡында яҙғандарыбыҙҙы тамамлап ҡуйыу кәрәктер. Күсмәттең атаһы Түләкәй – Тамъян башҡорттары әшрәфенән. Уны "Улағай" тип тә атайҙар. Был "Оло ағай" тигәнде аңлата булһа кәрәк. Улы Күсемдең исеме башҡорт һөйләшендә "Күсим" тип әйтелә, фарсыса яҙылған "Аҡай хикәйәте"ндә "Күсмәмәт" тип яҙыла, рус ҡағыҙҙарында "Кучмет" тип тә алына. Асыл исеме "Күсмөхәммәт" булһа кәрәк, ул ваҡытта был затҡа "Аҡай" кәлимәһе ҡушылып әйтелгән. Уның улы Аҡайҙы бүтәнсә исемләү осрамай. Рус яҙыуҙарында Аҡай хаҡында "татар" тип әйтелһә лә, был Көнбайыш Себерҙәге боронғо Күсем хан хакимлығына ҡараған төркмән татары тигәнде аңлата, ул Тамъян ҡәбиләһе бейе (старшинаһы) була. Аҡай исеме өсөһө өсөн дә ҡушамат рәүешле ҡулланыла. Үзбәк хандарында "Аталыҡ" менән бер рәттән "Ағалыҡ" атамаһы ла, "Аҡай" атамаһы ла булған283. Был Аҡайҙар Алдар тархан һәм Ураҡай бей кеүектәр менән бергә гел Арал күле тарафындағы Күсем улдарына барып, уларҙы көнсығыш Башҡортостанға саҡырып килтерер булғандар; Аҡай үҙе Ҡазан, Нуғай һәм Уса юлдарын бергә ҡушып, бөтә Башҡортостан бейе булырға ҡарар итә. Алдар – шамани ғөрөф-ғәҙәткә бәйләп бирелгән бер исем. Был Бөрйән ҡәбиләһенең боронғо хандар заманынан нәҫелдән нәҫелгә килгән тархтарына бәйле. Алдарҙың боронғо тарханлыҡ дәрәжәһе Рәсәйҙең әбей батшаһы тарафынан яңыртылып, уның 1734 йылдың 22 ғинуарында бирелгән ярлығы бар: атаһы Иҫәкәй, уның атаһы Ҡәҙербәк, уның атаһы Бабахты. Бабахты – XVI быуатта боронғо хандар заманында йәшәгән бей. Алдар тархан Күсем улдарының һәм ҡаҙаҡ хандрының иң ихлас тарафдары булған. 1649 йылда Юрматы ҡәбиләһе номиналь рәүештә Рәсәй хакимлығын ҡабул иткәс, көнбайыш Башҡортостан кеүек үк, урта Башҡортостан да Рәсәй хөкөмөнә инә. Көнсығыш Башҡортостан илдәре иһә, Күсем улдарына тоғро ҡалған хәлдә лә, рус хөкүмәте уларҙың бей һәм тархандарынан ғәскәр ала башлаған. Шуға күрә был Алдар ҙа бер нисә тапҡыр рус ғәскәрендә хеҙмә итә. Ләкин рус хакимиәтен, рустарҙың Башҡортостандағы эске эштәргә ҡыҫылыуын

һис ҡабул итмәй, был яҡлап хандарға тоғро ҡала. 1740 йылда, бик өлкән йәштә булыуы сәбәпле, Ҡараһаҡал күтәрелеше ваҡиғаларынан ситтә ҡалһа ла, ул рус генералы Соймонов тарафынан башҡа башҡорт күренеклеләре менән бергә Минзәләгә килтерелеп, унда язаға тарттырыла. Аҡай ҙа, ғүмеренең һуңында рустарға ҡарата итәғәтле сәйәсәт ҡулланыуына ҡарамаҫтан, Алдарҙан һуң 4 йыл үткәс, әсир ителеп язалана. Күсем дә, Алдар ҙа мәмләкәттә ислам мәҙәниәтен һәм уҡымышлыҡ таратыу өсөн Дағстандан, Хиуа һәм Бохаранан ғалимдар килтерә торған булған.

Күсем батыр (йәғни Күсмәт) 1708 йылда эшмәкәрлеген бик киң йәйелдергән. Нуғай юлының Ыҡ буйындағы Юрматы илендә, Ҡазан юлының Минзәлә яҡтарында Йәнәй башҡорттарынан ер биләмәләре алыпмы, йә иһә бындай биләмәләр уға һәҙиә ителепме, ошо илдәрҙәге абруйлы кешеләр араһында урын алған. Маҡсаты – Башҡортостандың һәр тарафының ерле ватандашы булыу. Уның асыл ватаны - Себер юлындағы Тамъян улусы. Ул ошо йылда Көнбайыш Себерҙән, Тамъяндан, Уралдың көнбайышынан үтеп, Пермь виләйәтендәге Көнгәр ҡасабаһындағы рустарҙы Кама буйына тамам ҡыуып таратты. Пьяный Борҙан Ҡазан тарафына күсте һәм ҡаланы янындағы 2000 башҡорт менән ҡамауҙа тотто. Нуғай юлынан көрәштәше Исмәғил мулла иһә 3000 башҡорт менән тағы ла был ҡаланы баҫып алырға тырышты. Тамъян ҡәбиләһенең бер өлөшөн Ҡазан юлына Минзәлә тирәһенә күсереп, унда үҙенә ышаныслы төркөм булдырҙы. Күсмәт батыр бәғзе ваҡыт Алдар менән берлектә йә иһә үҙе генә ҡарағалпаҡтарҙағы Күсем улдарына барған һәм уларҙы Башҡортостанға алып килгән. Алдар тархан менән Аҡай Күсем улы, бер үк яҙмыш кисереп, күп йылдар бергә эш иткән ике ҡаһарман булғанлыҡтан, рус сығанаҡтарынада уларҙы ҡай саҡ берләштереп, бер кеше сифатында күрһәтеп, күтәрелештәрен "Алдар – Күсем болаһы" тип атайҙар. (Мат. Тат., 386-сы бит). Хәҡиҡәттә иһә улар тотҡан юлда бәғзе айырмалыҡтар ҙа бар. 1709 йылда Күсмәт ҡарағалпаҡтан Алдарҙың саҡырыуы буйынса килгән Ырыҫ Мөхәммәткә ваҡыты-ваҡыты менән ҡаршы ла, тарафдар ҙа була. Ҡазан вәлийе Апраксинға яҙған бер хатында үҙе тураһында "хандар һәм солтандар менән уртаҡ эшем юҡ. Алдар иһә бер илбаҫар", – ти һәм үҙен дә, үҙенә ҡараған Уса, Себер һәм Ҡазан юлы башҡорттарын да, рус батшаһына итәғәт итергә әҙер, тип белдерә. (Мат. Башк., 42-се бит). Шулай булыуға ҡарамаҫтан, ул үҙенең бойондороҡһоҙлоҡ сәйәсәтенә тоғро ҡала. Һәр хәлдә, Апраксинға яҙғандары тактиканан ғибәрәт булһа кәрәк. Сөнки, бер яҡтан, вәлигә хат яҙһа, икенсе яҡтан, Ҡазанға яҡын Пьяный Бор һәм Трисвятское ҡасабаһын баҫып алып емергән. Күсмәт, Алдар һәм Килмәк Абыҙ етәкселегендәге 1735-1737 йылдарҙа булған һуғыштарҙа башҡорттар инсанды хайран ҡалдырырлыҡ батырлыҡ һәм ныҡышмалылыҡ күрһәтә.

Кириллов менән ғәскәр башлығы Румянцев экспедицияһы Өфөнән Көньяҡ Уралға, Яйыҡ йылғаһының көнбайышҡа боролған һәм Үр йылғаһының Яйыҡҡа ҡойған ерендә нығытма төҙөләсәк урынға хәрәкәт иткән саҡта был һуғыш барышы түбәндәгесә була. Башҡорт бейҙәре рустарҙың ҡайһы юлдан барыуы тураһында хәбәр алып, шуға ярашлы сара күрә. Килмәк Абыҙ, исеменән үк күренеп тороуынса, бер менәүәр инсан булған. Ҡурҡаҡтар иҫәбенән түгел. Ул да, Алдар Күсмәмәт һәм Аҡай кеүек, ҡаҙаҡ һәм ҡарағалпаҡ хандарына башҡорт күтәрелешенең башында торорға, ә ҡаҙаҡ ханы Шимәкә менән Дөсәй Солтан улы Морат солтанға Башҡортостанда хан булырға тәҡдим иткән. Морат солтан иһә – элекке Мораттың унан 30-40 йыл һуңыраҡ эшмәкәрлек иткән ырыуҙашы һәм алдараҡ һүҙ буласаҡ Байбулаттың (Ҡараһаҡал) атаһының ҡустыһы Дөсәй солтандың улы. Был зат һәр саҡ Байбулаттың туғаны Ишем хан менән бергә иҫкә алына. Шимәкә хан Морат солтанға ғәскәр биреп, уны Алдар тархан менән бергә Башҡортостанға ебәргән. Рус хәрби етәксеһе Румянцев Кирилловты Үр йылғаһы тамағына еткереү өсөн ҙур ғәскәр менән китеп барғанда, Килмәк Абыҙ һәм Морат солтан 8000 тирәһе ғәскәр менән хәҙерге Стәрлетамаҡ янындағы Тура тауҙа уларға ҡаршы яу аҫҡан. (Мат. Башк., I, 334-се бит). Морат солтанға Башҡортостандың төп идара бүлексәһе булған "ете улус" (волость) башҡорттары тулыһынса итәғәт иткән. Ул Башҡортостанда саҡта бында бер "төрөк илсеһе" лә килгән. Уны рустар "Вәкил" тип телгә ала. (Мат. Башк., I, 323-сө бит)

Румянцев ғәскәре ҙур юғалтыу кисерһә лә, Кириллов юлын дауам итә. 15 августа улар хәҙерге Орск ҡалаһы ултырған ергә килеп етә һәм нығытма төҙөй башлай. Нығытмаға немецса Оренбург, йәғни Үр нығытмаһы, тигән исем бирелә. Кириллов бүтән нығытмалар менән бәйләнеш тә урынлаштыра. Морат солтан, рустарҙы туҡтатыу юлындағы тырышлыҡтары уңышһыҙлыҡҡа дусар булғас, кире Ҡарағалпаҡ иленә әйләнеп ҡайтыу мәжбүриәтендә ҡалды. 1722 йылда ла, 1747 йылда ла эшмәкәрлек иткән был Морат солтан ғәйәт энергиялы бер зат булған. Жунгар һәм Волгалағы ҡалмаҡтарға барып, Ҡырым һәм Хорезм араһында берҙәмлек булдырырға тырышҡан. Урта Йөҙ ҡаҙаҡ хандары Әбүлмәмбәт һәм Барак хандарға яҡын дуҫ, ләкин рус хакимлығын ҡабул иткән Әбелхәйергә дошман булған. Әбелхәйер бер тапҡыр уның улусына һөжүм дә иткән.

Килмәк Абыҙ нығытмаларға ҡаһармандарса һөжүм итеп, бәғзеләрен емергән. Баш күтәреүселәргә ҡаршы рустар бығаса өлгөһө булмаған һәм ҡолаҡ ишетмәгән вәхшилек ҡыла. Нуғай юлында һуғышҡан рус хәрби етәкселәре Останков һәм Кириллов Яйыҡ һәм Һаҡмар араһындағы ауылдарҙа әсир иткән 600 ир һәм ҡатынды үлтерә. Һаҡмар (Сакмарск) нығытмаһы янында рустар ҡулына әсир төшкән ҡыпсаҡ һәм Юрматы башҡорттарын ҡаҙыҡҡа ултыртҡандар. Шул уҡ Кирилловҡа буйһонған Соймонов исемле бер генерал ҡулына эләккән башҡорттарҙың ҡул, аяҡ, тел һәм танауҙарын ҡырҡып яҙалаған. Был ваҡытта Өфөлә Кириллов хеҙмәтендә татар мырҙаларынан Ҡотломөхәммәт Тевкелев тә (йәғни Тәвкил улы) була. Тиле Петр үҙ хеҙмәтендәге татар мырҙалары христиан диненә күсмәһә, вазифаларынан бушата, поместьеларын тартып ала. Ә инде мосолманса Ҡотломөхәммәт исеме менән бергә русса Алексей исемен дә йөрөткән Тевкелевте, мосолман булып ҡалһа ла, рустарҙың мосолмандарға ҡаршы йүнәлтелгән сараларын тормошҡа ашырыу юлында күрһәткән тырышлыҡтары хаҡына поместьеларынан мәхрүм итмәне, уға полковник дәрәжәһе бирҙе. Ул Петрҙың хәләфтәре ҡаршыһында ла мәртәбәле ҡалды, генерал дәрәжәһенә иреште. Үҙ милләтенә ҡаршы күрһәткән золомдары айҡанлы был мырҙа хаҡында А. Баттал: "Рус хеҙмәтендә булған был хаин һәм ҡәбәхәт мырҙаның байлыҡ һәм дәрәжә ҡаҙаныу өсөн ил һәм йортобоҙға килтергән золомоноң иҫәбе юҡ. Ул әҙәмдең исеме тарихыбыҙҙың ташына русҡа ялсы булып һатылған Ҡазан ханы Шаһ Ғәли менән йәнәшә уйып яҙылыуға лайыҡлы", – тип яҙа. Ҡотломөхәммәт Тевкелевтең байлығы, рустар ҡаршыһындағы дәрәжәһе һәм йоғонтоһо ҡырғыҙ-ҡаҙаҡ хандары араһында ла танылған. Көнсығыштан ҡалмаҡтар баҫымы аҫтында ҡалған Әбелхәйер ханға Рәсәй хакимиәтен ҡабул итергә тәҡдим яһаған һәм был тәҡдимде ҡабул иттергән дә ошо Ҡотломөхәммәт Твекелев була. Ул башҡорттарҙы ҡәтғи рәүештә тотошлайы менән рус хакимиәтенә буйһондороу юлында сиктән тыш тырышлыҡ күрһәтте һәм уның "баҫтырыу майҙаны" Себер юлы башҡорттарының улустары булды. Хәҙерге Дыуан һәм Арғаяш кантондарында ул 50-ләп башҡорт ауылын емереп үртәне. Һөйәнтөҙ исемле башҡорт ауылын төндә яндырҙы, ауылдың 1000-ләп кешеһенең күбеһен үлтертте, шуларҙан 105 кешене бер һарайға бикләп, ут төртөп яндыртты. Ҡаҙан юлы башҡорттарының күтәрелешен баҫтырыу эшендә лә рустар сиктән тыш аяуһыҙлыҡ күрһәтте. 500-гә тиклем баш күтәреүсе башҡорттар Минзәлә ҡалаһында генерал Румянцев тарафынан аҫылды.

Һуғыш ике йыл дауам итте. Рустарҙың Өфө менән Ырымбур араһындағы нығытмалары бер төҙөлөп, бер емерелә торҙо. 1737 йылдың башында Тиле Петрҙың ярандарынан булған Кириллов рус империализмы фекерҙәрен тәрән аңлағандарҙың береһе ине. 1735 йылдың йәйендә башҡарған ҙур сәфәрендә, Ташкенттан Башҡортостанға килгән сауҙагәрҙәрҙе ҡулға алып, Ташкент аша Һиндостанға барған юлдар хаҡында мәғлүмәт туплаған. Шулай уҡ Төркөстандан Әстрханға килгән сауҙагәрҙәрҙән дә шундай уҡ мәғлүмәт йыйған. Шул уҡ 1735 йылдың 23 июнендә Кириллов Әбей батшаға яҙған хатында: "Бөйөк әсә батша, ышанығыҙ, башҡорттарҙы баҫырбыҙ. Аралды һәм Ташкентты алырбыҙ. Бөгөн бер ни тиклем миҡдарҙа зыян күрербеҙ, ләкин бай Бохара, Сәмәрҡәнд, Бәдәхшан беҙҙеке булыр. Башҡорттар, ҡоралһыҙ булһалар ҙа, ҡурҡмайҙар. Аҫып-киҫеү менән генә тынысланмайҙар. Уларға

ҡаршы ҡалмаҡтарҙы файҙаланырға, ҡайсаҡ, йәғни ҡаҙаҡ-ҡырғыҙҙар, менән башҡорттар араһын бутарға кәрәк. Башҡорттар ҡоралһыҙ көйө лә беҙҙән ҡурҡмай, һис һалым түләмәй, ғәскәри хеҙмәткә бармай284. Башҡорттар аҫып-киҫеү менән һис тынысланмаҫтар. Уларҙы буйһондороу өсөн һәр ерҙә ғәскәри төркөмдәр тоторға кәрәк285. Башҡортостандың хәҙерге хәле түбәндәгесә: 1) Башҡорт тархандары беҙгә һалым түләмәһә лә, ғәскәри хеҙмәт итә. Ләкин улар үҙҙәренең хәрби мөмкинлектәрен беҙгә ҡаршы баш күтәреү өсөн ҡуллана. Был тарханлыкты бөтөрөргә кәрәк. 2) Мишәрҙәр менән "служилый татарҙар" Өфөлә хеҙмәт итә. Ләкин уларҙың үҙ тупрағы (ере) юҡ. Башҡорт еренә төйәкләнгәндәр һәм уларға һалым түләйҙәр. Улар беҙгә тоғро. 3) Типтәр һәм бобылдар, йәғни башҡа виләйәттәрҙән ҡасып килгән татар, сыуаш, сирмеш, вотяктар бар. Улар ҙа башҡорт тупрағында хаҡ түләп йәшәй. 4) Бында яңы суҡындырылған "яһаҡлы татарҙар" бар. Бөтәһе 300 йорт. Улар ҙа ғәмәлдә беҙгә тоғро даирә. Башҡорт күҙәтселәре һәр ерҙә лә йөрөп тора"286, – тип яҙа.

Кириллов менән граф Румянцев шул уҡ йылдың декабрь айында батшаға яҙған рапортында түбәндәгеләрҙе әйткән: "Башҡорттарҙың күп ҡатын алыу сәбәпле иҫәбе артыуына һәм ҡырғыҙ-ҡаҙаҡ менән бәйләнештәренә ҡаршы сара күрелмәһә, киләсәк өсөн был ҙур ҡурҡыныс тыуҙырасаҡ. Бигерәк тә тыш мәмләкәттәр, диндәштәре Төркиә менән һуғыш ваҡытында ҙур хәүеф барлыҡҡа киләсәк. Араларынан Стенька Разин кеүек аҡыллы һәм булдыҡлы етәксе килеп сыҡһа, был ҡурҡыныс тағы ла арта төшәсәк. Хәҙер тормошҡа ашыра башлаған сараларыбыҙ һөҙөмтә бирмәһә, көньяҡ Азия милләттәре араһында беҙҙең зәғифлегебеҙ хаҡында һүҙ таралыр. Сөнки башҡорттар үҙ мәмләкәттәренә ҡасып килгән ҡасаҡтарҙы (татарҙарҙы) яҡлағанлыҡтан, уларҙан көньяҡта йәшәгән Азия милләттәре алдында Рәсәй хакимындағы халыҡ булып түгел, киреһенсә башҡаларҙы үҙ яҡлауына алған бер мөстәҡил милләт кеүек күренә. Башҡорттар тамам буйһондоролһа, беҙгә күрше милләттәр ҙә ҡушылыр, һис юғында, башҡорттарҙан өлгө алып, ҡаршы сыҡмаҫ. Бының өсөн беренсе шарт (Яйыҡ йылғаһында) – Ырымбур исемле ҡала төҙөп ҡуйыу".

Бола хәрәкәте 1736 йылдың март һәм апрель айҙарында Нуғай һәм Ҡазан юлы башҡорттары араһында аҙаҡҡы сиккә етеп ҡырҡыулашты. Уса һәм Себер юлы башҡорттары өҫтөнә ҙур көстәр ябырылып, рустар уларҙың 2000-гә тиклем иң ҡеүәтлеләрен юҡ итеп, Нуғай һәм Ҡазан юлы башҡорттары менән берләшеү юлын киҫә алдылар. Соловьев ошолай тип яҙа: "Март айында Кириллов Ағиҙел, Өршәк, Нөгөш, Тор һәм Һәләүек йылғалары буйында боласылар менән һуғышты. Бында 200 ауылды, барлығы 4000 йортто үртәне. Бөтә болаларҙың хәрәкәт үҙәге булған башҡорт ырыуҙары йыйыны (ҡоролтай) тупланып, Ҡөрьән үбеп ант иткән Хажи мәсете ауылын яндырҙы һәм бында 158 кешене язаға тарттырҙы. Һуғышта башҡорттарҙан 700 кеше һәләк булды, 160 кеше әсир төштө һәм 99 кеше Балтик диңгеҙе буйына һөргөнгә ебәрелде"287. Румянцев Дим буйы башҡорттары менән аяуһыҙ һуғышты. Тевкелев иһә Уса һәм Себер юлы башҡорттарын баҫтырыуҙа шундай уҡ яуызлыҡ күрһәтте. Үҙ ғәскәрҙәре менән Һаҡмар йылғаһы буйындағы башҡорттарҙы баҫтырыу менән мәшғүл булған майор Останков ундағы ауылдарҙы үртәне. 29 июндә Килмәк Абыҙ, Нуғай һәм Себер юлы башҡорттарын берләштереп, Румянцевҡа ҡаршы күтәрҙе. Ул көндө рус ғәскәре 150 кешеһен юғалтты. Рәсәй хөкүмәте башҡортарҙы баҫтырыу өсөн ҡалмаҡтарҙы йәлеп итергә булды. Ошо айҡанлы Румянцев Петербургҡа хат ебәрә: "Беҙ был башҡорттар менән һуғышта ныҡышмалылыҡ күрһәтеп еңеп сыҡһаҡ, көньяҡ Азия ҡәүемдәре менән сауҙа эшен юлға һалыр инек. Мосолман мәмләкәттәренән Хиуа, Бохара, Бәлһ һәм Бәдәхшандағы христиан әсирҙәрҙе ҡотҡарыр инек. Бынан һуң Яйыҡ йылғаһы аръяғындағы татар ҡәүемдәре (йәғни башҡорт менән ҡырғыҙҙар) рустарҙы әсир итеп (Урта Азияға) һата алмаҫ ине. Башҡортостандан Арал күленә ҡәҙәр һуҙылған ерҙә (Ҡаҙағстанда) 45 тирәһе ҡала һәм нығытма төҙөргә мөмкин. Арал күлендә Рәсәй флоты булдырырға кәрәк. Ҡаҙаҡ-ҡырғыҙҙарҙың беҙгә итәғәт иткәндәренән файҙаланып, был эште башҡарырға тырышасаҡбыҙ"288. 1737 йылдың башында Кириллов, Хрущов һәм Татищев кабинеттан (йәғни Петербургтағы баш министрҙан ) әмер алды. "Башҡорт болалары баҫтырылғас, уларҙың йоғонтоһон

кәметеү сараларын табырға, уларҙы ғәскәргә йәлеп итеп, юҡ итергә кәрәк". Был һуғыштарҙа еңелгән башҡорттарҙың рәйестәре Килмәк Абыҙ, Күсем улы Аҡай һәм уның улы Йософ, шулай уҡ Туҡтар улы Ғүмәр һәм Салан исемле бейҙәр әсир ителде. Килмәк Абыҙ Минзәләгә килтерелеп яуапҡа тарттырылғанда үҙенең тәржемәи хәле тураһында бәғзе мәғлүмәттәр ҙә бирә. Ул Арал һәм Төркөстандағы ҡаҙаҡ һәм ҡарағалпаҡ хандарына барып-китеп йөрөгән, унан хан саҡырып килтергән. Хәлбүки, ул үҙе аңлатҡанса, Ҡырым хандары менән дә яҡын мөнәсәбәттә булған, Ҡырымға 1705 һәм 1711 йылдарҙа барып килгән,имеш289.

Был күтәрелеш ике йыл дауам итте. Ике йыл эсендә рустарҙың Өфө менән Ырымбур араһында төҙөгән нығытмалары бер ҡоролоп, бер емерелеп торҙо. Ниһәйәт, 1737 йылдың башында рустар өҫтөнлөккә өлгәште. Табын улусында, бөгөнгө Табынск урынлашҡан ерҙә, 1737 йылдың февралендә булған һуғыштарҙа башҡорттар иҫәбе һәм ҡоралы менән үҙҙәренән бик ныҡ өҫтөн торған рустарға ҡаршы тора алманы. Күтәрелеш етәкселәренән Килмәк Абыҙ һәм бер аҙ һуңыраҡ Аҡай улы Йософ ауыр һуғыштарҙа яраланған килеш әсир ителде. Уларҙы оҙаҡ ваҡыт Өфө төрмәһендә тоттолар һәм, икеһенең дә халыҡ араһындағы сикһеҙ йоғонтоһонан файҙаланып, баш күтәреүселәрҙе тынысландырырға өмөтләнәләр ине. Ниһәйәт, Килмәк менән Йософты Петербургҡа алып барып язаланылар.

Баш күтәреүселәрҙең төп көсө юҡ ителгәндән һуң, рустар һәр тарафта башҡорттарҙы язалауға һәм бүтән баш

күтәрә алмаҫлыҡ хәлгә төшөрөүгә көс һалды. Бик күп мал, йылҡы көтөүҙәре талап алынып, күп ауылдар үртәлде, меңәрләгән ҡоралһыҙ башҡорт Балтик диңгеҙе буйына һөргөнгә ебәрелде. Бер ни тиклем башҡорт, язалауҙарға сыҙамайынса, үҙ-үҙенә ҡул һалды. Ҡулға алынырға тейеш булған бәғзе етәкселәр ағасҡа аҫылынып ғүмерен ҡыйҙы. Беҙҙең замандағы большевик рустар кеүек үк, батша Рәсәйе лә үҙенең баҫып алыу эшмәкәрлеген "ҡотҡарыу" сәйәсәте тип атаны. Көнсығыш ҡаҙаҡ хандарына Рәсәй ҡоллоғон көсләп таҡҡанда ла генерал Тевкелев уларҙы ҡалмаҡтар "баҫып алыуынан ҡотҡарабыҙ" тип алданы. Ә инде ҡаҙаҡтарҙы көнсығыштан ҡыҫырыҡлаған ҡалмаҡтарға Петр тарафынан 1719 йылда ебәрелгән илсе Иван Чередов менән 1722 йылда ебәрелгән Барабаш Унковский ҙа ҡалмаҡ ханы Сивен Рабтанға, ҡытай һөжүменән ҡотолоу өсөн Рәсәй хакимлығын ҡабул итегеҙ, тип "тәҡдим" яһаны. Башҡортостандағы һуңғы күтәрелештәр ваҡытында ла шул уҡ сәйәсәтте ҡулландылар. Башҡорттар борон хандар заманынан бирле ер биләүсе, ер хужалары булғанлыҡтан, мәмләкәттәренә һыйынған мишәр һәм татарҙар уларҙың биләмәһенә хаҡ түләп ултырған. Юғарыла иҫкә алыуыбыҙса, араларында бер ни тиклем типтәрҙәр менән бобылдар ҙа булған. Типтәр тигәне, Илһанлы һәм Османлыларҙағы кеүек үк, дәфтәргә теркәлгән ауыл халҡы тигәнде аңлата. Бобылдар иһә туранан-тура башҡорттарға хеҙмәт иткән, күбеһе фин ҡәбиләләренән сыҡҡан кешеләр. Рустар уларҙы йәнәһе хәҙер һеҙҙе "ҡотҡарабыҙ", "башҡорттарға ҡаршы көрәшеүсе рустар менән берләшһәгеҙ, ер өсөн түләмдәрегеҙҙән ҡотолдорабыҙ тип өгөтләгәндәр. Был өгөттәре уңышлы була. Императрица Анна Иоанновна 1736 йылда фарман нәшер итеп, был ҡәүемдәр башҡорттарға түләм һәм ер өсөн аренда хаҡы биреүҙән азат ителә, биләп ултырған ерҙәре үҙҙәренә тапшырыла, ә, икенсе яҡтан, башҡорт әшрәфе булған тархандарҙың борондан, хандар заманынан килгән өҫтөнлөктәре юҡҡа сығарыла, тип иғлан итте. 1737 йылда сығарылған тағы бер фарман буйынса башҡорттар "яһаҡлылар" синыфына күсерелде, башҡорт тупрағында йәшәгән мишәр, типтәр һәм бобылдарҙан башҡорттарға ер аҡсаһы алыу тыйылды, ә ҡорал эшләү, тимерселек менә шөғөлләнеү өсөн үлем язаһына тарттырыу билдәләнде. Нуғай, Себер, Ҡазан һәм Уса юлы башҡорттарына һәр юлға дини етәкселек өсөн тик бер ахун тәғәйенләүгә рөхсәт итеү, ә ахундарға мәктәп йәки мәҙрәсә бинаһы төҙөү өсөн батша исеменән ғөмүми вәлиҙән (генерал-губернатор) фарман алыу шарты билдәләнде. Был ахундарға ислам дине файҙаһына өгөт алып барыуҙы ҡәтғи рәүештә тыйып ант иттереү, Ҡазан вәлийенең махсус рөхсәте булмай тороп, башҡорттарға (Ҡазан татарҙарына сәйәси тәьҫир юлын киҫеү өсөн) татар

ҡыҙҙарына өйләнеү, йәғни тығыҙ мөнәсәбәткә инеү тыйылды, ә рөхсәт ителгән тәҡдирҙә был никахтар өсөн ауыр түләмдәр һалыу ҡарарлаштырылды290. Ошо күтәрелештә ҡаҙаҡтар менән башҡорттар бер яҡлы булғанлыҡтан, рустар бынан һуңғыраҡҡы сәйәсәттәрендә башҡорт менән ҡаҙаҡ араһын боҙоу юлына баҫты. Башҡорттарҙың шул көнгә тиклемге үҙ аллы идара итеү системаһын үҙгәртеп, рус ғәскәри идараһына буйһондороруға ҡарарлаштырҙылар.

Башҡорттарҙың баш күтәрерлек төп көстәре тарҡалһа ла, айырым өлөштәре төрлө ерҙә рус ғәскәренә төндәрен һөжүм итә ине. 1737 йылда көнсығыш башҡорттар үҙҙәрен ҡаҙаҡ һәм ҡарағалпаҡ ханы Ҡәйеп хан хакимлығы аҫтында тип иҫәпләне. Был Ҡәеп хан Батыр хандың атаһы булған бөйөк "Ҡәйеп Мөхәммәт хан" (Ир Ҡәйеп) түгел, Батыр хандың улы. Өсөнсө Әхмәт менән хат алышҡан бөйөк Ҡәйеп хан 1729 йылда Хиуала булған саҡта донъя ҡуйҙы291. Башҡорттарҙың милли ҡоролтайы "йыйын" да байтаҡ йәшәп килде. Императрица Елизавета 1737 йылдың 9 июлендә яҙған бер фарманында "йыйын" туплауҙы тыйҙы292. Шулай итеп, башҡорт мөхтәриәтенә сик ҡуйылды.

## §32 Ҡараһаҡал – Байбулат солтан хәрәкәте

Һәр төрлө вәхши саралар ҡулланыуға ҡарамаҫтан, азатлыҡ хәрәкәте туҡталманы. Рустар, Төркиә – Иран һуғышынан файҙаланып, 1736 йылда Аҙаҡ ҡалаһын яуланы һәм маршал Миних Ҡырымдағы Баҡсаһарайҙы баҫып алып, емерҙе һәм үртәне. Ҡырым ханы рустарҙы үҙ мәмләкәттәренән ҡыуып сығара алды. Ошо айҡанлы көнсығыш төрктәр араһында русҡа ҡаршы өгөт тарала. Соловьев былай тип яҙа: "1738 йылда тынғыһыҙ башҡорттар яңынан ҡуҙғалды һәм Рәсәйгә тоғро ҡалған мосолмандарҙың ауылдарын үртәне. Петербург хөкүмәте Татищевҡа әмер ебәрҙе. Төркиә хөкүмәте ҡырғыҙ-ҡаҙаҡтарға илселәр ебәргән һәм һәр тарафта сауҙа менән йөрөгән Ҡазан татарҙары ла диҡҡәткә лайыҡлы. Һеҙ ҙә уларға иғтибар итегеҙ". Татищев: "Был илселәр Әстрхан һәм Яйыҡ юлы менән киткәндәрҙер, ә хаттарҙы Ҡазан һәм Өфө татарҙары аша ебәргәндәрҙер, улар Дон тарафында ла казактар араһында ерләшкән, сауҙа менән мәшғүлдәр, тикшереп тороу мөмкин түгел", – тип яуап биргән293. Соловьев тағы шуны ла яҙа: "Башҡорттар, бер үҙҙәре русҡа ҡаршы тора алмаясаҡтарын аңлап, ҡаҙаҡ ханы Әбелхәйергә мөрәжәғәт итте һәм уны үҙҙәренең етәксеһе тип таныуын белдерҙе. Әбелхәйер ҙә быға ҡыуанып, башҡорт ҡыҙына өйләнде. Рәсәйгә ҡаршы дошмандарса хәрәкәт итә башланы һәм Ырымбур (Орск нығытмаһы) ҡалаһына яҡынлап, үҙ янына боласы башҡорттарҙы тупланы һәм Рәсәйгә итәғәт иткән башҡорттарҙың малын тартып алып, штраф түләтте. Ырымбур нығытмаһы башлығы майор Останков, ханға кеше ебәреп, боласылар һүҙенә ҡарап, Рәсәйгә тоғро кешеләрҙе яфалама, тип әйттергән. Әбелхәйер быға асыулана һәм, ҡылысын ҡынынан һурып: "Был ҡала минеке, минең өсөн төҙөлгән. Тыңламаған кешенең башын киҫәсәкмен", – тигән. Татищев императрицаға "тағы ла бола башланды" тип хәбәр иткәндә, Ҡараһаҡал исемле бер етәксе ҡул аҫтындағы хәрәкәт башланғайны.

Ырымбур тирәһен айырым бер өлкәгә әүерелдереп, вәлилек хоҡуғы һәм ҡеүәтле ғәскәр биреп, бер генералды "экспедиция башлығы" итеп тәғәйенләнеләр. 1739 йылдың 17 июнендә был эшкә сиктән тыш яуыз һәм залим рус кенәзе Василий Урусов билдәләнде. Сығышы буйынса ул XVI быуатта көньяҡ Башҡортостанда идара иткән нуғай бейе Урус мырҙа нәҫеленән. Күренекле ата-олаталары рус дошманы булып, Бохара һәм Себер хандары менән берлектә рустарға ҡаршы актив сәйәсәт алып барҙы. Улар хеҙмәтенә инеп суҡынған улдары нәҫеленән килгән Василий Урусов иһә ҡартатаһы мосолманлыҡ файҙаһына күрһәткән ғәйәрлеккә тиң фанатизм менән русҡа хеҙмәт итте. Ул Ырымбур нығытмаһын Үр йылғаһы тамағынан Һаҡмар йылғаһы тамағына күсерҙе. Үр йылғаһында әүәле төҙөлгән нығытма бынан кире русса "Орск" тип аталды. Ҡаҙаҡ төрктәре уны "Тал ҡала" тип атай ине. Кенәз Урусов был яңы

Ырымбур менән Орск, Орск менән ул ваҡыт Верхнеяицк (императрица Екатерина II-нән һуң Верхнеуральск) тип аталған ҡала араһында төрлө нығытмалар төҙөргә, унан башҡа Уй һәм Тубыл йылғалары буйында бер нисә ҡала һәм нығытма бина итергә, башҡорттар менән ҡаҙаҡ-ҡырғыҙ араһында аралашыу юлдарын тамам киҫергә бойороҡ алды. Ул был сараларҙы башҡорттар ҡаршылыҡ күрһәткән хәлдә лә бөтә ныҡышмалыҡ менән тормошҡа ашырасаҡ ине.

Урусовҡа Башҡортостандың эске эштәр менән идара иткәндә лә тулыһынса рус мәнфәғәтен яҡлау сәйәсәтен үткәрергә бойорола. Башҡорт улустарында идара иткән бейҙәрҙе бынан һуң боронғо бейҙәр нәҫеленән булғандар иҫәбенән билдәләү тыйыла. Артабан был вазифаға гел Рәсәй хөкүмәте ихтыярына ыңғай ҡараған шәхестәрҙе генә тәйәғенләп раҫлар булалар294. Урусов Рәсәй хөкүмәте ҡөҙрәтен күрһәтеү маҡсатында башҡорт етәкселәре араһынан элек ғәфү ителгән заттарҙы, шул иҫәптән Йыһанғол, Уразай һәм Юлдаш мулла исемле бейҙәрҙе 1739 йылдың 20 авгусында башҡорт күренеклеләрен бер ергә йыйып, уларҙың күҙ алдында язалаясағы хаҡында иғлан итте. Шулай уҡ Соймонов тигән генерал башҡорттар араһында баш күтәреүсе даирәләрҙе ҡурҡытыу өсөн халыҡҡа бик күп золомлоҡ эшләне. Ҡарт Алдар тарханды тотоп, Минзәләгә алып килеп язаланы.

Ниһәйәт, 1740 йылдың март айында Ҡараһаҡал етәкселегендә ҙур күтәрелеш башланды. Ҡараһаҡалдың кем булыуын рус тарыхсылары асыҡлай алманы. Сөнки улар үҙҙәрендәге сығанаҡтарҙан ғына файҙалана. Хәлбүки, был заттың кем булыуын Бабажан Манғыттың тарихи әҫәренән һәм башҡорт, ҡарағалпаҡ шәжәрәләренән асыҡларға мөмкин. Ҡараһаҡал – ҡарағалпаҡ ҡәбиләләре араһында үҙаллылыҡты яҡлаған Күсем хан нәҫеленең һуңғы принцтарынан береһе. Исеме – Байбулат (йә иһә Бейбулат) солтан. Күсемдән һуң мөһим роль уйнаған Дәүләтгәрәйҙең ейәне Хәсән солтан бине Ишем Чувектең улы. Туғаны Ишем солтан да ҡарағалпаҡ ханы булараҡ мәғлүм, уның улы, Шәйбәк солтандың әсәһе Ғәйшә ханым тарафынан тәрбиә ителеп, һуңынан Солтангәрәй исеме менән билдәле була. Байбулаттың бер ваҡыт Ургенч вәлийе булып торған атаһы Хәсән солтан оҙаҡ ваҡыт ҡалмаҡ хандарының идара үҙәгендә (ихтимал, аманат сифатында) йәшәгәнлектән, Байбулат та бәләкәй саҡтан ҡалмаҡ телен әсә теле кеүек белгән һәм шуға күрә үҙен ҡалмаҡ принцы тип тә күрһәтер булған. Ул ислам ғилемдәрен йәштән өйрәнә, һуңыраҡ Дағстанға, Ҡырымға, Истамбулға бара һәм унан ҡайтышлай Кубань нуғайҙары араһында ҡала. "Абыҙ", йәғни "хафиз" ҡиәфәтендә Башҡортостанға килеп, Себер юлы башҡорттарына үҙенең кем булыуын аңғарта. Һуңыраҡ Миңлеғол исеме менән Нуғай юлы башҡорттары янына килә һәм ҡайтанан Себер юлы башҡорттары янына китә. Урта Йөҙ ҡаҙаҡ хандары менән мөнсәбәт урынлаштырып, рустарға ҡаршы баш күтәреү хәрәкәтен киңерәк йәйелдереү менән шөғөлләнә. Соловьев был зат хаҡында түбәндәгеләрҙе яҙа: "Кенәз Урусов 1740 йылдың март айында "Себер юлы башҡорттары араһында бер етәксе килеп сыҡты. Бер мәғлүмәткә ҡарағанда, ул төрөк (йәғни Төркиәнән) имеш, икенсе мәғлүмәткә күрә, Кубандан Гәрәй солтан (йәғни Кубандағы Ҡырым хандары нәҫеленән сыҡҡан принц) имеш. Ҡушамат исеме – Ҡараһаҡал. 8200 ғәскәрем бар, тип һүҙ тараҡҡан. Кубань йылғаһында (төньяҡ Кавказда) йәшәй, ләкин боронғо асыл ватаны Башҡортостан. Хәҙер үҙ йортон рус ҡулынан азат итергә теләй. Йортоноң рустар тарафынан таланыуын ишеткәс, 8000 Кубань ғәскәре (йәғни нуғайҙар һәм башҡа Кубань мосолмандары), 2000 ҡалмаҡ һәм 500 ҡырғыҙ менән Башҡортостанға килгән һәм был ғәскәрҙе хәҙерге Эмба (Жим) йылғаһында ҡалдырып, үҙе Себер юлы башҡорттарына барған, һәм башҡорттар уны хан тип иғлан иткән"295 тип хәбәр иткән". Апрель айында вәли Урусов ошолай ти: "Ҡараһаҡалға ҡаршы ебәрелгән көстәребеҙ бер эш тә ҡыра алманы. Ул һаман ҡеүәтләнеү өҫтөндә. Башҡорт илбаҫарҙарынан Алан йыһанғол исемле бер башлыҡтарын тотоп алғайныҡ, ул иһә Ҡараһалдың Кубандан булмай, Нуғай юлы башҡорттарынан булып, унда йорто, әсәһе, ҡатыны һәм балалары барлығын һөйләне". Шул уҡ Урусов июнь айында түбәндәгеләрҙе яҙа: "Ҡараһаҡал, ҡеүәтле рус ғәскәре килеүен күргәс, башҡорттарҙың тулыһынса еңелеүенән ҡурҡып, Яйыҡ йылғаһының арғы яғындағы далаларға сигенде. Полковник Павлуцкий уны Тубыл

йылғаһына тиклем эҙәрләп, бер нисә тапҡыр һөжүм итеп еңде. Ләкин артабан ҡыуа алманы". Ә июль айында Урусов былай тип яҙа: "Ҡараһаҡал менән тарафдарҙарын ҡыуалайбыҙ һәм язалайбыҙ. Ҡараһаҡал үҙе ҡырғыҙҙар араһында. 170 кешенең башын киҫтек. 1862-һен әсир алдыҡ, 1765 кешене Балтик диңгеҙе ярына һөргөнгә ебәрҙек. 107 башҡорт ауылын үртәнек".

Ҡараһаҡалды Урта Йөҙ ҡаҙаҡ хандары Абылай менән Барак хандар һәйбәт ҡаршылай. Ҡаҙаҡтар менән Алтай төрктәре уны Шуна батыр исеме менән таныған. Ҡаҙаҡтар иһә уға "Ҡара хан" тигән ҡушамат биргән. Урта Йөҙ ҡаҙаҡ бейҙәре Найман Ҡабаҡбай батыр менән Арғын Ҡаракиҫек ҡәбиләһенән Ҡазыбәк бей уға ҙур хөрмәт күрһәтте, һәм Кирәй Найман ырыуынан 2000 ғәскәр уның ҡарамағына бирелде.

Был һан ырыуҙың ғаилә иҫәбенә бик яҡшы тап килә. Йәғни Найман ҡәбиләһенең 2000 ғәскәр туплай алырлыҡ бер тармағы Ҡараһаҡалға арпалыҡ* сифатында бирелгән. Ҡалмаҡ ханы Галдан Цэрэн һәм рустар Ҡараһаҡал менән Барак хан араһын боҙорға тырышты һәм, ниһәйәт, ниәтенә ирешә. Ҡараһаҡал иһә яҡындары менән Абылай ханға буйһонған Ҡаракиҫек ҡәбиләһенең рәйесе Ҡазбәк бей янына китә. 1749 йылдың 30 июнендә Себерҙәге рус вәлийенә килгән рапортта Ҡараһаҡалдың 2 ай әүәл, йәғни апрель айында, ошо Ҡазбәк бей янында үҙ әжәле менән донъя ҡуйыуы хаҡында хәбәр ителгән296.

Ҡаҙаҡтар менән алтайҙар Ҡараһаҡалды ҡалмаҡ ханы Кунтайшаның улы һәм Галдан Цэрэндың туғаны тип танығандар. Уның Галдан Цэрэн тарафынан һуҡыр ителгән ҡустыһы Барға ла Ҡараһаҡал янына килгән һәм ағаһының үлеменән һуң Ҡараһаҡалға ҡараған ҡәбиләләр араһында ғүмер иткән. Ҡаҙаҡ һәм Алтай (Теләүет) төрктәре рийәүәттәренә ҡарғанда, Шуна туғаны Галдан Цэрэндың интригалары һөҙөмтәһендә атаһы Кунтайша тарафынан эҙәрләнеп, ҡарғалпаҡтар һәм ҡаҙаҡтар араһына ҡасҡан, һуңынан көнбайыш ҡалмаҡтарҙың ханы – үҙенә еҙнә тейеш мәшһүр Аюка янына килгән. Ҡараһаҡалды үҙ ҡанаты аҫтына алған Найман Ҡабаҡбай батыр аҙаҡ уның яҡындары араһында була. Һоҡланғыс ҡаһарман, халыҡ бик яратҡан был принцҡа ҡаршы Аюка янында ла интригалар башлана, һәм ул унан да ҡасырға мәжбүр була. Алтай риүәйәттәренән күренеүенсә, ул Мәскәүгә лә ҡасып барған. Ҡаҙаҡ риүәйәтенә ҡарғанда, Аюка уны үлтерергә булғас, Ҡайбаҡты батыр менән Кубанға, ә унан ———

*Һүҙҙең мәғәнәһе аныҡ түгел, бәлки, "биләмә" тигәнде аңлаталыр. (Ә.Ю.)

Төркиәгә киткән, унда ҡалмаҡ телендә һөйләшеүен ташлаған. Һуңынан ул Мәскәүҙә лә булған, унан Башҡортостанға килеп, 12 йыл Нуғай юлы башҡорттарының Юрматы һәм Ҡаратабын улустарында йәшәгән. Башҡорттар араһынан әсир ителгән Йыһанғол улы Ҡараһаҡалдың Нуғай юлы башҡорто булыуын, ләкин үҙен "кубанлы Солтан Гәрәй", йәғни Кубандағы Гәрәй солтандарының береһе итеп танытыуын раҫлаған. 1745 йылда рустар тарафынан Барак ханға ебәрелгән Төкән исемле бер башҡорт та унда Ҡараһаҡалды күреүе, уның ҡалмаҡ телен белеүе, йөҙө лә ҡалмаҡ ҡиәфәтле булыуы, таҙа башҡортса һөйләшеүе, ә уны күреү өсөн Жунгариянан Баҡ-Ҡашҡа исемле бер бей менән принц Барғаның да килеүе, фәҡәт һуҡыр Барға Ҡараһаҡалдың шәхсиәтен белеү өсөн Төкәндән һорашыуы, ә Төкән иһә "ҡәрҙәшеңде һин үҙен яҡшыраҡ белергә тейешһең" тип, тура яуаптан ситләшеп һөйләшеүе хаҡында 1745 йылдың 26 июнендә рустарҙың Себерҙәге вәлийенә ебәргән рапортында хәбәр иткән. 1746 йылда Жунгар ҡалмаҡтары Рәсәй хөкүмәтенә, "Шуна һеҙҙең мәмләкәтегеҙҙә булһа, беҙгә ебәрегеҙ", – тип мөрәжәғәт итә. Шуна тигәндәре ҡаҙаҡса – Ҡараһаҡал. Һәр хәлдә, был азат Башҡортостандың Нуғай юлында 12 йыл йәшәгән, халыҡ тарафынан Кубандан килгән Гәрәй Солтан тип танылған297 һәм Ҡаҙағстанда ла, Башҡортостанда ла Кубань солтандары нәҫеленән тип иҫәпләнгән. Тик ҡаҙаҡтар уны ҡалмаҡ хандары нәҫеленән, ә башҡорттар иһә Кубань солтандары нәҫеленән тип белгән. Башҡорттар араһында киң таралған "Солтангәрәй" исеменең ошо Ҡараһаҡалға бәйле булыуы билдәле, шулай уҡ был быуатта унда Әнүәр исеме лә таралды*. Ҡараһаҡалдың бөтә сәфәрҙәрендә һәм Ҡаҙағстанда йәшәгән сағында янында булған

Йәғәфәр Юлдаш улының Башҡортостанға әйләнеп ҡайтҡандан һуң биргән аңлатмалары рус архивтарында һаҡланып, һуңғы заманда нәшер ителде. Шуларҙан күренеүенсә, Ҡараһаҡал Солтангәрәй, йә иһә Юрматы башҡорттарынан Миңлеғол, йә иһә ҡалмаҡса Шуна исемдәрен алһа ла, былар барыһы ла йәшеренеү өсөн файҙаланылған ялған исемдәр. Ҡараһаҡал Байбулат – Арал ҡарағалпаҡтары солтаны Ҡәйеп һәм Шәйбәк хандарҙың атаһының ҡустыһы ул. ————

*Төркөстан азатлығы өсөн шәһит булған Әнүәр паша хөрмәтенә (Ә.Ю.)

Быны бөтә ҡаҙаҡ солтандары ла белгән, тик рустар менән мөнәсәбәттәренә зыян килтермәү өсөн уларҙан йәшергән. Байбулат һәм ҡәрҙәше Ишем – бер саҡ Хиуала хөкөм һөргән Хәсән хандың улдары, Хәсән хан иһә Хиуанан ҡалмаҡ ханы (Аюка) янына килгән һәм улдары менән бергә шунда ҡалған. Һуңынан ҡарғалпаҡтар Ишемде үҙҙәренә хан итеү өсөн атаһынан һорап алған, ә Байбулат ҡалмаҡтар араһында ҡалырға булған. Ниһәйәт, ул 1738 йылда Башҡортостанға килгән һәм ун ике йыл Нуғай юлында йәшәгәндән һуң бындағы күтәрелеш менән етәкселек иткән298. Ҡәрҙәше Ишемдең улы Шәйбәк хан һәм уның Байбулат менән бергә ҡалмаҡтарҙа йәшәгән әсәһе Ғәйшә "Байбулатыбыҙ тере" тип, ҡорбан салып байрам иткән. Был аңлатмаларҙан күренеүенсә, Ҡараһҡалдың Байбулат солтан булыуына һис шөбһә юҡ. Уның ҡарғалпаҡ солтаны икәнлеген башҡорт күренеклеләре, әлбиттә, белгән, ләкин Ҡырым хандары халыҡ араһында абруйлыраҡ һәм Төркиә менән бәйле булғанлыҡтан Байбулат солтанды ла Кубань Гәрәйҙәренең береһе итеп танытыуҙы өҫтөнөрәк күреүе ихтимал. Ҡараһаҡал, һис шикһеҙ, Күсем нәҫеленән. Был тәңгәлдә Йәғәфәр Юлдаш улының мәғлүмәттәре Бабажан Манғыт тарихындағы Ургенч хөкөмдары Хәсән хан менән уның улдары Байбулат һәм Ишем солтандар хаҡындағы мәғлүмәттәргә тап килә. Мәмләкәтебеҙҙә ғүмер иткәндә, шәхси ҡулдарҙа һаҡланған "Солтангәрәй" тип танылған Байбулат (йә иһә Бейбулат) солтан тураһындағы яҙыуҙарҙы күреп, уның тормошон өйрәнгәйнем. Был ҡағыҙҙарҙың һис береһе хәҙер ҡулымда юҡ. Хәтеремдә ҡалғандары шул: Байбулат бик ҡыйыу, ләкин һаҡ, әҙерлекле, һалҡын ҡанлы, алдан күрә белеүсе бер шәхес була. Кубандағы кеүек үк, Башҡортостанда ла, Ҡаҙағстанда ла милләтте яҡлау вазифаһын 12 йыл буйы фиҙәкәр дауам итә. Истамбул, Ҡырым, Кубань, Әстрхан, Жим, Сыбаркүл, Һырдарья буйы, Жунгария һәм Алтай араларында, талап ителгәндә ҡиәфәтен дә, исемдәрен дә алмаштырып көрәшә, көнсығыш төрктәрҙең хоҡуғын һәм хөрриәтен яҡлаусы, милли ихтыярын кәүҙәләндереүсе шәхес була. Найман әширәтенән ике бей ҡыҙына өйләнә, ләкин үҙ исемен йөрөткән бер бала ла ҡалдырмай.

Ҡараһаҡал, ғәскәрен Яйыҡтың көньяғындағы Жим һыуы буйында ҡалдырып, үҙе ил эсендә йәшерен эшмәкәрлек алып барған, йәғни рустарға ҡаршы партизан һуғышын киң йәйелдергән заманда, Арал күле тирәһендә йәшәгән нәҫел-ырыуы уның ҡайһы ерҙә булыуын белмәй. Байбулат Рәсәй баҫып алған ерҙәрҙән китеп, наймандар араһына һау-сәләмәт килгәндән һуң, Һырдарья тамағында йәшәгән Шәйбәк (бине Ишем бине Кучук) урҙаһына һөйөнөс хәбәрҙәре килә. Унда ошо шатлыҡты ҡорбан салып байрам итеүҙәре тураһында Йәғәфәр Юлдаш улының хәбәренән беләбеҙ. Был тәңгәлдә иң мөһиме – ун йыл әүәл Рәсәйҙең юғары хакимиәтен ҡабул иткән ҡарағалпаҡ ханы һәм солтандары араһында рустан ҡурҡыу тойғоһо таралыуы хаҡындағы мәғлүмәттәр. Беҙҙең замандағы большевиктар режимындағы кеүек үк, ул саҡта ла "Байбулатҡа атап ҡорбан салыуыбыҙҙы берәйһе белеп ҡалмаһа ярар ине", тип хәүефләнәләр. Кесе Йөҙ ҡаҙаҡтарында Рәсәйгә итәғәт иткән Әбелхәйер мәмләкәтендә лә хәл шулай уҡ була. Ул саҡта хөрриәт тик Урта Йөҙҙә, наймандарҙа, ҡыпсаҡ һәм арғындар өлкәһендә, ниһәйәт, көнсығыштағы Абылай хан мәмләкәтендә генә булды. Шуға күрә Ҡаракиҫек рәйесе Ҡазыбәк менән Барак солтан русҡа баш эймәүҙәре арҡаһында "батыр", йәғни ҡаһарман тип танылған. Ҡараһаҡал уңышҡа өлгәшкәндә һауаланмаҫ, уңышһыҙлыҡҡа осрағанда күңел төшөнкөлөгөнә бирелмәҫ, ысын мәғәнәһендәге етәксе булған. Күпселеге тик уҡ-һаҙаҡ менән ҡоралланған баш күтәреүселәр Ҡараһаҡал етәкселегендә рус ғәскәренә ҡаршы уңышлы ҡаршы тора

алған299. Ҡараһаҡал Ҡаҙағстанға киткәндән һуң да, баш күтәреүселәр рус нығытмаларына һәм айырым гарнизондарға һөжүм итә. Ҡараһаҡалдың ҡаһарманлығы Алтай төрктәрендә риүәйәт һәм дастан рәүешле һөйләнеп иҫкә алына. Бола рустар тарафынан баҫтырылмаҫ элек үк уның Ҡаҙағстанға сигенеү сәбәбе шундалыр: әгәр ул был күтәрелеш башында ҡалһа, башҡорттарға ҡарата рус золомо артасаҡ ине. Ҡараһаҡал хаҡлы була. Рустар уның Ҡаҙағстанға сигенеүен беләә тороп, 1740 йылдың яҙында "язалау өлгөһө" күрһәтә башлайҙар. Кенәз Урусов был күтәрелеште баҫтырыу өсөн Ырымбурҙа һәм Минзәләлә ике хәрби хөкөм урыны булдырҙы. Унда боласы тип һәр тарафтан тотоп килтерелгән меңәрләгән башҡорттан яуап алғанда уларҙы быға күрелмәгән ғазаптарға дусар итәләр, утҡа яғып, ҡаҙыҡҡа ултыртып, ҡабырға һөйәктәрен һындырып, киҫеп, аҫып язалайҙар. Был ауһыҙлыҡ Ҡараһаҡал күтәрелеше баҫтырылып бөтмәҫ элек үк башлана. Ҡараһаҡалдың көрәште туҡтатырға теләүенең сәбәбе лә ошоға бәйле. Язалауҙар июнь айында булды. Бынан һуң Урусов менән генерал Соймонов үҙ ихтыярҙары менән итәғәт иткән баш күтәреүселәрҙең батша исеменән ғәфү ителәсәге хаҡында иғлан итте. Рус хәрби хеҙмәткәрҙәренә баш эймәй, ҡоралы килеш ҡулға алынғандар араһында язаны батырҙарса ҡаршылағандар ҙа күп булды. Ыҙалауҙарҙы улар ҙур сыҙамлыҡ менән кисерҙе. Рустар башҡорттарҙы урман юлындағы ағастарға аҫты. Шулай уҡ зиндандарҙа асығып үҙ үҙҙәрен үлтергәндәр, баштарын стенаға һуғып үлгәндәр һәм, Килмәк Абыҙ күтәрелешендәге кеүек үк, рус ғәскәре яҡынлашыу менән аҫылынып үлгәндәр ҙә күп була300.

Баш күтәреүселәрҙең 5 меңләбе Ырымбур (Орск) нығытмаһына һөжүм иткән. Ләкин Урусов уларҙы кире ҡаға һәм 25 августа был нығытманан 6 саҡрым алыҫлыҡтаға тауҙа Ҡараһаҡал күтәрелешендә ҡатнашҡандарҙы язалай, күп ғазаптарға дусар итә. Ҡараһаҡалдың көрәштәштәре типтәр Ҡантүрәне, башҡорт етәкселәренән Юныс Исмәғил улын, Йыһанғол Үсәкәй улын, Ҡарабашты, Яҡуп Ҡарамышевты (йәғни Ҡарамыш улын) бейек дар ағасына ҡаҙаҡлап, тимер ырғаҡҡа элеп ҡуйҙылар. (Шуларҙан Ҡарамыш улдары – минең тыуған ауылым Көҙәндән 7 саҡрым алыҫлыҡтағы Маҡар ауылында йәшәүсе бейҙәр нәҫеленән. Ейәндәре башҡорт ғәскәрендә юғары дәрәжә ҡаҙанып, ҙур вазифа үтәне301). Ҡараһаҡал яһауылдарынан* 7 кешене ҡабырғаларынан тимер ырғаҡҡа элеп ҡуйҙылар. Башҡорт иленең күренеклелерәнең 85 кешене муйынанн аҫтылар. 21 кешенең башын киҫеп, оҙон һайғауҙарға кейҙерҙеләр. Алан Йыһанғол рустар ҡулына әсир төшөп, үҙ-үҙен юҡ итте. Уның мәйетен язаланылар, башын киҫеп,һайғауға элделәр. Сентябрь айында Пальчиков исемле бер полковник вәхшилек өлгөһөн яңынан

---

*Яһауыл – тәртип һаҡлаусы ғәскәри етәкселәр (казак ғәскәрҙәрендә есаул – офицер дәрәжәһе). (Ә.Ю.)

ҡабатланы, язалағандарҙың бала-сағаһын, ҡатындарын рустарға таратты. Меңәрләгән кешенең ҡолаҡ, танауҙарын киҫеп, Рәсәйгә әсирлеккә, ҡоллоҡҡа ебәрҙе. Бер ни тиклемен

ҡолаҡһыҙ, танауһыҙ көйө үҙ ауылдарында ҡалдырҙы. 1707 йылдағы күтәрелеш менән етәкселек иткән ҡарт Алдар тархан Исәкәй улын да, был һуңғы һуғышта ҡатнашмаһа ла, Минзәләлә язаланылар.

1737–1740 йылдар араһындағы күтәрелештә Рәсәйҙең юғалтыуҙары ла ҙур булды. Башҡорттарҙың юғалтыуҙары иһә, был төрк ҡәүеменең ул саҡта сағыштырмаса аҙ һанлы булыуын иҫәпкә алғанда, иҫ киткес ине. 18134 кеше үлтерелде, 3236 кеше әсир ителеп, Балтик диңгеҙе ярына һөргөнгә оҙатылды, 5983 кеше рус помещиктарына ҡоллоҡҡа һатылды. Ҡолаҡ, танауҙарын киҫеп ғазаплағандарҙың иҫәбе лә бик күп. Рычков мәғлүмәттәренә ҡарағанда, дөйөм юғалтыу 28190 кеше тәшкил иткән302.

Петр ярандары Ҡырымды Рәсәй мосолмандары араһында русҡа ҡаршы бойондороҡһоҙлоҡ өсөн көрәш үҙәге тип иҫәпләгәнлектән, хандарын Рәсәйгә ҡушылырға мәжбүр итмәксе булдылар. Шуға күрә 1735 йылдағы Килмәк Абыҙ күтәрелеше осоронда улар беренсе сиратта Аҙаҡ нығытмаһын баҫып алыуҙы, Аҙаҡ

менән Әстрхан араһындағы ауылдарҙы мосолман сауҙагәрҙәрҙең һәм хажиҙарҙың туҡталыш урыны иҫәпләнеп, мосолман татарҙары һәм нуғайҙар йәшәгән ауыл һәм йорттарҙы бөтөрөп, Дон буйын тотош руслаштырырға ҡарар итте. Сөнки был Аҙаҡ ҡалаһы һәм Дон буйындағы башҡа бәғзе ауылдар Ағиҙел һәм Урал тарафында баш күтәреүселәрҙең Ҡырым һәм Төркиә менән бәйләнеш үҙәге вазифаһын үтәй ине. Татищевтың 1738 йылда Петербургҡа яҙған рапортында: "Дон казактары араһында ерләшкән һәм сауҙа менән шөғөлләнгән татарҙарҙы тикшереп тороу ҡыйын. Башҡорт һәм ҡырғыҙҙар янына төрөк һәм Ҡырым илселәре ошо юлдан йөрөй"303, – тип яҙа. Һөҙөмтәлә Рәсәй хөкүмәте 1738–1746 йылдарҙа Дон буйын тамам рус өлкәһенә әүерелдерҙе.

§33 Батыршаһ күтәрелеше

Петрҙың ҡыҙы Елизавета (1741–1762) заманында 1754 йылда Башҡортостанда яңы күтәрелеш башланды, һәм ул да фажиғәле рәүештә баҫтырылды. Ҡараһаҡал болаһын шул тиклем мәрхәмәтһеҙ баҫтырыу башҡорттарҙы тынысландыра алманы. Шул аралағы 14 йыл эсендә рус золомо тағы ла көсәйҙе. Кириллов һәм Румянцевтың юғарыла иҫкә алынған һүҙҙәренән күренгән маҡсат башҡорттарҙы бөтөнләй сәйәси әһәмиәтһеҙ дәрәжәгә төшөргәнсе иҙеү-ҡырыу ине. Улус башлығын боронғо танылған бейҙәр нәҫеленән һайлау йолаһын юҡҡа сығарып, рустарға тоғролоҡ күрһәтеүсе, йә иһә һис ниндәй эшмәкәрлеккә булдыҡһыҙ әҙәмдәр араһынан һайлап, рустар тарафынан тәғәйен итеү тәртибе эҙмә-эҙлекле ҡулланыла башланы. Өҫтәүенә, Кириллов рапортындағы "башҡорттарҙы тынысландырыу өсөн мәмләкәттәрендә һәр ерҙә ҡала, нығытмалар ҡороп, ғәскәр урынлаштырырға кәрәк", – тигән һүҙҙәре лә тормошҡа аша башланы. Был төрлө ерҙә завод төҙөү менән бер рәттән башҡарылды һәм, шулай итеп, Нуғай юлында Усол йылғаһында Богоявленский баҡыр заводы (1751–1752). Аҫҡын йылғаһында Архангельск баҡыр заводы (1752–1753), Ыҡ буйында Покровск баҡыр заводы (1754), Әүжән йылғаһында Әүжән-Петровск тимер заводы (1754), Кана йылғаһында (Кананикольск) баҡыр заводы (1751), Ырғыҙлы йылғаһында Вознесенск баҡыр заводы (1754), Себер юлы башҡорттары ерендә Ҡаслы йылғаһы буйында Каслинск баҡыр заводы (1752), Сатҡы һәм Ҡуваш йылғалары буйында Златоуст тимер заводы (1751), Ҡазан юлы башҡорттары араһында Киҙәш йылғаһы буйында Верхне-Троицк баҡыр заводы (1752), Шаран йылғаһында Архангельск баҡыр заводы (1752), Байраш йылғаһында Иштирәк баҡыр заводы (1751 йылда) ҡоролоп, береһендә лә башҡорттарҙы ерләштермәй, меңдәрсә рус крәҫтиәндәрен һәм эшселәрен килтереп урынлаштырҙылар304. Был заводтар башҡорт мөхтәриәтен тамам юҡ итеү юлындағы иң төп сара булды. Икенсе тарафтан, башҡорт менән сағыштырғанда һүлпән булған Ҡазан төрктәре араһында XVI быуаттан бирле үткәрелгән христианлаштырыу эшмәкәрлеге киңерәк йәйелдерелде һәм быны башҡорт илендә лә тормошҡа ашырыу ниәте тыуҙы. 1750 йылда боронғо Ҡазан ханлығы ерендә рәсми рәүештә христианлыҡҡа күсерелеп, христиан исеме бирелгән һәм христиан сифатында иҫәпкә алынған сыуаш һәм татарҙар һаны 269213 кешегә етте. 1741 йыл эсендә генә 9159 кеше суҡындырылды. Шуларҙың 3670 кешеһе мосолман татар ине. 1742 йылда Ҡазан виләйәтендәге 536 мәсеттең 419-ын емерҙеләр305. Көсләп суҡындырылған татарҙарҙың бер өлөшө мосолман булып ҡалыу теләге менән Башҡортостанға күсеп килде. Ғәмәлдә бөтә был фажиғәләр башҡорттарҙа сыуалыш тыуҙырҙы һәм яңынан баш күтәреү хәрәкәте башланды. Ындай осраҡта башҡорт бейҙәре ҡарағалпаҡ һәм ҡаҙаҡ хандарын үҙҙәренә хакимдар итеү өсөн саҡыра торғайны. Ә әле улар үҙҙәре лә Рәсәйҙең юғары хакимиәтен таныны. Башҡорттар халыҡ араһында йоғонтоһо булған ғөләмәнән берәй кешене етәксе итергә ҡарарлаштырҙы. Морат Рәмзиҙең яҙмаларына ҡарағанда, Өфө виләйәтенең Ҡарыш исемле мишәр ауылында Батыршаһ исемле мулла заманының иң күренекле ғалимы булған. Уны етәксе итәләр. Батыршаһ Ҡазан, ҡаҙаҡ төрктәренә вәкилдәр ебәреп, иттифаҡ тәҡдим итә. Был иттифаҡ бойомға аша. Батыршаһ мулланың төп көстәрен

Түңгәүер, Үҫәргән, Тамъян, Сувар, Ҡыпсаҡ, Сәңкем-ҡыпсаҡ ҡәбиләләре тәшкил итә. Улар Рәсәйҙең көсәргәнеш кисергән, Фридрих II идаралығындағы Германияға ҡаршы һуғыш алып барған ваҡытынан файҙаланыу форсатын ҡулдан ысҡындырмаҫҡа ҡарар итә һәм күтәрелеш тәғәйенләнгәндән 15 көн алда 1755 йылдың 25 майында яуға атлана. Рәсәй хөкүмәте ебәргән етәксе хеҙмәткәрҙәр һәм башҡа рустар үлтерелә. Ырымбур вәлийе Неплюев даһи тип танылһа ла, татар менән башҡорт араһында талаш тыуҙырыуҙан башҡаға дарманы булмай. Үҙ эшмәкәрлеге хаҡында ул Петербургҡа даими хәбәр ебәреп торҙо. Ҡазан татарҙарына икеләнеү хас ине. Алат юлы халҡы етәксеһе Исмәғил Әбүкәев ыңғай мөнәсәбәттә булһа ла, башҡалары Рәсәй вәлийе Головкин яғына ауып, уға биш мең татар атлыһынан торған ярҙам ебәрҙе, улар Ырымбурға баш күтәреүселәргә ҡаршы һуғышҡа ҡушылды. Ырымбур янындағы Ҡарғалы татарҙары ла Неплюев тарафын тотто. Һөҙөмтәлә был хәрәкәт уңышһыҙ тамамланды. 50 000 башҡорт, Яйыҡ аша сығып, ҡаҙаҡ төрктәре яғына ҡасты. Әммә бында Тевкелев менән Неплюев ҡорған мәкерле сәйәсәт хәрәкәткә килде. Берҙәмлектән тайпылырға әҙер торған Нурғәле хан менән Айсыуаҡ кеүектәр эшкә тотондо, өҫтәүенә, башҡорттарҙы ҡорал менән ҡаршылаусыларға һатлыҡ йәндәр етәкселек итте. Ҡаҙаҡтар башҡорттарға ҡаршы йүнәлтелгән хыянаттарында Ҡарғалы шәйехтәре менән берләшеп, уңышҡа өлгәште. Ҡаҙаҡтарҙың Алчын әширәте ҡасҡын башҡорттарҙың ҡатын-ҡыҙҙарын әсир итте. Ирҙәр ғаиләһен ҡаҙаҡ ҡулынан азат итеү өсөн һуғышып ватандарына әйләнеп ҡайтһа, рус тарафынан ҡырылды. Батыршаһ мулла үҙе урманда йәшеренде.

1755 йылдың 11 октябрендә Рәсәй хөкүмәте Батыршаһты тотоп килтереүсегә 1000 һум алтын аҡса бирергә вәғәҙә итә. Ләкин ун ай буйы уны тота алманылар, тик Батыршаһтың үҙ мишәрҙәре араһынан рустар хеҙмәтендә булған Сөләймән Диваев 1756 йылдың 8 августа уны ҡулына эләктерҙе. Был Сөләймән – мәшһүр этнограф Әбүбәкер Диваевтың ҡартатаһы. Батыршаһ Ырымбурҙан Петербургҡа килтерелде. Батша хөкүмәте уны Балтика диңгеҙе ярындағы Шлиссельбург нығытмаһына ғүмерлеккә төрмәгә япты. Быш йыл үткәс, Батыршаһ һаҡсыларҙы үлтереп тотҡондан ҡасһа ла, ҡотола алманы, вафат булды, уны ағыулауҙары ла ихтимал. Мәйете ҡәлғәнең стенаһы янына күмелә.

Ул сиктән тыш батыр һәм ныҡышмалы ине, ислам ғилемдәре буйынса заманында тиңе булманы. Атаһы ла Абдулла абыҙ исемле уҡымышлы зат ине. Батыршаһ хаҡында шундай хәбәрҙәр бар. Башта уның янында Арғаяш вилайәтендә туплаған бик батыр шәкерттәре булған. Йәш сағында ул бөтөн Башҡортостанды гиҙеп сыҡҡан, Ҡазан яғында һәм ҡырғыҙ-ҡаҙаҡтар араһында йөрөгән бик ғәйәр һәм тынғыһыҙ егетсә. Төрлө вилайәттәрҙә мәшһүр мәҙрәсәләрҙә мөҙәррис була. Бөгөлмә төбәнендәге Тайсуған ҡәрйәһендә лә билдәле мөҙәррис шәһрәте ҡаҙана. Ғабдрахман хәҙрәттә белем ала306. Уҡыуын тамамлағандан һуң, Уса төбәнендә Ғәйнә башҡорттарында, унан һуң Арғаяш төбәнендә Мөслим-Меңбашы ауылында (4 йыл), ниһәйәт, Бөрө төбәнендә Ҡарыш ауылында (6 йыл) имам һәм мөҙәррис була, ошо һуңғы ауылда үҙ мәҙрәсәһен нигеҙләп, ахунлыҡ дәрәжәһе ҡаҙана. Нуғай юлы ҡыпсаҡтары һәм Бөрйән ҡәбиләләре араһында ла мәшһүрлек яулай. Үҙе сәйәсәттә маһир зат була, аҙ һөйләй, күп тыңлай. Бөйөк Фридрих менән Рәсәй араһында һуғыш сығырын белгәс тә, бынан файҙаланырға уйлап, рус ғәскәрендә хеҙмәт иткән башҡорт офицерҙары менән бәйләнеш урынлаштыра. Ләкин иң ҙур өмөтө ҡазандар менән Урта Йөҙ ҡаҙаҡтарының һәм хандарының ярҙамы була. Ғәмәлдә, Батыршаһ мулла әҙерлекте 1754 йылдың башында башлаған. Был рустарҙың Ишем йылғаһы буйында Зверноголовск (Бағлан) һәм Омск араһында нығытмалар теҙмәһе төҙөгән саҡ, Яйыҡ – Уй теҙмәһен Иртыш теҙмәһе менән берләштереп, бер нисә мең саҡрым оҙонлоҡта 50–200 саҡрым киңлектә рус халҡы ерләшкән аралыҡ булдырыу менән мәшғүл ваҡыты. Иртыш йылғаһынан эскәрәк инеп, йоғонтоларын көсәйтеү сәйәсәтен үткәргән рустар ҡаҙактарҙа борсолоу тыуҙырҙы. Урта Йөҙ ҡаҙаҡ ханы Аблай был башҡорт күтәрелешенә ҡушылырға тейеш була. Дөйөм күтәрелеш 1755 йылдың 3 июненә тәғәйенләнә. Ҡаҙаҡтар алдараҡ уҡ хәрәкәткә килә. 1754–1755 йылдың ҡышында

"рустарҙың Себер һыҙығына һөжүм итеп, Юмыш һәм Семипалат араһында Иртыш йылғаһының көнбайышына сығып берләшәләр һәм ошонан кире сигенмәү фекеренә киләләр"307. Рустар 1754 йылда Кесе Йөҙ ҡаҙаҡтары ерендә лә, Илек тирәһен баҫып алып, нығытмалар төҙөй башланы. Ғәмәлдә, ошо ваҡиғалар һөҙөмтәһендә башҡорттар менән ҡаҙаҡтар араһында иттифаҡ тураһында килешеүгә ирешелде. Рәсәйҙең яңы төҙөлгән ҡала һәм нығытмаларын бергәләп юҡ итеп, рустар Иҙел (Волга) йылғаһының көнбайышына ҡыуылырға тейеш була. Ҡаҙаҡтар был иттифаҡҡа ышанып, рустарға асыҡтан-асыҡ: "Бөтә рус һыҙығының (йәғни нығытмалары һыҙығын) Иҙел аръяғына атасаҡбыҙ", – тип әйтер була. Ҡаҙаҡтарҙы был хәрәкәткә Кирәй ырыуы түрәһе Үсенбай бей етәкләй. Ул Урта Йөҙҙәге Аблай хандың идара үҙәгенә килеп, рус вәкиленә: "Һеҙ рустарҙы Иҙел аръяғына ҡыуыр ваҡыт етте", – тип әйткән308. Шулай итеп, Ҡаҙағстандан ярҙам алыу ҡарары етди була. Быға бигерәк тә Бөрйән һәм Ҡыпсаҡ башҡорттары менән ҡаҙаҡтарҙың Ҡыпсаҡ әширәте инана. Батыршаһ Арғаяш, Дыуан, Ғәйнә башҡорттарын үҙ идараһында тота, мишәрҙәрҙән 500, типтәр һәм бобылдарҙан 1000 кешелек ғәскәри ҡеүәт яраҙмға килеүен тәьмин итә. 1754 йылдың июлендә үҙе Нуғай юлы башҡорттары араһында өгөт сәйәхәте яһай һәм төрлө ерҙең абруйлы шәхестәренә хаттар яҙып тарата. Батша хөкүмәте лә ниҙер һиҙенә. Петрҙың күҙ-ҡолағы Ҡотломөхәммәт мырҙа Тевкелев башҡорттарҙы ҡурҡытыу өсөн Өфөгә ебәрелә. Батыршаһ үҙенең яҙыуҙарында был генералды "мәлғүн мырҙа" тип атай309. Батыршаһ хитапнамәләренең төрксәһе һәм русса тәржемәләре бар. Бәғзе өлөштәрен Витевский менән Чулошниковтар нәшер итте. 6 июндә ебәрелгән хитапнамәһендә ул Башҡортостандың Рәсәй баҫып алғанға тиклемге бәхетле дәүерен тасуирлай һәм Рәсәй идараһы килтергән һәләкәттәрҙе, милли һәм дини мәсьәләләрҙе руслаштырыу, халыҡты юҡ итеү, милләт эсендә низағ тыуҙырыу сараларын бәйән итеп, ҡаҙаҡ төрктәре менән берлектә көрәшкә күтәрелеп, бойондороҡһоҙлоҡҡа ынтылырға әйҙәй. "Ҡазан виләйәтендә 5 меңдән ашыу мосолман ҡәрҙәштәребеҙҙе христиан иттеләр. Улар хәҙер был выждан ғазабынан ҡотолоу өсөн беҙгә ҡушыласаҡ, әле мосолмандар яуыз рустарға ҡаршы ҡасан күтәрелер тип көтә. Беҙ был бисараларҙы ҡотҡарырбыҙ. Рустарҙың ҡаршылыҡһыҙ күбәйеүенә сик ҡуйылмаһа, ҡаҙаҡ-ҡырғыҙҙар тамам ҡол ителәсәк, беҙ, башҡорттар ҙа, бөтөнләй ҡамалып, уртала ҡаласаҡбыҙ. ҡаҙаҡ-ҡырғыҙ өлкәһендә нығытмалар бина иткәндән һуң, рустар Ташкент менән Бохараны ла, башҡа ҡала һәм виләйәттәрҙе лә алырға тырышасаҡ. Маҡсаттары ошондай. Улар был тирәләге мосолман хакимиәтен тамам юҡ итеү ниәтендә. Хыялдары ваҡытында төҙөк Болғар ҡалаһын харап иткән кеүек үк, башҡа мосолман өлкәләрендәге ислам ҡомартҡыларын да емереп юҡ итеү. Рустар, башҡорттар менән ҡаҙаҡ-ҡырғыҙ араһын бутап, мосолман өлкәләрен баҫып алыуҙы ҡулайлаштырырға тырыша", – тип яҙыла. "Мосолмандар! Беҙ нисә йылдар инде берләшә алмаными, үҙ-ара тик йәшерен рәүештә көрәшә инек, хәҙер берләштек, был бөйөк бәхетле сәғәттән артабан файҙаланайыҡ. Сөнки ошо сәфәребеҙҙә уңышҡа өлгәшә алмаһаҡ, артабан бөтөнләй һуң буласаҡ"310, – тигән һүҙҙәр әйтә. Уның иң яҡын фекерҙәштәре Ғәйнә башҡорттары Аҡбаш менән Мостай, Нуғай юлынан Ғилман, Этҡол, Аҡынсаҡ һәм Көҫөкбай исемле етәкселәр, мәшһүр Алдар тархандың улдары, Бөрйән бейҙәренән Алҡас һәм Бикбулат исемле заттар була. Рус ғәскәрендә хеҙмәт иткән офицерҙар ҙа Ғәлекәй исемле йөҙ башы етәкселегендә, һуғыш башланғас, ҡаршы ут асмай, баш күтәреүселәр яғына сыға311. Күтәрелеш 3 июнгә билдәләнгән була, ләкин Баргин исемле бер инженерҙың Ирәндек тауҙарында алтын мәғдәне эҙләүенә ҡаршы сығырға кәрәк булғанлыҡтан, Бөрйән башҡорттары көрәште майҙың 15-дә үк башлап ебәргән. Түңгәүер, Үҫәргән, Тамъян, Суун-Ҡыпсаҡ, Бошман-Ҡыпсаҡ, Сәңкем-Ҡыпсаҡ ырыуҙары барыһы бер көндө һәм бер сәғәттә хәрәкәткә килә. Үҙ өлкәләрендәге рус хеҙмәткәрҙәрен һәм һалдаттарын үлтерәләр. Ул ваҡытта Ырымбур виләйәтендә Неплюев вәли ине. Был генерал, юғарыла ла иҫкә алыныуынса, Бөйөк Петр заманында үҫеп сыҡҡан хәрби һәм сәйәси эшмәкәрҙәрҙең береһе ине, бер ваҡыт Истамбулда Рәсәй илсеһе лә булды. Шәреҡ халыҡтарының хәлен һәм рухын яҡшы белгән зат. Уның Ырымбурҙағы эшмәкәрлеге һәм башҡорттарға ҡаршы һуғышы Витевский исемле берәү тарафынан бик ентекле яҙылған, шулай уҡ Неплюевтың үҙенең хәтирәләре лә 1871 йылда "Русский Архив"

мәжмүғәһендә нәшер ителгән. Рустар башҡорт еренең төрлө урындарындағы мәғдән заводтарын хәрби нығытмалар сифатында ҡорҙо. Неплюев үҙенең ҡул аҫтында 24000 һалдаттан торған 13 полк тупланы, бынан тыш Яйыҡ һәм Дон казактарынан һәм төньяҡ Кавказдағы Ставрополдең христианлыҡҡа күскән ҡалмаҡтарынан хәрби төркөмдәре саҡырҙы. Шул рәүешле Неплюевтың ҡеүәте 30 меңгә барып етте.

Баш күтәреүселәрҙең иң етди алыштары июнь, июль, август айҙарына тап килә. Батыршаһтың ғәскәре бер нисә рус нығытмаһын юҡ итте. Неплюев август айында Петербургтан ярҙам һорарға мәжбүр булды. Көньяҡ-көнсығыштағы Бөрйән башҡорттарының хәрәкәте йылдам үҫеш алды. Уларға Үҫәргән, Түңгәүер, Тамъян, Суун-Ҡыпсаҡ, Бошман-Ҡыпсаҡ, Сәңкем-Ҡыпсаҡ ырыуҙары ҡушылды. Бөтә был ҡәбиләләр бер үк көндә хәрәкәткә килде.Үҙ улустарындағы рус хеҙмәткәрҙәрен һәм ғәскәрен ҡайҙа осраһа шунда үлтерә. Бәғзе улустарҙа рустар үҙҙәренә тоғро мишәрҙәрҙән мең башы (старшина) тәғәйенләгәйне. Уларҙы ла рустар менән бер рәттән юҡ иттеләр. Шул иҫәптән, Бөрйән улусына тәғәйенләнгән мишәр Ғәбделхәй ҙә үлтерелде. Августың 12-дә Бөрйән башҡорттары Йылайыр нығытмаһында рустарға: "Хәҙер бөтә Башҡортостан күтәрелде, һуғышҡа сығығыҙ", – тип хәбәр ебәргән. Рустар төҙөгән бөтә почта станциялары (ям) юҡ ителде. Нығытмалар менән уратып алынған заводтарҙағы рустар ҡасаба тышына сыҡмай бикләнеп ултырҙы, ә сыҡҡандары юҡ ителде. 15 августа Покровск, Преображенск заводтары үртәлде. Йылайыр нығытмаһынан 30 саҡрым алыҫлыҡтағы ерҙә 18 августа Бошман-Ҡыпсаҡ ҡәбиләһе, түрә ҡаһарман Күчүкбәкте юғалтыуға ҡарамаҫтан, алышта еңеп сыҡты. Бынан һуң көньяҡ Башҡортостандағы айырым заводтарҙа йәшеренгән рус гарнизондарынан башҡа дошман ҡалмаһа ла, башҡорттар ғаиләләрен һуғыш майҙанына әүерелгән ауылдарынан сығарып, Яйыҡ йылғаһы аръяғына, Урта һәм Кесе Йөҙ ҡаҙаҡ ырыуҙарына ебәрҙе. Шулай итеп, август аҙағына тиклем 50 000 ғаилә Яйыҡ аръяғына күсте. Бының төп сәбәбе – ҡаҙаҡ улустарынан ярҙам килмәү. Был ҡаты һуғыштар август, сентябрь һәм октябрь айҙарында булды. Көньяҡ Башҡортостанда Воздвиженск, Преображенск, Әүжән-Петровск, Кананикольск заводтары ҡамауға алынып, бер ни тиклем рустар үлтерелеп, күп ерҙәр утҡа тотолдо. Был хәрәкәттәрҙә жағалбайлы ырыуынан ҡаҙаҡ ғәскәре лә ҡатнашты312.

Батыршаһ, мишәр булғанлыҡтан, үҙ ҡәбиләһенә һәм татарҙарға өмөт бағлай. Ҡазанда мосолмандың күп ере тип белә, улар ярҙам итһә, уңышҡа өлгәшәсәгенә инана. Шуға күрә Башҡортостандың Ҡазанға сиктәш төньяҡ-көнбайыш өлөшөндә ҡалыуҙы уңай күрә, мишәр һәм типтәр тайфалары икеләнгәнлектән, уларҙы көрәшкә күтәреүгә күп ваҡыт сарыф итә. Күтәрелеш 3 июндә башланһа ла, Батыршаһ үҙ эшмәкәрлеген 20 августа тиклем кисектерә. Ниһәйәт, мишәр һәм типтәрҙәрҙе көрәшкә күндерә алмайынса, Ҡазандан да насар хәбәр килеү сәбәпле, Себер, Ҡазан, Уса юлы башҡорттары һәм "яһаҡлы татарҙар" менән яңғыҙ башы ҡала. Был хәл Дим йылғаһы буйының әүәлге хәрәкәттәрҙә лә гел мөһим урын тотҡан иң батыр башҡорт ырыуҙары аңына ла кире тәьҫир яһай. Сөнки төйәктәре рус ғәскәрҙәре үтә торған юл өҫтөндә урынлашҡан. Уса төмәнендәге Ғәйнә башҡорттары Сурағол менән Исхаҡ бейҙәр һәм яһаҡ татарынан Аҡсура Ягуты улы рус яҡлы даирәләрҙе, шул иҫәптән Йомағол улы Абдүк исемле бейҙе үлтерә (27 август). 1 сентябрҙә күтәрелеш тулыһынса Башҡортостандың был өлөштәренә йәйелде. Мишәр менән типтәрҙәр генә ситтә ҡалды. Ырымбур янындағы Сәйет ҡасабаһындағы яһаҡлы татарҙар ғына күтәрелештә ҡатнаша.

Был арала Неплюев та үҙенең хәсәтлек сәйәсәтен киң ҡулланды. Бөйөк Петрҙың күҙ-колағы, ялған мосолман генерал Ҡотломөхәммәт Тевкелев 15 сентябрҙә Петербургтан башҡорт менән ҡаҙаҡ араһын бутау бурысын үҙ өҫтөнә алып килә. Петербург хөкүмәте һәм Неплюев беренсе сиратта Ҡазан татарҙарының башҡорт менән берләшеүенә ҡаршы саралар күрә. Бөтә юлдарға, күперҙәргә һәм кисеүҙәргә һаҡсы ғәскәрҙәр ҡуйыла. Ҡазан вәлийе Головкин Ҡазан татарҙарын үҙ яғына йәлеп итеү маҡсатында әбей батшанан уларға уңайлы фармандар сығарта. 3–4 сентябрҙәге фарман нигеҙендә Рәсәй хеҙмәтендәге татар мырҙаларының хәрби бурысы

еңеләйтелә һәм ике айлыҡ жалованьелары алдан түләнә. Халыҡты алдаштырыу өсөн һалымдар кәметелә, дин өлкәһендәге ҡыҫым туҡтатыла. Ҡазан төрктәренә баҫым яһаусы ике архиепископ (Лука Конашевич менән Сильвестр) вазифаларынан бушатыла. Мосолмандарға мәсет төҙөргә рөхсәт бирелә. Неплюев 26 сентябрҙә Ҡазан төрктәренең рус ғәскәрендә хеҙмәт иткәндәренә әсир төшкән башҡорттарҙы һатырға, ҡатын-ҡыҙҙарын үҙ ҡарамаҡтарында ҡалдырырға, малдарын тартып алырға рөхсәт итә. Ҡазан вәлийе Ырымбурға Неплюев ҡарамағына ебәреү өсөн Ҡазан татарҙарынан 5000 һыбайлы ғәскәр туплай. Бынан тыш, Неплюев Башҡортостандағы мишәр, типтәрҙәрҙе ер өсөн башҡортҡа түләгән һалымдарынан азат итергә вәғәҙә биреп, башҡорттарға ҡаршы ҡоторта. Тарихсы Морат Рәмзи былар хаҡында әсенеп яҙа313.

Ҡаҙаҡтарҙың күтәрелешкә ҡатнашыуына ҡамасаулаған ике сәбәп бар. Беренсенән, ҡалмаҡ ханы Амурсана, үҙенең эске дошмандары менән һуғышта еңелгәс, ҡаҙаҡ Аблай хандан ярҙам һорай һәм уның ярҙамында 1754 йылда Имел юғары Иртыш буйҙарын ҡулға төшөрә һәм Ҡытай дәүләтенә буйһона. 1755 йылда, тап Батыршаһ күтәрелеше ваҡытында Ҡытай хөкүмәте ике корпус ебәреп, өс ай эсендә бөтә ҡалмаҡ мәмләкәтен баҫып алды. Ләкин Амурсана Ҡытайға ҡаршы баш күтәреп, Аблай ханға ҡасты. Аблай хан Урта Йөҙ ҡаҙаҡ өлкәләрен Ҡытай ғәскәренең һөжүм итеүенән һаҡлай алды, ләкин Батыршаһҡа ярҙам итергә хәле ҡалманы. Бөтә Урта Йөҙ ҡаҙаҡтары, рустарға ҡаршы көрәште туҡтатып, ҡалмаҡ-ҡытай мәсьәләһе менән мәшғүл булды314. Икенсенән, Кесе Йөҙ ханы Әбелхәйер улы Нурғәле хан менән туғаны Айсыуаҡ солтан башта бер ни тиклем икеләнгәндән һуң, тулыһынса рус яғына ауышты. Неплюев Нурғәле хан менән туғаны Айсыуаҡҡа үҙ янынан Арыҫлан улы Усман исемле бер татар майорын ебәреп, башҡорттарға һис бер ниндәй ярҙам күрһәтмәҫкә, ҡасып килгән башҡорт ғаиләләрен Айсыуаҡҡа һибә* итергә ҡушты. Был ғаиләләр тулыһынса ҡаҙаҡ ҡарамағына ҡалдырылыуын, уларҙы ҡол итеп файҙаланырға ла, һатып ебәрергә лә мөмкин икәнлеген белдерҙе. Шул уҡ ваҡытта Ырымбур ҡалаһындағы "мосолмандарҙың баш руханийы булған ахундан" ҡаҙаҡ ырыуҙарының күренеклеләренә шәхси хаттар ебәртте. Был хаттар күтәрелештең төп маҡсатына теләктәшлек белдергән, тарафдар булған мосолман шәйхелисламдың самими кәңәштәре сифатында яҙылғайны. Унда шундай һүҙҙәр ҙә бар: "Мосолман булғанлыҡтан, был күтәрелештәргә бөтә ҡәлбебеҙҙән тарафдарбыҙ... Дин ҡәрҙәштәремдең азатлыҡ хәрәкәтенә, бер тарафтан, һөйөнәм. Ләкин башҡорттар хаин һәм аумаҡай булғанлыҡтан, Рәсәйҙән ҡотолоп, мөстәҡил булһалар, һеҙ ҡаҙаҡ-ҡырғыҙҙарҙы әсир итәсәк. Ҡаҙаҡ-ҡырғыҙҙар уларға ярҙам итеп, үҙҙәрен фиҙа ҡылып ҡуймаһындар, тип ҡурҡам". Мосолмандарҙың бөйөк руханийы булып йөрөгән был әҙәмдең Ырымбур ахуны Ибраһим Ғәбдрахман улы булыуы аңлашыла. Был рус ахуны Неплюев әмеренә ярашлы рәүештә башҡорттар араһына ла ҡаҙаҡтарға ҡаршы хаттар яҙған, боланы туҡтатырға, ҡаҙаҡтара инанмаҫҡа өндәгән, уларҙың ышаныслһыҙлығын таусирлаған, башҡорттарҙың үҙҙәрен баш күтәргәнегеҙ өсөн мотлаҡ яза сигәсәкһегеҙ тип ҡурҡытҡан. Шул уҡ ваҡытта Неплюев ҡаҙаҡ араһына күсенгән башҡорт ғаиләләренең ҡатын-ҡыҙҙарын тартып алырға рөхсәт итеп, бының өсөн бер кем дә яуапҡа тарттырылмаясағын белгерткән, Нурғәле ханға, Айсыуаҡ һәм Ирғәле солтандарға һәҙиәләр ебәргән. Ирғәле ———

*Һибә – бүләк

солтандың үҙен Ырымбурға саҡырып, Тевкелев менән бергә был солтанды ҡотортоп, башҡорттарҙы әсир алырға әмер биргән.

Әбелхәйер хан менән Кесе Йөҙҙөң йәнә бер ханы Батыр хан араһында ҡәбиләләр өҫтөнән хакимлыҡ итеүҙә борондан килгән дошманлыҡ бар ине. Батыр хандың улы Ҡәйеп хан, башҡорттарға 1735 йылдағы күтәрелештәрендә ярҙам иткән бер зат булғанлыҡтан, үҙ ҡәбиләләре араһына ҡасып килгән башҡорттарҙы хөрмәт менән ҡаршылап, яҡшы мөғәмәлә күрһәткән һәм үҙ яҡлауы аҫтына алған. Ҡасҡындарҙы, ҡаҙаҡ ғаиләләре араһына таратып биреп, мосафир иткән. Неплюев Батыр хан менән Ҡәйеп ханға башҡорттарға ҡарата дуҫлыҡ сәйәсәте өсөн яза аласаҡтарын белгертеп,

уларға ҡаршы Нурғәле һәм Айсыуаҡ хандарҙы ҡоторта. Нурғәле менән Айсыуаҡ үҙ идараһындағы ҡәбиләләргә башҡорттарға һөжүм

итергә әмер бирә. Был әмерҙе Алчын ҡәбиләһе генә ҡабул итте, ҡасҡындарҙы әсир итеп, ҡатын-ҡыҙҙарын тартып алды. Айсыуаҡ солтанға буйһонған башҡа ҡәбиләләр, башҡорттарға зыян итмәйенсә, Батыр хан менән Ҡәйеп хандың ҡул аҫтына күсте. Был хәл Нурғәле менән Айсыуаҡты тамам рус ҡосағына этәрҙе. Башҡорттарҙы яҡшы ҡабул иткән ҡәбиләләләргә Неплюев, ҡаҙаҡ вәлийен уның үҙ ғәскәре менән ебәреп, һөжүм иттерҙе. Алчындарҙың ҡыҫымына сыҙамай зарланып, башҡорттарҙың бер төркөмө кире ҡайтты. Неплюев уларға ҡағылмаҫҡа ҡушты, ҡайтанан башҡорттарҙы намыҫһыҙлыҡ күрһәткән ҡаҙаҡтарҙан үс алырға өндәп, ҡотҡо таратыуға киң юл асты. Ҡараһаҡал күтәрелеше ваҡытында уңышһыҙлыҡҡа осрап, ҡаҙаҡ ҡәбиләләренә ҡасып килгәндә башҡорттарҙы бик яҡшы ҡаршылағайнылар. Ул саҡта ла ҡасаҡтар ҡаҙаҡ еренә барлыҡ мөлкәте, мал-тыуары, затлы әйьерҙәре менән килгәйне. Ысынлап та, Кесе Йөҙҙөң Жағалбайлы, Табын, Тама һәм Ете ырыу ҡәбиләләре башҡорттарҙы һис онотмағандар һәм уларҙы яҡлау өсөн Алчын ырыуына ҡаршы һуғыш асҡандар. Ирбайлы, Ҡарағанда, Ҡамышан йылғалары буйында август айы аҙағында ҡаҙаҡ ҡәбиләләре араһында башҡорт ҡасҡындары арҡаһында 4 көн һуғыш булып, бер нисә кеше баш һалды. Ләкин алчындар иленә килгән башҡорттар әсир ителде. Әсир төшкән башҡорттарҙың бер өлөшө, алчындарҙың малын ҡыуып, Башҡортостанға кире ҡаса һәм, ҡайтҡас, ҡарымтаға көсөргәнешле әҙерлек башлай. Неплюев иһә үс алыусылар өсөн ҡаҙаҡ ырыуҙарына барыу юлдарын асыҡ ҡалдырған. Шулай итеп, башҡорттар менән ҡаҙаҡтар араһында һуғыш башланды. Левшин был хаҡта түбәндәгеләрҙе яҙған: "Ысынлап та, Неплювтың интригалары арҡаһында ике һуғышсан ҡәүем араһында аяуһыҙ талаш һәм алыш башланды. Рәсәй хөкүмәте 25 августа Нурғәле, Айсыуаҡ һәм Ирғәле солтандарға ҙур бүләктәр ебәрҙе. Халыҡ был хандарҙы Рәсәйгә һатылғандары өсөн яратманы һәм хаин тип иҫәпләне. Хәҙер был нәфрәт күп тапҡырға артты, улар милләт ҡаршыһына сыҡмаҫ булды. Айсыуаҡ иһә Неплюевҡа Рәсәйгә тоғро ҡаласағын, хатта, талап ителһә, үҙ халҡын ташлап, Рәсәйгә күсеп китәсәген белдерҙе"315. "Рәсәйгә ҡаршы башланған һуғыш ситтә ҡалды. Неплюевтың интригалары һөҙөмтәһендә меңәрләгән башҡорт менән ҡаҙаҡ бер-береһенә ташланды. Ҡәрҙәштәр ҡаны йылға булып аҡты. Башҡорттарҙан башлыса 9-сы кантон (Үҫәргән) иң күп зарар күрҙе. Был ике һуғышсан ҡәүемде бер-береһенә ҡаршы ҡотортоу ҙур кешеһеҙлек булды. Ләкин башҡа сара юҡ ине. Рәсәй бының өсөн күп аҡса түкте"316, – тип яҙа Л. Мейер.

Был ҡара-ҡаршы һуғышта (ҡаҙаҡса барымта) ҡаҙаҡтарҙан башлыса алчындарҙың Кити, Шекли, Ҡаракиҫек исемле ырыуҙары, башҡорттарҙан Үҫәргән ырыуы юғалтыу кисерҙе. Эске Башҡортостанға уның тәьҫире булманы. Урта Йөҙ ҡаҙаҡтары башҡорттарға һис теймәһә лә, был юлы башҡорттар үҙҙәре уларҙың ҡыпсаҡ ҡәбиләһенә ҡаршы, рус менән мөнәсәбәткә ингәндәре өсөн, яу ҡасты. Ҡыпсаҡтар ҙа башҡорт илен баҫып, бәғзе ырыуҙарға төндә ябырылды. Ошо ваҡиғалар арҡаһында һуңыраҡ та ҡаҙаҡ-ҡыпсаҡ ырыуы менән башҡорт-ҡыпсаҡ ырыуы бәрелешп торған. Бер саҡ ҡаҙаҡ ҡыпсаҡтары башҡорттарҙың Тамъян ырыуына һөжүм иткәндә, ҡаҙаҡ ҡыпсаҡтарынан "Аҡча Батыр" исемле бер халыҡ ҡаһарманы Тамъян башҡорттарының "Ҡараш Ҡашҡа" тигән ҡаһарманы менән бергә-бер ҡаршы һуғышып һәләк була. Ҡараш Ҡашҡа ҡыпсаҡ ҡаһарманы Аҡча Батырҙы хүәҙерге Науруз ауылы янында хөрмәтләп, тантаналы рәүештә дәфен итә. Ҡараш Ҡашҡа рус ҡотҡоһо һөҙөмтәһендә үлтерелгән Аҡча зыяратына төрбә һәм ҡорған эшләтә. Үҙе сәсән булған Ҡараш батыр был ваҡиға хаҡында түбәндәге бәйетте сығарып һөйләгән:

Күп тартыш заманын күргәнһең һин,
Донъяла күп батырҙы һөргәнһең һин,
Башҡорттоң мәргәндәрен тиңгә алмай,
Тарпандап Алты Алашҡа йөрөгәнһең һин.
Ҡавытты* йырта атҡан ир икәнһең һин,

Батырҙың тыуғаны ашып икәнһең һин, (?)

Ел һатыб (?) үҙеңә тиң таба алмай,

Сыҙамай йөрәгеңә йүр (?) икәнһең һин.

Мынан һуң һинән батыр күрмәҫ күҙем,

Урынды* маҡтанһаң да әйткән һүҙең,

Ут йөрәк арыҫтандай Аҡса Батыр,

Ҡуяйым тәрбиәләп һине үҙем.

Таш менән ҡорған итеб ҡаҙҙым гүрең,

Аталыр исемең менән ятҡан урының,

Бер һаҙаҡ баш өҫтөңә ҡаҙап ҡуйҙым

Тиһендәр: батыр үткән беҙҙән борон.

Йәғни: ғүмереңдә күп һуғыштар күрҙең. Күп кенә ҡаһармандарҙы өлкәләренән ҡыуып ебрәгәнһең икән. Башҡорт мәргәндәрен үҙеңә тиң күрмәйенсә, алты алашта (йәғни бөтә ҡаҙаҡ-ҡырғыҙ улустарында) мәғрүр алышып йөрөгәнһең. Һин уҡ менән тимер күлдәкте үтә атҡан бер ҡаһарманһың. Атайыңа оҡшап, ҡаһарман ир инең. (Бүтән) ҡаһармандарҙы артта ҡалдырырға тыуғандарҙың береһе инең. Һин үҙең менән буй үлсәшерлек берәүҙе лә тапманың һәм йөрәгеңә сыҙай алмай улустар араһында йөрөнөң. Һин үлгәс, һинең кеүек бер ҡаһарманды ла күҙҙәрем күрмәйәсәк, ысынлап та, ни тиклем маҡтанып һүҙ һөйләһәң дә, хаҡың бар. Йөрәге ут, арыҫлан кеүек Аҡча Батыр, һине үҙем тәрбиә итеп күмәйем. Зыяратың өҫтөнә таштан ҡорған (бейек төрбә) эшләп, әйләнәһенә соҡор ҡаҙҙырайым. Был ер артабан һинең исемең менән аталыр. Башың осона бер уҡ ҡаҙаным, күргән кеше, бында ҡаһарман ята икән, тип уйлаһын317.

Неплюев, интрига һәм мәкерлектәре уңышлы булыу менән маһайып, императрица Елизаветаға шундай хат ебәрә:

---

*Һауыт, йәғни тимер күлдәк. (Ә.Ю.)

*Урынлы

"Мин ҡаҙаҡ-ҡырғыҙ һәм башҡорт араһын шул тиклем бутаным, киләсәктә улар берләшеп ниндәйҙер эш сығарырҙар тигән ҡурҡыныс юҡ"318.

Чулошников Неплюевтың буш өмөттәргә алданыуын, ҡырғыҙҙар араһында аҡылы камил кешеләр был провокацияларға әһәмиәт бирмәүен һәм ҡапма-ҡаршы бәрелештәр ҡаҙаҡ менән башҡорт урҙаларында дөйөм бер дошманлыҡ хәрәкәтенә әүерелмәүен аңлай һәм былай ти: Урта йөҙ ҡаҙаҡтары башҡорт ҡасаҡтарына мөнсәбәтен үҙгәртәмәне, ҡыпсаҡ ырыуҙары, башҡорт һөжүменә дусар булып, ҡапма-ҡаршы "барымтаға" йөрөһә лә, быны дөйөм хәлгә тәьҫире булманы. æур абруй ҡаҙанған Көсөк Хужа исемле берәү мосолмандарҙың рус ҡотҡоһона алданып бер-береһенә ташланыуы яҙыҡ эш тип өгөт-нәсихәт ҡыла. Кесе Йөҙҙән Тама, Ете ырыу, Табын ырыуҙары ла башҡорттарға дошманлашманы. Киреһенсә, Батыршаһ тотолғандан һуң, ҡасып килгән башҡорт ғаиләләрен үҙ ғаиләләренә ҡабул итте. Ҡаҙаҡ Жағалбайлы ырыуы иһә был ҡапма-ҡаршы бәрелештәр ваҡытында август, сентябрь һәм октябрь айҙарында рус заводтарына яһалған һөжүмдәрҙә башҡорттар менән бер сафта ҡатнашты. Был хаҡта ул замандағы аҡындар ижад иткән бик ҡыҙыҡлы шиғырҙар бар. Уларҙа Алчын ырыуы һәм уның башлыҡтары Нурғәле менән Айсыуаҡ солтандарҙың ҡылған эштәре әшәкелек итеп, ә үҙҙәре руҫҡа һатылған хаин сифатында тасуирланған. Нурғәле хан Ырымбур вәлийенә был хаҡта асыҡтан-асыҡ яҙған һәм, һеҙгә тоғро ҡалыуым һөҙөмтәһендә милләтем ҡаршыһында хурға ҡалдым, тигән. Нурғәленең Аблай солтан исемле улы Ырымбурҙа рустар ҡулында аманат була. Неплюевтан һуң вәли булған Путятиндың ҡыҙына ғашиҡ булып, христиан диненә күсә, Нурғәле был улын үҙ урҙаһына ҡайтарып, аманатҡа Буғәле исемле икенсе улын

бирә319. Ләкин улының суҡыныуы халыҡтағы уға ҡарата нәфрәтте тағы ла арттыра, һәм халыҡ быны Нурғәленең хаинлығы өсөн алланың язаһы тип аңлай, ә Нурғәленең үҙенең был айҡанлы күп илауы хаҡында һөйләнә. Быларҙың барыһы ла аҡындарҙың әҫәрҙәрендә йәнле итеп тасуирлана. Ниһәйәт, Нурғәле үҙ халҡы араһында йәшәй алмаҫ сиккә етә. Мәмләкәтендә Батыр хан улы Ҡәйеп хандың йоғонтоһо өҫтөнлөк ала. Рәсәй Ҡәйеп ханды Кесе Йөҙҙөң дөйөм ханы тип танымаһа ла, халҡы уны шулай итеп иҫәпләй. Нурғәле хурлыҡлы бер хәлдә Ырымбурға килә һәм рус ҡарамағында ҡала. Рус вәлийе уны Ырымбурҙан Өфөгә күсерә. 1785 йылда шунда вафат булғас, ҡала мосолмандарынан һәм башҡорттарҙан һис кем Нурғәлене дәфен ҡылыуҙа ҡатнашмай.

Батыршаһтың Ҡазан мосолмандарына бағлаған өмөттәре тамам өҙөлөүе уның рухына бик насар тәьҫир иткән. Бер аҙҙан ул үҙ мишәрҙәренән ҡурҡа башлай. 20 сентябрҙә хөкүмәт ғәскәрҙәрен уны ҡулға алыу ниәте менән килгәс, йәшәгән урыны Ҡарыш Башын ташлап, урман араһына ҡаса. Көнсығыш Башҡортостанда һаман дауам иткән хәрәкәттәргә ул артабан етәкселек итмәй. Мишәр менән типтәрҙәр башҡорттарға ҡаршы сыҡмаһын өсөн хәле еткәнсе тырыша. Ниһәйәт, Бөгөлмә виләйәтенә һәм Табын башҡорттары улусына килеп, бер нисә яҡыны менән урман эсенә йәшеренә. Императрица Елизавета 1755 йылдың октябрь айында, фарман иғлан итеп, Батыршаһтың башы өсөн 500 һум алтын аҡса биреләсәген белдерә. Башҡорттар Батыршаһтың ҡайҙа булыуын белгән хәлдә лә, ул урманлы ерҙәрҙә бер йыл буйы йәшеренеп йөрөй. Батыршаһҡа ҡараған бәғзе төркөмдәр рустар менән төрлө ерҙәрҙә бәрелешкә инә, рус ауылдарын үртәй. 1756 йылдың 6 авгусында сыҡҡан икенсе фарман буйынса Батыршаһтың башы өсөн хаҡ арттырылып, 1000 һум билдәләнә. Был юлы Батыршаһ хәрәкәтендә ҡатнашмаған Сөләймән исемле бер мишәр бейе, батшаға ярамһаҡланып, уны тотоп бирә. Ул Аҙыҡ ауылы бейе (старшина) Дивай улы Сөләймән була. Батыршаһ 8 августа рустарға тапшырыла. Был Дивай – һуңынан Урта Азия төрк этнографияһы хаҡында бер нисә әҫәр нәшер иткән рус ғәскәре полковнигы Әбүбәкер Диваевтың ҡартатаһы. Ҡартатаһы Дивай ҙа – рус ғәскәрендә хеҙмәт иткән старшина. Рустар Батыршаһты Ырымбурға, һуңынан Петербургҡа алып килә. Унан яуап алыуҙар 1757 йылда тамамланып, тотҡон ҡул-аяҡтары бығаулы килеш Петербург янындағы Шлиссельбург нығытмаһына ғүмерлеккә зинданға ябыла. Биш йыл ултырғас, 1762 йылдың 22 июлендә ҡасырға ниәтләнгәндә үлтерелә. Ҡатыны менән ике ҡыҙы ла Мәскәүгә килтерелә, әммә уларҙың яҙмышы мәғлүм түгел320.

Рус һәм ҡалмаҡ ғәскәрҙәре 1756 йылда ла көнсығыш Башҡортостанда баш күтәреүселәрҙе баҫтырыу менән мәшғүл булды. Батыршаһ хәрәкәте тәү ҡарашҡа уңышһыҙлыҡҡа өлгәшкән кеүек күренһә лә, ыңғай һөҙөмтәләр бирҙе. Мәсеттәрҙе үртәүгә сик ҡуйылды, офицерҙар һағы аҫтында мосолман ауылдарына килеп, уларҙы диндәренән баш тартырға асыҡ тәҡдим иткән поптарҙың һәм миссионерҙарҙың эшмәкәрлеге туҡтатылды. Бер йыл үткәс, башҡорт һәм татарҙар өсөн айырым "Ырымбур дини назараты" ойошторолдо. Тевкелев иһә бер намыҫһыҙ хаин тип баһаланды. Үҙ поместьеларындағы крәҫтиәндәре һәм батрактары уға ҡаршы баш күтәрҙе. Ул үҙе уларға күренә лә алманы. Мосолман булып ҡалырға теләгән бер ҡыҙын христианға кейәүгә бирергә тырышыуы фажиғәгә әүерелде. Уның хаинлығы беҙҙең заманға тиклем башҡорттар араһында йәшәп килгән "Тәфтиләү" (йәғни Тевкелев) көйө сығыуға сәбәп булды321.

Батыршаһ мулла болаһы – сәйәсәттән бигерәк мосолманлыҡ хаҡына күтәрелгән хәрәкәт. Батыршаһтың мишәр булыуы бәғзе рус тарихсыларының "татарҙар башҡорттарҙың бойондороҡһоҙлоҡ өсөн көрәшенә ҡаршы булды" тигән фекерҙәренең яңылыш булыуын һәм бәғзе татар яҙыусыларына беҙҙең рус иҙеүенә ҡаршы һуғышырға хаҡлы булыуыбыҙҙы күрһәтте. Батыршаһ ғалимлығы һәм тарихты яҡшы белеүе арҡаһында Төркөстан, Хиуа һәм Бохара халыҡтарын да рустарға ҡаршы уяу булырға саҡырған мөджәһид ул. Беҙ илебеҙҙә ғүмер иткән йылдарҙа ла көрәшсенең ҡулъяҙма нөсхәләре һаҡланған өгөт хаттарының "һуңғы сығатай" тип аталған көнсығыш төрки әҙәби телендә яҙылған дәғүәләре бик асыҡ аңлашыла ине.

## §34 Ҡалмаҡтарҙың көнсығышҡа күсенеүе

1630 йылда Яйыҡ йылғаһын кисеп Волга буйына күскән ҡалмаҡтар, бер ярым быуатҡа яҡын осорҙа ваҡыт-ваҡыт башҡорттар менән тығыҙ мөнәсәбәткә инергә мәжбүр булһа ла, уларҙы үҙҙәренә эҫендерә алманы. Борондан ҡыпсаҡ еренә Сыңғыҙ хан нәҫелдәре менән бергә килгән монгол ырыуҙары, монголса ла, төрксә лә һөйләшкән төркөмдәр ҡушымтаһы булғанлыҡтан, бер быуын ғүмер дәүерендә төркләшә һәм мосолманлыҡты ҡабул итә. Ә инде Хоорлуҡ менән килгән нәғеҙ монголдар, Торғауыт, Хойыт, Хошут һәм Дөрбет ҡәбиләләре һис тә төркләшмәй, бары тик айырым төркөмдәре генә, исламды ҡабул итеп, башҡорт, нуғай һәм татар телдәрен үҙләштерә. Шуларҙың мосолманлыҡҡа күскәндәренән бер тармағы XVIII быуат уртаһында Ирәндек тауы аръяғынан олатайҙарыбыҙҙың береһе булған Айсыуаҡ еренә килеп, беҙҙең ауыл янында үҙ ауылын ҡороп ерләшкән. 1758-1759 йылдарҙа Жунгарияла үҙ араларындағы бөтмәҫ бәрелештәргә сыҙай алмайынса, 15 мең йортло монгол, ҡалмаҡ төркөмө Рәсәйгә итәғәт итеү өсөн Урта Иртыш буйына килеп ингән. Ләкин улар, көнбайышта Торғауыт ҡалмаҡтарының 130 йыл буйы Рәсәйгә бәйле булғандан аҙаҡ рустар менән үлемесле ҡаршылыҡҡа инеүе хаҡында ишетеп, туҡталып ҡала һәм, ни булһа ла булыр тип, Урта Азияла ҡалырға ҡарар итә. Ваҡиғалар шунан ғибәрәт: Аюка хан үлгәндән һуң урынына ҡалған улы Цэрэн бер тарафтан Төркиә, икенсе тарафтан Ҡытай хакимиәтен танып, Ирандағы Надир шаһтың абруйынан да файҙаланып, бөйөк ҡалмаҡ дәүләте ойоштороу хыялы менән мауыҡҡан. Тиле Петр, быының Рәсәй өсөн ҡурҡыныс тыуҙырасағын аңлап, ҡалмаҡ дәүләтенә ҡаршы ниндәйҙер сара күрергә ҡарар итә. Петр ҙа, беҙҙең заманда коммунистар "демократия", "халыҡсанлыҡ" уйыны уйнаған кеүек, ҡалмаҡтарҙың хаким иткән династияларын юҡ итергә ниәтләне. Петр һәм уның ейәндәре ҡалмаҡ дәүләтенең төп ҡеүәтен тәшкил иткән "Хан яргуһы" (ҡәбилә башлыҡтарынан һәм бейҙәренән торған традицион ҡоролтай) урынына "Халыҡ яргуһы" ҡорҙо, уның башына русҡа тоғро, әшрәф нәҫеленән булмаған даирә вәкилдәрен ҡуйҙы һәм үҙҙәренә дуҫ бәндәләрҙән хөкүмәт төҙөнө. Цэрэндың улы һәм хәләфе Убаши, дәүләтенең юҡҡа сығыу көндәре килеүен аңлап, Жунгарияға кире ҡайтырға ҡарар итте. Сөнки ул рустарҙың, ҡаҙаҡ хандарын юҡ итеп, эш башына "халыҡ вәкилдәре"н ҡуйыу һөҙөмтәләрен үҙ күҙе менән күргәйне. Ҡалмаҡтарҙың Волганың көнбайышына күскәндәрен ҡурсалай алмаҫын аңлап, уларҙы яҙмыш ихтыярына тапшырып, Убаши үҙ ҡулы аҫтындағы көнсығыш ҡалмаҡтарҙың 169000 кешенән торған 33000 йорто менән, Яйыҡ-Иҙел аралығын ҡалдырып, юлға ҡуҙғалды. Ул 1771 йылдың яҙында хәҙерге Себер тимер юлы һыҙығы тирәһенән уҙғанда ҡаҙаҡ һәм башҡорт һөжүменә дусар буласағын белә ине. Ҡалмаҡтарға Дорджи-Зебек исемле бик ғәйәр принц етәкселек итә. Юлда ҡаҙаҡтарҙың ҡыпсаҡ ырыуы һәм башҡорттарҙың Үҫәргән, Бөрйән ҡәбиләләре һөжүменә молтаҡ тарыясағын юлаусылар аңлай. Улар, Орск (боронғо Ырымбур) ныҡытмаһының рус ғәскәре етәкселәренә мөрәжәғәт итеп, башҡорттарҙан аралауҙы үтенә. Ләкин быының һөҙөмтәһе булмай. Күскенселәр һигеҙ ай буйы көнсығышҡа табан хәрәкәт итә. Ҡаҙаҡ менән башҡорттар талау маҡсатында уларҙы ҡыйрата. Башҡорттарҙан 10 меңгә яҡын ҡоралды һыбай ғәскәр ойошторолған. Ҡытай-Маньчжурия императоры Кен-Си көнбайыш ҡалмаҡтарҙың кире ҡайтыуына ыңғай мөнәсәбәттә булһа ла, 169 мең ҡалмаҡтан Жунгария еренә 70 мең кеше генә һау-сәләмәт аяҡ баҫа. Ҡалғандары ҡаҙаҡ менән башҡорт ҡылысы аҫтында һәләк була, малдары тартып алына, ҡатын-ҡыҙҙары һәм балалары, әсир ителеп Хорезм һәм Бохара яҡтарына һатыла. Был фажиғәле ваҡиға инглиздәрҙән Генри Говорттың монгол тарихында һәм Томас Куинджиҙың "Татар күтәрелеше" исемле әҫәрендә, шулай уҡ бер нисә рус яҙыусыһы тарафынан йәнле итеп тасуирланды. Рустарҙан Игнатьев исемле тарихсы үткән быуат уртаһында башҡорттар тарихы буйынса бер нисә әҫәр нәшер итте һәм Ырымбур , Өфө архивтарында һаҡланып ҡалған ҡиммәтле документтарҙы ла баҫып сығарҙы. Был зат бер әҫәрендә ошолай ти: "Башҡорттар Урусовҡа, Кирилловҡа ҡаршы һуғыштарҙа, Ҡараһаҡал, Батыршаһ етәкселегендәге

күтәрелештәрҙә шул тиклем ҡырылды, урмандар ағасҡа аҫылған мәйеттә менән тулды, улар үлтерелде, ҡаҙыҡҡа ултыртылды, үртәлде, ҡалғандары һөргөнгә ебәрелде. Хәҙер килеп шәреккә ҡасҡан ҡалмаҡтарҙы эҙәрләп ҡыйратыу, иҫке үстәрен алыу өсөн улар 10 000 ҡоралы ғәскәрҙе нисек йыя алды икән? Быға хайран ҡалмау мөмкин түгел. Тимәк, был ҡәүемдә аҡылға һыймаған бер йәшәү көсө бар".

Был айҡанлы миләди буйынса X быуатта ғәрәп география ғалимы Истаһриҙың Саманиҙар һәм Ғәббәсиҙәр ғәскәрен тәшкил иткән төрктәр хаҡында һүҙ йөрөтөп яҙып ҡалдырған һүҙҙәре хәтергә төшә: "Ғәскәр булараҡ, мәмләкәт менән идара итеүҙә төрк кеүек ҡулайлашҡан милләт булмаҫ, сөнки башҡа милләттәр һуғышта еңелеп, күбәйгәнсе һәм яңынан ойошҡансы йылдар үтергә тейеш. Төрктәрҙә иһә бер ҡәүем һуғышта еңелһә, икенселәре ел тиҙлегендә тупланыр. Бында Самани ғәскәре етәкселәренән төрк Парсты миҫал итеп алыу ҙа етә. Хорасанда еңелеүгә дусар булғас, ул Иракка ҡасты һәм унда замандың иң ҡәҙрәтле ғәскәрен ҡорҙо".

Ҡалмаҡтар ҡасҡан ваҡытта башҡорттар араһында ерләшкән мосолман ҡалмаҡтарҙы ла үҙҙәре менән алып китергә тырышты, ләкин башҡорттар быға ирек бирмәне. Беҙҙең ауылыбыҙға күрше мосолман ҡалмаҡ ауылын олатабыҙ Айсыуаҡ аралап алып ҡалған. "Ҡалмаҡ боҫоуы" тип аталған был ваҡиға башҡорттар хәтерендә әлегә тиклем һаҡлана. Мәғлүмәттәрҙең бер өлөшөн Үҫәргән башҡорт бейҙәренән Мөхәммәтйән Ҡыуатов үҙ дәфтәренә яҙып ҡуйғайны. Был кеше заманыбыҙҙың шәжәрәсеһе, йәғни тарихсыһы булды.

§35 Юлай менән Салауат

Батыршаһ хәрәкәте баҫтырылғандан һуң башҡорт иле 20 йыл самаһы сағыштырмаса тыныс көн итте. Был аралағы иң мөһим ваҡиға – ҡалмаҡтарҙың көнсығышҡа күсенеүе һәм юлда саҡта баштарына төшкән һәләкәт. Ҡалмаҡтарҙың Жунгарияға кире китергә ҡарар итеүенең сәбәбе – Иҙелдең көнбайышына рус күскенселәрен күпләп ерләштереү сәйәсәте тыуҙырған хәүефтә ине. Быуат ярым ваҡыт башҡорттар менән яманмы-яҡшымы күрше булып йәшәүгә ҡарамаҫтан, ҡалмаҡтарҙың 169 мең кешеһе Ҡаҙағстан аша көнбайыш Монголстанға табан юлға сыға. Ләкин уларҙы юлда ҡаҙаҡ-ҡырғыҙҙар тураҡланы. Шул рәүешле Алтын Урҙа дәүерендә "Тәхет иле" тип аталған хәҙерге "Бүкәй Урҙаһы" далаһын ҡалмаҡтар ташлап киткәс, тотош Урал буйын рус күскенселәре тарафынан баҫып алыуға юл асылды. Был иһә башҡорттарҙы көньяҡтан да рус колонизаторҙары уратып аласаҡ тигәнде аңлата ине. Һөҙөмтәлә Яйыҡтың түбәнге ағымында ерләшкән Яйыҡ казактары тип аталған рустар күбәйҙе. Был юлы Яйыҡ казактары араһында тыуған бер бола башҡорттарҙы яңы күтәрелешкә килтерҙе. Пугачев болаһы һәм уға ҡушылған башҡорт етәкселәре Юлай менән Салауат хәрәкәте ине был.

Яйыҡ казактары араһында батшаға ҡаршы баш күтәргән Пугачев хәрәкәте 1773–1774 йылдарҙа дауам итте. Рустар Башҡортостанда һуңғы 20 йыл эсендә мәғдән сығарыу заводтары иҫәбен күбәйтеүгә ҙур әһәмиәт бирҙе. Шул айҡанлы байтаҡ урында башҡорт ерҙәрен һатып һәм тартып алыу ваҡиғалары күҙәтелде. Өфөгә яҡын Көҙәй, Табын ырыуы башҡорттары бынан ҙур зыян күрҙе. Яйыҡ буйы казактары баш күтәргәс, башҡорттар уларға ҡушылыу форсатынан файҙаланырға ынтылды. Быны Көҙәй ырыуы Шайтан-Көҙәй аймағының бейе Юлай башланы. Был зат үҙ ырыуында ғына түгел, барса Урта Башҡортостанда билдәле шәхес булған. Уның 20 йәшлек улы Салауат иһә рус ғәскәрендәге башҡорт отрядтарының береһендә офицер була, ҡаһарманлығы һәм егетлеге менән тирә-яҡ ҡәбиләләр араһында мәшһүрлек ҡаҙана. Шул уҡ ваҡытта ул импровизациялап йыр йырлаған һәм ҡурайҙа оҫта уйнаған йыраусы ла була. Пугачев болаһы Башҡортостанда ла тарала башлаған осорҙа Өфөләге рус хәрби етәксеһе Салауатты ғәскәр етәксеһе итеп Башҡортостандағы бер нығытмаға Пугачевҡа ҡаршы ебәргән. Ләкин Салауат Ырымбур янындағы Берды ауылы янында Пугачевҡа ҡушылған.

Салауат төрлө башҡорт улус бейҙәренә ошонан тороп хаттар ебәрә, баш күтәреү хаҡында хәбәр тарата. 1774 йылдың апрелендә ул 2 мең ғәскәр менән Өфөнөң төньяғына табан юллана һәм, генерал Михельсон ҡул аҫтындағы рус ғәскәрен ҡыйрата, Уса ҡалаһын баҫып ала. Бынан һуң Башҡортостандағы рус хеҙмәткәрҙәре ҡалаларға ҡасҡан йә үлтерелгән. Бер нисә нығытма емертелгән.

1775 йылда Пугачев ҡулға алынып Мәскәүҙә язаланғандан һуң да Салауат көрәште дауам иткән. Ләкин рустар боласыларҙы байтаҡ ерҙә баҫтырыуға өлгәште. Ниһәйәт, абайламаҫтан яһалған баҫҡын һөҙөмтәһендә Салауат һуғыша-һуғыша әсир төшкән. Уны атаһы менән бергә Мәскәүгә алып киткәндәр. Яуап алыу тамамланғандан һуң уларҙы ҡабат Ырымбурға килтерәләр. Рәсәй хөкүмәте был ике башҡорт етәксеһен, элек үҙҙәре һөжүм иткән, талаған ерҙәрҙә, баҫып алған гарнизондарҙа, рус заводтарында һәм ҡасабаларында йөрөтөп, һәр ерҙә ҡамсылап, язаларға ҡарар иткән. Ҡарт Юлайҙы Сим мәғдән заводы янында – 40, Ҡатау-Ивановск заводында – 45, Ҡатау-Тамаҡ заводы янында – 45, Орловка исемле рус ауылында 45 – бөтәһе 175 тапҡыр ҡамсы һуғып ғазаплағандар. Салауатҡа иһә Сим янында – 25, тыуған ауылы Юлай янында – 25, Красноуфимск ҡалаһы янында – 25, Көңгөрҙә – 25, Усала 25 – бөтәһе 125 тапҡыр һуҡтыралар. Һуңынан Орловка ауылында Юлайҙың, Йәлдәк ауылында Салауаттың маңлайына утлы тамға һуғып, танауҙарын ҡырҡып, 1777 йылдың 21 сентябрендә өфөгә алып килгәндәр. Унан һуң яңынан Мәскәүгә, артабан Петербургҡа ебәреп, Балтик диңгеҙе буйындағы Рогервик нығытмаһында төрмәгә бикләгәндәр. Икеһе лә ғазап сигә-сигә шунда донъя ҡуйған.

Салауат – башҡорттарҙың иң яратҡан ҡаһарманы. Уның хаҡында йыр һәм дастандар әле лә йәшәй. Салауаттың йыр-моңдарын Рыбаков һәм Янски, дастанының бер өлөшөн Игнатьев322 нәшер итте. Батырҙың яҙмышы тураһында хәҙерге башҡорт әҙәбиәтендә сәхнә әҫәрҙәре ижад ителде. Шуларҙың береһен Фәтхелҡадир Сөләймән (Ғәбделҡадир Инан) яҙҙы, әҫәр 1922 йылда нәшер ителде. Степан Злобин тигән берәү 1953 йылда русса "Салауат Юлаев" исемле роман баҫтырып сығарҙы.

## §36 Дини идара

Елизаветаның хәләфе Екатерина II, Европа һәм Төркиә менән тығыҙ мөнәсәбәттә булғанлыҡтан, үҙ хакимындағы мосолмандарға ҡарата бөтөнләй башҡа сәйәсәт – уларҙы үҙ яғына ауҙарыу сәйәсәте үткәрергә ҡарар итте. Сөнки Рәсәй, христиан дәүләте булыуға ҡарамаҫтан, унда мосолмандар һаны артыу сәбәпле, ҙур мосолман мәмләкәтенә әүерелеү юлына баҫты. Өлкә вәлиҙәренә лә быны иҫәпкә алыу тәкдим итеlә. Екатерина Ырымбур вәлийе (сығышы буйынса швед) барон Иглстромға 1785 йылдың 14 сентябрендә яҙған бер фарманында Ырымбур һәм Троицкиҙа хөкүмәт иҫәбенә берәр мәҙрәсә һәм мәсет төҙөтөргә әмер бирҙе. Хатта Бохара менән Сәмәрҡәндтә үҙ исеменән берәр мәсет төҙөргә аҡса биреп, үҙен һәр ерҙә мосолмандарҙы ҡанат аҫтына алған императрица итеп күрһәтергә тырышты.

Ул ҡаҙаҡ-ҡырғыҙҙар өсөн имамдар әҙерләргә, мәсеттәрҙе 5 мең кеше һыйҙырышлы киң итеп төҙөргә бойорҙо. Ниһәйәт, 1787 йылдың 10 сентябрендә фарман нәшер итеп, Ырымбурҙа "Мосолман рухани мәжлесе" (Духовное собрание) ойошторттo, уға мөфти менән ҡазыйҙар тәғәйенләргә ҡушты. Маҡсаты – был ойошма аша мосолмандар араһында имамдар тәғәйенләү эшен хөкүмәт ҡулына туплап, уларҙы Рәсәй файҙаһына өгөт алып барырға мәжбүр итеү ине. Батша маҡсатына ирешә. Билдәле, Екатеринаның бөтә был дини идара төҙөү һәм дини үҙаллылыҡ сәйәсәте Батыршаһ һәм Салауат күтәрелештәренең ыңғай һөҙөмтәһе ине. Ҡаҙағстан Фәндәр Академияһында ошо ваҡиғалар тарихын киң яҡтыртҡан баҫмала Пугачев болаһының ҡаҙаҡтар араһында бик ҙур өмөт уятыуы һәм ҡаҙаҡтарҙа Пугачев үлтерелгәндән һуң да даум иткән Салауат хәрәкәтенә ҡушылыу теләге артыуы күрһәтелгән. Шул сәбәпле Ырымбурҙағы ғөмүми-вәли* Екатеринаға мосолмандарға ҡарата мөләйем сәйәсәт үткәрергә кәңәш иткән дә.

§37 Башҡортостанға рустарҙың көсеп ултырыуы

Рустар, бер яҡтан, баш күтәреүселәрҙе баҫтырыуға, икенсе яҡтан, башҡорт ерҙәренә үҙ халҡын көсереп ерләштереүгә әһәмиәт бирҙе. Күскенселәр иҫәбен арттырыуы өсөн, һөргөнгә хөкөм ителгәндәргә, шулай уҡ Рәсәйҙәге ер хужалары помещиктарға ҡаршы баш күтәргән крәҫтиәндәргә: "Башҡортостанға барып ерләшһәгеҙ, эҙәрләүҙәрҙән ҡотолорһоғоҙ һәм унда азат булып иҫәпләнерһегеҙ", – тип белдерәләр. Шул юл менән Башҡортостанға килеп урынлашҡан рустар һаны 1745 йылда 20 мең тирәһенә етә. Йәғни был осорҙа улар күп түгел ине әле. Батыршаһ күтәрелешенән алда ҡоролған мәғдән заводтарын иҫкә алғайныҡ инде. Заводтар һәм күскенсе рустар һаны XVIII быуат аҙағына байтаҡҡа артты. Көнбайыш һәм көньяҡ

---

*Генерал-губернатор.

Башҡортостанда Воскресенск, Архангельск, Правиленск, Ҡатай-Йуруз, Белорет, Ҡатай, Мин заводтары һалынды. Көнсығыш Башҡортостанда ла Алапай, Сувалинский, Белговский, Шайтан, Егушеменский, Исәт, Благодатный, Верхотор заводтары ҡоролдо. Был заводтар өсөн ер ырыу бейҙәренә аҙ ғына аҡса бирелеп (йәнәһе һатып) алынды. Мәҫәлән, Архангельск заводы өсөн 39 069 дисәтинә(гектар) ергә 200 һум ер аҡсаһы (йәғни һәр дисәтинәһенә ярты тин), Белорет (Иҙелбашы) заводы өсөн 300 000 дисәтинә ергә ни бары 300 һум (йәғни һәр 10 дисәтинә өсөн бер тин) хаҡ түләнгән. Әүжән-Петровск өсөн 180 000 дисәтинә ергә 20 һум (йәғни 90 дисәтинә бер тин) аҡса түләнгән. Байтаҡ урындарҙа ер туранан-тура тартып алынды, йәғни һис бер хаҡ-фәлән түләп тормаҫтан, ҡаҙна ере тип иғлан ителде, унда рустар ерләштерелде. Шулай итеп, Башҡортостанда рустарҙы ерләштереү, беренсенән, ҡалалар төҙөү, ғәскәр, хеҙмәткәрҙәр синыфы алып килеү, икенсенән, крәҫтиән ҡасаҡтарҙы ауылдарға урынлаштырыу, заводтарға рустарҙы эшсе сифатында йәлеп итеү юлы менән тормошҡа ашырылды.

Рәсәйҙә халыҡ иҫәбен алыу Петр I заманында башланды. Уны хөкүмәт ревизия тип, ә башҡорттар иһә үҙ телдәренә яраҡлаштырып "Эревиз" тип атаны. Беренсе һәм 1742 йылда башланған II ревизияла башҡорттар ҡатнашманы. Сөнки Башҡортостан әле булһа ярым мөстәҡил хәлдә ине. Хатта Рәсәй хөкөмө тулыһынса урынлашҡан ерҙәрҙә лә башҡорттар үҙҙәрен иҫәпләргә рөхсәт итмәне. Тик 1761 йылдағы III һәм 1781 йылдағы IV ревизиялар Башҡортостанда ла үткәрелде, һәм IV ревизия мәғлүмәттәре аҫаба башҡорттарҙың иҫәбе ярты миллиондан кәмерәк булыуын күрһәтте.

§38 Кантонлыҡтар

Башҡорттарҙың эске идараһы һәр айырым ҡәбиләнең йә иһә ҡәбиләләр берләшмәһенең ер биләмәләре ("дача"лары) нигеҙендә Швейцария һәм Италияла ҡулланылған латин һүҙе менән "кантон" тип аталды, һәм бөтә аҫаба башҡорттар рус казактары ысулында ғәскәри синыф тип иғлан ителде. Был ваҡиға 1798 йылға тап килә. Башҡорттар 12 ырыу (йәғни улус) иҫәпләнгәнлектән, 12 кантонға бүленде. Был хәл боронғо хандар заманынан килгән 12 ырыуға бүленеүгә бәйле булһа кәрәк. Кантондар үҙ сиратында "йорттарға" бүленде. Йорттарҙы иһә, Хорезмда һәм ҡарағалпаҡтарҙағы кеүек, "түбәләр" тәшкил итте. 1789 йылға тиклемге документтарҙа 12 кантон телгә алына. 1798 йылда кантондар һаны 13-кә етә һәм уларҙа барлығы 497 552 башҡорт иҫәпләнә. Рустарҙың һуңыраҡҡы идара берәмегендә кантон урынына "уезд" (өйәҙ) һүҙе ҡулланылды, беҙ иһә уны төрксә исеме менән "төмән" тинек. Өйәҙ берәмеге кантондыҡына тап килмәй, шулай ҙа кантондың урынын яҡынса булһа ла

күрһәтеү өсөн ошо һүҙҙе ҡулландыҡ. Номерлап беренсе, икенсе... тип күрһәтелгән был кантондарҙың ерҙәре һәм халыҡ иҫәбе түбәндәгесә:

Беренсе кантон: Пермь виләйәте, Уса төмәне (уезд), 17086 ғаилә, 9 йорт.

Икенсе кантон: Екатеринбург, Красноуфимск төмәндәрендәге башҡорттар, 13038 ғаилә, 7 йорт.

Өсөнсө кантон: Шадрин төмәне башҡорттары, 17952 ғаилә, 11 йорт.

Дүртенсе кантон: Троицк төмәнендәге хәҙерге Тамъян-Ҡатай кантоны башҡорттары, 11864 ғаилә, 9 йорт.

Бишенсе кантон: шулай уҡ Троицк төмәне башҡорттары, 12047 ғаилә, 6 йорт.

Алтынсы кантон: Силәбе төмәне башҡорттары, 34784 ғаилә, 19 йорт.

Етенсе кантон: Тамъян-Ҡатай башҡорттарының һуңыраҡ Верхнеуральск тип аталған көнсығыш өлөшө, 54147 ғаилә, 30 йорт.

Һигеҙенсе кантон: Стәрлетамаҡ төмәне. Башлыса Юрматы башҡорттарынан ғибәрәт, 47208 ғаилә, 25-28 йорт.

Туғыҙынсы кантон: Өфө төмәне; Табын һәм Көҙәй башҡорттары 26280 ғаилә, 14 йорт.

Унынсы кантон: Көньяҡ Стәрлетамаҡ – Быҙаулыҡ, Ырымбур төмәндәрендәге Ҡыпсаҡ, Ете ырыу, Үҫәргән һәм Бөрйән башҡорттары, 89477 ғаилә, 41 йорт.

Ун беренсе кантон: Бөрө төмәне башҡорттары, 58858 ғаилә, 25 йорт.

Ун икенсе кантон: Сарапул, Алабуға һәм Минзәлә төмәндәре башҡорттары, 53693 ғаилә, 25 йорт.

Ун өсөнсө кантон: Боғорослан, Бәләбәй төмәне (йәғни, русса уезд) башҡорттары, 61033 ғаилә, 29 йорт.

### §39 Рәсәй хөкүмәтендә башҡорт ғәскәре

Рустар үҙ ирке менән теләп килгән башҡорттарҙан ғәскәр ойоштороуҙы бик иртә башлай. "Ете йыллыҡ һуғыш" заманында, йәғни 1756-1763 йылдарҙа, 15 мең кешенән торған 12 башҡорт полкы генерал Апраксин етәкселегендә һуғышта ҡатнашып, Берлинға инде. Шул мәлдә башҡорт ғәскәрҙәренең берлиндарҙы ҡурҡыуға һалыуы хаҡындағы мәғлүмәт әҙәби сығанаҡтарҙан күренә.

Кенигсберг янындағы Эгерсдорф – Гросс эргәһендә булған ҙур һуғышта башҡорттар егетлек күрһәтә. Рустарҙың Одерҙағы Франкфурт янында Куннерсдорфта граф Салтыков етәкселегендә пруссактар өҫтөнән ҡаҙанған ҙур еңеүендә лә башҡорттар батырлыҡ күрһәткән һәм киләһе 1760 йылда генерал Чернышев ваҡытлыса Берлинды баҫып алғанда башҡорт полктары ҡалаға беренсе булып инеүселәр сафында булған. Мәхәлләләрҙә һәм сиркәүҙәрҙә тәртип һаҡлауға башҡорт ғәскәре ҡуйыла. Немецтарҙың береһе рус офицерынан: "Быларҙы нишләп уҡ менән ҡоралландырҙығыҙ?" – тип һорағас, рус: "Улар әле генә өйрәтелгән йыртҡыстар (только что дрессированные звери), мылтыҡ бирһәк, һеҙҙе шундуҡ үлтерә башларҙар", – тип яуап биргән.

Башҡорттарҙан айырым ғәскәри төркөмдәр тәүҙә йә үҙ ирке менән килгән, йә иһә көсләп "һалдатҡа" алынғандарҙан ойошторолған. 1798 йылдан башлап 17–45 йәштәге бөтә аҫаба башҡорттар хәрби хеҙмәттә иҫәпләнде. Уларҙан иррегуляр ғәскәри төркөмдәр ойошторолдо. Был эш 1782 йылда уҡ башланғайны. 1798 йылда ул мәжбүри форма алды. Мылтыҡ йә иһә башҡа утлы ҡорал бирелмәне, уҡ-һаҙаҡ ҡына рөхсәт ителде. Хәрби кейемдәре хандар заманындағы кейем булды. Ҡалпаҡтары, әле Әүлиә Челеби сәйәхәтнамәһендә графин рәүешле ҡалпаҡ тип тасуирланған, ситтәре өс ерҙән теленеп, өҫкә бөкләнгән бүрек, өҫтәрендә ҡулдан нағышлап сигелгән кафтан

булған. Был кейем бик матур була, бөгөн дә уларҙы рус хәрби тарихы музейҙарында осратырға мөмкин. Башҡорт ғәскәрҙәре көнсығышта ҡаҙаҡ-кырғыҙ хандары ерҙәренең сиге буйында һаҡта торҙо. Тиле Петрҙан алдағы батшалар мосолман ҡәүемдәренә ҡарата Алтын Урҙа дәүере ҡанундарын һәм ғәҙәттәрен ҡуллана килгәндәр. Тик ҡайһы бер атамаларҙы рус һүҙенә алыштырғандар. Башҡорт ғәскәрҙәрен ҡаҙаҡ ханлыҡтарының көнсығышына сик һаҡлауға тәғәйенләүҙәре лә боронғо тәртипкә ярашлы. Сөнки XV быуат уртаһында ҡаҙаҡ хандары (Тоҡайтимер улдары) Шейбан нәҫеле Әбелхәйер хандан айырылған ваҡытта башҡорттар был ханлыҡтың көнсығышында сик һаҡлаған, беренсе ҡаҙаҡ хандары Әхмәт һәм Гәрәй хандар ғына башҡорттарҙы Ҡаҙағстандың көнсығышынан көнбайышҡа, ватандарына ҡайтарған323.Рус батшалары башҡорт ғәскәренең боронғо хандар заманындағы кейемдәрен ҡанунлаштырып, шул ҡиәфәттә Рәсәйҙең көнбайыш виләйәттәренә, хатта Европа илдәренә ебәрҙе.

Берлин ваҡиғаларында ҡатнашҡан башҡорт ғәскәрҙәре хаҡында алда һүҙ булғайны. Артабан 1802 йылда ла 5 500 кешенән торған башҡорт ғәскәре Европаға ебәрелә. 1812-1813 йылдарҙа Наполеонға ҡаршы һуғыштарҙа рус ғәскәре составында 20 полктан, 60 бүлектән (эскадрон) торған башҡорт ғәскәре була. Берлиндағы кеүек үк, бында ла улар милли кейем кейеп, уҡ-һаҙаҡ менән ҡоралланғайны. Улар Германияла Лейпциг, Веймар, Ганновер, Францияла Шатобриан һәм Париж һуғыштарында ҙур батырлыҡ күрһәтте.

Ғәжәйеп милли кейемдә башҡорт ғәскәре француздарҙың диҡҡәтен йәлеп иткән. Уҡ-һаҙаҡтары боронғо һундарҙы хәтерләткән. Немец, француз шағирҙары һәм яҙыусылары уларҙы тасуирлап яҙған, шул замандағы мәжмүғә һәм газеталарҙа рәсемдәре баҫылған. Веймарҙа башҡорттарҙы бөйөк немец шағиры Гете күргән, һәм был осрашыу философ шағирҙың шәреҡкә ҡарата ҡыҙыҡһыныуын арттыра. Шағирға шул ваҡытта Испаниянан Веймарға әйләнеп ҡайтҡан немец хәрбиҙәре Ҡөрьәндең бер өлгөһөн алып килгәндәр. Бик матур каллиграфия менән яҙылған был Ҡөрьән һүҙҙәренең яҙылышын шағир оҡшатҡан һәм, аңлайышһыҙ телдә булыуына ҡарамаҫтан, ошо каллиграфия яҙыуына оҡшатып, күсертеп рәсемен эшләткән, немецсаға тәржемә иттергән. Шул осор ул бөйөк Иран шағиры Хафиз Ширази шиғырҙарының немецсаға тәржемәһен уҡыған булған. Тап ошо мәлдә башҡорттарҙың Европаға килеүе Веймарға шәреҡтең тап үҙе килеү кеүек күренгән. Башҡорттарҙың бер юғары дәрәжәләге офицеры була. Уны принц тип йөрөткәндәр. Ихтимал, сығышы менән ул боронғо хан нәҫеленәндер. Улар Веймар гимназияһында намаҙ уҡыған, бәлки, ул байрам намаҙы булғандыр. Быны Гете лә күргән. Һуңыраҡ башҡорттарҙың етәксеһе менән осрашҡан. Башҡорттар театрға ла барған, Гете уларҙы бында ла тәбрикләгән, ә башҡорттар шағирға уҡ-һаҙаҡ һәҙиә иткән. Был уҡ-һаҙаҡты Гете иҫтәлек итеп һәр ваҡыт өйөндә тотҡан, хатта 75 йәшкә етеп ҡартайғас та шул уҡ-һаҙаҡты алып, баҡсаһында атып ирмәк иткән. Һәр хәлдә башҡорттарҙың был сәфәре шағирҙа шәреҡкә ҡарата тәрән бер ҡыҙыҡһыныу уята. Шағирҙың кәтибе һәм фекерҙәше Кеммерман ошо хаҡта яҙып ҡалдырған324. Парижда башҡорт ғәскәрҙәре күп батырлыҡ күрһәтә, һәм Рәсәйҙең баш командующийы йөҙәрләгән башҡорт офицеры һәм һалдаттарына "За взятие Парижа" йәғни "Парижды алған өсөн" тип яҙылған миҙалдар тапшыра. Француз шағир һәм яҙыусылары, бәғзе рәссамдар әҫәрҙәр ижад иткән кеүек үк, башҡорттар үҙҙәре лә был поход хаҡында иҫтәлектәр һаҡлаған. Шул иҫәптән башҡорт ғәскәре имамы Яҡшығол Ейәнсура улының Муса тархан Көсөк улына 1812 йылда Парижда яҙған шиғри юлдары ҡалған:

Аһ дерига бизни илибизден джуда ҡылдың фелек

Айланыб баш кайт дейүб һәр көндә йөз миң гам йемек

Биз тевеккүл әйләдүк башны Худаға тапшырыб

Не ажеб яр болса бизге һефт-и асмандин менек*325

Ул заманда башҡорт һәм ҡаҙаҡтарҙа ҡулланылған һуңғы сығатай әҙәби телендә яҙылған был юлдар ғәскәр имамының яҡшы шағир булыуын, сығатай теленең боронғо

классик формаһын һәйбәт белеүен һәм уға үҙ туған башҡорт теленән һүҙҙәр ҡушып йәнләндереп ебәреүен күрһәтә. Әлбиттә, Муса тархан да – ошоноңише шиғырҙарҙан зауыҡланған кеше. Ләкин был ике шәхес хаҡында башҡа һис бер ниндәй мәғлүмәтебеҙ юҡ. Башҡорттарҙың Франция сәфәренә бағышланған тағы бер шиғыр өҙөгө итальянса "Revista

---

*"Ах" тип уфтандырыр өсөн, беҙҙе илебеҙҙән айырҙың, яҙмыш.

Әйләнеп баш ҡайтһын тип, һәр көн йөҙ мең ғәм йотабыҙ.

Беҙ тәүәккәлләнек, башты Хоҙаға тапшырып.

Ни ғәжәп, юлдаш булһа беҙгә күктәге фәрештәләр. (Ә.Ю.).

Orientalia"ла нәшер ителгән*.

Рәсәй хөкүмәте башҡорт ғәскәрҙәренә һәр ваҡыт шикләнеп ҡараны, бигерәк тә уларҙы көнсығыш сиктәрҙе һаҡлауҙа файҙаланыуҙы шөбһәле тип иҫәпләне. Башҡорт ғәскәрҙәрен тарҡатыу күп тапҡырҙар ҡарарлаштырылһа ла, кисектерелә килде. Сөнки Рәсәй вәлиҙәре һәм генералдары араһында башҡорт ғәскәренең сәйәси ҡурҡынысына ҡарағанда хәрби йәһәттән әһәмиәтен өҫтөнөрәк ҡуйғандар күберәк булды. 1834 йылда ла был ғәскәр тарҡатылырға тейеш ине, әммә йәнә әүәлгесә ҡалдырылды. 1838 йылда"Башҡорт һәм мишәр ғәскәри идараһы" (Башкирско-мишарское Войсковое управление) ойошторолдо, үҙәге итеп Ырымбурҙа ҙур баҡсалы Каруанһарай ҡоролдо. Уның матур

мәсете, тәғәйенләнгән ғәскәри имамы бар ине. Ләкин бер аҙҙан башҡорт ғәскәренең һанын кәметеү ҡарарлаштырылды, 1840 йылда ни бары 4, 6, 7 һәм 10-сы кантондарҙан, йәғни Тамъян-Ҡатай, Ҡыпсаҡ, Үҫәргән һәм Бөрйән башҡорттарынан ғәскәр алынды, башҡа кантондар хәрби хеҙмәттән бушатылды. 1850 йылда башҡорт ғәскәренең милли кейеме урынына рус казактарыныҡына оҡшаш форма кейеү мәжбүр ителде. Ҡырым һуғышында 1500 һыбайлынан торған башҡорт полкы ҡатнашты. 1853 йылда башҡорт ғәскәре Фин ҡултығында сик һаҡлау хеҙмәтендә булды. 1862 йылда Рәсәй хөкүмәте башҡорттарҙың мөхтәриәтен, кантондарын һәм ғәскәрен юҡ итергә ҡарарлаштырҙы. 13 майҙа – кантондар, 2 июндә ғәскәр бөтөрөлдө. Был ваҡиғаға тиклем Башҡортостандың дөйөм рәйесе булмаһа ла, айырым кантондар эсендә автономия бар ине һәм был кантон башлыҡтары Рәсәйҙең эске министерстволары ҡарамағында түгел, сит ил министерствоһына ҡарай ине. 1872 йылда башҡорттар Рәсәйҙең башҡа подданныйҙары менән бер үк хоҡуҡта рус регуляр ғәскәренә рекрутлыҡҡа алына башланы. Ләкин уларҙан айырым һыбайлы төркөмдәр ойошторолдо. Был иһә башҡорттарҙың тотошлай рус ғәскәре хеҙмәтенә күсеү дәүере ине. Быны башҡорттар үҙҙәре "эскадрон дәүере", йәғни "һыбайлы төркөмдәр дәүере" тип атаны. 1878 йылда

---

*Ҡулъяҙмала шиғыр килтерелмәгән.(Ә.Ю.)

был төркөмдәрҙән бер полк ойошторола, ләкин, дүрт йыл үткәс, 1881 йылда ул да тарҡатыла. Эскадрон дәүере башҡорт милли музыкаһында бәғзе йырҙарҙа сағылыш тапты.

Башҡорттарҙың 1862 йылда мөхтәриәте юҡ ителгәнгә тиклемге йәшәйеше үҙенсәлекле ярым күсмә ғәскәри һәм һуғышсан төрки ҡәүем тормошо сифатында төрлө яҙыусылар тарафынан тасуирланды. Шуларҙың береһе, XVIII быуатта башҡорт һәм ҡаҙаҡ-ҡырғыҙҙарҙың, ҡалмаҡтарҙың тормошон өйрәнеү менән мәшғүл булып, өс мөһим әҫәр ҡалдырған рус тарихсыһы капитан Рычков ине. Был зат "Ырымбур тарихы", "Ырымбур виләйәте топографияһы", "Капитан Рычковтың көндәлек хәтирәләре" исемле әҫәрҙәрендә башҡорттар тормошон яҡшы кәүҙәләндергән. Башҡорттарҙың ҡәбилә ҡоролошо хаҡында мәғлүмәт ошо тарихсы әҫәрҙәрендә генә бар. Бынан тыш, Рәсәй Фәндәр Академияһы тарафынан Себерҙе өйрәнеү өсөн

ебәрелгән немец ғалимдары Фишер һәм Миллерҙың, шулай уҡ Георги, Паллас, Лепехин, Гмелиндарҙың Урал һәм Себер тәбиғәтен тасуирлаған сәйәхәтнамәләрендә башҡорттар тураһында бик яҡшы мәғлүмәттәр бар. И. Гмелин 1733-1743 йылдар араһында сәйәхәт иткән. Сәйәхәтнамәһенең 4-се томында һүҙ Силәбе, Верхнеуральск, Миәс тарафындағы башҡорттарҙың тормошо хаҡында бара. Бында ул 1742 йылда булған. Бөгөн Магнитогорск ҡалаһы урынлашҡан ерҙә Яйыҡ йылғаһынан 5-6 саҡрым алыҫлыҡта йәшәгән башҡорттарҙың тимер эшләү усаҡтары булыуы телгә алына, башҡорттар әле бер нисә йыл элек кенә (йәғни батша тарафынан уларҙа тимерселек эше тыйылғанға тиклем) "Оло Утассы тау" тип аталған ошо Магнит тауының көнбайыш итәгендә үҙ усаҡтарын ҡорған. Бында тимер иреткәндәр, унан иң яҡшы ҡорос ҡайнатҡандар һәм бының өсөн, тимер мәғдәне ятҡылыҡтарының тәрән ҡатламдарын асып, иң һәйбәт тимер рудаһын ҡаҙып сығара торған булғандар. Был ерҙә башҡорт тирмәләре Яйыҡтың көнбайышында, ҡаҙаҡтар иһә көнсығышында урынлашҡан. Утассы борондан килгән бер ҡаһармандың исеме булһа кәрәк. Башҡорттарҙың мәғдәнселеге хаҡында Лепехин сәйәхәтнамәһендә лә мәғлүмәт бар326.

Башҡорттар идара өлкәһендә махсус ҡанундарға буйһона ине. Улар "Рәсәй ҡанундары мәжмүғәһе"ндә "Положение о башкирах", йәғни башҡорттар тураһындағы ҡанундар, исеме менән айырым бер бүлек тәшкил итте. Ләкин был ҡанундар эҙмә-эҙлекле рәүештә юҡҡа сығарылғандан һуң, 1917 йылдағы инҡилапҡа тиклем башҡорттарҙың мәнфәғәтенә ҡаршы йүнәлтелгән ер һәм урман мәсьәләләренә ҡағылышлы бәғзе ҡанундарҙан башҡа һис бер нәмә ҡалманы. 1881 йылда Башҡортостанда аяуһыҙ ер талау башланды.

Шәриф Иҙриси яҙмаларына ҡарағанда, XII быуатта уҡ башҡорттар тотош күсмә тормошта йәшәмәгән. Улар иң боронғо дәүерҙән үк үҙ тупраҡтарына бәйле булған. XVIII һәм XIX быуатта ла башҡорттар йорт* өсөн сиктәре билдәләнеп документлаштырылған "иҡта", русса "дача" биләмәләрендә йәшәй. Был "дача"лар тураһындағы бәғзе ҡағыҙҙарыҙа

боронғо төрксә оригиналдарға таянып аңлатма бирелә. Ҡышлау һәм йәйләү ерҙәре лә билдәләнгән. Ниһәйәт, Рәсәй ҡануны һәм аҫаба башҡортҡа хужалыҡ итеү өсөн 15 дисәтинә (гектар) ер ҡалдырып, ҡалғанын "запасной" тип файҙаланыуҙан алып, һатырға рөхсәт итте һәм шул хаҡта указдар сыҡты. Дөрөҫөрәге, башҡорттарҙы "запасной" ерҙәрен һатырға мәжбүр иттеләр, сөнки ул биләмәләр ауыл халҡы файҙалана алмаҫлыҡ алыҫ урындарҙан бүленеп бирелгәйне. Был иһә башҡорттарҙан ер һаттырыу өсөн махсус эшләнде.

## §40 Һуңғы рус инҡилаптары дәүерендә башҡорттар**

1905 йылдағы инҡилап ваҡытында башҡорттар хосуси бер хәрәкәт күрһәтмәне. Ҡаҙаҡ солтандарынан Чоҡан Вәлихан башҡорттарҙың рус ғәҙелһеҙлегенә боронғо замандағы кеүек

---

*Ырыу мәғәнәһендә

**"Башҡорттар тарихының" был бүлеге З. Вәлиди тарафынан Өфөгә Әхмәр Ҡасимовҡа ебәрелгән нөсхәһендә сәйәси сәбәптәр арҡаһында ҡыҫҡартылып бирелгән. Беҙ уны үҙгәртмәнек. 1996 йылдың майында Иҫәнбикә ханым менән ғалимдың архивын барлағанда әҫәрҙең дауамы ла табылды. Унда 1917 йылғы инҡилаптар һәм граждандар һуғышы осорондағы башҡорт милли хәрәкәте хаҡында ентеклерәк мәғлүмәт бирелә (Ә.Ю.).

ҡорал менән ҡаршы тороу юлынан ситләшеүе, ул хаҡта тик ҡурай тартып, боронғо ҡаһарманлыҡ йырҙарын йырлап ҡына ултырыуҙары тураһында әсе үкенес менән

яҙған. 1905 йылғы инҡилапта башҡорттарҙан Тимер Ғәли улы, Ҡаҙағстанда һәм Ҡытайға ҡараған Кульджала ихтилал* ойошмалары булдырып, конгрестар йыйҙы һәм башҡорттарҙың, мөмкинлек сыҡҡанда, үҙ хоҡуҡтарын ҡаҙаҡтар менән берлектә ойошҡан рәүештә яҡлай аласағын күрһәтте. Башҡорттар үҙ һәләтен 1917 йылдағы инҡилап заманында ныҡ күрһәтте, милли ғәскәр һәм милли хөкүмәт ойоштороп, 1920 йылдың июленә ҡәҙәр өс йыл буйы көрәш алып барҙы. 1917 йылдың апрель айында Ташкентта йыйылған Төркөстан дөйөм ҡоролтайында башҡорт вәкилдәре бик актив роль уйнаны. Шул уҡ йылдың 1-10 майында Мәскәүҙә йыйылған Бөтә Рәсәй мосолмандары йыйылышына иллегә яҡын вәкил ебәрелде. Тартып алынған

ерҙәр, юҡҡа сығарылған хоҡуҡтар мәсьәләһе менән шөғөлләнеү өсөн өс кешелек "Башҡорт өлкә комитеты" ойошторолдо. Был комитеттың протоколдарын нәшер иттеләр, башлыса иҡтисади мәсьәләләрҙе күтәргән "Башҡорт" исемле газета сығарҙылар. Ҡаҙаҡ төрктәренең баш вәкилдәре лә Ырымбурҙа ине, улар кәңәшләшеп, бер үк көндәрҙә ҡоролтайҙар йыйып, милли мөхтәриәтте тормошҡа ашырыу юлына ысынлап аяҡ баҫтылар. Ҡазан төрк зыялыларының күпселеге иһә, сәйәси, иҡтисади һәм ғәскәри хоҡуҡтары булған өлкә мөхтәриәте иғлан итеүгә ҡаршы булып, тик территория һәм иҡтисадиәт менән бәйле булмаған "экстерриториаль" дини һәм мәҙәни мөхтәриәт фекерен алға һөргәнлектән, Башҡортостандың милли хәрәкәтенә көслө ҡаршылыҡ күрһәтте. Татар зыялыларының байтаҡ өлөшө башҡорт хәрәкәтенә баштан уҡ ҡушылһа ла, был дөйөм хәлде үҙгәртерлек һөҙөмтә бирмәне. 20-25 июлдә Беренсе дөйөм башҡорт ҡоролтайы йыйылып, туғыҙ кешенән торған Үҙәк милли комитет һайланды һәм киләсәктәге милли ҡоролошта ойоштороласаҡ 11 кантонлыҡ, йәғни "мәхәллә шуралары" төҙөлдө. Киләсәктә үҙ аллы Башҡортостандың виләйәттәре лә буласағын аңлаған рустар, тынысһыҙланып, матбуғатта быға ——————

*Революция, восстание.

ҡаршы сыға башланы. 28-29 августа Өфөлә Икенсе башҡорт ҡоролтайы йыйылып, Рәсәй Ҡороусылар Мәжлесендә Башҡортостан Милли комитеты тарафынан төҙөлгән айырым документтарға таянып ҡатнашырға ҡарар ителде. Башҡортостан Милли комитеты үҙеген бәғзе татар эшмәкәрҙәрен дә йәлеп итеп киңәйттеләр. Ҡаҙағстан һәм Төркөстан менән тулы берҙәмлектә хәрәкәт иткән Башҡортостан Милли комитеты, Финляндия, Украина, Белоруссия, Дон казактары һәм Әзербайжан милли ойошмалары менән бәйләнешкә инеп, 15 ноябрҙә үҙенең Милли мөхтәриәтен рәсми рәүештә иғлан итте. Был хаҡта Киевта тап шул осорҙа ойошторолған Украина хөкүмәтенә, Әзербайжанға һәм Кавказдағы башҡа милли ойошмаларға телеграф аша белдерелде. Милли хөкүмәт ойошторолдо һәм Өсөнсө (ҡороусы) башҡорт ҡоролтайы 22 декабрҙә Ырымбурҙа үткән быуаттың уртаһында башҡорт ғәскәре өсөн төҙөлгән Каруанһарай бинаһында йыйылды. Ошо ҡоролтай ҡарары буйынса, шәрҡи Башҡортостандың алтын мәғдән сыҡҡан Баймаҡ исемле мәхәлләһендә "Милли башҡорт ғәскәре" ойоштора башланы. Әммә Ырымбур ҡалаһын баҫып алған Совет ғәскәре бында урынлашҡан Ҡаҙағстан Милли комитетының ҡасып китеүенә сәбәп булды, Башҡортостан милли хөкүмәте ағзалары төрмәгә ябылды. Шул уҡ ваҡытта Баймаҡта ойошторола башлаған Беренсе башҡорт йәйәүле полкында мосафир булыу хәйләһе менән Орскиҙан Баймаҡҡа килгән Совет вәкилдәренең рус һаҡсы ғәскәрҙәре башҡорт полкы етәкселәрен һөйләшеү өсөн саҡырып алып, хыянатсыл рәүештә үлтерҙе. Был ваҡиғалар бөтә Башҡортостанда Советтарға ҡаршы ҡораллы күтәрелеш башланыуға сәбәп булды. Төрлө виләйәттәргә ҡасҡан Башҡортостан милли хөкүмәт ағзалары, берҙәм һәм планлы рәүештә эшләп, Урал тауҙарының урманлы урындарында партизан төркөмдәре ойоштора башланы. Донъя һуғышы барышында рус ғәскәренә ҡушылған чехтарҙан ғәскәр ойошторолғайны. Улар Һамарҙан Себергә тиклем һуҙылған тимер юл станцияларында урынлашҡайны. 22 майҙа чехтар Силәбелә Совет хөкүмәтенә ҡаршы баш күтәрҙе. Партизан төркөмдәре ойоштороу менән шөғөлләнгән башҡорт эшмәкәрҙәре лә осраҡлы рәүештә яҡында булып сыҡты һәм улар ҙа чехтарға ҡушылды. Шулай итеп, июнь айында башҡорттарҙан бер нисә йәйәүле һәм һыбайлы полктар төҙөлөп, мәмләкәт большевиктарҙан таҙартылды.

Ырымбур һәм Уральск виләйәттәрендәге рус казактары ла, мөхтәриәт дәғүә итеп, большевиктарға ҡаршы баш күтәрҙе, Яйыҡ (Урал) йылғаһы буйындағы ҡалаларҙы ҡулында тотҡан Совет ғәскәрҙәрен ҡыйратты. Башҡортостан хөкүмәте үҙәге Силәбенән Ырымбурға күсерелеп, тарихи Каруанһарай бинаһына урынлашты. Был ваҡыт Башҡортостанда Башҡорт милли хөкүмәте генә идара итте. 1918 йылдың көҙөндә Башҡорт хөкүмәтенең 2 йәйәүле, 2 һыбайлы төрмәне бар ине. Өсөнсө йәйәүле полк ойошторола башлағайны. Улар, Аҡтүбә тарафын баҫып алған Ташкент коммунистарын ҡыуып, Төркөстан юлын асыу өсөн ҙур ғәйрәт сарыф итте. Ләкин шул заманда Себергә килгән союздаштарҙың (Америка, Англия, Франция һәм Япония) вәкилдәре, урындағы ваҡиғаларҙы һис белмәгән килеш эшкә ҡыҫылып, бик насар хәл тыуҙырҙы. Ҡаҙағстанда Семипалат ҡалаһында милли Алаш-Урҙа хөкүмәте ойошторолоп, хәрби хосуста башҡорттар менән берлектә хәрәкәт итә ине. Турғай виләйәтендә башҡорт офицерҙары ярҙамында ҡаҙаҡ милли ғәскәри частары төҙөлдө. Ул ваҡытта үҙәге Һамарҙа булған Рәсәй Ҡороусылар Мәжлесенең демократик хөкүмәте бар ине. Был хөкүмәт башҡорт һәм ҡаҙаҡ ғәскәрҙәренә ярҙам итте. Уның ярҙамында башҡорт һәм ҡаҙаҡ ғәскәри частарын берләштереп, башҡорт-ҡаҙаҡ корпусы төҙөлдө. Быны совет һәм аҡ рус генералдары ҡабартып күрһәтеп, шәрҡи Рәсәйҙә мосолмандар ойоша, улар, Украиналағы немецтар һәм Әзербайжанды баҫып алған Төркиә ғәскәре менән берләшеп, Рәсәйҙе Төркөстандан, Ҡаҙағстандан һәм Уралдан айырасаҡ, тип өгөт алып барҙы. Америка һәм Франция генералдары Ҡаҙағстан һәм Башҡортостан хөкүмәтен тар-мар итеп, ғәскәрен тарҡатып, киҫкен саралар менән был хәрәкәтте юҡ итергә ҡарарлаштырҙы. Шул саҡ Волганың көнсығышына сығып, алға табан уңышлы хәрәкәт иткән Совет ғәскәрҙәре менән Башҡорт һәм Алаш-Урҙа хөкүмәттәре бәйләнешкә инде. Советтар, был үҙ аллы өлкәләрҙең мөхтәриәтен иҡтисади һәм ғәскәри тәңгәлдә ҡабул итеп, ҡорал һәм башҡа кәрәк-яраҡтар бирергә риза булды. Һөҙөмтәлә 1919 йылдың 9 мартында Башҡорт һәм Алаш-Урҙа хөкүмәттәре Советтар менән солох төҙөнө һәм ғәскәрҙәрен тәртипкә килтерә башланы. Ләкин Советтар Башҡорт хөкүмәтенең элекке кеүек Ырымбурҙа урынлашыуына ҡаршы килде. Хөкүмәт Стәрлетамаҡ ҡалаһын үҙәк итеп, ойошмаларын шунда урынлаштырҙы. 1920 йылдың майында башҡорт хәрби ҡеүәте барлығы 27 000 кешенән торған ғәскәр һәм милициянан ғибәрәт ине. Бер нисә хәрби мәктәп ойошторолдо. Ләкин Совет хөкүмәте 1920 йылдың башында Калинин етәкселегендә ойошторолған комиссия ҡарары буйынса башҡорт менән ҡаҙаҡтарҙың теләһә ниндәй формала эш берлегенә ҡаршы етди саралар күрҙе. 1918 йылда Себерҙәге Рәсәй хөкүмәте һәм союздаштар үткәргән сәйәсәт һуңыраҡ планлы рәүештә Советтар тарафынан да тормошҡа ашырыла башланы. Ниһәйәт, 1920 йылдың июнендә большевиктар ҡул аҫтында ҡоролған милли хөкүмәттең бер өлөшө Төркөстандағы көрәшкә ҡушылды, ә икенсе өлөшө Башҡортостанда Советтар ихтыярына баш эйеп, улар теләгән коммунистик Совет Башҡортостаны режимын төҙөүҙә ҡатнашырға ҡарар итте.

## §41 Һуңғы урыҫ инҡилаптары дәүерендә башҡорттар

Үткән быуаттың һуңғы яртыһында һәм был быуаттың 1917 йылына тиклем Башҡортостанда күтәрелеш булманы. Мәхәлләлә ҡуҙғалыштар һәм бәғзе ихтилал башланыуға оҡшаш ваҡиғалар күҙәтелһә лә, улар урыҫ хөкүмәте ихтыяры менән туҡтатылды. Хатта 1862 йылда башҡорт кантондарын һәм ғәскәрен бөтөрөү ҙә бер ниндәй ҙә ҡаршылыҡҡа осраманы. Был иһә башҡорттарҙың Рәсәйгә ҡаршы баш күтәреүенән файҙа юҡлығын күрһәтте. Ҡаҙаҡ солтаны Чоҡан Вәлихан да "башҡорт ҡурайҙары инде Ҡараһаҡал заманындағы ҡөҙрәт һәм өмөт рухы таратмай"327 тип билдәләнде. Солтан Гәрәйгә (Ҡараһаҡалға) бағышланған шиғыр Башҡортостанда тыйылған булһа ла, Ҡаҙағстанда Чоҡан Вәлихан заманында, йәғни XIX быуат уртаһында, бик яратып һөйләнер булған.

Шулай ҙа ваҡ баҫҡынсы төркөмдәр аҙ булмай. Улар күпселек осраҡта, боронғо Хорасанда ҡулланылған һүҙ менән әйткәндә, "ғәййәр" тип йөрөтөлгән айырым баҫҡынсылыҡ хәрәкәттәре сифатында сикләнеп ҡалған. Шаһибәрәк исемле береһенең Себергә һөргөнгә ебәрелеүе хаҡындағы йыр бөтә Башҡортостанға билдәле. Уның эше баҫҡынсылар урыҫ заводтарына һөжүм итеп, урыҫ дворяндары биләмәһен үртәй торған булғандар.

1905 йылда Ҡаҙағстанда һәм Ҡытай ҡарамағындағы Кульджала Тимерғәлин тигән башҡорт ихтилал ойоштороу менән шөғөлләнеп, конгрестар төҙөп йөрөнө.328

§42 Мөхтәр Башҡорт иле

1917 йылда башҡорттар яңынан хәрәкәткә килде. Хәрәкәт 1920 йылдың июленә тиклем өс йыл дауам итте. Был азатлыҡ хәрәкәте боронғо башҡорт кантондарын һәм ғәскәрҙәрен бер үҙәк хөкүмәткә буйһондорған мөхтәр Төркөстанды Рәсәй сиктәре эсендәге ҡеүәтле өлкә итеүгә йүнәлтелгән хәрәкәт булды. Ул әүәлге Ҡараһаҡал, Батырша заманындағы баш күтәреү хәрәкәте генә түгел ине. Рәсәйҙә башланған инҡилаптан, демократик дәүләт системаһы ҡороу тәжрибәләренән, һайлауҙарҙан, матбуғат хөрриәтенән, бер режимдың икенсе режимға күсеү ваҡиғаларынан файҙаланыу ысулы менән азатлыҡты яңынан ҡулға төшөрөү өсөн һәм хәҙерге заман тәртиптәре нигеҙендә милли көнкүреш ҡороу өсөн тырышлыҡ булды.

§43 Мәскәү съезы

1917 йылдың март айында мин Петербургта Думаның мосолман фракцияһы янындағы бюрола Өфө губернаһы мосолмандары вәкиле сифатында хеҙмәт итә инем. Был бюроның рәйесе Әхмәт Цаликов һәм уның башҡа ағзалары кадет фирҡәһе тәьҫире арҡаһында "бүленмәҫ унитар демократик Рәсәй йөмһүриәте" тарафдарҙары булды. Башҡалар Рәсәйҙең үҙ аллы милләттәр һәм өлкәләр берләшмәһенән торған федератив йөмһүриәт булыуын теләне. Мин дә ошо фекер яҡлы булдым. Ләкин унитаристар даирәһе күпселекте тәшкил иткәнлектән, Петербургта был бюро тирәһендә туплана башлаған Ҡазан татарҙарының күпселеге унитарист булғанлыҡтан, ул осорҙа федерация һәм автономия фекерҙәрен ҡабул иттереү мөмкин түгел ине. Майҙың берендә Мәскәүҙә йыйыласаҡ Бөтә Рәсәй мосолмандары съезын ойоштороу эшен яйға һалырға тейешле орган да ошо Дума фракцияһы бюроһы булды. Ләкин бюро съезға күберәк тик татарҙарҙы туплап, башҡа милләттәрҙе бик аҙ һанда саҡырыу фекерен алға һөрҙө. Мөхтәриәт тарафдарҙары булғандарҙы яҡынлатмаҫҡа тырыштылар. Был эш башҡорт, ҡаҙаҡ һәм Төркөстан үзбәктәренең ойошоп килеүҙәренә ҡамасаулау маҡсатында эшләнде. Мин был осраҡта башҡа төркиҙәрҙе съезға тик урындарҙа ойоштороп ҡына ебәрергә мөмкин буласағын аңлап, 20 мартта Петербурҙан Ырымбурға һәм Ташкентҡа юл тоттом. Ырымбурҙан башҡорт вәкилдәренән Иҙелбаев, улдары Хөрмәтулла һәм офицер Абдулла, ҡаҙаҡтарҙан Алихан Бүкәйханов менән күрештем. Һәр ике төрки халыҡтан майҙа башланасаҡ съезға етерлек һанда вәкилдәр ебәреү тураһында ҡарарҙар ҡабул ителде. Төрлө губерналарға хаттар һәм кешеләр аша аңлатмалар таратылды. Ырымбурҙан Ташкентҡа киттем һәи унда ике съезда ҡатнаштым.

Был мосолмандар съездарында "Дәүләт идараһы системаһы" тигән темаға доклад яһарға тура килде. Мәрхүм Мәхмүт Хужа Бехбуди менән берлектә мөхтәриәт фекерен ҡабул иттереүгә өлгәштем.

Ырымбурҙа нәшер ителгән "Ваҡыт" гәзитен сығарыусылар федерация фекеренә ҡаршы ине, мөхәррирҙәрҙең береһе Ҡәбир Бәкер Ташкент съезына ебәрелгәйне. Федерация фекеренә ҡаршы күп көрәште, ләкин уңышҡа өлгәшә алманы. "Төркөстан

мосолмандарының мәркәз шураһы" исемендәге бер үҙәк комитет ҡоролоп, уның рәйесе итеп Чоҡай улы, ғөмүми кәтибе һәм ойоштороу эштәре мөдире итеп мин билдәләндем, Мәскәү съезына Ташкенттан да, Башҡортостандан да вәкил булараҡ һайландым.

Мәскәү съезына Ырымбур, Өфө, Силәбе, Пермь, Һамар тарафтарынан 50 вәкил килде. Монархист Ғәбделхәй Ҡорбанғәлиевтән башҡа барыһы ла әзербайжан һәм төркөстанлылар менән бергә федерация фекерен яҡлап тауыш бирҙе һәм, айырым фракция тәшкил итәрәк, Башҡортостандың үҙ аллы өлкә булыуы фекерен ҡабул иттеләр. Был иллегә яҡын вәкил 10 майҙа булған йыйылыштарында Сәғит Мираҫ, Аллабирҙе Йәғәфәров һәм Зәки Вәлиди составында өс кешелек "Башҡорт өлкә комитеты" (Башкирский областной комитет) төҙөп, уға Ырымбурҙа Башҡортостан мөхтәриәте фекерен киң йәйелдереү һәм бөтә Башҡортостан съезын ойоштороу эшен йөкмәттеләр. Был хаҡтағы ҡарар йыйылышта ҡатнашҡан вәкилдәр тарафынан раҫланды. Һуңғы башҡорт хәрәкәтенә юл асҡан иң тәүге ҡағыҙ киҫәге ошо ине.

§44 Башҡорт өлкә шураһы

"Бөтә Рәсәй мосолман Башҡарма комитеты"на Төркөстан вәкиле сифатында һайланғайным. Шул уҡ ваҡытта башҡорттарҙан да саҡырыу килде. Петербургҡа барып был комитеттың тәүге ултырышында ҡатнашҡандан һуң Мәскәүҙә алынған ҡарар буйынса 1 июндә Ырымбурҙа осраштыҡ. Сәғит Мираҫ менән Аллабирҙе бында алдараҡ килгәйне. "Ваҡыт" гәзитенең 19 майҙа сыҡҡан һанында (‹222) "Башҡорт мәркәз шура"һы ойошторолоуы һәм 20 июндә Беренсе башҡорт ҡоролтайы уҙғарыласағы хаҡында иғлан баҫып сығарғандар. Мин килгәс, мәркәз комитеттың матбуғат органы сифатында "Башҡорт" гәзитенең беренсе һаны нәшер ителде. Гәзиттең был һанында баш мәҡәлә һәм дүртенсе биттә Мәскәү съезында ИКОМУС-та федерация фекеренә ҡаршы сығыусыларға ҡаршы тәнҡит мәҡәләһе яҙып баҫтырҙым. Баш мәҡәләлә "әгәр төркиҙәрҙең урыҫ донъяһына ҡушылыуын һәм улар мөхитендә вәкиллек итеүҙе тәү башлап ебәргән Ҡазан татарҙары менән киләсәктә бойондороҡһоҙлоҡ маҡсатын мотлаҡ тормошҡа ашырасаҡ Төркөстан араһында, шулай уҡ татар мәҙәни хәрәкәте менән Сығатай мәҙәниәте араһында бер күпер урынын тотҡан башҡорттар татарҙар артынан эйәрә ҡалһа, был ваҡиға бөтә Төркөстандың да Ҡазан артынан эйәреп, азатлыҡ юлынан тамам ваз кисеп, урыҫ күпселеге эсендә "бәхетле бер әҙселек" сифатында йәшәү юлына баҫыуына сәбәп була алыр. Ләкин башҡорттар ҡаҙаҡтар һәм төркөстандар менән бергә булһа, Ҡазан татарҙары ла "бәхетле әҙселек" фекеренән ваз кисеп, үҙ аллылыҡ фекеренә ҡушыласаҡ" тигән мәғәнәләге фекер уртаға ҡуйылғайны.

Ырымбурҙағы Башҡорт шураһы башҡарасаҡ эштәрҙең пландарын, ҡоролтайға әҙерлек өсөн ниндәй эштәр башҡарыласағын билдәләгәндән һуң, мин шул уҡ формала ойошторолған "Төркөстан мәркәз шураһы" эштәрендә ҡатнашыу өсөн Ташкентҡа киттем. Унда ла шураның матбуғат органы булған "Кәңәш" гәзите булдырҙыҡ. Гәзиттең беренсе һанындағы баш мәҡәлә һәм һуңғы битендәге Ырымбурҙағы "Башҡорт" гәзитендә баҫылған мәҡәлә йөкмәткеһендәге мәҡәлә минеке ине. Өҫтәүенә, был гәзиттең тәүге һандарында "Төркөстан мосолмандары мәркәз шураһы"ның минең тарафтан әҙерләнгән Уставы ла нәшер ителде. Был Устав шул уҡ ваҡытта "Башҡорт мәркәхз шура"һы өсөн дә файҙаланылды.

§45 Беренсе башҡорт ҡоролтайы

Беренсе башҡорт ҡоролтайы 20 июнгә иғлан ителгәйне. Мин дә шул уҡ көндә Ташкенттан Ырымбурға юлға сығып, ҡоролтайҙа ҡатнаштым. Ҡоролтай ултырыштарын башҡорттарҙың тарихи ғәскәрҙәренең үҙәк идара бинаһы булған Каруанһарайҙа

үткәрергә теләһәк тә, бина губернатор ҡарамағында булып, Львов хөкүмәте тәғәйенләгән Ырымбур губернаторының эш урыны шунда урынлашҡанлыҡтан, беҙгә рөхсәт бирмәнеләр. Ләки, аҙаҡ сиктә, рөхсәт алыуға ирешкән ҡоролтай, 25 июнгә тиклем 5 көн буйы эшен дауам итеп, мөһим ҡарарҙар ҡабул итте. 22 июндә дәүләт идараһы һәм ер мәсьәләләре буйынса докладсы мин булдым. Бында ла башҡорттарҙың көнсығыш һәм көньяҡ-көнсығыш тарафтарында мөхтәриәт юлына баҫҡан тәүәккәл төрөк ырыуҙары менән берләшеп үҙ аллылыҡ алыу329 һәм боронғо милли башҡорт ғәскәрен аяҡҡа баҫтырыу хаҡында ҡарар ҡабул ителде. Мәркәз шура комитеты ағзалары ла һайланды, ағзалары – Шәриф Манатов, Сәғит Мираҫ улы, агроном Абидов, Фәтих Дәүләтшин һәм мин. Рәйеслекте ҡабул итмәнем, ойошторолу эштәре бүлеге етәксеһе булдым. Шәриф Манатов рәйес булды.

Ул көндөң мөһим мәсьәләһе – көҙ тупланасаҡ Рәсәй Учредителдәре Йыйылышына ағзалар һайлау ине. Быға әҙерләнеү өсөн Өфөлә Икенсе башҡорт ҡоролтайы йыйыу хаҡында ҡарар ҡабул ителде. Бынан тыш, боронғо кантонлыҡтарҙы аяҡҡа баҫтырыу өсөн төбәк шуралары исеме менән мәхәллә органдары булдырыу һәм был мәхәлләләргә идара итеүҙе яйлап ҡулға алыу өсөн әҙерлек башлау хаҡында күрһәтмәләр таратылды.

Ошо уҡ ваҡытта Ырымбурҙағы урыҫ казактары ла генерал Дутов етәкселегендә айырым Ырымбур казак автономиялы өлкәһе булдырырға теләй ине. Үҙәге Уральск ҡалаһында булған Урал казактары ла шундай уҡ ҡарар алғайны. Ҡаҙаҡ-ҡырғыҙҙар ойошмаһы рәйесе Алихан Бүкәйхан менән уның хәләл ефете шул уҡ көндәрҙә конгресс йыйҙы. Ләкин, ул ваҡытта әле булһа урыҫ кадет партияһы ағзаһы булған Алихан, ҡаҙаҡ-ҡырғыҙҙарға автономия дәғүәләүсе хәрәкәткә ҡушылырға ашыҡмаҫҡа тәҡдим итте. Ҡаҙаҡ конгресы автономия хаҡында түгел, ни бары уға әҙерлек хаҡында ҡарар ҡабул итте. Ырымбур һәм Урал казактарының мөхтәриәт фекеренә тарафдар булыуы беҙҙең өсөн мөһим ярҙам булды. Улар беҙҙе осрашыу өсөн эҙләй икән. Беҙ ҙә уларҙың саҡырыуын ҡабул итеп, автономияға йүнәлтелгән хәрәкәттәрен яклап сығасағыбыҙҙы белдерҙек. Шулай уҡ Әзербайжан, Украина һәм Белоруссия мөхтәриәтселәре менән дә бәйләнеш урынлаштырыу ҡарары ҡабул ителеп, был эштәрҙе тормошҡа ашырыу һәм "Башҡорт капиталы" тип аталған, башҡорт ерҙәрен һатыуҙан барлыҡҡа килгән милли капиталды мәркәз шураһы ҡарамағына алыу маҡсатында Керенский хөкүмәтенә мөрәжәғәт өсөн өс вәкил – Усман Ҡыуатов, Илдархан Мутин менән мин – тәғәйенләндем.

Ҡазан төрөктәре бөтә Рәсәй төрөктәре үҙәге роленә дәғүә итә ине. 21-31 июндә Ҡазанда "Рәсәй мосолмандарының II съезы", "Рәсәй мосолмандары ғөләмәһе съезы", "Рәсәй мосолмандарының хәрби съезы" йыйылды. Былар иһә тик ҡазандар съезы булды, сөнки төркөстандар, әзербайжандар һәм дағстандар был ваҡытта үҙ мәмләкәттәрендә ойошоу эштәре менән мәшғүл ине. Шулай ҙа, Ҡазанда был съездарҙа бер ни тиклем төркөстанлы һәм әзербайжандар ҡатнашҡанлыҡтан, йыйын "Ғөмүмән Рәсәй мосолмандары съезы" тип аталды. Әммә фекер алышыу тик ҡазандарға хас мәсьәләләр буйынса барҙы. 22 июндә был өс съездың дөйөм ултырышы булып, "Эске Рәсәй һәм Себер төрөк-татар мосолмандарының милли-мәҙәни мөхтәриәте"нең ҡанун нигеҙҙәре ҡабул ителде. Был иһә тупраҡ һәм ил дәғүәһенән алыҫ торған, Рәсәй йәһүдтәренең тик дини һәм мәғариф учреждениелары идараһына ҡараған, милли-мәҙәни мөхтәриәт проекттарын нигеҙ итеп алған бер ҡарарнамә ине. 24 июндә "Ваҡыт" гәзите мөхтәррирҙәренең береһе Борһан Шәрәф беҙҙең ҡоролтайға килеп тупраҡлы мөхтәриәт хаҡында алған ҡарарыбыҙҙан баш тартып, Ҡазанда ҡабул ителгән мәҙәни мөхтәриәт ҡанунына ҡушылырға тәҡдим итте. Был тәҡдим башҡорттарҙы ныҡ ғәжәпләндерҙе, быға көләп ҡараусылар ҙа булды. Борһан Шәрәфкә ҡырҡа ҡаршы сығыусылар ҙа табылды. Һөҙөмтәлә Ҡазанға мин тәҡдим иткән түбәндәге телеграмманы ебәреү хаҡында ҡарар ҡабул ителде: "Ҡазан төрөктәре съезының милли-мәҙәни мөхтәриәт иғлан итеүен тәбрикләйбеҙ. Дөйөм башҡорт ҡоролтайы ла көньяҡ һәм көньяҡ-көнсығыш тарафтарындағы ҡәрҙәш ҡәүемдәр менән берлектә тупраҡлы мөхтәриәт хаҡында ҡарар ҡабул итеп, үҙ өҫтөнә

тағы ла ауырыраҡ бурыс алды. Был хосуста ҡазанлы ҡәрҙәштәребеҙҙең башҡорттарға ярҙамсы булырына өмөтләнәбеҙ". Был телеграмма съезд материалдары аҙағында баҫылып сыҡты.

Татар авторитар төркөмдәренең башҡорттарҙы үҙ ихтыярына буйһондорорға йүнәлтелгән демагогияһының насар һөҙөмтәләргә килтерәсәген белгәнлектән, Усман Ҡыуатов менән бергә Петербургҡа барышлай Ҡазанда туҡталдыҡ. Съездары әле генә тамамланған, ләкин ағзалары таралышмағайны. Заһит Шамилдың өйөндә съезд етәкселәре менән йыйылып көрештек. Ләкин улар башҡорттарҙың автономия хаҡындағы ҡарарҙарын мыҫҡыл итеп ҡаршыланы. Был хаҡтағы һөйләшеүҙәр файҙаһыҙ буласағын күреп, шундуҡ юлыбыҙҙы дауам итергә булдыҡ. Петербургта Керенский хөкүмәтенең аграр эштәре министрлығында ер һәм башҡорт капиталы мәсьәләләре, ИКОМУС-та ла был ойошманың эштәре менән мәшғүл булғандан һуң, Мәскәүҙә Керенский идараһында асылған "Рәсәй Дәүләт кәңәшмәһендә" ҡатнаштыҡ. Унда бөтә Рәсәй мосолмандары исеменән Алимардан Топчибаши сығыш яһаны. Баҡылы Асадуллаев тарафынан төҙөлгән мәктәптә йыйылыштар һәм кәңәшмәләр булды. Бында ла беҙ федерация фекерен яҡлап сыҡтыҡ һәм Дәүләт кәңәшмәһенә килгән Украина, Белоруссия вәкилдәре менән дә һөйләшеүҙәр ойоштороп, башҡорт һәм Төркөстан мәсьәләләрен аңлата башланыҡ.

§46 Икенсе башҡорт ҡоролтайы

Беҙ Петербургта булған саҡта Башҡорт үҙәк шураһы Өфөлә Икенсе башҡорт ҡоролтайы йыйырға тип ҡарар сығарған һәм 28-29 августа был ҡоролтай йыйылды. Ҡазанда 22 июндә ҡабул ителгән ҡарар буйынса "Эске Рәсәй һәм Себер төрөк-татарҙарының мәркәз комитеты" ҡоролоп, Өфөлә ерләште. Рәйесе Саҙри Мәҡсүди һәм дини идара рәйесе Ғәлимйән Баруди ҙа ошонда урынлашҡайны. Һаҙи Атласи уларға башҡорттарҙы ла үҙ Милли идараһы аҫтына алырға тәҡдим иткән икән. 26-да беҙ ҙә Мәскәүгә килдек. Рәсәй Учредителдәр Йыйылышына әҙерлек алып барҙыҡ һәм татарҙарҙың автономия тарафдары мөхәррир Ғәлимйән Ибраһим етәкселегендәге социалистар менән депутатлыҡҡа кандидат исемлектәрен берләштерергә ҡарар итеп, "милли буржуазия" тип йөрөтөлгән Саҙри Мәҡсуди, Ғаяз Исхаҡи, башҡа милли идарасыларға һәм ҡатындар ойошмаһына ҡаршы блок булдырҙыҡ һәм кандидаттар билдәләнек. Унда беҙҙән Зәки Вәлиди, Шәриф Манатов, Сәғит Мираҫ, агроном Айытбаев, Салих Аҙнағолов, Фәтих Дәүләтшин һәм татарҙарҙан Рәхмәтуллин, Илдархан Мутин, Аллабирҙе Йәғәфәров һәм башҡаларҙан торған 12 кешелек Башҡорт мәркәз шураһы ағзалары инде. Ул заманда ойошторолған "Өфө губернаһы мосолмандары съезы"нда ҡатнашҡан һәм был съезда Саҙри Мәксүди һәм башҡаларға ҡаршы сыҡҡан башҡорттар, татар социалистары һәм тупраҡсылары бер яҡлы булып, көрәш башланды. Башҡорт ҡоролтайының тупраҡлы мөхтәриәт фекерен һис тә ҡабул итмәгән Өфө татарҙары нәшер иткән "Тормош" гәзитендә (айырыуса 726-сы һанында) мөхәррир булған Закир Ҡадири айырыуса зәһәрле мәҡәләләр баҫтырып сығарҙы. Һаҙи Атласи ҙа Бәләбәйҙә ойошторолған "Таң" типографияһында "Башҡорттарға хитап" исемле бер рисалә нәшер итте һәм беҙҙе мөхтәриәт фекеренән ваз кисереүгә күп көс һалды. Һаҙи Атласиҙы һуңынан, 1920 йылда, Баҡыла осраттым, ул был эштәре өсөн үкенеүе хаҡында үҙе һөйләне. Өфө ҡоролтайынан һуң Ырымбурға әйләнеп килгән Башҡорт мәркәз шураһы бөтә көсөн түгеп һайлауҙарға әҙерләнде.

Учредителдәр Йыйылышы һайлауҙарында башҡорт һәм татар тупраҡсыларының дөйөм исемлеге һәр ерҙә еңеүгә өлгәште. Өфө губернаһында Шәриф Манат, Ырымбур губернаһында Зәки Вәлиди, Пермь губернаһында Фәтих Төхфәтуллин (бөгөн Төркиәнең мәғариф эшмәкәре доктор Хәми Зөбәйер Ҡошайҙың әҡрәбәһе) һәм башҡалар һайланды. Мин шул арҡала Ырымбурҙа йыйылған Икенсе Ғөмүми Төркөстан конгресына киттем. Унда ла шуҡ һайлау эштәре хаҡында һөйләнелде. Мине унда Ташкент ҡала идараһы ағзалығына ла һайлағайнылар, уның бик шау-шыулы

ултырыштарында ҡатнашып, октябрҙә яңынан Ырымбурға килдем. Минең өсөн Ырымбур менән Ташкент ике эшмәкәрлек үҙәге ине. Татарҙар беҙҙең төркөстанлылар һәм ҡаҙаҡтар менән хеҙмәттәшлегебеҙҙе асылда хуп күрмәне, асыуланыр булдылар. "Ваҡыт" гәзитенең баш мөхәррире Фәтих Кәрими минең бер Ырымбурҙа, бер Ташкентта булыуымды ике аяғы менән ике кәмәгә баҫкан бер әҙәм сифатында тасуирлап, мыҫҡыллы мәҡәләләр яҙҙы. Ырымбурҙа ла Ырымбур губернаһы мосолмандарының, башлыса татарҙарҙың конгресы булып, Фәтих Кәрими унда ла мәҙәни мөхтәриәт, мин иһә тупраҡлы мөхтәриәт фекерен яҡлап, көсөргәнешле бәхәстәр булды.

## §47 Башҡортостан мөхтәриәте иғланы

Был ваҡытта Рәсәйҙең һәр тарафында Советтар хакимиәте ерләшә башлағанлыҡтан, Керенский хөкүмәте бер кризис дәүере кисерә башланы. Беҙ, башҡорт шураһы һәм Ырымбур казактары, был форсаттан файҙаланып, үҙ өлкәләребеҙ мөхтәриәтен иғлан итергә теләй инек. Ҡаҙаҡтарҙы ла шул юлға баҫтырыу маҡсатында Алихан Бүкәйхан, Әхмәт Байторсон һәм Шаһингәрәй солтан Бүкәйхан менән күп һөйләштек. Алихан Бүкәйхан Керенский хөкүмәте тарафынан губернатор итеп тәғәйенләнгәнлектән, Ҡаҙағстан автономияһын хәҙер үк иғлан итеү фекеренә бик яҡынламай ине. Башҡорт мәркәз шураһы был хәлдән тәүәккәл файҙаланырға ҡарар итеп, 30 октябрҙә (иҫке хисап менән 11 ноябрҙә) "1-се һанлы фарман" исеме менән гәзиттең бер бите ҡәҙәр ҙурлыҡтағы милли фарман нәшер итеп, большевиктар хөкүмәтенең башҡорттар рухына һис тап килмәүен, мөхтәриәтте большевиктар һәҙиәһе итеп алыу фекеренә ҡаршы булыуҙарын һәм мөхтәриәтте милләттең үҙ ихтыяры сифатында Мәркәз шура үҙе иғлан итәсәген, Учредителдәр Йыйылышын көтөп тормаясаҡтарын, милли ғәсәкр ҡорасағын башҡорт халҡына белдерҙе. Ниһәйәт, 28 ноябрҙә (иҫке хисап менән 15 ноябрҙә) Башҡортостан милли мөхтәриәт иғлан итте. Был шунда уҡ телеграф аша Киевҡа, тап ошо ваҡытта ойошторолған Украина хөкүмәтенә белдерелде. Рәсәй төрөктәренең береһе лә был мәлдә мөхтәриәт иғлан итмәгәйне әле.

Беренсе башҡорт Ҡоролтайында уҡ минең тарафымдан Бөйөк Башҡортостан һәм Бәләкәй Башҡортостан формаһында ике проект тәҡдим ителгәйне. Башҡортостан, Ҡаҙағстан һәм Төркөстанды үҙ эсенә алған, "Шәрҡи Рәсәй мөхтәр мосолман илдәре иттифағы" тип аталған проекттың карталарын төҙөп нәшер иткәйнем. Бөйөк Башҡортостанда төрөк-мосолман халҡы аҙ һәм тимер юлдар үткән бөйөк Рәсәй һәм Себер юлы буйында, бигерәк тә Өфө тарафында урыҫ халҡы күп ерләшкәнлектән, башҡорттар идара итеү өсөн мөшкөл бер өлкә буласағын иҫәпкә алып, был проекттан ваз кисеп, әгәр татарҙар ҙа мөхтәриәт фекерен ҡабул итә ҡалһа, был ерҙәр менән бергәләп үҙҙәре башҡа мөхтәр өлкә ойоштора алырҙар тигән уйҙы күҙ уңында тотоп, "Бәләкәй Башҡортостан" проекты ҡабул ителде. Уның ул заманда тәшкил иткән майҙаны 90545 квадрат саҡрым (йәғни 79560 кв. км) булып, халыҡ иҫәбе 1259059 кеше һәм 72% мосолман һәм төрөк ине. Бөтә был илде, боронғо кантонлыҡтар заманындағы кеүек, 11 кантонға бүлергә ҡарар ителде. Туҡсоран, Етеырыу-Ҡыпсаҡ, Үҫәргән, Бөрйән-Түңгәүер, Юрматы, Табын, Тамъян-Ҡатай, Көҙәй, Дыуан-Ҡошсо, Арғаяш, Ялан кантонлыҡтары булдырылды.

Автономия иғлан итеү халыҡ тарафынан бик яҡшы ҡаршыланды. Был хәрәкәт автономия иғлан итеү хосусында әле булһа икеләнеү күрһәткән ҡаҙаҡтарға, үзбәктәргә бик ыңғай тәьҫир итте. 4 декабрҙә (иҫке хисап менән 21 ноябрь) Ырымбур губернаһының Керенский Ваҡытлы хөкүмәте тәғәйенләгән губернаторы Архангельский менән "Ырымбур мосолман шура"һы (йәғни татарҙар) берләшеп, "Мөхтәриәт иғлан итеү Учредителдәр Йыйылышының хоҡуғына ҡул һуҙыу ул" тип протест белдерҙе. "Ваҡыт" гәзите мөхәрриренең туғаны Ғариф Кәрими ҙә улар менән фекерҙәш ине. Ләкин беҙ быға артыҡ әһәмиәт бирмәнек.

§48 Өсөнсө башҡорт Ҡоролтайы

20 декабрҙән (иҫке хисап менән 8-дә) алып 1918 йылдың 4 ғинуарына тиклем (иҫке хисап менән 1917 йылдың 22 декабре) Өсөнсө башҡорт Ҡоролтайы Ырымбурҙа Каруанһарайҙа йыйылды. Был иһә иң ҙур Ҡоролтай ине. Ҡаҙаҡ-ҡырғыҙҙарҙың да Өсөнө Ҡоролтайы, алдан һөйләшелеп ҡуйылғанса, шул уҡ көнгә саҡырылғайны. Ҡампа-ҡаршы тәбрикләшеүҙәр булды. Ҡоролтай мәркәз шура тарафынан иғлан ителгән "Бәләкәй Башҡортостан"дың тупраҡлы мөхтәриәтен раҫланы һәм уның төп законын эшләне. Урыҫ губернаторы Архангельский башҡорт милке булған Каруанһарайҙың бер-ике бүлмәһен биләп тора ине. Ҡоролтай асылғас, килеп тәбрикләү урынына төрлө ҡурҡытыу һүҙҙәре һөйләп сығыш яһаны. Ләкин татарҙарҙың "Ырымбур мосолман шура"һынан башҡа һис кем был губернаторҙы хуп күрмәй ине. Ҡалала башлыса хәрби ҡеүәткә эйә Ырымбур казактары ла мөхтәриәт яҡлы булып, Керенскийға ҡаршы сыҡҡанлыҡтан, беҙҙең менән союздаш ине. Губернатор Архангельский беҙгә ҡаршы бер ни ҙә эшләй алманы. Тик иҫкә алынған "Ырымбур мосолман шура"һы, йәғни татар ойошмаһы, губернатор Архангельский ярҙамында Каруанһарайҙа урын алды һәм Ҡоролтайға ҡаршы һәр төрлө яманлыҡ эшләү менән шөғөлләнде. Рәйестәре Бәширов менән Мөхәммәт Таһиров, губернаторға арҡаланып, хәрби ойошма сифатында Ҡоролтайға ҡаршы янау һүҙҙәре һөйләне. Ләкин Ҡоролтай быға әһәмиәт бирмәне, эшен дауам итте. Татарҙарҙың Ҡоролтайға баҫым яһарға маташыуы Өфөләге "Милли идара мәжлесе" тарафынан вәкил итеп ебәрелгән мөхәррир Ғәлимйән Ибраһимдың бында килеп Башҡортостанды Ҡазанға эйәртергә тырышыуы һөҙөмтәһендә тағы ла көсәйҙе. Был зат минең менән дә, башҡа вәкилдәр менән һөйләшеп, Ҡоролтайға тәьҫир итергә тырышты. Ул яңы бер план менән килгәйне: татарҙарҙы башҡорттар менән берләштереп, "Татар-башҡорт штаты" булдырыу. Мин дә, башҡаларҙың күпселеге лә, "Бәләкәй Башҡортостан" фекеренә тоғро ҡалдыҡ һәм Башҡортостандың ситтә ҡалған өлөшөн Татарстанға ҡушып, айырым "штат" ҡороуҙарына риза булдыҡ, "Бәләкәй Башҡортостандың" Ҡаҙағстан менән берләшергә тырышасағы хаҡындағы фекерҙе ҡәтғи рәүештә аңлаттыҡ. Ләкин улар "Бәләкәй Башҡортостан"дың "Казандан айырылыуын" татар берлегенән һәм мәҙәниәтенән айырылыу һәм татар мәҙәниәтенә хыянат итеү тип ҡабул итә ине. Ҡулдарынан килгән тиклем, бер тарафтан, беҙҙең менән ҡаҙаҡ-ҡырғыҙ менәүәрҙәре араһын, икенсе тарафтан, беҙҙең менән Ырымбур казактары араһын боҙорға тырыштылар. Ҡаҙаҡ-ҡырғыҙҙарға тәьҫир итә алманылар, ләкин "Ырымбур мосолман шура"һы, башлыса губернатор Архангельский ярҙамы һәм йоғонтоһо менән, генерал Дутовҡа "улар панисламизм һәм пантюркизм пландары менән мәшғүл" тигән һүҙ еткереп, ошаҡсылыҡ иттеләр. Ғәлимйән Ибраһим менән иптәштәре, "Социал-революционер" фирҡәһе ағзалары булараҡ, казактар менән мөхтәриәт мәсьәләһендә хеҙмәттәшлек итеүебеҙҙе реакцион хәрәкәт итеп күрһәтергә тырышты. Мин Ғәлимйәнгә генерал Дутовтың беҙҙең менән тик ваҡытлыса мөнәсәбәт ҡороуы, үҙ аллы Башҡортостан менән Ҡаҙағстан берләшеп, хәрби мәсьәләлә ҡеүәт ҡаҙанғанын аңлаған көндән үк, беҙгә ҡаршы сығасағын, маҡсатыбыҙға ирешкәнгә тиклем автономия һәм федерация принцибына тарафдар булған һәр кем һәм һәр даирә менән хеҙмәттәшлек итәсәгебеҙҙе һөйләгәйнем. Үкенескә ҡаршы, ул был һүҙҙәремде шул көндә үк генерал Дутовҡа еткерә алған булып сыҡты. Ҡыҫҡаһы, Бәләкәй Башҡортостан "Шәрҡи Рәсәй мөхтәр мосолман илдәре иттифағы" фекеренә ҡушылырға йәиһә ҡазандар менән бергә татар мәҙәниәте фекеренә ҡушылырға тейешле тигән мәсьәлә буйынса Ҡоролтайҙың беренсе көндәрендә күп бәхәс тыуҙы. Ләкин Ғәлимйән Ибраһим, ниһәйәт, үҙ һүҙҙәре менән әйткәндә, "күпселектең ҡая кеүек ҡаты ихтыярына бәрелеүен" күреп, пропагандаһынан ваз кисте һәм Өфөгә кире китте.

Ошоға тиклем мәркәз шурала рәйеслек иткән Шәриф Манатов Ялан кантоны башҡорто ине. Ваҡытында Петербургта Психоневрология институтында уҡыған,

һуңынан Истамбулға, унан Швейцарияға барған. Унда Ленин менән күрешкән һәм шуға күрә коммунистарға бик көслө яҡынлығы бар. Ҡоролтайҙа ул Ғәбделхәй Ҡорбанғәленең реакцион даирәһе менән беҙгә ҡаршы берләште. Ҡоролтайҙа 10-15 кешенән торған әҙселек тәшкил иткән был төркөм Шәриф Манат улына демонстратив рәүештә бер адрес һәм бер тун бүләк итте. Шәриф Манат улар менән берлектә Ғәлимйән Ибраһимдың "Татар-башҡорт штаты" фекеренә ыңғай мөнәсәбәт күрһәтте. Йөҙҙән артыҡ кешенән торған күпселек иһә минең тарафымды тотоп, бер көмөш сәй таҡымы, өҫтөнә көмөш ялатылып яҙыуҙар яҙылған портфель һәм ташҡа баҫылған адрес тәҡдим итте. Ғүмерем эсендә милләтемдең ҡулға алып тоторлоҡ иң гүзәл, иң самими һәм йөндән килгән бер бүләге ошо булды.

Ҡоролтай ҡарарҙарындағы күпселек ҡабул итергә теләгән проекттарға һәр ваҡыт ҡаршы сыҡҡан Шәриф Манат улының ошонан һуң милләт алдында абруйы төштө. Хөкүмәт һәм дәүләт рәйесе булыуҙы маҡсат итеп ҡуйып, шуға ирешеү өсөн шөбһәле саралар ҡулланыуы уны ошо хәлгә төшөрҙө. Беҙ иһә (йәғни күпселек) йөмһүриәт иғлан итмәҫкә, йөмһүриәт рәйесе лә булдырмаҫҡа, "Башҡортостан өлкә мөхтәриәте" иғлан итеп һәм үҙ аллы өлкәлә "бер хөкүмәт рәйесе" ҡулы менән идара итергә тигән ҡарар ҡабул иттек. Был ҡарарға яраҡлы, Башҡортостанда милләткә яҡшы хеҙмәте менән абруй ҡаҙанған, инсафлы, халыҡтың һөйкөмлө адвокаты Бикбай улы Юныс хөкүмәт рәйесе, Зәки Вәлиди уның ярҙамсыһы, Сәғит Мираҫ дин, Илдархан Мутин финанс, Абдулла Әҙһәмов мәғариф, Аитбай улы ауыл хужалығы эштәре мөдирҙәре, мин шулай уҡ эске һәм хәрби эштәр мөдире сифатында һайландыҡ. Шулай уҡ Башҡортостан хәрби эштәре өсөн "Башҡорт ғәскәре идараһы" (Башкирское войсковое управление) ойошторорға ла ҡарар ителде. Уның рәйесе итеп тә Зәки Вәлиди һайланды. Ҡоролтайҙа ҡатнашҡан офицерҙарҙан Ҡарамыш улы Әмир, Мағаз улы Абдулла һәм Иҙелбай улы Абдулла алтын мәғдән сығарыу рудниктары булған Баймаҡ улусында беренсе башҡорт полкын ойоштора башлау эшенә тәғәйенләнде. Өҫтәүенә, Ҡоролтай 22 ағзанан торған бер "Кесе ҡоролтай" (урыҫса предпарламент) һайланы һәм Башҡортостандың идара бүлеге сифатында кантондарға бүлеү планын булдырҙы. Шул уҡ көндәрҙә дауам иткән ҡаҙаҡ-ҡырғыҙ Ҡоролтайы ла шул уҡ рухта 25 декабрҙә ҡарарҙар ҡабул итеп, мөхтәриәт иғлан итте. Кокандта тупланған өсөнсө Төркөстан конгресы ла 10 декабрҙә (иҫке хисап менән 28 ноябрҙә) Төркөстан мөхтәриәтен иғлан итте һәм сит ил эштәре министры итеп тәғәйенләнгән Мостафа Чоҡай улы Ырымбурға килеп, ҡаҙаҡ һәм башҡорт Ҡоролтайында ҡатнашты. Украина менән "Көньяҡ-шәреҡ иттифағы" барлыҡҡа килтерергә теләп, Дон казактары менән дә аңлашыуға өлгәшеү мәсьәләһе хаҡында кәңәшләштек. Украина менән аңлашырға, ләкин Дон казактарына яҡынлашмаҫҡа тигән һығымтаға килдек.

Ҡоролтай өсөн әҙерләнгән өс картанан "Шәрҡи Рәсәй мөхтәр мосолман өлкәләренең иттифағы" картаһы асыл маҡсатыбыҙҙы асып бирә ине. Уны ҡаҙаҡ Ҡоролтайы ағзаларына ла бирҙек. Башҡортостан айырым йөмһүриәт итеп түгел, "тик мөхтәр Башҡортостан" сифатында иғлан ителде. (Йәғни Шәрҡи Рәсәй мосолман илдәре иттифағына ҡараған һәм федератив Рәсәй эсендәге бер үҙ аллы өлкә). Үҙенең айырым бер байрағы юҡ һәм айырым байраҡ фекере, нигеҙҙә, алға һөрөлмәне. Ҡазандарҙың татар-башҡорт, йәки Иҙел-Урал, идеяһындағы байраҡ ижад итеү фекеренә яуап итеп Фәтхелҡадир Сөләймән "Башҡортостандың байрағы – Төркөстан байрағы, башҡорт халҡын был байраҡтан айырып, йөҙөн Мәскәүгә бороорлоҡ башҡа байраҡ табылмаҫ" тине. Башҡортостан һәм Ҡаҙағстан Рәсәй Федерацияһы ағзалары сифатында уның составында булырға тейеш ине һәм шунлыҡтан айырым финанс системаһы, үҙ аҡсаһын булдырыу хаҡында һүҙ барманы, ғәскәренең дә урыҫ дөйөм командалығына буйһонасағы билдәләнде һәм был мәсьәлә буйынса башҡа төрлө фекер булманы. Унда булған офицерҙарҙан Мағаҙ улы Абдулла һәм Абдулла Иҙелбай Баймаҡ улусына барып беренсе башҡорт полкын ойошторорға вазифаландырылды. Ҡаҙаҡтар ҙа Ҡоролтайҙарында шул уҡ мәғәнәләге документтар ҡабул итеп, мөхтәриәт иғлан иттеләр һәм Семипалат ҡалаһын үҙәк итеп, унда Алаш Урҙа хөкүмәте ойошторорға ҡарарлаштырҙылар.

Ҡоролтай тамамланғандан һуң ғәскәр ҡороу һәм кантон идараларын ойоштороу эшенә бөтә көстө һалып эшләү башланды. 1918 йылдың 5 ғинуарында поляк офицерҙарының Бритц исемле береһен ярҙамсы итеп тәғәйенләп, Абдулла Мағазов Баймаҡҡа ебәрелде. Ырымбурҙағы казачийҙар хөкүмәте беҙгә бер аҙ ҡорал бирҙе. Шулай уҡ төрлө мәхәлләләрҙә элекке хөкүмәттән ҡалған ҡоралдарҙы ла ҡулға төшөрҙөк. Шуның менән беренсе полкты ойоштороу башланып китте. Аҡса юҡ ине, уның да сараһы табылды. Орск өйәҙендә булған батша араҡы заводтарына (Самакин заводы) ҡул һуҙҙыҡ. Ундағы араҡыны урыҫ ауылдарында һатып, 7-10 көн эсендә 400000 һум урыҫ аҡсаһы йыйҙыҡ. Ләкин Һамар һәм Быҙаулыҡ ҡалаларын буйһондорған ҡыҙыл ғәскәр ярайһы яҡынлашҡайны инде. Ниһәйәт, 1918 йылдың ғинуарында улар Ырымбур ҡалаһын баҫып алды.

§49 Башҡорт хөкүмәте һәм Советтар

Башҡорт хөкүмәте тарафынан Шәриф Манатов Ҡазандағы мосолман хәрби шураһы менән Башҡортостан һәм башҡорт ғәскәре ойоштороу мәсьәләләре буйынса һөйләшеү өсөн Ҡазанға ебәрелде. Кәрәк булһа, Мәскәүгә лә барып, йөмһүриәтебеҙҙең Совет хөкүмәте тарафынан танылыуы хосусында эш алып барыу бурысын йөкмәтте. Ырымбурҙа большевиктарға ҡаршы тороуҙың мәғәнәһе юҡлығын аңлап, был ҡаланы һаҡлау менән мәшғүл булған урыҫ казактарына һис бер ниндәй ярҙам күрһәтмәнек. Ырымбурҙан тороп, үҙ илебеҙ менән идара итеү мөмкин булмаған хәлдә Баймаҡҡа сигенеп буласаҡ тигән фекерҙә инек. Ҡалалағы большевиктар менән ошолай килешкәйнек. Алаш Урҙа ағзалары Алихан Бүкәйхан, Әхмәт Байторсон, Мирҡәип Дулат далаға ҡасты. Беҙ иһә ҡалала ҡалдыҡ. Большевиктар етәксеһе Цвиллингҡа теләктәремде аңлаттым. Был зат дөйөм бер йыйылыш ойоштorҙо. Унда татарҙар Борһан Шәрәф менән Кәлимулла Хәсәнов үҙҙәрен большевик, беҙҙе иһә Совет дошманы күрһәтеп, йәмһеҙ яла яғыуҙар менән шөғөлләнде. Баймаҡта ғәскәр ҡороуыбыҙҙы Рәсәйгә ҡаршы йүнәлтелгән бер хәрәкәт кеүек күрһәтергә тырыштылар һәм уны таратыуҙа большевиктарға ярҙам итергә вәғәҙә бирҙеләр.

Иртәгеһенә мине Цвиллинг саҡырып алды. Баймаҡтағы ғәскәр янына барырға, Советтарға итәғәт итергә кәрәк тигән мәғәнәлә бойороҡ бирергә һәм Мәскәү менән бәйләнеш урынлаштырырға тәҡдим итте. Мәсьәләне хөкүмәт ағзаларына аңлатырға тура килде, шунан һуң Аллабирҙе Йәғәфәров менән бергә Баймаҡҡа юл тоттоҡ. Ҡаҙырша ауылында бөтә офицерҙарыбыҙ менән бергә йыйылдыҡ. Мәхәлләләрҙәге офицерҙарыбыҙ азатлыҡ өсөн көрәш юлында беҙҙең менән бергә булырға тигән ҡарарға килгәйне. Полк һалдаттары менән дә күрештек һәм улар исеменән Мәскәүгә Совет хөкүмәте менән хеҙмәттәшлек итергә әҙер булыуыбыҙ хаҡында телеграмма ебәрҙек. Ләкин беҙ китер-китмәҫтән татарҙар беҙгә ҡаршы байтаҡ эш башҡарған. Аллабирҙе менән Ырымбурға кире килдек. Шул арала 4 февралдә (1918) үҙҙәрен тамам большевик ғәскәре итеп яҙҙырған татар хәрби шураһы Ырымбур Советтарынан беҙҙе, йәғни Башҡортостан хөкүмәте ағзаларын, төрмәгә ултыртырға рөхсәт алғандар һәм төн уртаһында, йәшәгән йортома баҫып инеп, үҙ-ара боҙоҡ урыҫ telендә һөйләшкән һалдаттар, йәғни татар һалдаттары, мине ҡулға алып, төрмәгә килтерҙеләр. Әммә мине төрмәгә бикләү буйынса төрмә хеҙмәткәрҙәренә һис бер әмер бирелмәгән булып сыҡты. Был иһә эштең тик татарҙар ҡулы менән башҡарылыуын күрһәтте, ләкин улар был әмерҙе лә ҡулдарына төшөрә алдылар һәм беҙҙе төрмәгә бикләнеләр. Минең менән бергә Абдулла Әҙһәм, Сәғит Мираҫ, Аллабирҙе Йәғәфәр, Илдархан Мутин ҡулға алынды. Барыбыҙҙы ла йортобоҙҙан йоҡонан уятып алып килгәйнеләр. Төрмәлә "татарҙарҙың ҡунағы" булыуыбыҙҙы тиҙ аңланыҡ. 5 февралдә "Известия Оренбургского Совета" гәзитендә ошондайыраҡ хәбәр нәшер ителде. "Башҡортостан хөкүмәте ағзаларын инҡилап дошмандары тип ғәйепләгән татар хәрби комитетының Башҡорт хөкүмәтен ҡулға алыу өсөн рөхсәт биреүҙе һораған мөрәжәғәте ҡаралды һәм уларҙың ниәтенә ҡаршы килмәҫкә тигән

ҡарар ҡабул ителде". Шул уҡ Ырымбур мосолман комитетының Орск ҡалаһындағы бүлеге был ҡалалағы урыҫ-совет гарнизоны командиры Барановҡа Баймаҡтағы башҡорт полкын Совет дошманы күрһәтеп донос яһау һөҙөмтәһендә, Баранов бер урыҫ хәрби төркөмө һәм татарҙар менән берлектә Баймаҡ алтын приискыларына йүнәлгән. Һөйләшеүҙәр өсөн килдем, тип белдергән Баранов 20 февралдә фабрикала, полк командирҙары Абдулла Ғимран улы Мағазов, Абдулла Иҙелбай һәм башҡаларҙы мәжлескә саҡыра һәм ҡулға алып һис һорау ҙа алып тормай аттырып үлтертә. Был ваҡытта полк тик ойошторола башлағайны. Командиры Әмир Ҡарамыш та унда ине. Баранов Хәбибулла Ғәбит улы менән бер нисә кешене тере ҡалдыра, үҙе башҡорт ғәскәрҙәре менән бәрелештең ҡотолғоһоҙ икәнлеген һиҙеп, кире ҡаса. Был ваҡиға башҡорттар араһында Советтарға ҡаршы ҡоралға тотоноуҙан башҡа сара юҡ, тигән фекерҙең таралыуына сәбәп булды. Был көрәште дауам итеү өсөн бөтәһенән элек беҙҙе төрмәнән ҡотҡарырға кәрәк, тигән фекергә килгәндәр. Халыҡ тарафынан Мәскәүгә һәм Советтарҙың Ырымбур губерна комитетына делегаттар ебәреп, беҙҙе азат итеүҙәрен талап иттеләр. Был беҙҙең башҡорттар араһындағы йоғонтобоҙ һәм абруйыбыҙ ҙур икәнлекте аңлата ине һәм, һөҙөмтәлә, татарҙарҙың "мосафиры" булараҡ төрмәгә эләгеп, урыҫтарҙың үҙ "мосафирҙарына" әүерелдек. Быны күреп, Ырымбур мосолман (татар) хәрби шураһы ағзаларының береһе, элек миндә шәкерт булған Мөхәммәт Таһиров, төрмәгә миңә бәғзе ашамлыҡтар килтереп, яңылышыуҙарын аңлауҙарын, ләкин эштең ҙурға китеүен һөйләп иланы. Әмир Ҡарамыш Темәс яҡтарында ауылдан ауылға йөрөп башҡорт күренеклеләре менән осрашып, Советтарға ҡаршы хәрәкәт ойоштороу өсөн әҙерлек алып барҙы. Ырымбурҙа большевиктар тарафынан ҡуйылған губернатор Цвиллинг был хаҡта хәбәр алғас төрмәгә килеп, башҡорт офицерҙарының эштәре беҙҙең төрмәләге хәлебеҙҙе насарлаштырыуы, ҡоралға тотонған башҡорттарҙы был фекерҙән ваз кистереп, ҡоралдарын Совет хөкүмәтенә тапшырырға тип әмер бирергә тейешлегемде, әгәр ҙә бер аҙна эсендә был эш башҡарылмаһа, беҙҙе атасаҡтарын һөйләне һәм мине башҡа арҡадаштарымдан айырып, айырым камераға бикләтте.

Ул ваҡытта мин Төньяҡ Кавказ нуғайҙары хаҡында Петербург һәм Мәскәү архивтарында туплаған материалдарымды тәртипкә килтереп, аҡҡа күсереү менән мәшғүл инем, йәғни китаптарымды төрмәгә килтерергә һәм яҙышырға рөхсәт алғайным. Цвиллинг ҡулымдағы бөтә китап, яҙыу, ҡағыҙ, ҡәләмдәремде алдырҙы. Шул арала беҙҙе бер-ике тапҡыр допросҡа ла саҡырҙылар. Һорау алғанда төп ғәйепләү материалы итеп Ырымбурҙа нәшер ителгән "Казачья правда" гәзитендәге мәҡәләгә таяндылар. Фәтих Кәрими менән туғаны Камил Кәрими, Ибраһим Бикчәнтәй тарафынан яҙылып нәшер ителгән "Башҡорт хәрәкәте" исемле мәҡәлә ине ул. Мәҡәләлә башҡорттар ер хужаһы һәм монархист феодалдар сифатында тасуирланған, хатта башҡорттарҙың борон Рәсәйгә ҡаршы баш күтәреүҙәре лә ер биләүселәр мәнфәғәтенә ярашлы бер хәрәкәт тип күрһәтелгән. Мин иһә уларҙың идеологы сифатында тасуирланам.

Беҙ ҡулға алыныр-алынмаҫтан Каруанһарайҙа Башҡортостан милли хөкүмәте биләгән бүлмәләрҙә бер ҡыҙыл Башҡорт хөкүмәте урынлашҡан, рәйесе итеп Өфө яғы татары Баһауетдин Нуриманов менән Ырымбур яғы татары Дәүләт Шаһиев (һүҙ Бәхтигәрәй Шәфиев хаҡында бара (Ә.Ю.).) ҡуйылған. Улар беҙҙең хөкүмәттең аҡсаһын да алған, матбуғат органыбыҙ булған "Башҡорт" гәзитен дә Совет рухында сығара башлағандар. Ләкин халыҡ ҡаршыһында хаин иҫәпләнгән был әҙәмдәрҙең төп эше Ырымбур губернаторы Цвиллингҡа ошаҡ ташыуҙан ғибәрәт ине.

## §50 Тауҙарҙа һуғышҡа әҙерлек

Шул арала 3 апрелдә бер ваҡиға булды. Беҙҙе язалауға тиклем бирелгән бер аҙна ваҡыт тамамланыуға бер көн ҡалғас, Ырымбур казактары менән бер төркөм

башҡорттар ҡаланың төрмә урынлашҡан урынын төн уртаһында килеп баҫтылар. Төрмәлә ултырған урыҫ, казак сәйәсмәндәре менән бергә беҙ ҙә ҡотолдоҡ. Мин, иреккә сыҡҡас, дөйөм камераларҙа ултырған арҡадаштарымдың һәм беҙҙе ҡотҡарырға килгән башҡорттарҙың ҡайһы тарафта булыуҙарын төрмә тирәһендәге казактарҙан һораштым, иптәштәрем ашығып киткән бер урамды күрһәттеләр. Мин шул йүнәлештә атланым, һәр яҡта атыш тауышы, көсөргәнешле бәрелеш бара, большевиктар төрмә бинаһын киренән ҡулға төшөрөргә тырыша. Яҙ ваҡыты, ҡар ирей. Һәр тарафта шәре, ә минең аяҡтарымда йөндән баҫып эшләнгән, быйма тип аталған йөн итек, өҫтөмдә тун. Төрмәнән ҡасҡан кеше булыуым күренеп тора, ҡыҙыл һалдаттарҙың береһе мине ҡулға алды һәм кеше бик йөрөмәгән ергә алып китте. Был һалдат ҡасандыр минең шәкертем булыуын әйткәс, ысынлап та иҫкә төшөрҙөм. Ҡазан тарихсыһы һәм телсеһе Ямалетдин Вәлидиҙең ҡәйнеше икән. Был егет мине тура ғалим йәшәгән йортҡа алып килде, Яйыҡ күпере янында урынлашҡайны. Мин Сәғит Мираҫ, Абдулла Әҙһәмов менән бәйләнешкә инеп, тауҙарға ҡасырға уйлауымды белдерҙем. Бер ат яллап, сана ектереп шул уҡ көндө мәйет тулы урамдарҙы үтеп Ҡарғалыға, унан Туҡсоран аша Абдулла станцияһына, ә артабан Өфөгә киттем. Маҡсатым – юл яҙҙырыу. Өфөлә йыйылған арҡадаштар менән бәғзе кәңәшмәләр ҙә үткәрергә ниәтләнем.

Өфөлә Баймаҡта ойоштора башлаған полктың командиры Әмир Ҡарамыштың, Сәлих Аҙнағолдоң һәм башҡа бер нисә заттың да бында килеүен белдем. Һаҡ булырға кәрәк ине. Бында тауҙарға сығырғамы, Мәскәүгә китергәме тигән мәсьәләне ҡараныҡ, сөнки мин Мәскәү тарафынан ғәфү ителгәйнем. Хатта был "ғәфү итеү" хаҡында Ырымбур губернаһы большевиктарына иғлан ителгән имеш, ләкин улар быны иғтибарға алырға теләмәгән. Һәм бына хәҙер мине Мәскәүгә саҡырғандар. Был иһә Совет хөкүмәтенең "Татар-Башҡорт йөмһүриәте" ҡороу пландары менән бәйле икән. Был мәсьәләне айырыуса ентекле тикшерергә кәрәк ине. Совет хөкүмәтенең Сталин тарафынан идара ителгән "Милләттәр эше комссарлығы" янында бер "Үҙәк мосолман комиссарлығы" булдырылған, уның башына татарҙарҙың билдәле коммунисы Мулланур Вахитовты ҡуйғандар. 1918 йылдың башында Башҡортостандан Ҡазанға киткән Шәриф Манатов Ҡазанда Совет режимы урынлашып, Мосолман шураһы тарҡатылғандан һуң Мәскәүгә йүнәлгән һәм унда Мулланур Вахитов менән берләшкән. Татар яҙыусыһы Ғәлимйән Ибраһимов Өфөләге милли идара мәжлесе тарафынан декабрь аҙағында III башҡорт ҡоролтайына килеп, Татар-Башҡорт йөмһүриәте ҡорорға тәҡдим яһағайны. Ләкин беҙ ҡазандар менән берләшеп дәүләт ҡороу урынына Бәләкәй Башҡортостан ойоштороп, Бөйөк Төркөстанға ҡушылыу фекеренә тоғро ҡалдыҡ. Ғәлимйән үҙ фекерен Мәскәүгә барып, Советтар ярҙамында ҡабул иттереү маҡсатын ҡуйғайны. Мулланур Вахитов та был фекерҙе хуплап Сталинды ризалаштырған, май айында Татар-Башҡорт йөмһүриәте пландары хаҡында кәңәшмә йыйырға ҡарар иткәндәр. 10-17 майҙа был билдәле съезд булып үтте, унда Сталин үҙе лә бер нотоҡ һөйләне. Уның фекеренсә, "Татар-Башҡорт", "Ҡырғыҙ", "Төркөстан" йөмһүрәттәре сифатында өс үҙ аллы өлкә буласаҡ. Ғазим Ҡасимов етәкселегендә "Татар-Башҡорт" йөмһүриәте" исемле 60 битлек бер рисалә 1918 йылда Мәскәүҙә нәшер ителде. Уның башында Ғәлимйән Ибраһимдың татарҙар һәм башҡорттар араһында мөхтәриәт хәрәкәте һәм уға ҡаршы булған унитаристар хаҡында гүзәл бер мәҡәлә лә бар. Май айында буласаҡ был съезға мине лә саҡырғайнылар. Барырға булһам, Өфөлә үҙемде рәсми танытып, поезға ултырып, Мәскәүгә юлланырға тейешмен. Ләкин беҙ Татар-Башҡорт йөмһүриәте фекеренең бер тоҙаҡ булыуын, етди эш түгеллеген аңланыҡ. Әмир Ҡарамыш менән бергә тауҙарға сығып хәрби төркөмдәр ойоштора башларға ҡарар иттек. Апрель уртаһы. Һәр тарафта ҡар ирей, бигерәк тә Урал тауҙарында ҡар йомшарған, ташҡын йылғалар аша үтеү бик мөшкөл эш. Икебеҙ ауыл башҡорто кейемдәрен кейеп, Архангельск һәм Аҫҡын (урыҫса Шамов исемле) заводтар юлынан, Ағиҙел үтеп, Тамъян-Ҡатай кантонының Әхмәт ауылында ойоштороу эшен башланыҡ.

Юлда Асҡын фабрикаһында ҡыҙылдар ҡулына эләктек, уларҙа хеҙмәт иткән һәм беҙҙе таныған ауыл кешеләре беҙгә ҡасырға ярҙам итте, оҙон был юлдың мажараларын ентекле һөйләүҙән ваз кисәм. Был тотҡондан мөғжизә менән осраҡлы ҡотолоп, кисен Ағиҙел ярына еттек, уны боҙ аша сығып, Аҙнағол ауылында туҡталдыҡ, беҙҙе эҙәрләп килгән ҡыҙыл ғәскәри төркөм дә йылғаға етеп өлгөргән, ләкин шул арала боҙ күтәрелгән. Шулай итеп, был юлы ла беҙ бәләнән ҡотолдоҡ.

Тамъян-Ҡатай кантонының рәйесе Талха Ағайдар улы, милиция (полиция) рәйесе Муса Мортазин ине. Уларҙың ғәйрәте менән бындағы милиция ойошмаһын ҙурайтыу өҫтөндә шөғөлләндек һәм Әхмәт ауылының мәсетен үҙәк итеп, унда шапирограф машинаһы урынлаштырҙыҡ, саҡырыуҙарыбыҙҙы, айырыуса Себерҙә урынлашҡан союздаштарҙың вәкәләттәренә, шул иҫәптән япондарға яҙған мөрәжәғәттәребеҙҙе ошонда әҙерләнек. Японлар янына Талха үҙе китмәксе булды, кәрәк булһа, Японияға тиклем барып етәсәк. Шул уҡ ваҡытта Башҡортостан хөкүмәте ағзалары һәм башҡа абруйлы һәм мәртәбәле заттар Ҡустанайҙа бер таныш заттың (мөхәррир Абдулла Ғисмәтиҙең атаһының) өйөндә ҡаҙаҡтар менән осрашып һөйләшергә ҡарарлаштырҙыҡ.

Бер төндә большевиктар һөжүм яһанылар, ләкин халыҡ араһынан быны берәү алдан белеп, хәбәр ебәргәнлектән, беҙ саралар күреп өлгөргәйнек. Әмир Ҡарамышты бында милиция ойоштороу эше менән шөғөлләнергә ҡалдырып, үҙем Талха менән бергә Ахун ауылынан алтын приискылар хужаһы Ғәҙелша Дәүләтша улына киттек. Был зат Башҡортостандың эшлекле, бик ҡөҙрәтле инсандарының береһе ине. Приискылар менән шөғөлләнеүенең маҡсаты халыҡты урыҫ заводсылары әсирлегенән ҡотҡарыу, уға ярҙам итеү ниәтенән булды.

Мин Силәбе аша Ялан кантонына Муса Кәлим менән Ғәлимйән Таған янына киттем һәм Ғәлимйән менән Мусаның өйөндә күрештек. Муса Кәлим дә был тирәнең иң мәртәбәле, менәүүәр һәм бай бер заты булды, Ҡоролтайҙарҙа ҡатнашты. Ғәлимйән иһә йөҙбашы (поручик) дәрәжәһенә еткән бер офицер, кантон рәйесе ине. Һәр ерҙәге кәңәшмәләрҙә "Рәсәйҙә Советтарға ҡаршы күтәрелеш башлана ҡалһа, уға әҙер торорға һәм кисекмәҫтән ҡушылырға кәрәк" тип һүҙ ҡуйыштыҡ. Крәҫтиәндәрҙең һәм казактарҙың күтәрелешен һәр ерҙә көтөп торған мәл ине.

## §51 Чехословактар күтәрелеше

Мин Троицкиға килдем. Бында Тамъян-Ҡатай башҡорто Мөхәммәт Хәлфәлә, һуңынан бер дәрүиштең өйөндә мосафир булдым. Троицкиҙа беҙгә Муллайән Халиҡов берләшеү нөктәһе булы, ул үҙе башҡорт хәрәкәтенә ҡушылған, Ҡоролтайҙарҙа ҡатнашҡан бер менәүүәр ине. Май урталарында Ҡустанайға барып килдем, Абдулла Ғисмәтиҙең атаһында мосафир булдым. Шунан ҡайтып барышлай 22 майҙа Силәбелә чехословактар ҡыҙылдарға ҡаршы баш күтәргән тигән хәбәр ишетелде. Талха ла Троицкиға килгәйне, Ҡустанай йыйылышынан ваз кистек. Шундуҡ Ялан кантоны мәркәзенә, Badyas ауылындағы Муса Кәлим өйөнә килдек, Ғәлимйәнде лә янобыҙға саҡырҙыҡ.

Чехословактар хәрәкәтенә ҡушылырға ризалығы булһа, ҡушылырға, үҙенә лә беҙҙең янға килергә ҡуштыҡ. Талханы Мәскәүгә япондар менән күрешеү өсөн оҙаттыҡ. Башҡорт хөкүмәте исеменән күтәрелешкә ҡушылыуыбыҙҙы белдереп ышанысль бер кешене Силәбегә чехословактарға хат менән ебәрҙем. Ике көндән, 1 июндә булһа кәрәк, үҙем дә Силәбегә барып "Чехословак милли шураһы" рәйесе Богдан Павло менән күрештем. Йәшерен йөрөргә мәжбүр булғанлыҡтан, ауыл кешеһе булып кейенгәйнем, ул быға иғтибар итмәне, минең менән Башҡортостан хөкүмәте рәйесе сифатында һөйләште. Ул башҡорттар араһында мобилизация үткәрһәк, аҡса һәм ҡорал бирәсәктәрен әйтте. Һуңынан Чехословакия йөмһүриәтендә эске эштәр

министры һәм бер нисә дәүләттә илсе булған был зат миндә бик яҡшы тәьҫир ҡалдырҙы. Бөтә эштәр хаҡында ентекле һөйләштек. Штабтары станция вагондарында урынлашҡайны, беҙҙең Башҡортостандың автономиялы бер өлкә булыуын тәбиғи ҡабул итте һәм урыҫ ғәскәрҙәрен ойоштороуҙа мәшғүл генерал Ханжин менән һөйләшәсәген әйтте, бөтә эштәрҙе кисекмәҫтән башларға тәҡдим итте.

§52 Беренсе башҡорт полктарының ойошторолоуы

Генерал Ханжин менән мин дә осраштым. Был зат бында үҙенә корпус командиры исемен таҡҡайны, ләкин ҡулында һис бер ғәскәре юҡ, ҡоралы, башҡа кәрәк-яраҡтары бар. Шуларҙың бер өлөшөн чехословактарға, бер өлөшөн беҙгә бирергә булды. Арғаяш һәм Ялан кантондарынан килгән арҡадаштарым Нуриағзам Таһиров, Таҡи Ғисмәти, Талха Ағайдар һәм Ғәлимйән Таған менән бергә, бер яҡтан, Башҡортостан хөкүмәте органдарын ойоштороу, икенсе яҡтан, ғәскәр ҡороу эштәрен башланыҡ һәм 10 июндә Силәбе өйәҙе башҡорттарының биш йыллыҡ призывын хеҙмәткә саҡырыуҙы иғлан иттек. Башҡортостан хөкүмәте исеменән ойошторолған мобилизацияның уңышына ҡайһы бер арҡадаштарым ышанманы, сөнки башҡорт милли шураһы һәм Башҡортостан хөкүмәте Ырымбурҙа булғанлыҡтан, был яҡтарҙа быны белеп етмәйҙәр, тип иҫәпләйҙәр ине. Ләкин был иғлан хөкүмәтебеҙҙең халыҡ араһында сикһеҙ ихтирам һәм абруй ҡаҙанғанын күрһәтте. Бөтә улустарҙың йәше еткән призывниктары үҙ ирке менән тупланған ғәскәр һымаҡ килеп еттеләр. Йыйылғандарҙың күбеһен Силәбелә, Арғаяшта, Мөхәммәтҡолда туплап, Арғаяшта полктар төҙөй башланыҡ. Хәрби эштәрҙә миңә Польша мосолмандарынан Исмәғил Муһлия ярҙамсы булды. Беренсе сиратта "Башҡорт ғәскәре идараһы" (Башкирское войсковое управление) ҡорҙоҡ. Беренсе башҡорт бригадаһын туплай башланыҡ. Беренсе йәйәүле төмәндең беренсе һәм икенсе полктарын был тарафта, өсөнсө полкты Златоуст өйәҙендә, беренсе атлы полкты Ағиҙелдә Тамъян-Ҡатай кантонында ойоштора башларға булдыҡ һәм был ҡарар тормошҡа аша башланы. Беренсе йәйәүле полктың беренсе батальоны күбеһенсә мәхәлләләрҙә табылған мылтыҡтар менән ҡоралландырылып, Арғаяшта тупланды һәм шундуҡ чехтар менән берлектә һөжүмгә күсеп, большевиктарҙы Көйәш тирәһенән ҡыуып сығарҙы. Азат ителгән Бүре, Ҡоншаҡ, Ҡарабулаҡ улустарында ла ғәскәр төҙөлдө. Ул яҡҡа мин үҙем киттем. Унда икенсе батальон барлыҡҡа килде, ҡасҡан большевиктарҙан байтаҡ ҡорал һәм башҡа кәрәк-яраҡтар ҡалды, һәр ике батальондың ҡоралы ла, кейеме лә өр-яңы ине.

Был тарафта башҡа улустарҙан килеп йыйыла торған урын Силәбе булды. Беренсе йәйәүле полктың өсөнсө батальонын ошонда ҡорҙоҡ һәм уға командир итеп Күгәрсен районы татары штабс-капитан Харис Тоймаҡаевты билдәләнек. Бер аҙҙан был затты бөтә беренсе полктың командиры итеп тәғәйенләнек. Был полк ойошторолғандан һуң ҡалған һалдаттарҙан икенсе йәйәүле полк ойошторолдо һәм уға командир итеп прапорщик Абидов тәғәйенләнде, сөнки юғары чиндағы офицерҙарыбыҙ әлегә юҡ ине. Силәбе губернаһында хөкүмәтебеҙҙең һалым йыйыусылары һалым да йыйҙы, быны ла халҡыбыҙ ҙур ихласлыҡ менән ҡабул итте.

Тамъян-Ҡатай кантонында, шулай уҡ Верхнеуральск һәм Троицкий өйәҙҙәренең Башҡортостанға инмәгән ауыл һәм улустарында йәшәгән башҡорттарын да хеҙмәткә саҡырҙыҡ һәм улар беҙҙең полктарға килеп ҡушылды. Ләкин был тарафта ҡорал һәм башҡа кәрәк-яраҡ юҡ ине. Был йәһәттән уларҙы мәхәллә милицияһы төркөмдәренә бүлдек, ҡорал һәм башҡа кәрәк-яраҡтар ҡулға төшкәс тә, хәрби частарға әүерелдерергә ҡарар иттек. Тап ошо ваҡытта бер осраҡлы, әммә уңышлы хәл арҡаһында Тамъян-Ҡатай милицияһы етәксеһе Әмир Ҡарамыш менән Муса Мортазин ҡулына бик күп ҡорал эләкте. Әле булһа Советтар ҡулында булған Мейәс ҡасабаһынан большевиктар Верхнеуральскиҙағы ҡыҙылдарға, билдәле Кашириндар идараһында булған большевик казактарға, бик күп ҡорал ебәргәндәр. Был хаҡта белеп ҡалған Әмир Ҡарамыш менән Мортазин ҡыҙылдарҙы баҫып ҡоралдарын Иҙелбашына

(Белорецк) килтереп, унда алда бирелгән бойороҡ буйынса, беренсе башҡорт атлы полкын ойошторҙо. Ләкин Әмир Ҡарамыш бында ауырып вафат булды. Гүзәл ҡурайсы (нейсе) булған был Әмир Ҡарамыш минең тыуған ауылыма күрше Маҡар ҡәрйәһенән, "Бөгөнгө Төркөстан"да (293 бит) телгә алынған Йософ майор Ҡарамыш һәм боронғо Ҡарамыш тархандың ейәндәренең береһе ине. Мөкәммәл бер офицер һәм ойоштороусы булды. Уның урынына ярҙамсыһы Муса Мортазин тәғәйенләнде. Муса иһә батша заманында ғәскәрҙә унтер-офицер ине. Тамъян-Ҡатай ырыуынан.

Шул уҡ июнь айында большевиктарҙан таҙартылған Златоуст һәм Өфө өйәҙҙәре башҡорттары ла хеҙмәткә саҡырылып, уларҙан Златоуст ҡалаһында өсөнсө башҡорт йәйәүле полкы ойошторолдо, командиры итеп Ғәлимйән Таған тәғәйенләнде. Златоусҡа мин үҙем дә килеп ойоштороу эштәрендә ярҙам иттем. Аҙаҡ был полк чехтар менән берлектә эш иткән полковник Каппель ғәскәрҙәренә ҡушылып, төрлө ерҙәрҙә большевиктарға ҡаршы һуғышты һәм мәмләкәтенән уларҙы ҡыуып сығарҙы. Ғәлимйән Таған үҙ полкы менән бер ни тиклем ваҡыт Өфөлә хәрби гарнизон вазифаһын да башҡарҙы.

## §53 Семипалатинскиҙа Алаш Урҙа менән кәңәшмәләр

Шул арала Сәйетгәрәй Мағаз менән бергә Омск ҡалаһына барып, Себер хөкүмәтен ҡорған генерал Гришин-Алмазов менән күрешеп, ғәскәр өсөн ҡорал һәм башҡа кәрәк-яраҡтар алыу эше менән шөғөлләндек. Башҡортостан хөкүмәтен Себер хөкүмәте менән рәсми рәүештә таныштырҙыҡ. Сәйетгәрәйҙе бынан Семипалатинскиға, Алаш Урҙа хөкүмәтенә ебәрҙем, Ҡаҙағстан менән эш берлеге пландары билдәләгәйнек, шуларҙы алып килде. Сәйетгәрәй унда Семипалатинск ҡалаһының ҡаҙаҡтар йәшәгән өлөшөн "Алаш Урҙа" тигән айырым бер ҡалаға әүерелдереү менән шөғөлләнгән Алихан Бүкәйхан етәкселегендәге хөкүмәт ағзалары менән бәйләнешкә инеп, беҙ ебәргән һорауҙарға яуаптар менән ҡайтты. Төркөстан хөкүмәте рәйесе Мөхәмәтйән ағай Тынышпаев та был хөкүмәттә эске эштәр министры итеп тәғәйенләнгән икән. Шуның менән бергә Башҡортостан, Ҡаҙағстан һәм Төркөстандың дөйөм яҙмышы хаҡында ла ҡарарҙар ҡабул иткәндәр һәм уларҙың бер өлөшөн яҙма, бер өлөшөн Сәйетгәрәйгә шиғыр рәүешендә ятлатып, миңә еткерҙеләр. Ундағы кәңәшмәләр 18-21 июндә булды, дөйөм сәйәси хәл бик киң тикшерелде. Был иһә Төркөстан, башҡорт һәм ҡаҙаҡ йәмһүриәттәренең уртаҡ фекерле беренсе йыйылышы ине.

Июль башынан август башына ҡәҙәр Силәбелә Башҡортостан хөкүмәтенең бөтә бүлектәрен ойоштороп бөттөк. Уларҙы чехословактар һәм урыҫ ғәскәрҙәре лә урынлашҡан Силәбе кеүек бәләкәй бер ҡалала урынлаштырыу мөмкин түгел ине, беҙ бында ваҡытлыса төпләндек. Төп мәркәзебеҙ булған Ырымбурға ташынасаҡбыҙ. Семипалатинскиҙа алынған ҡарарҙарыбыҙға һәм алдан билдәләнгән ниәттәребеҙгә күрә Ырымбур Башҡортостан менән көнбайыш Ҡаҙағстандың дөйөм идара мәркәзе буласаҡ. Был хосуста урыҫ казактары менән дә аңлаша аласаҡбыҙ. Ырымбур казактары был өйәҙҙе большевиктарҙан ҡотҡарғайны инде. Беҙ ҙә Силәбелә ойошторған идара органдарыбыҙҙың бер өлөшөн Ырымбурға күсерә башланыҡ һәм унда бер "хәрби бүлек" (военный отдел) булдырып, офицерҙарҙан Әхмәт Биишев менән хөкүмәт ағзаһы Сәғит Мираҫты ебәрҙек. Улар Темәстә лә кантон ойошмалары һәм ғәскәр бүлеге астылар, һәр кантон мәркәзендә "кантон ғәскәри төркөмө" (кантонный отряд) ойошторҙолар, ғәскәргә халыҡ үҙ аттары менән килеп яҙыла ине. Һәр кантон рәйесе был хәрби төркөмдөң командиры ла булды.

Башҡортостан хөкүмәтенең Ырымбурға күсеп ерләшеүе, ниһәйәт, башында бөтә хөкүмәт органдары торған учреждениелар менән бергә Ырымбурға күсеп, Каруанһарайға килеп урынлашыу менән осланды. Силәбелә хөкүмәтебеҙ "Башҡорт" исемле гәзит сығара ине, мөхәррире Фәтхелҡадир Сөләймән (Әбделҡадир Инан) булды. Ырымурҙа "Башҡортостан хөкүмәте хәбәрҙәре" исемендә төркисә, "Вестник

Правительства Башкирии" исемле урыҫса көндәлек гәзит сығара башланыҡ. Был гәзиттең төркисәһен Ризаитдин Фәхретдиндең улы Абдрахман Фәхретдин нәшер итте. Хөкүмәт Ырымбурға күскәс тә, Силәбеләгә гәзиттең сығыуын дауам иттерҙек.

Ырымбурҙа Ҡыпсаҡ, Үҫәргән, Бөрйән, Туҡсоран һәм Юрматы кантондары башҡорттары ла ғәскәргә алынып, 4-се йәйәүле (командиры штабс-капитан Низаметдинов) полк ҡоролдо. Призывҡа алынған һалдаттар бер ни тиклем ваҡыт милиция хеҙмәтендә, һуңынан полк хәленә килтерелде. Силәбе янындағы бөтә ғәскәр Ырымбурға күсерелде, тик 3-сө полкты ғына Өфө тирәһенән алып китеү форсаты булманы. Маҡсатыбыҙ – Семипалатинск кәңәшмәләрендә ҡарарлаштырылыуынса – бөтә көстәрҙе Ырымбурҙа Аҡтүбә тарафында туплап, Ташкентты азат итеп, унда бер хөкүмәт ҡороу. Шул арала бер нисә төркөстанлы Ырымбурға килде. Шулар араһында Бохара хөкүмәтенең хәрби министры Абделхәмит Арифов менән Үзбәкстандың бөйөк шағиры Сулпан да килде. Абделхәмит бер ни тиклем ваҡыт хөкүмәттә баш кәтип вазифаһын башҡарҙы, ул урыҫса уҡыған бер егет ине.

### §54 Һамарҙағы кәңәшмәләр

Август айында Һамарҙа Рәсәй Учредителдәр Йыйылышы ағзалары бер хөкүмәт ҡорғайны. Беҙ ҙә, Ырымбур казактары ла уларға ҡарай инек. Был хөкүмәттең күпселеге эсер партияһы ағзаларынан торғанлыҡтан, беҙҙең милли мәсьәләләргә ҡараштары ыңғай булды. Милли мәсьәләләр менән шөғөлләнгән Веденяпин беҙҙең хөкүмәтебеҙгә һәм ойоштороу эшиәребеҙҙә ярҙам күрһәтте һәм Башҡортостан хөкүмәтен рәсми таныуҙары хаҡында иғлан итте. Маҡсатыбыҙ – бөтә башҡорт ғәскәрҙәренән һәм Ырымбур, Турғай тарафтарында ойоштороласаҡ ҡаҙаҡ ғәскәрҙәренән бер мосолман корпусы ҡороу. Бының өсөн командующий сифатында билдәле татар генералы Ишбулатовты саҡырҙыҡ. Һамар хөкүмәте лә быны яҡшы ҡабул итте, беҙгә лә, ҡаҙаҡтарға ла байтаҡ ҡорал һәм башҡа кәрәк-яраҡтар бирҙе. Ҡаҙаҡтарға тейешле ҡорал һәр ваҡыт беҙҙең башҡорт ғәскәренең "Интендант" идараһында булып, беренсе полктарын ойоштороу эше лә, Икенсе башҡорт полкы командиры Абидовҡа йөкмәтелде. Август айының һуңғы яртыһында "Көнсығыш Рәсәй мөхтәр мосолман илдәре берлеге" (федерацияһы) пландары буйынса тағы бер тапҡыр беҙҙә кәңәшләштек. Был планға ҡараған статистик мәғлүмәттәр ҙә тупланғайны. 29 август – 3 сентябрҙә Башҡортостандың хөкүмәт рәйесе Юныс Бикбов, мин, Ҡаҙағстан хөкүмәте етәкселәре Алихан Бүкәйхан, Әхмәт Байторсон, Төркөстан хөкүмәте рәйесе Мөхәмәтйән Тынышпаев Һамарҙа йыйылдыҡ. Беҙ барыбыҙ ҙа Учредителдәр мәжлесе ағзалары булғанлыҡтан, Һамарҙа был Учредителдәр исеменән ойошторолған "Учредителдәр ағзалары комитеты" исемле хөкүмәттең Советы составында инек. Кәңәшмәләр уҙғарылды. Милли хөкүмәттәр барлыҡҡа килгәндән һуң ойошторолған икенсе дөйөм ултырышыбыҙ ине. Буласаҡ федерацияның картаһы урыҫтарҙың 1917 йылдың июнендә кроки (схема) хәлендә эшләнеп нәшер ителгән "40 саҡрымлыҡ" (сороковерстка) картаһы өҫтөнә һыҙып эшләнде. Был картаға күрә 1911 һәм өләшләтә 1917 йыл хисаптары буйынса буласаҡ дәүләттең халҡы 15673680 кеше иҫәпләнеп, 12833129 кеше (82,54%) мосолман, 2276494 кеше (17,46%) бүтән милләттәр тәшкил итәсәк ине. Билдәләнгән сиктәр тышында ҡалған мосолмандарҙы ил эсенә күсендереп, татарҙар араһында мөхтәриәт фекерен киң таратыу ҡарарлаштырылды. Йәғни был тәңгәлдә пропаганда йәйелдереләсәк.330 Беҙҙең ғәскәр Аҡтүбә-Орск фронтында һуғышты. Ташкенттағы ҡыҙылдар хакимлығын юҡҡа сығарыу мөмкинлеге булыр кеүек күренә ине. Ошо хосуста кәңәшләшеү ниәтенән Бохара әмиренә вәкилдәр ебәрҙек. Шул арала Бохара халыҡ хөкүмәте етәкселәре Усман Ходжаев менән Фәйзулла Ходжаев та Ырымбурҙа булып китте.

§55 Өфө дәүләт шураһы

8-23 сентябрҙә Өфөлә "Рәсәй дәүләт кәңәшмәһе" (Государственное совещение) булды. Татарҙарҙың күренекле кешеләре килгәйне. Төркөстандан, Һамарҙа ла булған ҡаҙаҡ хөкүмәте ағзаларынан тыш, Мостафа Чокаев та бар ине. Ул да Һамарҙа ҡабул ителгән ҡарарҙарҙы яҡланы. Дөйөм эш пландарыбыҙ хаҡында бында ла һөйләштек. Бер мәсьәләлә лә фекер айырымлылығы юҡ ине. Татарҙарҙың бер нисәһе, шул иҫәптән, Ғаяз Исхаҡи, полковник Биглов һәм Ишмөхәмәтовтар менән "Сибирская гостиница" ҡунаҡханаһында бер һөйләшеү булды. Улар мосолман хәрби частәрен дә, башҡорт һәм ҡаҙаҡ ғәскәрҙәрен дә Омск ҡалаһында генерал Болдырев етәксегендә тупланыуға иҫәп тотҡан "Азия бүлегенә" буйһондороу фекерен алға һөрҙө. Ләкин беҙ милли ғәскәрҙәребеҙҙе мөстәҡил корпус рәүешле туплау яғында торҙоҡ. Һамар хөкүмәте ярҙамында ошоно тормошҡа ашырған башҡорттар һәм ҡаҙаҡтар үҙ ғәскәрен урыҫ ғәскәренең Азия бүлегендә әҙселек сифатында буйһондороуға ҡәтғи ҡаршы торҙо. Шул уҡ мәсьәләләр буйынса һөйләшеү икенсе көндө Ғосмания мәҙрәсәһе бинаһында ла дауам итте. Йософ Аҡсура ул көндәрҙә Өфөлә ине. Алихан Бүкәйхан, Мөхәмәтйән Тынышпай менән мин Йософ Аҡсураға беҙҙең хәрәкәткә ҡатнашып, сит ил эштәре министры вазифаһын үҙ өҫтөнә алыуҙы тәкдим иттек. Ләкин ул, "Ҡыҙыл Ай" ойошмаһы вәкиле булғанлыҡтан, Төркиәгә кире ҡайтырға тейешлеген аңлатты. Шул ваҡытта Йософ бейҙән Төркиә ғәскәрҙәренең Әзербайжанға инеүе хаҡында ишеттек. Өфө ҡалаһында ул саҡта тәртип һаҡлау эшен Ғәлимйән Таған етәкселегендәге Өсөнсө башҡорт полкы башҡарҙы. Был йәһәттән Өфө кәңәшмәһенә килгән урыҫтарға йоғонтобоҙ бар ине. Беҙ был кәңәшмәлә кадет һәм башҡа инҡилап дошманы булған фирҡәләргә ҡаршы булып, Учредителдәр Йыйылышы комитеты тирәһендә тупланған эсер, социал-демократ һәм башҡа фирҡәләр файҙаһына тауыш бирҙек. Инҡилапҡа ҡаршы даирәләр Директория, йәғни диктатура тарафлы булды, беҙ иһә быға риза булманыҡ. Генерал Болдыревтың тик Учредителдәр Йыйышына тоғро ҡалыуын теләй инек. Ләкин Ырымбур казактары етәксеһе Дутов, Себерҙәге союздаштар һәм инҡилапҡа ҡаршы даирәләр менән берләшеп, диктатура урынлаштырыу юлына баҫты. Өфө кәңәшмәһенән бер үк поезда Ырымбурға кире килгәндә арабыҙҙа һөйләшеүҙәр булды. Ул Ырымбур тирәһендә башҡорт көстәренең артыуына, ҡаҙаҡ-ҡырғыҙҙар менән берләшеүебеҙгә, Өфөләге өсөнсө башҡорт полкын Ырымбурға күсереүгә ҡаршы сыҡты.

§56 Башҡорттар һәм татарҙар

Татарҙар Себер һәм Өфө генералдары менән берлектә "Азия бүлеге" ойоштороуҙа һис бер ниндәй һөҙөмтәгә ирешә алманылар. Ниһәйәт, беҙгә ҡаршы сыҡҡан унитаристары ла яйлап беҙгә ҡушыла башланы. Иң тәүҙә беҙгә ҡаршы сыҡҡан Фәтих Кәрими һәм башҡалар Башҡортостанға килеп, беҙҙең мәғариф эштәребеҙҙә урын биләне, күбеһе ғәскәрҙә офицер булды. Мәҫәлән, Ҡазанда Хәрби шура рәйесе булған Ильяс Алкин да бында килеп вазифа алды, ләкин Ырымбур казактары етәкселәре беҙгә ҡарата дошманлыҡ мөнәсәбәтенә күсте. Себерҙә демократия учреждениеларына һәм Учредителдәр Йыйылышына ҡарата кире мөнәсәбәт өҫтөнлөк алды, диктатура яҡлылар ҡеүәтләнде. Һәм беҙ ике ут араһында ҡыҫылып ҡаласағыбыҙҙы күрҙек. Былай булғас, хөкүмәтебеҙ Ырымбурҙы ҡалдырып, Башҡортостан уртаһында төйәкләнергә мәжбүр буласағын аңлап, дәүләт үҙәген яйлап Бөрйән-Түңгәүер кантонының үҙәге Темәс ҡасабаһына күсерергә ниәтләнек һәм унда биналар төҙөй башланыҡ. Большевиктар 7 октябрҙә Һамарҙы һәм Кинель станцияһын алған мәлдә, беҙ хөкүмәтте Баймаҡҡа күсергәйнек. Ырымбурҙа тик хәрби идара – Войсковое управление ҡалды.

Татар халҡы араһында "режим алышына, кем еңеп, кем киләсәге билдәле түгел", тиеүселәр күбәйһә лә, заман бик ҡурҡыныс булыуына ҡарамаҫтан, башҡорттар

араһында быңдай фекер асылда булманы, фронттағы бәрелештәр хаҡындағы хәбәрҙәр халыҡты тағы ла ныҒыраҡ йәнләндерҙе. Октябрь айы башында көньяҡ кантондарҙағы үҙ ирке менән йыйылған ғәскәр һаны өс мең ярымдан ашты. 5 декабрҙә хәрби идара әмере менән 2-се атлы полк ойоштоstatic ролдо, етәксе итеп иң хөрмәтле башҡорт офицерҙарының береһе йәш егет Әхмәт Биишев, яңы 6-сы йәйәүле полкка татар офицерҙарының шундай уҡ абруйлы, минең иң яҡын арҡадаштарымдың береһе Усман Тереғолов командир итеп тәғәйенләнде. Улар икенсе башҡорт йәйәүле дивизияһына тапшырылды. (Биш полк төньяҡ кантондарҙағы башҡорттарҙан ойошторолоп, тағы ла алдараҡ ойошторолған өсөнсө йәйәүле полк менән бергә өсөнсө йәйәүле башҡорт корпусы тәшкил итәсәк ине. Был планды өҙмәҫ өсөн көньяҡ кантондарҙан үҙ ирке менән йыйылған һалдаттарҙан 6-сы йәйәүле полк ҡоролдо).

§57 Ҡатмарлы бер заманда киң пландар

Дәүер бик ҡатмарлы ине. Шуға ҡарамаҫтан, Башҡортостан менән Ҡаҙағстан араһында бик яҡшы эшберлеге барлыҡҡа килде һәм бик күп пландар билдәләнде. Былар хаҡында "Төркөстан тарихы" исемле китабымдан (370-376-сы биттәр) өҙөктәр килтерергә теләйем: "18 июлдә Ашхабад меньшевиктар ҡулына күсеү менән Әзербайжан менән Төркөстан араһында мөнәсәбәт булдырыу юлдары асылды. Төркиә хөкүмәте янында Төркөстан мосолмандары вәкиле вазифаһын үтәү өсөн Ташкенттан Садретдин хан, Нуретдин бәк, Сәйетнасир Мирйәлил, Төркмәнстандан Әмир хажи Бердиев һәм Ҡыҙылһыуҙан Мөхәммәт Ҡолмәмәт улы Әзербайжан юлы менән Төркиәгә йүнәлде. Төркөстан менәүәре, өлкән йәштәге Ширали Лапин да Истамбул юлы менән Германияға китте. Был зат Төркөстан тәхетенә Төркиәнән бер принц килтерергә теләй ине.331 Шулай уҡ Төркиәлә лә Зыя Гөкальп "Яңы мәжмүғә"лә ошо фекерҙе яҡлаған бер мәҡәлә нәшер иткәйне.332 Ширали Лапин төркөстанлылар менән император Вильгельм һәм маршал Гинденбургҡа бер меморандум да ебәрҙе. Ләкин шарттар бик тиҙ үҙгәрҙе. Ашхабад хөкүмәте Мәшхәдкә ингән инглиз ғәскәре командалағы тәьҫире аҫтында ҡалды. Сентябрь башында генерал Малиссон Каспий арты эштәрен үҙ ҡулына алды. Төрөк көстәренең көньяҡ Кавказдағы эшмәкәрлеге һәм Баҡыға табан хәрәкәт итеүҙәре хаҡында мәғлүмәт юҡ ине. Киреһенсә, ул ваҡыт Украинаны баҫып алған Германияның эске эштәре ҡатмарлашыуы хаҡында хәбәрҙәр килеп етте. Көнбайыш Алаш Урҙа һәм Башҡортостан хөкүмәттәре Әзербайжан-Төркиә һәм Ашхабадтағы меньшевик хөкүмәттәре менән бәйләнеш урынлаштырырға ҡарар итте. Сәмәрҡәндтә Мәхмүт ходжа Бехбуди менән уның арҡадаштарының Ашхабад хөкүмәте һәм инглиздәр менән бәйләнешкә инергә теләүҙәре хаҡында хәбәр ишетелде. Ул ваҡыттағы иң мөһим маҡсат Төркөстанда хөкөм һөргән ҡурҡыныс аслыҡҡа ҡаршы бер сара табыр өсөн Иҙел буйынан аҙыҡ ебәрелеүгә ҡаршы торған Ташкент большевиктарын юҡ итеү, Себер һәм Каспий арты шарттарына ярашлы демократик милли хөкүмәт ҡороу ине. Халыҡ-ара сәйәси хәл ғәжәйеп буталып һәр эш ҡыл өҫтөндә торған мәл. Ташкент коммунистарының эшмәкәрлеге бик ҡатмарлашҡайны. Әгәр Көнсығыш Рәсәйҙәге төрки колониялар үзбәк, ҡаҙаҡ, башҡорт һәм төркмәндәр Төркөстандың эсендә һәм тышында эш алып барып, ул замандың халыҡ-ара хәлен иҫәпкә алып, сәйәси яҡтан ойошоп, мәғәнәүи һәм рухи берҙәмлеккә өлгәшһә, географик шарттар арҡаһында бүленеп ҡалған көстәрҙе маҡсатҡа рәүешле йүнәлтергә мөмкин булыр һәм Төркөстан киләсәге хаҡына бөйөк эштәр башҡарылыр ине. Башҡортостан хөкүмәтенең һан яғынан аҙ, әммә ойошҡан, берҙәм хәрби ҡеүәте Төркөстан юлында Аҡтүбә фронтында көрәшкә әҙер һәм Ташкент большевиктарына ҡаршы һуғыша ине. Каспий артында һәм Хиуала төркмән хәрәкәте, Фирғәнәлә Мөхәммәт Әминбәктең баҫмасылар төркөмө бар. Бохара әмиренең ағаһы (атаһының ҡустыһы) Сәйет Әкрәм Түрә Шәһрисәбздә (Кеш) көслө ғәскәр туплағайны. Сәмәрҡәнд вилайәтендәге ғәскәрлек рухын һаҡлап алып ҡалған үзбәк һәм тажиктар (Ачил бәк, Баһрам бәк һәм арҡадаштары етәкселегендәге) уға ҡушылды, ләкин былар бөтәһе лә бер нисә сәбәп арҡаһында боҙолдо. Иң башта беҙ генерал Дутов менән берлектә

Бохара әмиренә вәкилдәр ебәреп, Арал күленең төньяғындағы өлкәләрҙе ҡулында тотҡан Ташкент большевиктарын юҡ итеү өсөн ул саҡта бөтөнләй асыҡ һәм һаҡлауһыҙ булған Ҡыҙылҡом аша Ҡаҙалыға 5 мең тирәһе ғәскәр ебәреп, Сәмәрҡәнд тарафынан тимер юлын киҫергә тәҡдим иттек. Әмир "Ташкент большевиктары менән солох төҙөүе һәм уларҙың әмир дәүләтенә һөжүм итмәйәсәген" аңлатып, Кушбеги аша яуап бирҙе. Шул уҡ ваҡытта Ирандан килгән Рәсәй консулы Минорский ҙа Бохараның Ташкент большевиктарына ҡаршы сыҡмаясағын аңлатты. Әгәр әмир Ҡыҙылҡом юлынан ике полк тирәһе ғәскәр ебәрһә, Ташкент большевиктарының Аҡтүбә фронтынан сигенеүҙәре һәм Ташкентты ла тотоп тора алмаясаҡтары ап-асыҡ ине. Ләкин әмир Рәсәйгә ҡаршы йүнәлтелгән теләһә ниндәй хәрәкәттән ситтә ҡалырға тырышты. Уның фекеренсә, Петербург менән Мәскәүҙә кем ултырһа ла, ул "Рәсәй хөкүмәте". Ҡыҫҡаһы, әмир менән Сәйет Әкрәм түрә ул ваҡыт инде тере мәйеткә әүерелгән урыҫтың күләгәһенән ҡурҡты. Мин дә дуҫтарымдың береһенә әмирҙең яуабын үкенес менән аңлатып, ошолай тип яҙғайным: "Яҙмыш ыңғайына йөрөгән был инсандар нуҡтаһыҙ үгеҙ менән ишәк кеүек. Ишәгенә атланған килеш әҙәм үлеп киткән, әммә ишәк ишәклеге арҡаһында һыртындағы йөктө әле лә йөкмәп бара икән".333

Ҡарши ҡалаһына килеп уларға хәлде аңлатырға тырышҡан Мәхмүт Хужа Бехбудиҙе һәм арҡадаштарын, "йәдиттәр" тип атап, вәхшиҙәрсә һуйҙылар (1919 йылдың 25 марты).

Ырымбурҙа ла шундай бер үкенесле ваҡиға булды. Ул ваҡытта Ырымбурҙа диктатура урынлаштырыу тәжрибәләре менән шөғөлләнгән генерал Дутовты янындағы ярҙамсылары менән бергә ҡулға алып юҡ иткәндән һуң, ағзалары Ҡаҙағстандан Сәйет Ғазим Ҡыдырбаев, казактар атаманы Каргин, Башҡортостандан мин булған өс кешелек бер хөкүмәт ҡороп, башкомандующий итеп полковник Махкинды тәғәйенләү юлында ойоштороу эше алып бара инек. (1918 йылдың ноябрендә). Әгәр ҙә был эш барып сыҡһа, йыл аҙағында Аҡтүбә фронтында хәрәкәт итеп, Ташкентта оя ҡорған большевиктарҙы юҡ итергә һәм унда башҡорт, ҡаҙаҡ ғәскәрен урынлаштырырға, Фирғәнә менән Сәмәрҡәнд көстәрен берләштерергә мөмкин буласаҡ ине. Турғай вилайәтендә Алаш Урҙа тарафынан ҡоралланған бер ҡаҙаҡ полкы ойошторолғайны. Арғын-ҡыпсаҡтарҙың юғарыла исеме телгә алынған етәксеһе Әбделғәфәр ҙә большевиктарға ҡаршы көрәшә ине. Урыҫ демократтары фирҡәләре һәм Учредителдәр Йыйылышы ағзалары ла Ырымбурҙа демократтар хөкүмәтенә ҡушыласаҡ. Ләкин Ырымбурҙа алып барылған бөтә был эш бер мосолман офицерының ахмаҡлығы һәм башҡа берәүһенең хыянаты арҡаһында боҙолдо. Генерал Дутов беҙгә ҡаршы һаҡлыҡ саралары күрҙе.

Өҫтәүенә, Төркөстандағы ойоштороу эштәре лә һөҙөмтә бирмәне. 1918 йылдың ноябрь һәм декабрь айҙарында Ташкент тимер юлы хеҙмәткәрҙәре лә Советтарға ҡаршы көрәш башларға әҙерләнгәйне. Ташкент большевиктарының хәрби комиссары булған батша офицеры Осипов тимер юлсылар һәм һул эсерҙар менән бәйләнештә булды. Ырымбурҙа Дутов та, беҙ ҙә уның менән бәйләнештә булыу өсөн күп шөғөлләндек. 1919 йылдың 18-19 ғинуарында Осипов ҡаланың эске ныҒытмаһын һәм большевик полктарының береһен үҙ ҡулына алып баш күтәрҙе, бөтә Совет дошмандары менән бәйләнеш урынлаштырырға тырышты. Ташкент халҡы араһында белгән кешеләре ярҙамында урындағы халыҡты был күтәрелешкә йәлеп итергә тырышты, эске ҡалалағы арсеналда һаҡланған байтаҡ ҡоралды халыҡҡа таратырға теләне. Ләкин Ташкент халҡы был хәрәкәткә илтифат итмәне. Бының иң мөһим сәбәбе – мосолман менәүәрҙәренең Совет тарафын тотоуында ине. Урыҫ казактарының, Осипов кеүектәрҙең еңеүен "инҡилаптың еңелеүе" тип баһалаған был мосолман менәүәрҙәре, айырыуса ҡазанлыларҙан торған йоғонтоло бер даирә, беҙҙең казактар менән аңлашып эш итеүебеҙҙе һәр ерҙә хурларға тырышты. Шул уҡ ваҡытта беҙ Аҡтүбә фронтын тотоп торған башҡорт һәм ҡаҙаҡ ғәскәрҙәре менән урыҫ көсөнә, йәғни Ташкент большевиктарына һәм Урал-Ырымбур казактарына ҡаршы тора алмаҫ инек. Ташкент халҡын баҫмасыларға һәм Ташкенттағы Советтарға ҡаршы булған даирәләргә ярҙам итергә саҡырыуыбыҙ һөҙөмтә бирмәне. Ташкентта булған

әзербайжан Әфәндезада Мехмет Әмин, төрөк офицерҙары Ҡязим, Зыя һәм Хәйҙәр бейҙәр Төркөстанда аҡ урыҫтарҙың хакимиәте ерләшеүгә ҡаршы сиктән тыш тырышлыҡ күрһәтте. Мадьяр һәм Австрия әсирҙәре лә тулыһынса большевиктар яҡлы булды. Большевиктар Ташкент ҡалаһының төрки халыҡ йәшәгән өлөшө менән идара итеүҙе Камил хужа исемле бер урындағы кеше ҡулы менән тормошҡа ашырҙылар. Осипов, баш күтәргәс тә, ғәләмә даирәһенә таянырға теләүен белдерҙе. Һәр хәлдә, Бохара һәм Ташкент кеүек үҙәктәрҙең был ваҡиғаларҙа ҡатнашмай ситтә ҡалыуҙары арҡаһында Һырдарья һәм Заравшан буйҙарында Совет режимы йәшәүен дауам итте. Шул уҡ ваҡытта Ырымбур ҙа үҙенең географик урыны арҡаһында мөһим бер роль уйнай ине. Беҙ, бер тарафтан, Әстрхан янындағы Бүкәй урҙаһы үҙеге Хан урҙаһында булған кешеләребеҙ аша Украинала немецтарҙың хәлен, шул уҡ ваҡытта Кавказдағы, Омск хөкүмәте янындағы вәкилдәребеҙ ярҙамында чехословактарҙың һәм союздаштарҙың хәлен, шулай уҡ Турғайҙағы Алаш Урҙа ғәскәре ойошмалары аша Көнбайыш Төркөстан ваҡиғаларын белеп торҙоҡ. Әзербайжандан хәбәр алыр өсөн Гурьевҡа ла (Уйшук) кеше ебәрҙек.

Ашхабадта урынлашҡан инглиздәрҙең бер ғәскәри төркөмө бер ваҡыт Хазар диңгеҙендәге Александровский фортына килгән. Себерҙә демократик урыҫ хөкүмәте йәшәгән тәҡдирҙә, союздаштар менән аңлашып, бәғзе эштәр эшләп булыр кеүек күренә ине. Германия фронты ҡыйралып, Төркиә лә солох ҡороу мәжбүриәтендә ҡалған заманда, союздаштарҙың Рәсәй колонияларындағы мосолман ғәскәрҙәренә ҡарата 1918 йылдың йәйендә күрһәткән ышанмаусанлыҡтарының эҙе ҡалмаясаҡ тип өмөтләнгәйнек. Үҙаллы өлкәләр сифатында Рәсәй Федерацияһы эсендә ҡалыу фекеребеҙ самими булғанлыҡтан, эсер лидерҙары менән чехословактар беҙгә ышана ине. Омскиҙағы союздаштарҙың ышанысын яулау эше менән Алихан Бүкәйхан да шөғөлләнде. Ҡязим бей әйтеүенә ҡарағанда, исеме иҫкә алынған Мәхмүт хужа Бехбуди, туранан-тура инглиздәр менән аңлашыу яғында ине. Беҙ ул саҡта "Рәсәй Учредителдәр Йыйылышы" ағзалары исеменән Европаға ебәрелгән комитет составында Төркөстан, Ҡаҙағстан һәм Башҡортостан вәкиле итеп Баҡы аша Мостафа Чоҡаевты ебәрҙек.

## §58 Демократияның юҡҡа сығыуы

25 майҙа Себерҙә адмирал Колчак хакимлыҡ итә башлау менән союздаштар өҫтөнлөк алды һәм Учредителдәр Йыйылышы хөкүмәтенең һис бер абруйы һәм йоғонтоһо ҡалманы. Чехословактар был хәлгә яраҡлаша алманы. Ошо айҡанлы алдараҡ иҫкә алынған 6 ноябрь ваҡиғаһына аңлатма биреү урынлы булыр. Учредителдәр Йыйылышы ағзалары эшенең юҡҡа сығыу ваҡиғаһы арҡаһында Дутовтың инҡилап дошманы булған монархист икәнлеге фаш ителде. Шул рәүешле ул казактарҙы ла үҙенән биҙҙерҙе. Ноябрь аҙағында Аҡтүбә фронтындағы ғәскәрҙәребеҙҙе тәфтишләргә киттем. Был фронт сардары полковник Махкин эсер фирҡәһендә тора, Дутовтың дошманы. Ул миңә пландарын асты. Дутовты ҡулға алып, урынына эсер атаманы Каргинды баш командующий итергә уйлайҙар икән. Беҙҙең быға ҡушылыу-ҡушылмауыбыҙҙы һораны. Мин ҡушыласағыбыҙҙы белдерҙем. Екатеринбургтан Башҡортостанға килгән Мостафа Чоҡаев, көнбайыш Ҡаҙағстан хөкүмәте ағзаһы Мирғазим Ҡыдырбаев ул саҡта Ырымбурҙа ине. Мин Аҡтүбәнән әйләнеп ҡайтҡан кис бергәләп кәңәшләштек. Өс сәйәси даирә ҡатнашлығында хөкүмәт ҡорорға уйлаштыҡ, ағзаларының береһе атаман Каргин, икенсеһе Махкин, өсөнсөһө мин. Был айҙарҙа Чоҡаев, Мирғазим Ҡыдырбаев һәм Фәйзулла Ходжаев менән һәр саҡ бергә булдыҡ. Дутовты ҡулға алыу буйынса беренсе декабргә билдәләнгән план ғәскәребеҙҙә Абидов янында хеҙмәт иткән Силәбе татары Алиев хыянаты арҡаһында Дутовҡа мәғлүм булып , генерал бер танк эсендә ҡаланан сығып ҡасҡанлыҡтан, уны эләктереп булманы, бары тик яраланды ғына334. Был уңышһыҙлыҡ та Урал тарафында демократияның юҡҡа сығыуын, диктатура

урынлашыуын күрһәтә. Ошо арала "хәрби идара" исеменән әмер биреп, Иҙелбашында (Белорецк) булған 1-се полкты Ырымбурға күсергәйнек. Йәй айҙарында милиция отрядтары рәүешендә ойошторолған егеттәрҙән алтынсы йәйәүле полк һәм икенсе атлы полк ҡоролдо. Уларҙы Ырымбур тирәһендә урынлаштырҙыҡ һәм шул арҡала Аҡтүбә фронтындағы ғәскәрҙәрҙе шул уҡ 6 ноябрь көнө Ырымбур аша төньяҡ Ырымбур–Орск тимер юлы өҫтөндәге Һаҡмар станцияһына күсерҙек335. Хәрбиҙәр Иманҡол һәм Яҡуп ауылдарында урынлашты. Ғәскәр – 1, 2, 4-се йәйәүле полктар, беренсе башҡорт йәйәүле дивизияһын (төмәнен) тәшкил итте. Икенсе төмәндә 2-се атлы полк һәм беренсе йәйәүле полк менән бергә төрлө кантондарҙан үҙ ирке менән килгән һалдаттарҙан торған отрядтар бар ине. Бөтә башҡорт ғәскәре "Айырым башҡорт корпусы" (Отдельный башкирский корпус) тип йөрөтөлдө. Ғәскәр сардары итеп генерал Ишбулатов, штаб начальнигы итеп генерал Федоров тәғәйенләнде. Бөтә ғәскәр менән етәкселек итеү миңә тапшырылды. Ильяс Алкин штаб етәксеһе ине. Ғәскәрҙең ошо хәлдә ойошторолоуы 5 ноябрҙә иғлан ителде.

Мостафа Чоҡаев Екатеринбургтағы Учредителдәр Йыйылышы ағзалары менән бергә Европаға китәсәк, донъя милләттәре алдында Төркөстан, Ҡаҙағстан һәм Башҡортостан халыҡтарының вәкиле вазифаһын үҙ өҫтөнә аласаҡ. 6 ноябрь пландары юҡҡа сыҡҡас, Мостафа Чоҡаевты Уральск (Теке) ҡалаһына оҙаттыҡ. Бер аҙ Гурьевта (Уйшук) булғандан һуң Хазар диңгеҙе юлы менән Әзербайжанға, ә унан Тифлисҡа китте. Ноябрь айы аҙаҡтарында хәл тамам Советтар файҙаһына үҙгәрҙе.

25 ноябрҙә, адмирал Колчак диктатура иғлан иткәндән һуң, Себер яғынан Башҡортостанға мөнәсәбәт ҡырҡа үҙгәрҙе. Был диктаторҙың йөмһүриәтебеҙҙе юҡ итәсәгенә һәм ғәскәребеҙҙе тарҡатасағына шөбһә ҡалманы. Ошондай хәлдә беҙ, бер яҡтан, Советтар яғында зондаж яһарға кәрәклеген аңлап, элегерәк Мәскәүҙә эшмәкәрлек иткән Салих Аҙнағолдо фронт аша сығарып, Мәскәүгә ебәрҙек. Ул да хәҙергә Совет хөкүмәтенә мөрәжәғәт итмәйенсә, таныштарыбыҙ аша солох төҙөп булыу-булмау мөмкинлектәрен өйрәнергә тейеш. Шул уҡ ваҡытта Юрматы кантоны рәйесе Абдулла Ильясов менән Әбделхәмит Арифовты Советтар менән һөйләшеүҙәр алып барырға мәжбүр булыуыбыҙ хаҡында һәм, әгәр уларҙың да ошондай уйы булһа, бергәрәк хәрәкәт итергә кәрәклеген аңғартыу өсөн Турғайға һәм Алаш Урҙаға ебәрҙек. Был ваҡытта бынан бер аҙ әүәл Бохарға ебәргән кешебеҙ ҙә кире килде һәм әмирҙең большевиктар менән солох төҙөүен хәбәр итте. "Мәскәүҙә кем хөкүмәт башында булһа, шул батша булыр", – тигән яуабын, беҙ ебәргән затты үҙе ҡабул итеүҙән баш тартыуын да белдек. Әгәр әмир беҙҙең тәҡдимебеҙ буйынса Ҡаҙалы аша бер-ике мең атлы ебәрһә, Аҡтүбә фронты күптән ҡыйратылып, Ташкент азат ителгән булыр ине.

Бер тарафтан беҙ үҙ вәкилдәребеҙҙе Алаш Урҙаға ебәреүебеҙ булды, Алаш Урҙанан да беҙгә вәкилдәр килде. 6 декабрҙә Урал буйындағы Алаш Урҙа вәкилдәре Азимбәк Беримжан, Мөхтәр Әүәзов, Мирғазим Ҡыдырбай килде. Был ваҡыт 3-сө полктан башҡа бөтә ғәскәребеҙ бер ерҙә үҙ тупрағыбыҙҙа тупланғайны. Бөтә ғәскәрҙең офицерҙарын йыйып, мәжлес ойошторҙом. Ғәскәребеҙҙә маһир ҡурайсыдар ҙа (нейселәр) бар ине. Әсе бал һәм һыра мул булды. Үҙ мәмләкәтебеҙҙә тик үҙебеҙ хужа булған был заманды ҡотлап, иртәгәһенә Советтар менән һөйләшеү һәм килешеү мәсьәләләре буйынса Алаш Урҙа вәкилдәре менән тамам һүҙ берлегенә өлгәшеп, мәмләкәттәренә оҙатып ебәрҙек. Беҙ үҙебеҙ иһә ғәскәр штабын Ҡыҙыл Мәсеткә, һуңынан Ҡана заводы аша Темәскә күсереп, берләшеү маҡсатында ашыҡмай эш итеү менән мәшғүл булдыҡ. Ул ваҡытта Екатеринбургтағы Учредителдәр Йыйылышы ағзалары комитеты таратылғайны. Эсерҙарҙың рәйесе Виктор Чернов һәм башҡа ҡайһы берҙәре Екатеринбургтан беҙгә килде. Ҡыҙыл Мәсеттә улар хөрмәтенә бер мәжлес ойошторҙом. 1923 йылда, һуңынан 1929 йылда Парижда Чернов һәм арҡадаштары менән осрашҡанда был мәжлес уларҙың хәтерендә бик яҡшы иҫтәлектәр ҡалдырыуын күрҙем. Прагала һөйләгән бер телмәрендә 1918 йыл аҙаҡтарында Урал буйҙарында һәр тарафта эске тарҡаулыҡ хаким һөргән шарттарҙа тик башҡорттар араһында тамам бер хозурлыҡты, үҙҙәре теләгәнсе хөкөм һөрөүҙәрен күреп, Ҡыҙыл Мәсеттәге идиллияны тасуирланы. Чернов менән иптәштәре Волга

шәрҡендә Советтарға ҡаршы көстәрҙең тамам тарҡалыуын күрҙе һәм быңдай осраҡта мәмләкәткә Советтар менән аңлашыуҙан башҡа сара юҡлығы хаҡында әйттеләр. Чернов Мәскәүгә китеп йәшерен йәшәргә тейеш. Бер аҙҙан мин уны Мәскәүҙә лә осраттым.

Чернов аттарыбыҙға ултырып, беҙҙең һаҡсылар оҙатыуында, Урал казактарына китте. Был зат социаль-революционерҙарҙың күренекле теоретиктарының береһе, марксизмды танымаған инҡилапсы, халыҡ социализмы нигеҙҙәре аңлатҡан "Конструктивный социализм" исемле ҙур һәм бик мөһим әҫәр яҙған кеше. Ул ваҡытта Чернов менән бергә беҙҙә булып киткән башҡа эсерҙар ҙа был партияның күренекле эшмәкәрҙәре ине. Эсерҙарҙы оҙатҡандан һуң күп тә үтмәҫтән, Колчак һәм уның союздаштарының Дутовҡа китеп барған офицерҙары Башҡортостан аша үткәндә, ҡағыҙҙарын ҡулыбыҙға төшөрҙөк. Хөкүмәтебеҙҙе һәм ғәскәребеҙҙе тарҡатыу буйынса ҡәтғи ҡарар ҡабул ителеүен белдек. Был ваҡиғалар беҙ Ҡыҙыл Мәсеттә саҡта булды. Декабрь аҙағында штабы Өфөлә урынлашҡан Бишенсе Совет армияһы сардарына вәкилдәр ебәреп, Мәскәү хөкүмәте менән тура мөнәсәбәткә инергә ҡарар иттек һәм Һиҙиәтулла Сәғитов менән Муллаян Халиҡов Өфөгә китте. Килешеү шарттарыбыҙ: илебеҙ мөхтәриәтен таныһындар, коммунизм Башҡортостанда мәжбүри булмаһын, иҡтисади мөхтәриәтебеҙ һаҡланһын һәм ғәскәребеҙ милли ғәскәр сифатында ҡалһын.

Шәриф Манатов декабрь айында уҡ Мәскәүҙән ҡайтҡайны. Ниндәйҙер бер ауылда өйләнеү дәрте менән мәшғүл. Уны Темәс кантоны идаралығына эшкә алғайныҡ. Ғәбделхәй Ҡорбанғәлиев менән бер һүҙле булды. Хөкүмәт ағзалары менән кәңәшләшкәндән һуң бер вазифа биреп, уны Рәсәй тышына ебәреүҙе муафиҡ күрҙек. Башҡортостан файҙаһына үҙ белдегенә шөғөлләнһен тип, Гурьев аша Әзербайжанға ебәрҙек336.

Тотош ғинуар буйы Советтар менән һөйләшеүҙәр алып барылды. Көнбайыш һәм төньяҡ Башҡортостан Советтар тарафынан баҫып алынғайны, артыбыҙҙа – дошманға әүерелгән Колчак ғәскәре. Көньяғыбыҙҙағы Дутов та дошман. Бер көн Дутов мине телеграф башына саҡырҙы. Йәнәһе кәңәшләшеү өсөн минең менән Юныс Бикбовты Ырымбурға саҡыра. Мин иһә урыҫ телендә һүгенеп, телеграф бәйләнешен өҙөргә ҡуштым. Ғәскәрҙең ҡорал припастары бөткәйне инде. 1919 йылдың 9 ғинуарында беҙҙең Өфөгә ебәргән вәкилдәребеҙ Ғәлимйән Әминев исемле бер татар коммунисы менән бергә һөйләшеүҙәрҙе дауам итеү өсөн әйләнеп ҡайттылар. Штаб Ҡана заводында (Кананикольский завод) ине. Шунда уҡ хөкүмәт ағзалары һәм ғәскәр офицерҙары йыйылып, солох мәсьәләләре буйынса кәңәшләштек. Был арала Ташкентта булған Афған вәкилдәренең, һиндостанлы Мәүләүи Бәрәкәтулланың һәм төрөк офицеры Меһмет Ҡязим бейҙең "Большевиктарға ҡаршы һуғыш мәғәнәһеҙ, Төркиә етәкселегендә бөтә ислам донъяһы большевиктар менән берлектә инглиздәргә ҡаршы көрәшеү мәжбүриәтендә. Аҡтүбә фронты юҡҡа сыҡһа, Афғанстан һәм Һиндостан вәкилдәре Мәскәүгә китер ине. Советтар менән солох ҡорорға тәҡдим итәбеҙ", тигән мәғәнәләге тәҡдимдәр яҙылған хаттарын тотоп кешеләр килде. Беҙ был мәлдә Аҡтүбә фронтынан киткәйнек. Советтар менән солох төҙөүҙең мотлаҡ булыуы, большевиктар тарафынан баҫып алынған ерҙәрҙә халҡыбыҙҙың бик күп ҡырылыуы, айырыуса Ҡыҙыл Мәсет тирәһендә йөҙҙәрсә ауыл кешеләренең атып үлтерелеүе, һәр ерҙә талау һәм йәберләү хөкөм һөрөүе һәм быны туҡтатыу сараһын күреү кәрәккән ваҡытта мәмләкәтте ташлап, ғәскәр менән Яйыҡтың көнсығышына сығып китеү мөмкин түгеллеге хаҡында һөйләшелде. Һәр хәлдә, Шотт хужалығында Ҡаҙағстан вәкилдәре, өҫтәүенә бына хәҙер Мәүләүи Бәрәкәтулла менән Ҡязим бей хаттарындағы фекерҙәр беҙҙекеләргә Советтар менән аңлашыуға ризалашыу йүнендә ҙур тәьҫир яһаны. Һуңынан был Меһмет Ҡязим бей менән Төркиәлә күрештек һәм 1927–1928 йылдарҙа Истанбулда бергәләп "Яңы Төркөстан" мәжмүғәһе сығарҙыҡ, Ҡязим бей был мәжмүғәнең яуаплы мөдире булды. Шул заманда ул үҙенең Афғанстан һәм Төркөстандағы эшмәкәрлеге хаҡында хәтирәләрендә кисергәндәре, Башҡортостанға хат ебәреүе, ул саҡ Башҡортостанда Советтарға ҡаршы һуғышҡан милли ғәскәр хаҡында шапыртылған хәбәрҙәр алыуы тураһында яҙҙы337. 1918

йылдың йәй айҙарында уҡ әсир төрөк офицерҙарынан Ғүмәр Лотфи бей башҡорт ғәскәрендә булды һәм бәйләнеш тәьмин итеү өсөн Ташкентҡа ебәрелде. Ҡаҙағстан аша Ташкентҡа барған был офицерҙан алған мәғлүмәттәргә ҡарағанда Ҡязим бейҙең, беҙ Советтар менән яраша алһаҡ, башҡорт ғәскәрен инглиздәргә ҡаршы файҙаланыу ниәтен тотоуын да белдек. Ләкин ул заман беҙҙең ҡулыбыҙҙа Аҡтүбә фронтындағы ҡыҙыл урыҫтарҙы ҡыйратырлыҡ форсат юҡ ине. Ҡана заводында уҙған кәңәшмәләребеҙҙән һуң Ташкенттан килгән был зат һәм офицерҙарыбыҙ менән бергә Стәрлетамаҡ – Маҡар тирәһендәге ғәскәребеҙ янына йүнәлдек. Ильяс Алкин да минең менән бергә ине, минең ауылымда ла булып киттек. Маҡарҙа дәһшәтле бәрелештәр булды. Әҡрәбәләремдән Баишев бер ғәскәри төркөмдөң командиры ине, ҙур батырлыҡтар күрһәтеп, большевиктарҙы Маҡарҙан Петровскийҙың көнбайышына ҡыуҙылар. Мортазиндың беренсе атлы полкы ла Ишембай–Һайран араһында фронт тотто, һуғыш припастары бөткәйне, шуға ҡарамаҫтан һуғыштарҙа ҙур батырлыҡ күрһәтте, һәр саҡ большевиктарҙан тартып алған ҡорал һәм припастар менән һуғышырға мәжбүр булдылар338. Улар янынан кире әйләнеп килгәндә Сәлих ауылы янында аттарыбыҙҙан төшкән бер мәлдә, засадала ултырған большевиктар һөжүменә дусар булдыҡ. Янымда тик һаҡсылар төркөмө бар ине, бәрелеш башланды. Өҫтөмдәге туным ике аяғым араһынан тишелде, ләкин, аллаға шөкөр, үҙем яраланманым. Бер ни тиклем юғалтыуҙар ҙа булды, әммә большевиктарҙы ҡасырға мәжбүр иттек. Ләкин дөйөм фронт тотоп торорлоҡ көс юҡ ине. Киренән Маҡар ауылына, унан Ҡолғонаға, артабан Аллаһы әкбәргә һәм Ҡана заводына сигендек. Ғәскәрҙә бер ниндәй ҙә рух төшөнкөлөгө булманы. Тик һуғыш припастарының аҙ булыуы, дөйөм хәлдең насарлығы командирҙарҙа борсолоу тыуҙыра ине. 300 саҡырымға һуҙылған фронтҡа ҡоралһыҙ бер нисә мең кешенән торған ғәскәр менән алышып маташтыҡ. Был ҡатмарлы шарттарҙа Шотт хужалығындағы, Ҡыҙыл Мәсеттәге, Кананикольскийҙағы һәм Темәстәге кәңәшмәләребеҙ бик самими, ихлас уҙҙы. Ауыр хәлдән ҡотолоу өсөн Ҡаҙағстан эсенә сигенәйекме, йә иһә Советтар менән аңлашыу уңайлыраҡ булырмы, тип төрлө яҡлап фекер йөрөттөк. Сигенеү яҡлы булған офицер һәм һалдаттарға азатлыҡ биреләсәге лә ҡарарлаштырылды.

Икенсе тарафтан, ул дәүерҙә Башҡортостан хөкүмәтендә һәм башҡорт ғәскәрендә хеҙмәт иткән татар менәүәрҙәре араһында мөхтәриәт фекере яғына ҡәтғи боролош хасил булыуын билдәләмәү мөмкин түгел. Башҡортостанда Ильяс Алкин етәкселек иткән бөтә татар менәүәрҙәре һәм офицерҙары был хәүефле осорҙа Башҡортостан мөхтәриәте фекеренә ихлас инанғайны. Әле ноябрь башында Ырымбурҙа генерал Дутовты юҡ итеү ниәтебеҙҙе асҡан Алиев яҡлы бәғзе кешеләр, йәғни Башҡортостанға ҡаршы аҡ урыҫтарға ярамһаҡланғандар самими мөхтәриәтсегә әүерелде. Бында әлбиттә генерал Ишбулатовтың, полковник Бикмәевтың, полковник Әхмәровтың, Ильяс Алкиндың, Абдрахман Фәхретдиновтың, Абдулла Әҙһәмовтың роле ҙур булды. Нисек кенә булмаһын, 1918 йыл аҙағында һәм 1919 йыл башында Советтар менән Килешеү төҙөгәнгә тиклемге 3 айға һуҙылған бер дәүерҙә менәүәр башҡорт һәм татарҙар араһында һис бер ниндәй фекер айырмалығы ҡалмағайны. Һәр кем был мөхтәриәткә тоғро булырға һәм Советтар менән аңлашҡандан һуң да уны йәшәтеү фекере тирәһендә берләшкәйне. Шағир Шәйехзада Бабич был көндәрҙәге хиссиәт сафлығын шиғырҙарында йәнләндерҙе. 9 ғинуарҙа Советтар тарафынан вәкил итеп беҙгә ебәрелгән татар коммунисы Ғәлимйән Әминев был шомло көндәрҙә Ҡана заводында беҙҙең ғәскәрҙәге татар офицерҙары менән һөйләшкәндә уларҙа милләтебеҙҙең киләсәгенә ышаныс тыуыуын күреп, бының уға ни тиклем ныҡ тәьҫир итеүен һәм Өфөлә үҙенең был хистәрен Совет етәкселәренән йәшерергә тырышыуын, һуңынан, солох төҙөлгәндән һуң, мин Мәскәүгә килгәс, үҙе һөйләне. Һәр хәлдә, был көндәрҙә башҡорт ғәскәрендәге рух һәм ихтыяр берлеге төрөк һәм мосолман булған һәр менәүәргә тәьҫир итә алырлыҡ ине. Фекеремсә, аңлатҡан был хосус киләсәкке яҙмышыбыҙ өсөн дә әһәмиәтле. Шул дәүерҙә Советтар менән солох төҙөмәй Ҡытай сигенә табан сигенергә тигән ҡарар ҡабул ителгән булһа, быға һәр кем икеләнеүһеҙ итәғәт итәсәк ине. Һуңынан аңланыҡ, әгәр беҙ генерал Дутов менән полковник

Каппель юлынан киткән булһаҡ, бөйөк хата яһаған булыр инек. Шул уҡ ваҡытта беҙ Советтар менән аңлашып солох төҙөүгә өлгәшкәс, бәғзе башҡорт һәм татар офицерҙары беҙҙең ризалығыбыҙ буйынса аҡтар тарафында ҡалды.

§59 Йөҙбашы Исмәғил Шәриповтың хәтирәләре

Советтар тарафына сығырға теләмәйенсә аҡтар яғында ҡалған офицерҙарыбыҙҙың береһе юғарыла иҫкә алынған Әмир Ҡарамыштың ҡәрҙәше йөҙбашы Ғәни Ҡарамышев ине. Һуңыраҡ Советтар яғына сығып, беҙгә яңынан килеп ҡушылды. Икенсеһе иһә йөҙбашы Шаһибәк Үзбәков. Был офицер Әхмәр ауылынан сыҡҡан менәүәр, ифрат аҡыллы бер зат ине, минең бала саҡтағы арҡадашым. Бик дуҫ булдыҡ. Советтарға һис ышанманы. Урал казачийҙарына китеп, унан Деникин ғәскәренә ҡушылған һәм Ҡырымда большевиктар менән һуғышта һәләк булған. Бындайҙарҙың тағы берәүһе – йөҙбашы Ғәбдерәшит Хөсәйенов, – Ырымбурҙағы татар байы Ғәни Хөсәйеновтың улы. Ул да Деникин ғәскәренә барып ҡушылған, бер ни тиклем ваҡыт Балҡанда булған, һуңынан эҙен юғалттыҡ. Советтарға ышанмаған офицерҙарыбыҙҙың тағы берәүһе – беренсе һыбайлы полктың батальон командиры, һуңынаң Мортазин бригадаһында икенсе полк командиры йөҙбашы Исмәғил Шәрипов. Ул да Урал казачийҙарына, артабан Деникинға ҡушылған, һуңынан Истанбулға килеп, бындағы заводтарҙың береһендә эшләп, ауырып вафат булды. Сығышы – Ҡазан татарҙарынан. Исмәғилдең башҡорт ғәскәрендәге хеҙмәте хаҡындағы хәтирәләре Төркиә күренеклеләренең кемеһенәлер күрһәтеү өсөн яҙылған булһа кәрәк. Вафатынан һуң ҡулъяҙма минең ҡулыма күсте. Исмәғил асылында Советтар менән ярашыуға ҡырҡа ҡаршы булған офицерҙарыбыҙҙың береһе ине. Уның хәтирәләрендә миңә ҡарата әсе-әсе тәнҡит һүҙҙәре булырға тейеш, тип уйлай инем. Әммә-ләкин был зат беҙҙән иң яҡшы тәьҫораттар менән айырылып киткән булып сыҡты. Башҡорт ғәскәре Советтар яғына күсерҙән алда кисергән ваҡиғаларҙы һәм бәрелештәрҙе, хатта беҙ Советтар яғына күскәндән һуң Мортазин бригадаһы һуғыштарын карта-схемалар менән аңлатҡан был хәтирәләрҙең бәғзе өлөштәрен бында килтереп китеүҙе файҙалы таптым:

"1918 йылда аҡ урыҫ ғәскәренең полковнигы Каппель идараһындағы ғәскәр Волганы аша сығып, большевиктарҙы Инза станцияһына тиклем сигенергә мәжбүр иткән ваҡытта, мин был полковниктың янындағылар араһында инем. Ауырып Һамарға килдем. Төҙәлгәндән һуң мине Ырымбурға генерал Дутов ҡарамағына ебәрҙеләр. Уның штаб етәксеһе генерал Вагинға "башҡорт ғәскәрендә хеҙмәт итергә теләр инем" тип белдергәс, унда ебәрҙе. Вагиндан бойороҡ алып Каруанһарайға киттем. Мине Башҡан339 Зәки Вәлиди үҙе ҡабул итәсәк, тип белдерҙеләр. Башҡан эш менән мәшғүл булыуы арҡаһында коридорҙа торған креслоға ултырып көтөргә тәҡдим иттеләр. Бер сәғәттәй ваҡыт үткәндән һуң Башҡан хәҙрәттәренең340 эш бүлмәһенә инергә саҡырҙылар. Бүлмә ишеген шаҡып, эскә индем. Рәсми сәләм биреп, исемемде әйттем. Башҡан хәҙрәттәре мине бик хуш ҡабул итте. Бер ултырғыс күрһәтеп, ултырырға ҡушты. "Ҡайҙан килдегеҙ? Ҡайһы полкта хеҙмәт иттегеҙ? Ниндәй яҙмыш менән башҡорт тупрағына килеп сыҡтығыҙ?" – тигән һорауҙар бирҙе. Һорауҙарына яуап биргәндән һуң "әгәр башҡорт ғәскәрендә вазифа башҡарыуҙы монасип күрһәгеҙ, ҡайһы полкта хеҙмәт итергә теләүегеҙҙе белдерегеҙ, шул оҡшатҡан ерегеҙгә тәғәйенләрмен. Асыҡла һәм иртәгә кил, полковник Емельяновҡа белдер", – тине. Мин дә теләктәремде рәйестең юғары хозурына килеп әйтәсәгемде белдереп, оҙон коридорға сыҡтым. Был гүзәл милли хис һәм милли рух менән тулы хөкүмәт бинаһының коридорында баш командующий янына инеү өсөн сират көткән башҡорт ғәскәренең хәрби кешеләре һәм бер нисә штат кейемендәге әфәнделәр бар ине. Коридор буйлап штаб етәксеһе полковник Емельяновтың эш бүлмәһен эҙләгән саҡта инҡилап кисергән Рәсәйҙең тарҡау бер дәүерендәге шарттарҙа Башҡортостан хөкүмәте хеҙмәткәрҙәре күрһәткән тәртип һәм тырышлыҡҡа, эше хайран ҡалырлыҡ

дәрәжәлә системалы һәм тәртипле ойошторолған хөкүмәт даирәләренә һоҡланмай ҡарау мөмкин түгел ине.

Бында осраткан милли хәүефһеҙлек органының мәғлүмәт туплау бүлеге һәм башҡа бүлектәрҙең айырым бүлмәләрҙә урынлашып, һәр хәрби һәм дәүләт хеҙмәткәрҙәренең тик үҙенә йөкмәтелгән эштәр менән мәшғүл булыуы, вазифаларына ғәйәт бирелгән рәүештә милли хис менән шөғөлләнеүҙәре күҙгә ташланып тора. Бындай эшмәкәрлек киләсәкке яҙмышыбыҙға өмөт тыуҙыра һәм ҡаһарман милләтебеҙҙең донъя менән идара иткән Атилла, Сыңғыҙ, Тимер һәм Бабур кеүек бөйөк ҡаһармандарының фиҙакәрлеге, самимилығы һәм етдилегенең өлгөһө булып күренә, уларҙы хәтерләтә ине.

Ҡунаҡханаға киттем, ял иттем. Иртәгәһенә сәғәт 10-да тағы ла Башҡан хәҙрәттәренә барҙым. Башҡан хәҙрәттәре мине Беренсе башҡорт һыбайлы полкына тәғәйенләүҙе монасип күргән. Полкка барып ҡушылыу өсөн шундуҡ Иҙелбашы (Белорецк) заводына китергә әмер бирҙе. Мин поезд менән юлға сыҡтым. Ләкин һуңғы өлөшөндә тимер юлы эшләмәгәнлектән (Миәстән һуң), юлды ат менән дауам итергә тура килде. Станциянан һуң бер нисә урыҫ ауылынан үтергә кәрәк ине. Ат йөрөтөүсе башҡорт бер урыҫ ауылын үтеп барған саҡта "был урыҫтар беҙгә бик дошман, төнгөлөккә үҙ ауылдарыбыҙға барып ҡунайыҡ, урыҫтар Башҡортостан хөкүмәте хеҙмәткәрҙәренә төндә һөжүм ителәр", – тине. Башҡорт ауылдарында йоҡланыҡ. Ауыл халҡы йыйылып, барыһы ла беҙгә доға ҡылып, "етәкселәребеҙгә, һеҙгә һәм ғәскәребеҙгә Аллаһы тәғәлә ҡеүәт бирһен. Дошмандан ҡурҡмағыҙ. 18 менән 60 йәш араһында булғаныбыҙҙың барыһы ла һеҙҙең артығыҙҙан киләбеҙ. Ватан һәм азатлығыбыҙ өсөн йәнебеҙҙе фиҙа итербеҙ", – тип ҡалды. Бәғзе ауылдарҙа ҡарт бабайҙар улдарына үҙҙәренең эйәрле аттарын биреп, үҙ иректәре менән ғәскәргә яҙҙырып, миңә ҡушып ебәрҙеләр. Йәғни ҡайһы ғына башҡорт ауылына килһәң дә, халыҡтың көслө милли хиссиәт менән тулҡынланыуы, милли яҙмыш, үҙаллылыҡ өсөн ҡорбан булырға әҙер булыуы асыҡ күренеп тора. Үҙ азатлығына был рәүешле йән атып ашҡынған, эскерһеҙ һәм асыҡ милли хиссиәт йөрөткән һәм шуның өсөн ҡорбан булырға әҙер торған бүтән милләтте ошо йәшемә етеп мин немецтарҙа булһынмы, урыҫтарҙа йә иһә башҡа бер милләттә булһынмы, һис бер ерҙә күрмәнем. Бындайын ҡаһарман халыҡтың милли хәрәкәте үҙ ерлегендә генә түгел, ғөмүми милләттәр тарихында тасуирланыуға лайыҡлы, сөнки ул һәр кемде хайран ҡалдырырлыҡ сиктән тыш бер сифат.

Юлда китеп барышлай ауылдарҙа миңә ҡушылған 20-ләп һыбайлы егеттәр менән бергә Иҙелбашына (Белорецк) килеп еттем. Тәүге бурысым полк командиры булған Әмир Ҡарамышты күреү ине. Уны күрҙем һәм беренсе рота командиры сифатында тәғәйенләнгән вазифамды үтәй башланым.

Ике аҙнанан һуң башҡорт корпусы командующийы генерал Ишбулатовтан алынған әмер буйынса полкыбыҙ Ырымбурға юлға сыҡты. Ун көн эсендә ҡалаға килеп етеп, тәғәйенләнгән йорттарҙа урынлаштыҡ. Икенсе көн Башҡан хәҙрәттәре (йәғни Зәки Вәлиди) хозурында Каруанһарай янында бер рәсми парад булды. Бында Башҡан менән янында булған юғары дәрәжәләге офицерҙар ҡаршыһынан арыҫлан кеүек һалдаттарыбыҙ роталарға бүленгән килеш бер-бер артлы Башҡанды тәбрикләп үтте. Иртәгәһенә Башҡан был рәсми парадта беренсе полк күрһәткән интизамды* билдәләп, ҡәнәғәт булыуын белдереп полкка үҙенең әмернәмәһен иғлан итте.

Баймаҡ (Темәс) Башҡортостандың уртаһы булғанлыҡтан, хөкүмәт дәүләт мәркәзен шунда ойоштороу хаҡында әмер бирҙе. Бер ай Ырымбурҙа булғандан һуң Баймаҡҡа табан йүнәлеш алырға бойороҡ алдыҡ. Ырымбурҙан ғәскәребеҙ тимер юлы менән китергә йыйынып, станцияла милли йырҙар йырлап, ҡурай (милли кавал** һәм ней) тартып, милли бейеүҙәр бейегәндә Ырымбур халҡы күпләп йыйылғайны һәм бик күп мосолмандар тамаша ҡылып илай, "Йәшәһен ҡаһар-

ман башҡорт ғәскәре!" тип ҡысҡыра. Бөтә нәмә тәртипкә буйһонған, күңелдәрҙә тәрән тәьҫораттар уяна...

Баймаҡта ни бары полк командалығы һәм ҡасабаны һаҡлауға тәғәйенләнгән рота урынлашты. Башҡа роталар ҡасабанан 15 саҡырым алыҫлыҡтағы ауылдарҙа төйәкләнде. Ауылдар араһында элемтәселәр йөрөп тора, шуға бөтәбеҙ ҙә бер ерҙә йәшәгән кеүекбеҙ. Минең рота ерләшергә тейеш ауылда башҡорттар, милли ғәскәрҙе бик ныҡ яратҡанлыҡтан, һалдаттарға "минең өйөмә кил, минең өйөмә кил", тип саҡырып, аттарының йүгәндәренән, эйәрҙәрҙәренән һөйрәй.

Беҙҙең килеребеҙҙе белгәндән бирле түҙемһеҙлек менән көтәләр икән, сөнки беҙ улар өсөн бер ғорурлыҡ символына әүерелгәнбеҙ. Ауылдың имамы мине үҙ йортона алды. Ауыл халҡы һөйөнөсөнән ҡунаҡтары хөрмәтенә ҡорбанға мал салды. Ҡыҫҡаһы, беренсе тапҡыр Миәстән Иҙелбашына (Белорет) полк ҡарамағына килгән саҡта нимәләр күрһәм, әле лә шул уҡ милли хиссиәтте күҙәттем.

Беҙ был ауылда һәр көн хәрби уйындар үткәреп, һалдаттарҙы өйрәтеү менән шөғөлләндек. Уларға хәрби хеҙмәттең төп ҡағиҙәләрен иман шарттары кеүек ятлата инек. Башҡорт һалдаты сиктән тыш мәргән ата һәм ҡылысты оҫта ҡуллана. Уҡый-яҙа белмәгәндәрен уҡытыу менән дә шөғөлләндек.

---

*Интизам – тәртип, хәрби выправка һәм ғәскәргә хас булған башҡа талаптарға яуап биреү сифаты (Ә.Ю.).

*Кавал – төрөк ҡурайы, бамбуктан бер яғынан алты, икенсе яғынан бер тишекле итеп төрлө оҙонлоҡта эшләнә. Ней – флейта (Ә.Ю.)

## §60 Покровск һуғышы

Бында өс ай торғас, полкыбыҙға "унынсы яртыла фронтҡа табан китәсәкбеҙ" тигән әмер килде. Ротаны иртәнсәк мәсет ҡаршыһындағы майҙанда теҙҙем, ауыл халҡына ҡунаҡсыллыҡтары өсөн рәхмәттәребеҙҙе әйттем. Башҡорт халҡы мөхитендә етешкән арыҫлан кеүек һалдаттарыбыҙ ат өҫтөндә мөһабәт ултырып, милли йырҙар йырлап, халыҡтың алҡышы һәм күҙ йәштәре солғанышында гүзәл күренеш тыуҙырып айырылдыҡ. Полк командиры бойороғона буйһоноп, беҙ Ырымбур менән Стәрлетамаҡ трактында урынлашҡан

Шотт хужалығына йүнәлдек. Ун көнлөк юл үтеп, бөтә полк тәғәйенләнгән урынға килеп етте. Был күренекле батша эшмәкәре (һәм Ырымбур вилайәте дворяндары етәксеһе) генерал Шоттың хужалығы икән. Бер нисә көндән Башҡан Зәки Вәлиди хәҙрәттәренең (1918 йылдың 6 декабрендә)340 бында киләсәге хаҡында хәбәр алынғас, уны ҡаршы алыу әҙерлеге башланды. Башҡан хәҙрәттәре янындағылар менән берлектә Шотт йортонда урынлашты. Шул уҡ кисте ул полктың бөтә офицерҙарын мәжлескә саҡырҙы. Йорттоң ҙур залында офицерҙар үҙенә тәғәйен урынды алды. Шул арала Башҡан хәҙрәттәре янындағылар һәм Ҡаҙаҡ-Ҡырғыҙ (Алаш Урҙа) вәкилдәре менән бергә342 залға инеп, полк офицерҙары менән күрешеп сыҡты. Һуңынан ошондай нотоҡ һөйләне: "Большевиктар Башҡорт иленә һәр тарафтан һөжүм итә башланы. Стәрлетамаҡ ҡалаһын баҫып алыу менән бергә уның тирә яғындағы ауылдарҙы баҫып, башҡорт ауылдарының ҡотон осоралар, халыҡты ҡыралар. Ошо ваҡиғалар айҡанлы ғәскәребеҙгә бөйөк бурыс йөкмәтелә. Илебеҙҙе, милләтебеҙҙе агрессиянан ҡотҡарыу өсөн бөтә көсөбеҙҙә һаласаҡбыҙ. Ватан һеҙҙең фиҙаҡәрлегегеҙгә мохтаж, дошманды тупрағыбыҙҙан сығарып ташлайыҡ. Иртәгә тура Стәрлетамаҡҡа хәрәкәт итәсәкһегеҙ". Вафат булған полк командиры Әмир Ҡарамышев урынына Башҡан тарафынан Муса Мортазин тәғәйенләнде. Мәжлестән һуң беҙ, офицерҙар, полкка әйләнеп ҡайтып, юл хәстәрҙәренә тотондоҡ. Иртәнсәк (7 декабрь) юлға сыҡтыҡ. Һуғыш кәрәк-яраҡтарыбыҙ бик аҙ, һәр һалдатҡа ни бары 20 патрон тура килә, бөтә полкта бер пулемет та юҡ. Ошоға ҡарамаҫтан, хәрәкәт итергә мәжбүрбеҙ. Стәрлетамаҡҡа барған юлдың яртыһында ятҡан Ергән ҡасабаһына килгәс, Стәрлетамаҡты яулаған ҡыҙылдарҙың ҡаланан тағы ла алдараҡ ятҡан Аллағыуат343

ауылынан 4 километр алыҫлыҡта урынлашҡан Покровск исемле урыҫ ауылын баҫып алыуҙары хаҡында белдек. Янбулатов командаһы аҫтындағы 2-се рота Аллағыуаттан шоссе буйлап344 урыҫтарға ҡаршы һөжүм итте, мин иһә үҙ ҡарамағымдағы беренсе рота менән Солун Айгөл ауылынан һөжүмгә күстем. Өсөнсө рота полктың хәрби шураһы ҡарары буйынса Ағиҙелдең көнбайыш ярындағы Ишембай ауылынан345 хәрәкәт итеп, ул тирәне баҫып алырға тейеш. Полк командиры ла ҡалған ғәскәр менән (дүртенсе рота) Аллағыуатҡа килде. Урыҫтарға беҙҙең хәрәкәт хаҡында мәғлүмәт барып етмәү сараһын күрҙек. Өсөнсө рота 23 сәғәттә Ишембайға һөжүм итеп, ул тирәне яулап алды, икенсе рота Аллағыуаттан Покровскиға килгән ваҡытта, таңғы сәғәт өстә, беҙ Айгөл яғынан Покровскиҙың артына сыҡтыҡ. Урыҫтар өсөнсө ротаның Ағиҙелдең төньяғына сығыу хәбәрен алғас та, бөтә полк шул тарафҡа сигенде тип уйлап, шул яҡҡа йүнәлеш алырға тейеш ине. Беҙ иһә сәғәт биштә һәр тарафтан һөжүмгә күсәсәкбеҙ. Һөжүмебеҙ тулыһынса алдан билдәләнгән план буйынса барҙы. Дошман иғтибарһыҙ ине. Өсөнсө ротаның Ишембайҙан (алдатҡыс) хәрәкәткә күсеүҙәре хаҡында хәбәр алыу менән, урыҫтар бөтә ҡеүәтен шул яҡҡа бороп, туп батареяларын да шул яҡҡа йүнәлтеп, Ишембайҙы бомбаға тота башланы. Шул арала икенсе ротаның Аллағыуат тарафынан, минең рота Айгөл тарафынан көтөлмәгән һөжүмгә күсеүен күргәс, урыҫ ғәскәрҙәре кире боролоп, беҙҙең менән һуғыша башланы. Дошмандың сигенеү юлдары киҫелгәнлектән, һуғыш бик ҡаты булды. Беҙҙең көслө һәм ҡапыл эшләнгән һөжүмебеҙ ҡаршыһында урыҫтар Аҙнай яғына йүнәлтелгән ғәскәрен һәм бөтә йөктәрен, пулеметтарын, Покровскиҙағы ҡорал һәм һуғыш кәрәк-яраҡтарын ташлап, тура Стәрлетамаҡҡа ҡаса башланы. Башҡорт һалдаттары был һуғышта үҙҙәрен ҡаһарман бер милләттең улдары икәнлектәрен бик яҡшы танытты. Бында һалдаттарыбыҙҙың һалҡын ҡанлығы, һәр егеттең үҙаллы хәрәкәт итә белеүе хайран ҡалырлыҡ дәрәжәлә ине. Бәғзе ваҡытта ҡайһы бер урыҫ ғәскәри төркөмдәренә, стратегик нығытмаларына теймәй урап үткән осраҡтарҙа был батыр егеттәр "командир ағай, быларын ҡасан ҡылыс менән тураҡлап ташлайбыҙ?" тип сабырһыҙлыҡ күрһәтә ине. Уларға "атлан, атҡа" тигән әмер биреп, ҡылыстарын ҡындан сығарып, урыҫтар өҫтөнә һөжүм итергә бойороп, күҙ алдыбыҙҙа һуғыш сәхнәһе асылған мәлдә башҡорттарҙың әле булһа боронғоса йәшәүен, тарихын ҡан менән яҙыуҙарын асыҡтан-асыҡ бер хәҡиҡәт рәүешле күрергә мөмкин ине. Бында урыҫтарҙың ике йәйәүле полктан күберәк ғәскәре булған. Улар үҙҙәренә һөжүм иткән башҡорт ғәскәрҙәренең ни бары өс рота һыбайлы ғәскәр булыуын асыҡларға ваҡыт таба алманылар. Юлда бик күп яралыларын, һуғыш припастарын, винтовкаларын ташлап ҡастылар. Беҙ уларҙы артабан ҡыуып барманыҡ, был ике полктың Стәрлетамаҡта ҡалмайынса тура Өфөгә йүнәлергә ҡарар итеүҙәре хаҡында һуңынан белдек. Ишембай тарафындағы өсөнсө ротаны ла шул уҡ юлға йүнәлтеп, Стәрлетамаҡҡа тиклем ҡыуып барҙыҡ. Стәрлетамаҡ янына килеп еткәс, беҙ ҡалаға инмәйенсә Покровск ауылына кире килеп, барыбыҙ ҙа шунда урынлаштыҡ. Һалдаттарыбыҙ ҡулдарына мул ғына ҡорал һәм припастар төшөрҙө. Ләкин Башҡортостанда (Ырымбурҙан Өфөгә һәм Златоусҡа тиклем һуҙылған) 400 саҡырымға һуҙылған фронтты бик аҙ һанлы башҡорт ғәскәре һаҡлай ине. Артыбыҙҙан һис бер ниндәй ярҙам юҡ. Шул уҡ ваҡытта ҡыҙылдарҙың Стәрлетамаҡта тулы бер төмәне (дивизия) бар. Беҙҙең һөжүм арҡаһында Өфө тарафындағы көстәрен был яҡҡа йәлеп итәсәктәре лә билдәле булды. Беҙ Ырымбур–Стәрлетамаҡ трактында ҡалмай, Ағиҙелдең төньяғындағы Усман Тереғолов командаһындағы икенсе һыбайлы полк һәм башҡа ғәскәри төркөмдәр урынлашҡан ауылдарҙың күршеһенә ерләшергә ҡарар иттек.

§61 Әхмәр һуғышы

Байтаҡ арауыҡҡа таралған был ғәскәрҙең Стәрлетамаҡ – Әүжән тракты тирәһендәгеһе Усман Тереғоловтың командалығы аҫтында ине. Беҙ ҙә уларға күрше урынлаштыҡ һәм беҙгә "большевиктарҙы был тракт өҫтөндә урынлашҡан Әхмәр

ауылынан һәм уның тирәһенән ҡыуырға" тигән бурыс йөкмәтелде. Бының стратегик әһәмиәте бик мөһим ине. Өсөнсө ротаны Аллағыуатта ҡалдырып, ҡалғандарыбыҙ ошо ҡасаба менән Әхмәр араһындағы ауылдарҙа урынлаштыҡ һәм бында бер ай самаһы ваҡыт ҡыҙылдарҙың ваҡ һөжүмдәрен кире ҡағыу менән мәжғүл булдыҡ. Тик Әхмәргә яҡынламаныҡ, сөнки унда ҙур көс тупланғайны. Уларға һөжүм итеү өсөн уңайлы форсат көттөк. Улар ҙа беҙҙең яҡынламағанды күреп, Әхмәргә һөжүм итеү уйыбыҙ юҡ икән тип уйланы, буғай. Шул арала төндәрҙең береһендә һөжүм итеп, уларҙы ауылдан ҡыуып сығарыу форсатын таптыҡ. (1919 йылдың 15 ғинуарында булһа кәрәк)346. Сәлих ауылынан аҡшамдағы сәғәт һигеҙҙә сығып, дошманға һиҙҙермәй, төрлө юлдарҙан төнгө сәғәт берҙә Әхмәр ауылы менән Стәрлетамаҡ араһындағы трактҡа сыҡтыҡ. Дошмандың Әхмәр ауыдындағы көсө бер полк йәки ике батальон тирәһе булғандыр. Беҙ уларға иртәнге таңда һөжүм итәсәкбеҙ. Килгән арала ғәскәребеҙҙе ике сәғәт тирәһе ял иттереп алдыҡ. Покровка һуғышынан һуң ҡыҙылдар аҙ һанлы булыуыбыҙҙы белгән хәлдә лә бик ҡурҡа ине. Беҙ ҙә бынан файҙаланырға тырыштыҡ. Иртәнге сәғәт өстә урыҫ полкы урынлашҡан Әхмәр ауылына яҡынлаштыҡ. Ауылдың уң һәм һул яғында урынлашҡан урыҫ ауылдары халҡы башҡорттарҙы дошман күргәнлектән, урыҫ ғәскәрен тар-мар итеүҙе беҙ үҙебеҙҙең мөҡәддәс вазифабыҙ итеп күрә инек. Ауылға яҡынлашҡас, үҙ белдеге менән сигенгән һәр һалдаттың шунда уҡ атып үлтереләсәге хаҡында иғлан иттек. Ауылға яҡынлашып килеүебеҙҙе һиҙгән дошман һаҡсылары беҙгә дүрт яҡтан пулеметтан ут асты. Ләкин улар беҙҙең көтөлмәгән һөжүмебеҙ хаҡында ныҡ һуңлап белделәр. Һалдаттары кейенеп, винтовкаларын алып, урамға сыҡҡан арала беҙ урамдарға ингәйнек инде. Дошмандың ике батальоны булыуын белдек. Әхмәр ауылы улар өсөн бер һәләкәт майҙанына әүерелде, беҙ уларҙы һарыҡ көтөүе кеүек һуйҙыҡ. Иртәнге сәғәт алтыға тиклем дауам иткән был урам һуғышында ҡотола алған ҡыҙылдар трактҡа сығып, тура 15 саҡырым алыҫлыҡтағы Стәрлетамаҡҡа ҡасты, иҫәпһеҙ мәйет һәм яралыларҙан башҡа, ҡоралдарын, пулеметтарын, санитар госпиталдәрен бөтә йыһаздары менән ҡалдырҙылар. Был мөкәммәл госпиталь йыһаздары беҙҙең өсөн иң кәрәкле бер табыш булды.

Урыҫтарҙың күбеһе Стәрлетамаҡҡа күлдәкһеҙ, хатта ҡышҡы ҡар өҫтөнән яланаяҡ ҡастылар. Беҙ иртәнсәк ҡыҙылдарҙан ҡалған ҡорал һәм һуғыш кәрәк-яраҡтарын йыйыу менән мәшғүл булдыҡ. Алыш ҡаты булыуға ҡарамаҫтан, беҙҙән ни бары дүрт кеше һәләк булды, 15 кеше яраланды. Үлгәндәрҙе мосолманса дәфен иттек. Шул көндә үк Стәрлетамаҡтағы урыҫ ғәскәре 20 меңгә яҡын ҡеүәт һөм тупсы батареялар менән Аллағыуат һәм Юлдаш ауылдары аша беҙҙең идара үҙәге булған Сәлих ауылына һөжүм итте. Тик 700 һалдаттан торған беҙҙең һыбайлы полк үҙе генә уларға ҡаршы тора алмаҫ ине. Беҙгә башҡорт корпусы командалығы тарафынан бынан 80 саҡырым алыҫлыҡтағы Әүжән заводына табан сигенергә әмер бирелгәйне. Усман Тереғолов та үҙ ғәскәре менән Петровск һәм Маҡар ауылынан эскәрәк сигенергә тейеш, сөнки төньяҡ флангтан (Өфө тарафы) булһынмы, көньяҡтан (Аллағыуат – Ырымбур яғы) булһынмы, дошман һөжүменә бөтөнләй асыҡ ҡалғайныҡ. Беҙгә тау араларына, хәүефһеҙ урындарға сигенеү кәрәк булды. Сигенеү хаҡындағы әмерҙең Советтар менән Маҡарҙағы солох төҙөү тураһындағы һөйләшеүҙәргә бәйле булыуын да һиҙҙем".

§62 Йөрәктау – Яңырыҫ һуғышы

Артабан йөҙбашы Исмәғил Шәриф был ваҡиғанан һуң 6 ай үткәс аҡтар яғында ҡалған Муса Мортазин менән бергә яңынан Петровск тирәһенә килеп ҡыҙылдарға ҡаршы һуғышыуҙары хаҡында һөйләй. Был ваҡытта Муса Мортазин беренсе һыбайлы полк, Исмәғил Шәриф иһә икенсе һыбайлы полк менән командалыҡ иткән. Ул түбәндәгеләрҙе яҙа: "Минең полкымда ни бары 300 һалдат ҡалғайны, әммә улар бик мәргән, ҡылыс менән оҫта һуғышыусы ҡаһарман егеттәр ине. Ике йәйәүле полк һәм

бер һыбайлы батальон, йәмғеһе 5 меңгә яҡын ҡеүәт менән Стәрлетамаҡ янындағы, был ҡаланың алғы яғындағы Ағиҙел тарафында урынлашҡан Йөрәктау ҡәрйәһенән үтеп Яңырыҫ (Янрус) ҡәрйәһенә һөжүм иттек347. Маҡсатыбыҙ – Петровскиҙы баҫып алыу, Яңырыҫ менән Стәрлетамаҡ – Петровск тракты араһындағы фронтты тота инек. Мин үҙ полкым менән Петровскиҙан ике саҡырым алыҫлыҡта булған урман эсендә урынлаштым. Муса Мортазин да (беренсе полк менән) минең һул тарафымда ерләшкән. Беҙ көсө беҙҙекенән күпкә артыҡ булған дошманды, ғәҙәттәгесә, көтмәгәндә тиҙ һөжүм итеп еңеү мөмкинселеге эҙләй инек. Урыҫ ғәскәре асыҡ ерҙән хәрәкәт итә. Минең полк тулыһынса урман эсенә йәшеренгән. Ҡыҙылдарҙың мөһим бер өлөшө үтеп киткәс, урмандан сығып өҫтәренә ташландыҡ, туранан-тура һөңгө һәм ҡылыс һуғышы башланды. Улар пулеметтарын ҡулланырға ваҡыт таба алманылар, 55 үлек, 200 яралы, 100-гә яҡын әсир ҡалдырып, Яңырыҫ ауылына сигенделәр. Урыҫ полкы был ауыл янында ҙур окоптар ҡаҙғайны. Инде дошман ошо окоптарына кире килеп, шунда нығынды. Йөрәктау яғында урынлаштырылған туп батареялары ла беҙҙе утҡа тота башланы. Беҙ еңелсә ҡаршылыҡ күрһәтеп, дошмандың иғтибарын йәлеп итеп торҙоҡ. Шул ваҡыт Муса Мортазин дошмандың уң флангыһы артына сыҡты. Беҙ ҙә һул флангынан окоптар артына сыҡтыҡ. Дошман ҡаршыһындағы фронт һыҙығы асыҡ ҡалһа ла, ике флангынан һөжүм итә инек, ә ҡыҙылдар, бөтә фронт башҡорт ғәскәрҙәре тарафынан биләнгән тип уйлап, иҫәпһеҙ юғалтыуҙарға дусар булып, ҡоралын ташлап Йөрәктауҙағы резерв ҡеүәттәре менән берләшеү маҡсатында сигенә башланы. Генерал Церетели 24-се казачий полк менән Петровскиҙан сығып, беҙҙән төньяҡтағы юл менән Йөрәктауҙың төньяғындағы Мораҡ348 ауылына һөжүм итеп, Йөрәктау артына сыҡҡан икән. Большевиктар Ағиҙелдең көнбайышындағы барлыҡ әйберҙәрен ташлап, тарҡау хәлдә Стәрлетамаҡҡа кире сигенергә мәжбүр булды.

§63 Сәрмән һуғышы

Фронт һыҙығы булыуға ҡарамаҫтан, был һуғыш күберәк партизан һуғышын хәтерләтте, сөнки фронт үҙгәреүсән ине. Уң һәм һул яғыбыҙҙағы аҡ урыҫ ғәскәрҙәре сигенгәнлектән, беҙгә лә ғәскәр командалығынан Ағиҙел йылғаһының юғары ярында урынлашҡан Сәрмән ауылына сигенергә әмер килде. Ул саҡта минең полкым өс эскандрондан тора ине. Беренсе эскандронда корнет Ғәбдерәхимов, икенсе эскандронда корнет Учаров, өсөнсөһөндә Атъетәров командалыҡ итте. Ә аҙыҡ-түлек менән тәьмин итеүсе, йөк ташыусы частәрҙең командиры Вәғизов булды. Барыһы ла арыҫлан кеүек йәш офицерҙар. Былай мәғәнәһеҙ рәүештә сигенергә мәжбүр иткән бойороҡтар беҙҙең асыуыбыҙҙы ҡабартты, сөнки сигенеүҙәр һәр ваҡыт беҙҙең уң һәм һул тарафыбыҙҙа торған аҡ урыҫ һәм казак ғәскәрҙәренең йомшаҡлығынан килеп сыға ине. Ә большевиктар һөжүм итеп алға килеүен дауам итте. Беҙ Сәрмәндә уларға ҡаршы һуғыш асырға булдыҡ. Бында беренсе һәм икенсе полктар бергә ине, улар Муса Мортазин командылығында кавалерия бригадаһына берләштерелгәйне.

Йөрәктау һуғышынан бер аҙ һуңыраҡ беҙ Ағиҙелдә Әүжән заводында урынлаштыҡ. Ә ҡыҙылдар иһә Иҙелбашы (Белорецк) заводын һәм Тамъян-Ҡатай кантонынның үҙәге булған Сәрмән ҡасабаһын баҫып алғайнылар. Был иһә Ағиҙел буйынан ситкә алып ташланасаҡбыҙ тигән һүҙ. Бригада командиры йөҙбашы Мортазин ҡыҙылдарҙы Сәрмәндән ҡыуып сығарырға ҡарар итте. Дошман һөжүмен көтөп тормай, үҙҙәренә һөжүмгә күсеү беҙҙең беренсе һәм икенсе полктар өсөн бер ҡағиҙәгә әйләнгәйне. Беҙ был юлы ла шулай итергә булдыҡ. Ике полк та төнгө 23 сәғәттә Әүжәндән ҡуҙғалдыҡ. Беҙгә бик яҡшы билдәле булған юлдарҙан таңғы сәғәт дүрттәрҙә Сәрмәндең тап ҡаршыһындағы Шығай исемле башҡорт ауылына349 килдек. Ҡасабаның Иҙелбашынан килгән шоссе юлына бер эскадрон ғәскәр ебәреп, Иҙелбашынан Сәрмәндәге урыҫтарға ярҙам килмәһен өсөн, юлдарын киҫтек. Әсир төшкән ҡыҙылдарҙан Иҙелбашында Советтарҙың латыш матростарынан, коммунист партияһы ағзаларынан торған частәре урынлашыуын, Сәрмәндә иһә мадъярҙарҙан

торған йәйәүле дивизия, дала туплы бер батарея, ауыр туплы бер батарея һәм бронялы автомобилдәр булыуын белдек. Беҙҙең ике полкта ни бары ике туп бар, уларҙы Шығай ауылы артындағы урман араһында урынлаштырҙыҡ һәм, ике полкты ла йәйәүләтеп, Сәрмәнгә һөжүм иттек. Беҙҙең көтөлмәгән һөжүмебеҙгә дусар ителгән мадъяр полктары ауылды ҡалдырып, яҡындағы урманлыҡҡа йәшеренде. Тупсыларыбыҙ дошман фронтының уң яғында урынлашҡан дала туплы батареяһына ҡаршы ут асып, тулыһынса тар-мар итте. Дәһшәтле ҡанлы һуғыш иртәнән кискә тиклем барҙы. Ниһәйәт, беҙҙең һул флангылағы роталарыбыҙ, тынып ҡалырға мәжбүр ителгән дала туплы батарея урынлашҡан ерҙән, йәғни дошмандың уң флангыһынан уның артына сығып, Сәрмәнде баҫып алды. Ҡыҙылдарҙың ауылдағы йөктәрен тулыһынса ҡулға төшөрҙөк. Бөтә мадъярҙар һәм улар менән бергә булған урыҫ матростары, төн ҡараңғылығынан файҙаланып, Иҙелбашына (Белорецк) ҡасты. Дивизияға ҡаршы ике полк, ике батареяға иһә ни бары ике туп ҡаршы ҡуйғайныҡ. Ошо тирәлә тыуып-үҫкән Мортазин һуғыш майҙанын яҡшы белгәнлектән һәм урындағы халыҡ та беҙгә ярҙам иткәнлектән, юғалтыуҙарыбыҙ аҙ булды. Өҫтәүенә һуғыш припастары, аҙыҡ-түлек ҡаҙандыҡ. Дошмандың күбеһен юҡ иттек. Мадъярҙар Сәрмәндәге еңелеүҙәрен бер ҡасан да онота алмаҫ. Ләкин, ни эшләмәк кәрәк, башҡорттар еңеү ҡаҙана, ян-яҡта аҡ урыҫтар һәм казактар туҡтауһыҙ сигенә һәм беҙҙе яңғыҙ ҡалдырып китәләр. Был юлы ла уң яғыбыҙҙағы Колчак ғәскәрҙәре һаҡлаған ерҙәрен ташлап китте".

Башҡорт полктарының Арғаяш, Аҡтүбә, Орск фронтындағы һуғыштарының тарихы мәмләкәттә "Башҡорт ғәскәре идараһы" янындағы бер комитет тарафынан мөкәммәл рәүештә яҙылған. Айырыуса беренсе һыбайлы полк Стәрлетамаҡ фронтындағы Покровскиҙа еңеүгә өлгәшкән ваҡытта беренсе һәм икенсе йәйәүле полктарыбыҙ Ҡараҡыпсаҡ улусында Юлдыбай һәм Бикбулат ауылдары тирәһендә ҡыҙылдарҙың бер һыбайлы полкын тар-мар итеп, уларҙың бөтә ҡоралын, һуғыш кәрәк-яраҡтарын, бөтә башҡа әйберҙәрен ҡулдарына төшөргәндәр. Беренсе ҡыҙыл армияның өсөнсө бригадаһы Башҡортостан сигенән ситкә сығарылды. Тик Ғәлимйән Таған командаһындағы өсөнсө полк фронттың төньяҡ өлөшөн тотоп торҙо, ул Каппель ғәскәре составында булды. Был полктың фронтты һаҡлап тороуҙа күрһәткән батырлыҡтары ла хайран ҡалырлыҡ ине. Ғәлимйән Таған һуңынан Венгрияла йәшәне һәм хәтирәләрен яҙҙы. 1948 йылдың 29 июнендә Германияла Гамбургта вафат булды. Ҡағыҙҙары ҡыҙылдар тарафынан баҫып алынған Будапештта ҡалды. Ҡулымда Исмәғил Шәриповтың беренсе һәм икенсе һыбайлы полктарҙың һуғыштары хаҡындағы ошо хәтирәләре бар.

## §64 Советтар менән килешеү

Исмәғил Шәрипов тасуир иткән был ваҡиғаларҙы 1919 йылдың ғинуар башында бөтә фронттар буйлап ғәскәребеҙҙе тәфтишләп йөрөгәндә үҙ күҙем менән дә күрҙем. Был тәфтишләп йөрөүемдән әйләнеп ҡайтҡас, 11 февралдә, Ҡана заводына хөкүмәт ағзалары һәм ғәскәр офицерҙары саҡырылып, солох мәсьәләһе тағы бер тапҡыр тикшерелде. Был ваҡытта Мәскәүҙән һәм башҡа мәмләкәттәрҙән байтаҡ гәзиттәр килгәйне. Колчак ставкаһына ебәргән вәкилдәребеҙ ҙә әйләнеп ҡайтты, бәғзеләренең ҡулға алыныуы хаҡында ла

белдек. 16 ғинуарҙа Себер хөкүмәтенә һәм чехтарҙың рәйесе Стефаник, Богдан Павло, Мздек, Гайда менән күрешеү өсөн поручик Ганишев менән Һиҙиәт Сәғәҙиевты ебәргәйнек. Ләкин 23 ғинуарҙа көнбайыш Себерҙә һәм Уралда башҡорт һәм ҡаҙаҡ ғәскәре кеүек мосолман ғәскәренең берләшеүе ҡәтғи тыйыласағы, уларҙың тиҙ арала тарҡатыласағы, бөтә хәкимиәттең генерал Колчак менән Дутов ҡулына күсеүе хаҡында әмерҙәр сыҡты һәм ҡаҙаҡтар менән башҡорттарға ҡорал биреү ҡәтғи тыйылды. Бәғзе офицерҙарыбыҙ Орскиҙа һәм Силәбелә тотолоп ҡалды. Дутовҡа дошман күренгән Ырымбур казачий офицеры Богданов командаһындағы ғәскәри

часть, йәнәһе, беҙҙең менән берләшеү өсөн, Башҡортостанға һыйынғайны. Ләкин был бер провакация ғәләмәте ине. Беҙ уларҙы тар-мар итеп тарҡаттыҡ. Ниһайәт, 11 февралдә Ҡана заводында хөкүмәт ағзалары һәм ғәскәр офицерҙары тағы бер тапҡыр йыйылып, солох ҡороу мәсьәләһе хәл ителде. Большевиктар менән аңлашыуҙы ҡабул итмәгән офицерҙарыбыҙға Себергә китергә рөхсәт бирелде. Улар араһында юғарыла исеме телгә алынған Шаһибәк Үзбәков менән Ғәни Ҡарамышевты хөрмәтләп, һаулыҡ теләп, оҙатып ебәрҙек. Генерал Ишбулатов, полковник Әхмәров кеүектәр беҙҙән айырылырға теләмәнеләр һәм 18 февралдә сәғәт 10-да бөтә ғәскәр менән Советтар тарафынан күсеүебеҙ хаҡында 5-се Совет армияһы етәкселегенә белдерҙек. Был ҡарар 15 февралдә ғәскәргә еткерелде, өс көн эсендә башҡарыласаҡ күсеү хәрәкәтенә ҡаршы провокациялар булмаһын өсөн махсус саралар күрергә лә ҡарар иттек. Колчак иһә 15 февралдә Силәбелә булған сағында унан һуғыш кәрәк-яраҡтары талап иткән Башҡортостан вәкилдәренә "Башҡортостан Йөмһүриәтенең" бөтөрөлөүе, хөкүмәте таратылып, ағзаларының хәрби хөкөмгә тарттырыласағы, ғәскәренең дә тарҡалыуы хаҡында әмерҙәр биреүен рәсми рәүештә белдерҙе. Вәкилдәребеҙ был хаҡта шунда уҡ хөкүмәткә хәбәр ебәрҙе. Беҙ ҙә былай булғас милли мөхтәриәтебеҙҙе ҡыҙылдар менән берлектә һаҡлап алып ҡалыуҙан башҡа юл ҡалмауын аңланыҡ һәм улар яғына күсеүебеҙҙе белдереп, Советтарға тағы ла вәкилдәр ебәрҙек.

Ғәскәрҙе тәғәйенләнгән көндә һәм сәғәттә Советтар тарафынан күсереү еңел эш түгел ине. Башҡорттар большевиктарға һис ышанмай, ҡоралһыҙландырыуҙарынан ҡурҡа. Быны да булыуы ихтимал, әммә бүтән сара юҡ. Ғәскәрҙең күҙ алдында ҡыҙылдар яғына беренсе булып үҙем күстем, янымда 10 кеше бар ине. Һуңынан бөтә полктар берәм-берәм күстеләр. Унан Ырымбурға килеп, беренсе Совет армияһының командиры менән күрештем. Бер аҙҙан Ҡаҙағстан вәкилдәре лә килеп етте, етәкселәре шағир һәм мөхәррир Әхмәт Байторсон ине. Минең янымда ул ваҡытта штаб етәксеһе вазифаһын үтәгән Ильяс Алкин да булды. Беҙҙең Өфөләге вәкилдәребеҙ доктор Ҡулаев, Муллайән Халиҡов Мәскәүгә киткәйнеләр. Мин ғәсәкәребеҙҙең күсеү эштәрен тикшереү маҡсатында бер нисә урынға барып килергә булдым. Ләкин ҡыҙылдар кисекмәҫтән Мәскәүгә китеүемде талап иттеләр. Ниһайәт, Ильяс Алкин менән бергә Мәскәүгә юлға сыҡтыҡ. Килер-килмәҫ Сталин менән осраштыҡ. Совет хөкүмәте менән Башҡортостан вәкилдәре араһында 22 мартта бер Килешеүгә ҡул ҡуйылып, 23 мартта Советтарҙың үҙәк рәсми газетаһы булған "Известия"ла баҫылып сыҡты.

## §65 Советтар яғына сыҡҡан Башҡортостандың тәүге көндәре

Күсеү мәсьәләһе, Советтарҙың имзалы Килешеүҙәренә ҡарамаҫтан, ҡаршылыҡһыҙ хәл ителә алманы. Большевиктар үҙҙәренең ише булмағандарға ныҡлап ышанмай, быны беҙ беренсе көндәрҙә үк аңланыҡ. Беҙ Мәскәүҙә саҡта Башҡортостанда бик ҡайғылы ваҡиғалар башланды. 21 февралдә Темәстә Башҡортостан съезы йыйып иҫке хөкүмәтте таратып, Совет ысулында "инҡилап комитеты" (Ревком) ойошторолдо. Ул 12 ағзанан тора ине: 1. Зәки Вәлиди, 2. Әүхәҙи Ишмырҙин, 3. Илдархан Мутин, 4. Сәйетгәрәй Мағазов, 5. Гәрәй Ҡарамышев, 6. Аллабирҙе Йәғәфәров, 7. Таһир Имаҡов, 8. Яхъя Салихов, 9. Муллайән Халиҡов, 10. Абдулла Әҙһәмов, 11. Фәтих Төхфәтуллин, 12. Ильяс Алкин. Араларында бер коммунист та булмаған, тотошлай элекке хөкүмәт ағзаларынан торған "инҡилап комитеты"н большевиктар шөбһә менән ҡабул итте. Башҡорт ғәскәренең Советтар яғына сығыуы аҡ урыҫтар, казактар һәм Колчак мөхитенә емергес дәрәжәлә ауыр тәьҫир итте. Дутов шунда уҡ Орск тирәһенән сигенде. Колчак Ырымбур казактарының Троицк ҡалаһында тупланған дөйөм конгресына килгәйне. Бында уға Башҡорт хөкүмәтен һәм ғәскәрен тарҡатыу хаҡында әмер биреп ҙур хата яһауын тураһы менән әйткәндәр. Ул да башҡорт мәсьәләһендә хата эшләүен танып, был эште төҙәтергә вәғәҙә биргән һәм яңы башҡорт хөкүмәте ҡорорға рөхсәт иткән. Ләкин бының менән

файҙаланырға теләгән кеше табылмаған. Әбделхәй Ҡорбанғәлиев менән ҡустыһы Борһан Колчактың тәҡдименә ризалыҡ бирһәләр ҙә, уларға ҡушылырға теләүселәр булмаған. Ләкин башҡорт ғәскәренең бер өлөшөнә ҡарата ҡыҙылдар тарафынан ышанмаусылыҡ күрһәтеү, шул нигеҙҙә килеп сыҡҡан аңлашмаусылыҡ һәм ҡоралһыҙландырыу ваҡиғаһы Колчак агенттарына яҡшы форсат бирҙе. Был мәсьәләнең асылы шул: үҙәге Ырымбурҙа булған беренсе Совет армияһының командующийы бер әрмән партизаны, мосолмандарҙың дошманы ине. Ә беҙҙең ғәскәр ҡыҙылдарға күскән урын – Ҡыҙыл Мәсет тирәһе – үҙәге Өфөлә урынлашҡан 20-се Пенза дивизияһы тарафынан баҫып алынғайны. Уның командующийы Воробьев бер фанатик булып сыҡты. Дивизияның идара мәркәзе Стәрлетамаҡта ине. Ҡыҙыл Мәсеттә иһә был дивизияның өсөнсө бригадаһы урынлашты, командиры Зеленков исемле бер илбаҫар. Улар башҡорт ғәскәренең шул мәлдә билгән урындарында ҡалыуҙан ҡурҡтылар. Шуның өсөн биргән һүҙҙәрен боҙоп, башҡорт ғәскәре командалығы (штаббашвойско) янында булған беренсе һәм дүртенсе полктарҙы ҡоралһыҙландырырға тырыштылар. Командирҙарыбыҙ яңынан һуғыш башлау мөмкинлеге ҡалмағанлыҡтан һәм беҙ ҙә был мәлдә Мәскәүҙә булғанлыҡтан, талапҡа буйһонғандар. Уларҙы Стәрлетамаҡҡа алып килгәндәр. Халыҡ һаҡлаусыһыҙ ҡалған, һалдаттар йәберләнгән. Темәс тирәһендә аҡтарға яҡын ерҙә ҡалған полктар был хәбәрҙе ишетеү менән ҡоралдарын бирмәйәсәктәрен ҡәтғи рәүештә белдергәндәр. Уларҙың башында беренсе һыбайлы полк торған. Был полк ҡыҙылдар яғына күсеү менән шундуҡ аҡтарға ҡаршы һуғыш башлау өсөн ҡыҙылдарҙың Смоленск полкы менән бергә фронт тота ине. Беренсе һыбайлы полктың командиры Мортазин бик ҡаһарман, йәш бер унтер-офицер ине. Әбйәлил ауылын казачийҙарҙан өс тапҡыр яулап алып, өсөһөндә лә һаҡлау бурысын Смоленск полкына тапшырған. Ләкин был полк һалдаттары ауыл халҡын талауҙан башҡа эш белмәгән һәм казачийҙар һөжүм итер-итмәҫтән сигенер булғандар. Шул арҡала Мортазин менән араларында низағ сыҡҡан. Ҡыҙыл полк командиры Мортазиндың полкын һәм Темәстәге башҡа башҡорт ғәскәрҙәрен ҡоралһыҙландырыу ниәте менән тылға саҡырған. Быны аңлаған Мортазин казачийҙар менән бәйләнешкә инеп һөйләшә башлаған. Стәрлетамаҡта ҡоралһыҙландырылған ғәскәрҙең командирҙарынан да хәбәр алған, улар ҙа "ҡоралығыҙҙы бирмәгеҙ" тип кәңәш иткәндәр. Ниһәйәт, Мортазин ҡыҙыл полк менән Әбйәлилдә бәрелешеп, аҡтар тарафына сығып киткән. Был хәл беҙҙең Мәскәүҙәге һөйләшеүебеҙгә һәм ҡоралһыҙландырылған ғәскәрҙәрҙең хәленә насар тәьҫир яһаны. Совет ғәскәре Яйыҡ буйынан сигенде. Составында Смоленск полкы ла булған өсөнсө бригада ул тирәләге башҡорттарҙы бик ныҡ йәберләне, был иһә Темәстә ҡалған ғәскәрҙе лә аҡтар яғына кире сығып, Мортазинға ҡушылыуға этәрҙе. Ҡыҙылдар сигенер алдынан бер нисә башҡорт менәүәрен дә үлтерҙе. Араларында Шәйехзада Бабич менән мөхәррир Абдулла Иркәбай ҙа бар ине. Улар Йылайыр тигән ерҙә урыҫтар ҡулына эләккән. Темәстәге хөкүмәт учреждениелары ла Стәрлетамаҡ яғына хәрәкәт итә ине. Типографияны һәм ҡағыҙҙарыбыҙҙы Шәйехзада менән Абдулла Иркәбай бер төркөм һалдат ярҙамында күсереү менән мәшғүл булдылар. Йылайыр (урыҫсаһы Преображенский) заводында, ҡыҙылдар тарафынан ҡулға алынып, икеһе лә үлтерелде. Был беҙҙең ҡыҙылдар тарафына күсеүебеҙҙең иң беренсе фажиғәһе булды, сөнки Шәйехзада бик һөйкөмлө бер милли шағир ине. Татарса һәм башҡортса гүзәл шиғырҙар, башҡа әҫәрҙәр нәшер итте.

"Ревком" март уртаһында Темәстән Ҡыпсаҡ Етеырыу кантонындағы Мораҡ ауылына ташынды. Урыҫтар, Мортазиндың аҡтар тарафына күсеүен "ревком" әмере буйынса эшләнде, тип иҫәпләгәнлектән, 20-се дивизия менән "Ревком" араһы бик киҫкен ине. Урыҫтар "Ревком"ды һаҡлаған ғәскәри төркөм ҡоралын тартып алырға тырышһа ла, "Ревком" ныҡ торҙо. Буйһонған ғәскәргә тейелмәһен, тигән мәғәнәлә Мәскәүҙән әмер ебәрттек. "Ревком" ҡулында аҙыҡ та күп ине. Һалдаттарҙы туҡландырыу өсөн ҡыҙылдарҙан ярҙам һорау мохтажлығы булманы. Башҡорт полктары ярҙамына ҡаршы тиҫкәрелек күрһәткән һәм аҙаҡ сиктә Мортазинды кире аҡтар яғына сығырға этәргән ҡыҙылдар бер ни тиклем сигенделәр. Улар сигенгәндән

һуң Мортазин ғәскәренә ҡушылған башҡорттар күбәйҙе. Полкты һыбайлы бригадаға әүерелдереү өсөн ул аҡтарҙан ҡорал алыуға ла өлгәшкән. Аҡ ғәскәр ул арала Өфөнө яулап алды. Башҡортостан хөкүмәте шул уҡ Ҡыпсаҡ Етеырыу кантонының Ырымбурҙан 90 саҡырым төньяҡта урынлашҡан Мораптал ауылына ташынды. Был ваҡытта 22 мартта Мәскәүҙә Килешеү имзаланғанлыҡтан һәм ҡыҙылдарҙың хәле хөртәйеп, һәр ваҡыт сигенгәнлектән, уларҙың башҡорттарға ҡарата тәкәбберлеге кәмене. Мәскәү хөкүмәте ҡыҙыл ғәскәр тарафынан башҡорт ауылдарынан таланған әйбер һәм мал хаҡының иҫәбен алырға тәҡдим итте. "Ревком" быны тулыһынса иҫәпкә алып, Мәскәүгә ебәрҙе. Мин уны Лениндың ҡулына үҙем тапшырҙым. æур сумма ине ул. Ленин был зарарҙы тулыһынса түләргә әмер бирҙе. Ләкин, алда аңлатҡанымса, был аҡсаны таланған башҡорттарға таратып биреү һылтауы менән Совет хөкүмәте үҙ файҙаһына пропаганда эшләргә тотондо һәм шул арҡала Мәскәү менән Башҡортостан араһында тәрән ҡаршылыҡтар барлыҡҡа килде.

Апрель аҙаҡтарында мин Мәскәүҙән Башҡортостанға ҡайттым. Бөтә мәмләкәтебеҙ аҡтар ҡулына күскәйне. "Ревком" бөтә ғәскәре менән Быҙаулыҡ өйәҙенең Тоцк (Туҡ) ҡасабаһына күсенде. Мин килгәс, Пенза губернаһының Саранск ҡалаһына күсендек. 20-се дивизия ҡарамағында ҡалған ғәскәребеҙҙең Стәрлетамаҡта булғандарының 75 процентына өйҙәренә таралыу мөмкинлеге бирелгәнлектән, полктарға һалдат йыя алдыҡ. 1 майҙа Саранскиға килдек. Бик йонсоғайныҡ.

Башҡортостандың аҡтар тарафынан баҫып алыныуы илдең урыҫ казачийҙары тарафынан тағы бер тапҡыр таланыуына шарт тыуҙырҙы. Тик унда Мортазиндың булыуы халыҡҡа бер аҙ терәк булды, сөнки ул ғәскәре торған ерҙәрҙә халыҡты ҡурсаланы. Ләкин төньяҡ Башҡортостанда хәл мөшкөл ине, сөнки һаҡ юҡ. Был яҡта торорға тейеш булған йөҙбашы Ғәлимйән Таған етәкселегендәге Өсөнсө йәйәүле полк беҙҙең менән ҡыҙылдар тарафына күсмәне. Колчак 9 февралдә, беҙҙең ҡыҙылдар яғына күсеүебеҙҙән бер нисә көн алда, был полкты таратыуға өлгәшкән. Таған беҙгә Нәзиров исемле бер офицерҙы ебәреп, артабан ни эшләргә кәрәклеген һорағайны. Ҡыҙылдар менән һөйләшеүҙәр алып барыуыбыҙ хаҡында белдерҙек. Ләкин күсеү ваҡытыбыҙҙы тәғәйен белдереп ебәргән башҡа бер офицерыбыҙ аҡтар тарафынан юлда ҡулға алынған. Арабыҙҙа ҙур ҡаршылыҡтар булмаһа, һуғыша-һуғыша беҙгә килеп ҡушылырға, бик булмаһа, полкты тарҡатырға әмер биргәйнек. Таған был әмерҙе алмаған. Колчак, әҙерлектәребеҙ хаҡында белгәс, беҙҙең совет ғәскәре менән берләшеүебеҙҙән 2-3 көн алда Өсөнсө полкты тарҡатырға тип әмер биргән. Һалдаттарға урыҫ полктарына ҡушылырға бойорған булһа ла, бик аҙы ғына ҡушылған. Башҡалары винтовкаларын алып өйҙәренә таралған. Ул саҡта полкта ни бары 670 кеше бар ине. Таған хәтирәләрендә бөтәһен дә большевиктарҙан трофей сифатында яулап алған ҡоралдарын, шул иҫәптән 29 пулеметты, 150-гә яҡын тачанка һәм арбаларҙы, шул тиклем үк атты, бөтә ҡамыт-ыңғырсаҡтары менән бергә урыҫ ғәскәренә бирергә мәжбүр булғанда илауын яҙған. Таған үҙе, полкынан, һалдаттарынан һәм офицерҙарынан айырылғандан һуң, Колчак ғәскәренә әмер еткереүсе офицер сифатында хеҙмәт иткән. ул Алыҫ Көнсығышҡа тиклем китәсәк, был хаҡта һүҙ һуңыраҡ булыр. Ҡыҫҡаһы, төньяҡ Башҡортостан, Табын, Көҙәй, Дыуан кантондары, уларҙы яҡларлыҡ һис кем булмағанлыҡтан, ҡыҙылдарҙан да, аҡтарҙан да бик күп ыҙа сикте.

Шул ваҡытта Көнсығыш фронты командующийы Фрунзе менән һөйләшеп, Саранскиҙан китмәҫтән алда уҡ, бер вәкилдәр комитеты (Совет уполномоченных) ойоштороғайным. Улар Беренсе һәм Бишенсе армияларҙың дивизиялары, бригадалары, полктары янында булып, бер яҡтан, халыҡты яҡлау, икенсе яҡтан был ғәскәри частар менән халыҡ араһында бәйләнеш тәьмин итеү вазифаһын үтәргә тейеш ине. Улар үҙҙәренең бурысын үтәне.

Саранскиға килгән сағыбыҙҙа, юғарыла әйтеүемсә, бик йонсоғайныҡ. Барабыҙ ҙа, айырыуса һалдаттарыбыҙ, бер ни тиклем ваҡыт ял итеүгә мохтаж инек. Беҙ бында "Ревкомда" бер ни тиклем үҙгәрештәр индерҙек. Башҡортостан хөкүмәтенең рәйесе доктор Ҡулаев сәйәси эштән ситләшергә һәм ғаиләһе янына ҡайтырға теләүен

белдерҙе. Беҙ ҙә быға ҡаршы килмәнек. Урынына Харис Йомағоловты һайланыҡ. Харис Беренсе башҡорт ҡоролтайында Кәмәлек башҡорттары вәкиле булды, ағаһы Йыһангир кеүек үҙе лә бик ғәййәр бер милләтсе ине. 1918–1919 йылғы ҡышта коммунистар фирҡәһенә яҙылғайны, уларға яҡын булды һәм Мәскәүҙә мосолман комиссарлығында эшләне. Офицер ине.

Мин элек етәкселек иткән "Башҡортостан ғәскәре идараһы" (Башкирское войсковое управление) исемен үҙгәртеп, "Башҡорт Хәрби халыҡ комиссарлығы" (Башкирский военкомат) тип аталды һәм тағы ла мөкәммәлерәк бер хәлгә килде. Саранскиҙа иң мөһим эшебеҙ – ғәскәрҙе тәртипкә килтереү ине. Үрҙә әйтеүемсә, әүәлге ғәскәрҙең ни бары 25 проценты ҡалғайны. Уларға Мәскәүҙән етерлек миҡдарҙа яңы ҡорал, кейем һөм башҡа кәрәк-яраҡ килтерҙем. Совет хөкүмәте менән төҙөлгән килешеү буйынса Башҡортостанда бер йәйәүле башҡорт армияһы (первая башкирская стрелковая армия) һәм бәғзе һыбайлы ғәскәри частәр ойошторолорға тейеш. Бында аттарыбыҙ бик аҙ булғанлыҡтан, ойоштороласаҡ ғәскәрҙе бер башҡорт йәйәүле бригадаһы булдырыуҙан башларға, ул Беренсе һәм Икенсе йәйәүле полктарҙан, беренсе һәм икенсе һыбайлы полктарҙан торорға тейеш, тип билдәләнем. Башҡортостанда, азат ителгән ерҙәрҙә Өсөнсө һәм Дүртенсе йәйәүле полктар төҙөләсәк, үҙ аллы хәрәкәт итә алғандарының бер өлөшө Саранскиҙағы дүрт полкты тулыландырыу өсөн ебәреләсәк. Был эште башҡарыу өсөн полковник Әхмәров тәғәйенләнеп, Һамарға ебәрелде. Ул бер аҙҙан Бәләбәй ҡалаһына килеп урынлашасаҡ.

Саранскиҙа ғәскәри частәрҙе тәртипкә килтереү эше тамамланмағайны әле. Шуға ҡарамаҫтан, Совет "Хәрби инҡилап шураһы" (Реввоенсовет, рәйесе Троцкий) 10 июндә был ғәскәрҙәрҙең ойошторолғандарын Украина фронтында һуғышҡан 14-се армия ҡарамағына ебәреү хаҡында миңә әмер бирҙе. Был ғәскәрҙең әҙерлек эше тамамланмағанлыҡтан фронтҡа ебәреү ваҡытын бер ни тиклем кисектереү өсөн байтаҡ тырыштым. Ләкин Троцкийҙы, айырыуса уның урынбаҫары Вацетисты күндерә алманым, ғәскәрҙе ебәрергә мәжбүр булдыҡ. "Ревком" һәм хәрби комиссарлыҡ ҡарамағында ике хәрби төркөм алып ҡалдыҡ та, башҡаларын Харьковҡа оҙаттыҡ. 16 июндә улар Харьковҡа килеп еткәндәр, Деникиндың ғәскәри частәрен тар-мар итеп, ҡыҙыл урыҫтарға ла, аҡтарына ла төрки һалдаттарҙың ҡаһарманлығын күрһәткәндәр. Башҡорт ғәскәре килгән мәлдә ҡыҙылдарҙың 14-се армияһы тамам тарҡау хәлдә булған. "Харьковтағы хәрби шура штабы" (Штаб Совета обороны) рәйесе янындағы бөтә ярҙамсылары менән Деникин яғына ҡасҡанлыҡтан, башҡорт ғәскәре лә Харьковтан сигенергә мәжбүр булды. Совет ғәскәре командующийы башҡорт бригадаһының ҡаланан сигенеүен буйһонмаусылыҡ тип баһалап, бригада командирын һәм бәғзе башҡа командирҙарҙы ҡулға алған. 16 сәғәт буйы тотҡонда булған командирҙарын һәм офицерҙарын башҡорт һалдаттары көс ҡулланып ҡотҡарған. Быны күреп ҡыҙыл ғәскәр командующийы башҡорт бригадаһы командирын һәм офицерҙарын ғәйепләүҙән ваз кисеп, ғәфү үтенгән. Мин был ваҡиғанан һуң шундуҡ Көньяҡ фронтҡа юл тоттом. Полктарыбыҙ Миргород янында Врангель ғәскәренә ҡаршы һуғышҡан саҡта яндарына килеп еттем. Бер нисә көн ҡалып, ихтыяждарын тикшерҙем. Иң алғы сафта, һуғыш барышында араларында йөрөп, хәл-әхүәлдәрен өйрәндем. Бер ни тиклем трофей алғандар икән. Уларын Стәрлетамаҡҡа, мәмләкәтебеҙгә ебәреү өсөн Шафран станцияһына вагондарға тейәттем. Стәрлетамаҡҡа килгәс, 16–17 августа Шафранға Бәләбәйҙән ылау ебәрҙек. Һыбайлы ғәскәри частәр ойошторолоп "Айырым башҡорт һыбайлы дивизия" туплана башланы. Июндә Колчак ғәскәре сигенергә мәжбүр ителде һәм Өфө яңынан ҡыҙылдар ҡулына күсте. Шәреҡ фронты командующийы Фрунзе менәүер һәм яҡшы бер инсан ине. Башҡортостан хөкүмәтенең бөтә теләктәрен ҡәнәғәтләндерергә тырышты, миңә лә ышаныс күрһәтте. Мин дә, үҙемә ышанған кешегә ышанып ҡарау ғәҙетем буйынса, уның теләктәрен кире ҡаҡмаҫҡа тырыштым. Саранскиҙа ғәскәрҙәребеҙҙе тәртипкә килтереү менән мәшғүл булған саҡта Фрунзе "Көнсығыш фронтҡа килеп, беҙгә лә ярҙам итерһегеҙ, азат ителгән ерҙәрҙә мәхәллә дәүләт органдары һәм ғәскәр

ойоштора башларһығыҙ" тип хәбәр ебәрҙе. Юлға сыҡтым. Саранскиҙа ҡалған хөкүмәтебеҙ комиссарлыҡтарының һәммәһенән берәр вәкил алып "Сәфәр хөкүмәте" (Походное правительство) төҙөп, һаҡсы һыбайлы ғәскәри төркөм оҙатыуында Бәләбәйгә һәм артабан Стәрлетамаҡка хәрәкәт иттек.

Полковник Әхмәров 5 июндә Бәләбәйгә килгәс тә, хәрби хеҙмәткә саҡырыу иғлан итеп, Өсөнсө һәм Дүртенсе йәйәүле һәм Өсөнсө һыбайлы полктар ойоштора башлаған. Фрунзе ҡорал һәм башҡа кәрәк-яраҡтарҙы мул биргәйне. Был ғәскәр Икенсе башҡорт йәйәүле бригадаһын тәшкил итәсәк, командирҙар корпусы әҙерләү өсөн бер бәләкәй офицерҙар курсы асыласаҡ. Мин килеп еткәндә Әхмәров эште башлап ебәргән, уның штаб етәксеһе Гәрәев исемле бер башҡорт офицеры булды. Стәрлетамаҡта сәфәри хөкүмәтте урынлаштырып, мәхәлләләрҙә кантон идаралары ойошторocc менән мәшғүл булдым. Көньяҡ Украина фронтындағы полктарыбыҙҙың сафтарын тулыландырыу өсөн һалдаттар ебәрҙек.

Беренсе августа Башҡортостан хөкүмәте, янындағы ғәскәр һәм бөтә учреждениедары менән бергә, тура Стәрлетамаҡка китте. Уйыбыҙ – тиҙерәк Ырымбурҙа урынлашыу, сөнки был хаҡта ҡаҙаҡтар менән килешкән ҡәтғи ҡарарҙарыбыҙ бар. Ләкин Совет хөкүмәте, Ҡаҙағстан менән Башҡортостан араһында "Ырымбур губернаһы" исемле бер урыҫ вилайәте булдырырға, тигән ҡарарға килгән. Ҡаҙаҡтарҙың хөкүмәте Ырымбурҙа түгел, Аҡтүбәлә, ә беҙҙеке Стәрлетамаҡта урынлашты. Саранскиҙа саҡта мин Мәскәүгә барып был мәсьәләне үҙ файҙабыҙға хәл итергә тырышып, Ленинға мөрәжәғәт итеп ҡараһам да, тыштан беҙҙең яҡлы, шовинистарҙы шелтәләүсе булып күренгән Сталин ике мосолман иленең Ырымбурҙа берләшеүенә юл ҡуйманы. Быны беҙгә Совнархоз рәйесе Рыков үҙе аңлатты, сөнки ул беҙҙең Ҡаҙағстан менән Башҡортостан иҡтисади идараһының Ырымбурҙа берләшеүе дөйөм Рәсәй иҡтисади мәнфәғәттәр күҙлегенән дә файҙалы буласағы хаҡындағы фекеребеҙҙе ыңғай баһалағайны. Ләкин Сталин был фекерҙәрҙең аҫтын өҫкә әйләндерҙе. Ниһәйәт, Башҡортостан ревкомы август айында Саранскиҙан Стәрлетамаҡка килеп урынлашты.

Бында эшләгән мөһим эштәребеҙҙең береһе – Муса Мортазиндың Яйыҡ аръяғына ҡасмай, киренән ҡыҙыл ғәскәргә ҡушылыуын тәьмин итеү ине. Бер эскандрон ғәскәр алып, большевиктарҙан Бройдо исемле береһе һәм арҡадашым Таһир Имаҡов менән бергә август уртаһында Стәрленән Яйыҡ буйына табан юлға сыҡтыҡ. Үҙ ауылымда атайым янына инеп сыҡтым. Нөгөш буйындағы Ташкисеү ҡәрйәһендә атайымдың дуҫы Бирғәли хажиҙа мосафир булдыҡ. Яҡын тирәләге башҡорттар йыйылышты. Кире ҡайтыуыбыҙ был тирә халҡы өсөн байрамға әүерелде, мал һуйҙылар, ҡымыҙ ҙа мул ине.

Темәскә киттек. Унда Әбүбәкер мулла Хөсәйеновтың ҡунағы булдыҡ. Артабан Яйыҡ буйындағы Ҡыҙылға киттек. Аҡтар сигенгәйне, бер ерҙә лә бәрелеш булманы. Мортазин ғәскәрен август аҙаҡтарында нуғай бейҙәре ауылдарында барып таптыҡ. Мосолман булайыҡмы, христиан булып ҡалайыҡмы, тип икеләнгән был нуғайбәктәр менән бик ҡыҙыҡлы һөйләшеүҙәр булды. Улар ысынлап та наҙан инсандар ине.

Мортазин ғәскәренә бик ғәййәр егеттәр тупланғайны, ләкин ҡоралдары юҡ, пушкалары бар, снарядтары юҡ, арбалары бар, аттары юҡ, өҫ-баштары туҙған. Өҫтәүенә, аҡтарҙың эштәре мөшкөлләнә башлау менән, ғәскәрҙең күпселеге, Яйыҡ аръяғына сыҡмайынса, ауылдарына таралған. Янындағы "атлы бригада" исемен йөрөткән ғәскәрендә ни бары 1000 тирәһе һалдат ҡалғандыр. Уларҙы аҡтарҙан айырып Яйыҡтың уң яғына сығарҙыҡ һәм, туҡтауһыҙ Ырымбурға табан хәрәкәт итеп, Һамар–Ташкент тимер юлы өҫтөндәге Новосергиевск тарафында тупланырға әмер бирҙек. Өйләнеү ниәтем бар ине, Әбйәлилгә йүнәлдем. Ҡайнатам Хажимәхмүт хажиҙа мосафир булдым. Туй барышында Троцкий мине хәҙерге Магнитогорскиға телеграфҡа саҡырҙы. Екатеринбург аша Мәскәүҙән тороп һөйләшә. Бәләбәйҙә ойошторола башлаған ғәскәребеҙҙе Петроград фронтына ебәрергә ҡушты. Уларҙы хәҙер генә ебәреп булмауын аңлаттым. Туйҙан һуң Стәрлетамаҡка йүнәлдем һәм юлда милиция

отрядтары ойоштороу менән мәшғүл булдым. Имаҡов иһә хоҡуҡи органдар булдырыуҙы хәстәрләне. Минең маҡсатым – бөтә башҡорт ғәскәрен Стәрлетамаҡ–Ырымбур тирәһендә туплап, уларҙы Төркөстанға йүнәлтеү. Шәреҡ фронты командующийы Фрунзе башҡорт ғәскәрен юғары баһаланы. Шунлыҡтан, Ырымбурҙан һуң Ташкент яулап алынғас, беҙҙең ғәскәрҙе шунда күсерергә иҫәп тотто. Был хосуста Һиндостанлы Мәүләүи Бәрәкәтулла мөрәжәғәте айҡанлы Ленинға яҙған тәҡдимдәрем ҡабул булды һәм 12 июлдә Ленин Ташкентҡа радио аша беҙҙең теләктәребеҙгә муафиҡ телеграмма ебәрҙе350. Троцкий ҙа ғәскәребеҙҙе тура Ташкентҡа ебәрергә ризалыҡ биргәйне. Ләкин асылында урыҫ шовинистары булған коммунистар, сәйәси маҡсаттан сығып, был ҡарарҙы үҙгәрттеләр. Троцкий ҙа, үҙ һүҙенә ҡарағанда, Петроград фронтында килеп тыуған зарурат арҡаһында, уларҙың фекеренә ҡушылған.

Беҙҙең Украина фронтындағы ғәскәребеҙ сентябрь баштарында Башҡортостанға ҡайтарылғайны. Уларҙы Троцкий юлдан бороп, Петроградҡа ебәрҙе. Иҫкә алғанымса, беҙҙең Бәләбәйҙә ойошторолған полктарҙы ла шул уҡ тарафҡа ебәреүемде талап итте. Башҡорт ғәскәрен көнсығышҡа ебәрмәгәндәре өсөн Совет етәкселәренә асыу белдереүем дә уларҙың миңә ҡарата шөбһә менән ҡарай башлауҙарына сәбәп булды. Өҫтәүенә, ул заманда Ташкентта Турар Рысҡуловтың, "Төркөстан Совет Йөмһүриәте"нең милли хөкүмәтенә таяныс булһын өсөн башҡорт полктары ебәрелергә тейеш, тигән мәғәнәләге рапорты ла был шөбһә барлыҡҡа килеүгә сәбәп булған имеш. Ҡыҫҡаһы, полктарыбыҙға шәреҡҡә барып, ундағы милли хөкүмәткә таяныс булыу ниәте насип булманы. Сентябрь аҙағында Троцкий башҡорт ғәскәри бүлектәрҙе Петроградта туплау хаҡында әмер бирҙе. Көньяҡ фронттағы полктар поездарға тейәлгән килеш тура Башҡортостанға хәрәкәт иткән мәлдә, 16–17 сентябрҙә Петроград хәрби шураһы ҡарамағына бирелде. Был ғәскәр ике йәйәүле һәм ике һыбай полктарҙан ғибәрәт ине. Бәләбәйҙән килгән ғәскәр Петроградта өс йәйәүле полктан торған башҡорт уҡсылар бригадаһы тәшкил итте. 11 мең кешелек был көстөң 6233 һалдаты һуғышты, ҡалғандары ярҙамсы, йөк ташыусылар һәм башҡалар ине. Бәләбәйҙән Көньяҡ фронтҡа башҡорт ғәскәрен тулыландырырыу өсөн ебәрелгәндәр булһынмы, туранан-тура полковник Әхмәров идараһында 15 сентябрҙә Петроградҡа ебәрелгәндәр булһынмы, яңы ғына хеҙмәткә йәлеп ителгән һәм яҡшы өйрәтелмәгән йәштәрҙән торғанлыҡтан, ҡапыл һуғыш майҙанына инмәнеләр. Башҡорттарҙы тәүге айҙарҙа Юденич ғәскәренә ҡаршы бер пропаганда сараһы хәлендә файҙаландылар. Сөнки башҡорттар һуғышсан, мәшһүр ҡәүем. Шуға ҡыҙылдар аҡтарға башҡорт ғәскәрҙәре килеүен ҙурайтып күрһәтергә тырышты.

Юденичҡа ҡаршы һуғышта башҡорттарға айырым бер "һуғыш майҙаны" (боевой участок) биргәйнеләр. Башҡорт ғәскәре айырым төркөм тәшкил итеп, идара үҙәге Петроградтан 10 саҡырым алыҫлыҡтағы Пулков обсерваторияһында урынлашты.

Хәрби частәрҙе айырым-айырым тасуирлайыҡ. Ваҡытында Саранскиҙа бер йәйәүле бригада ойошторолоп, Көньяҡ фронтҡа ебәрелгән, унда "айырым башҡорт атлы төмәнгә" әүерелгән ғәскәри төркөмдөң командиры Төньяҡ Кавказ яҡлабаш нуғайҙарынан Ахлов булды, штаб етәксеһе – хәрби офицер Кудрявцев (?) ине. Уның беренсе эскандронында – 14 офицер, 43 һалдат, 67 ат. Өсөнсө эскадронында – 7 офицер 393 һалдат, 267 айырым һалдат. Техник ротала – 47 кеше, 443 ат. Дивизия, йәғни төмән исемен йөрөткән был частәрҙә 16 офицер һәм 41 һалдат Бәләбәйҙән тулыландырыу өсөн киләсәк ғәскәрҙәргә тәғәйенләнгәйне.

Өсөнсө атлы полктың командиры Каплан, сәйәси комиссары Ғәбдрәшитов, унда ни бары ике эскадрон булып, 240 һалдаты бар ине. Өҫтәүенә, ике йәйәүле ротаһы ла булды. Өсөнсө йәйәүле полктың командиры Абдеев, комиссары Юлыҡов булды. Унда Үҫәргән, Арғаяш, Тамьян-Ҡатайҙан йыйылып, ғәскәребеҙҙә электән хеҙмәт иткән һалдаттар бар ине, йәмғеһе 575 кеше.

"Айырым башҡорт йәйәүле бригада"һы, командующийы полковник Әхмәров, штаб етәксеһе Гәрәй Кирәев, өс полктан ғибәрәт ине:

Беренсе полк – 31 офицер, 1650 һалдат;

Икенсе полк – 47 офицер, 216 һалдат;

Өсөнсө полк – 25 офицер 950 һалдат.

Туптары ла бар – 2 батарея, 353 һалдат. Әхмәров идараһында бөтәһе 128 офицер, 4761 һалдат иҫәпләнде, өҫтәүенә, 4 туп һәм 229 ат.

Бөтә был атлы дивизия менән йәйәүле бригада айырым "башҡорт ғәскәрен" тәшкил итте, ә командирҙары йәш офицер Алишев булды. Был зат һуғыш барышында һәр ваҡыт алғы сафта булыуҙан хушлана торған ҡаһарман бер татар офицеры ине. Уның штаб етәксеһе Кальметьев булды, 6-сы дивизияға ҡаранылар. Көньяҡ фронттан килгән ғәскәрҙең бер өлөшө Мәскәү йүнәлешендә 28 сентябрҙә Юденич ғәскәрҙәре менән һуғышты.

Башҡорт ғәскәре Петроградта тик октябрь уртаһында һуғыш ҡырына сыҡты һәм стратегик яҡтан 7-се Совет корпусының 6-сы дивизияһына ҡараны, идара үҙәге Пулков обсерваторияһында урынлашты. Бында 17 октябрҙә Юденич ғәскәре менән ара-тирә ваҡ бәрелештәр ҙә булып алды.

20 октябрҙә Өсөнсө атлы һәм Өсөнсө йәйәүле полктар Царское Село янындағы бер ауылға һөжүм итте, Юденич ғәскәре артыҡ ҡаршылыҡ күрһәтмәйенсә сигенде. Шул уҡ көндә башҡорт ғәскәре Етенсе армияның икенсе дивизияһы ҡарамағына тапшырылды. Был көндө Петроград фронтында иң көслө һуғыш булды. Был һуғышта башҡорттар сиктән тыш батырлыҡ күрһәттеләр. Үлгәндәр, яраланғандар иҫәбе 70-кә барып етте. Офицерҙарҙан тик бер кеше яраланды351.

22 октябрҙә шул уҡ Кульма ҡәрйәһе янында шундай уҡ көсөргәнешле һуғыш булып, 100-гә яҡын һалдат яраланды, үлеүселәр юҡ ине352. Һуңғы бәрелештәр 24–31 октябрҙә булды, берәү ҙә яраланманы. Ниһәйәт, 1 ноябрҙә был фронтта эш тамамланыу сәбәпле, ғәскәр Петроградҡа күсерелеп, казармаларға урынлаштырылды. Мин дә шул көндәрҙә Башҡортостандан Петроградҡа килдем һәм дауаханаларҙа яралыларҙың хәлен белешеп, мәмләкәттән алып килгән аҙыҡ һәм һәҙиәләрҙе өләштек.

14 ноябрҙә ҡыҙылдар Ямбургты яуланы, Юденич тамам ҡыйратылды. Башҡорт ғәскәрҙәренең бер өлөшөн Новгород губернаһындағы Муравьев казармаларына урынлаштырҙылар. Был һуғыштарҙың тарихы Муса Мортазиндың "Башҡортостан һәм башҡорт ғәскәре" исемле китабында, башҡорт ғәскәренең командующийы булған Алишевтың "Башҡорт инҡилабының ҡыҫҡа тарихы" исемле әҫәрендәентекле аңлатылған. Алишев Етенсе армия идараһына һәм Троцкийға башҡорт ғәскәрҙәрен бергә тупларға рөхсәт итеүҙәрен һорауын, ләкин быға ризалыҡ бирелмәүе хаҡында үкенес белдереп яҙа. Шулай уҡ Алишев "Бәләбәйҙә яңы ғына йыйылып килгән булыуҙарына

ҡарамаҫтан, яҡшы өйрәтелеп, тәртипле ғәскәргә әүерелеп өлгөргән башҡорттар үҙҙәрен бер ғәскәри милләт сифатында күрһәтә алды" тип ҡәнәғәтлек белдерә. "Пулков бейеклеге тирәһендәге һуғыштар күрһәтеүенсә, – тип яҙа Алишев, – башҡорт ғәскәре тик "йә еңеү, йә үлем" ҡағиҙәһенә тоғро һәм хәрәкәтендә тәүәккәл булды. Һуғыш ҡыҫҡа булыуға ҡарамаҫтан башҡорттар бында "өлгөһө булмаған" ҡаһарманлыҡ күрһәтте. Яуырынға яуырын терәп, бер-береһенән артта ҡалмай, бер тән һәм бер йән булып ҡаһармандарса һөжүм итеп, дошманды артҡа сигендерҙе һәм, һуғышты оҙаҡҡа һуҙмайынса, үҙҙәрен күберәк юғалтыуҙарға дусар итеүҙән араланы"353. Ҡыш айҙарында Рәсәй хәрби шураһы башҡорт ғәскәрен тәртипкә килтереү буйынса яҡшы саралар күрҙе. Был Троцкий булышлығында башҡарылды. Икенсе тарафтан, сәйәси мәнфәғәттәрҙән сығып, был ғәскәрҙең үҙ аллылығын тамам юҡ итергә теләнеләр. Бының менән Сталин шөғөлләнде. Ғәскәри шура 5 апрелдә Троцкий әмере менән башҡорт ғәскәре өсөн түбәндәге план иғлан итте. Был ғәскәр 3 полкты берләштергән бер йәйәүле бригада һәм 4 һыбайлы полктан торған бер дивизия составында, йәмғеһе 40 мең кешелек бер ҡеүәт тәшкил итәсәк.

Йәйәүле бригада ҡарамағына 12 еңел туплы дивизион, 2 туплы батарея, бер бәйләнеш тәьмин итеү ротаһы, һыбайлы дивизия өсөн 4 туплы һыбайлы дивизион тәғәйенләнгәйне.

Бөтә был ғәскәрҙе тулыландырып тороу өсөн үҙәге Стәрлетамаҡта урынлашҡан бер йәйәүле полк (запасной стрелковой полк) һәм атлы полк (запасной кавалерийский полк) булдырыу, бөтә ғәскәрҙе тәртипкә килтереү, уны тулыландырыу эше башҡорт хәрби комиссарлығы рәйесе Зәки Вәлидигә йөкмәтелгәйне. 5 апрель әмере шулай ине. Троцкий тарафынан беҙгә хатта аэропландар ҙа бирелде. Мин 1920 йылдың май баштарында мәмләкәттән айырылған ваҡытта илебеҙҙә, милицияла хеҙмәт иткәндәрҙе лә иҫәпкә алған хәлдә, ғәскәребеҙ 27 меңгә еткәйне.

1920 йылдың майында Советтар менән Польша араһында һуғыш башланғас, башҡорт ғәскәрҙәренең бер өлөшө поляктарға ҡаршы ебәрелде. Был ваҡытта Совет хөкүмәте башҡорт ғәскәрҙәрен теге йәки был тарафҡа күсереүҙә, уның

менән идара итеүҙә башҡорт хәрби комиссарлығының ризалығын һорап тормай ине инде. Бөтә хосуста ла Совет командалығына буйһоноп ҡалдыҡ. Мортазин бригадаһы ҡыш буйына Новосергиевск станцияһында торҙо. 1920 йылдың 28 апрелендә 800 йәйәүле, 200 һыбайлы ғәскәре менән ҡарамағында 600 ат булған уның бригадаһы Киевҡа ебәрелде. Петроградтағы атлы дивизияның да бер полкы, Новгородтағы ғәскәрҙәрҙән дә 900 кешенән торған бер полк Мортазин янына ебәрелде.

Башҡорт хөкүмәте мәмләкәттәге ҡәҙерле ғәскәрҙәрҙе милли милициялар сифатында тотто. Урыҫтар мәмләкәт эсендә ҡаршылыҡ сығарырға тырышҡанлыҡтан, беҙ быға ҡаршы саралар күрергә булдыҡ. Хөкүмәтебеҙҙе һаҡлай торған айырым ғәскәри төркөмдәр булдырҙыҡ. Өҫтәүенә, Стәрлетамаҡта хөрмәтле офицерҙарыбыҙҙан ҡазый Низаметдин улы идараһында "Кесе офицер мәктәбе" (Школа младших прапорщиков) эшләп килде. Унда ике йәйәүле взвод һәм ике һыбайлы взвод бар ине.

Иҫкәрмәләрҙәге текстарҙың тәржемәһе

63.В. Туған. Төрөк тарихы дәрестәре. 125 бит. Был һүҙҙең иранса бер һүҙ икәнлеген дөрөҫләү өсөн ҡара: ZDWG, XXXIII. 114.

13Ибн Фадланда ла (әҫәрҙең үҙендә 9-сы бит, тәржемәлә 17-се бит) Калус һүҙе Фалус тип яҙылған.

16Профессор Чангтың ҡытайса сыҡҡан әҫәренең исемен һәм мәҡәләләрен Лайош Лигети "Атилла һундарының асылы" исемле мәҡәләһендә (1940, 25, 272-се биттәрҙә) иҫкә ала. Тиелеләрҙе тәшкил иткән 15 ҡәбиләнең исемдәре электән мәғлүм булһа ла, уларҙың береһен Ба-шу-ки-ли тип уҡыған тәүге ғалим Чанг булды.

17Бының иң мөһиме Плиний Секундтағы "Камаки" ("Camacae") атамаһы. Согдианала тип күрһәтә, шөбһәһеҙ, "Кимәк" тигәнде аңлата.

18Ҡара: Ибн Фадлан, 224-се бит: Хоивой.

19Мәҫәлән, Нөгөш һәм Рудек (ирендек).

20XVIII быуатта Йемек улдарынан Аблай мәғлүм. Зап. Акад. наук. 1864, IVт., 2-се китап, 22, 29-сы биттәр.

24Кенжек исемле нәҫелдәрҙән Кинжәков, Кинжаков фамилиялары.

28Шул уҡ әҫәр. Шул уҡ бит.

34С. Ауфи әҫәрендә бирелгән мәғлүмәтте И. Маркварттта ҡара (in Festschrift fur Hirt, 289-сы бит һәм артабан); бында һүҙ "мадраба" тип яҙылған, ҡара: K.C.A. III, 52.

36Был хаҡта З.В. Туған, Ибн Фадлан, 187, 328-се биттәр; был риүәйәттәрҙе килтергән Ибн Муҡаффаның мәғлүмәттәренә ҡайһы бер осраҡтарҙа Иран риүәйәттәре нигеҙ булған.

42был йылғаны Яйыҡ менән берләштерә һәм һүҙҙе ... тип уҡый.

45Был Кастра ҡалаһы Ока мадьярҙары өлкәһенә яҡын Костроманы хәтерләткән кеүек, Дунай буйындағы бәғзе географик исемдәрҙе лә хәтерләтә.

47Урал тауҙарындағы ҡыҙғылт емешле балан ағасы латинса Вибурнум апулус тип, емешенең һуты немецса Массаһолдер-биермасс тип атала.

48Әл-Бируниҙың быға бәйле мәғлүмәттәрен ҡара: Z.V. Togan. Biruni's Picture of World. s. 129. (З.В. Туған. Бируниҙың донъяға ҡарашы, 129-сы бит).

54Әбүлғази Хан. Шәжәрәи Теракиме. Истамбул, 1937, 13б–14а биттәре. Джучи Хан еңеп сыҡты һәм ҡыпсаҡтың ҡулына төшкәнен үлтерҙе, ҡотолғандары иштәккә барҙы, иштәктең күберәге был ваҡытта шул ҡыпсаҡтың нәҫеленән ине.

62Тарих-и Ҡаратай, әл-Иззи әл-Хазнедари: VIII том, Готье нөсхәһе, ғәрәпсә, 1655, Vr. 94a, 96–97: "Һәм был франктар менән башҡорд тигән ҡәүем дә бар, улар үҙҙәренең яуызлығы һәм ғәйәрлеге менән мәшһүр һәм барыһы ла төрксә һөйләшә, дәүләттәре лә, улар менән идара ҡылған хөкөмдарҙары ла юҡ, ә үҙҙәре, Венеция кешеләре кеүек үк, европалылар, ләкин венециандар билдәле бай сауҙагәрҙәр булһа, был башҡорд ҡәүеме ярлы, әммә яуыз һуғышсы һәм боласылар, ғәҙәттә улар ҡайһы падишаһҡа ҡушылһа, шул еңә, изге ерҙә үлеүҙе был донъяла йәшәүҙән өҫтөн күрәләр".

64Ибн Сәит әл-Мәғрибиҙең әҫәре. Париж нөсхәһе, анк. фонд, ғәрәпсә, 2234, vr. 105. Ибн Сәиттең был мәғлүмәтен Әбү-л-Фида ла иҫкә ала. Хвольсон, Ибн Даста, 110-сы бит, был "Кырат"тың урынын билдәләмәгән, Бартольд иһә "Хвольсондың юбилей йыйынтығы"нда 231-се биттә был исемде Рааб менән берләштерергә тырышҡан.

76Березин баҫмаһы, Шейбаннамә, 75-се бит. Тоҡтағу Хан заманында мәмләкәттең бөйөк бейҙәренән булып, унан һуң Һырдаръя буйында диктатор булған Тоҡбуға бейгә бер үк ваҡытта Башҡыр Тоҡбуға тип тә әйткәндәр. Был зат кафыр булараҡ тасуир ителгәнгә күрә, мосолман түгеллеге, уйғырҙарҙан булыуы ла әйтелгән. Уның исеме "Тарих-и Дост-Солтан"дан алынып, Хажи Абдулғафарҙың "Умдет әл-Тәуарих"ында (Истамбул баҫмаһы, 33-сө бит) "Баджар Туҡбуға" тип яҙылған. Әммә Ғәли Желайырҙың "Жами әл-Тауарих" исемле (Ҡазан, 1851 йылғы баҫма, 155-се бит) әҫәрендә "Бадчҡыр Туҡбуға" тип яҙылған. "Баджҡыр" һүҙе Березин баҫмаһы аноним Шейбаннамәлә (75-се биттә) Шейбан ханға буйһоноулы ҡәбиләләр исеменән иҫәпләнә. Йәғни башҡорт тигәнде аңлата. Ләкин Тоҡбуға бей шул уҡ ваҡытта уйғыр булараҡ яҙылған З.В. XV. 231. Шул уҡ ваҡытта был заманда "уйғыр" һүҙенең "буддист" мәғәнәһендә ҡулланылыуын да хәтерҙән сығарырға ярамай.

79Ибн Танриберди, әл-Минһал әл-Сафи, Нашрутдин әҫәре. Шулай уҡ Сарим әл-дин әл-Башҡурди, Ибн әл-Фуратта иҫкә алына.

84"Таг-Урек" хәҙер Ағиҙел буйындағы Йөрәктау булыр. Маркварт ("Ҡоман халыҡтары тураһында", 138-се бит) был "Арк тағ"ды Урал тауҙары тип фараз иткән хәлдә, Туран хандары тигәнде ҡыпсаҡ хандары тип уйларға була. Хәлбүки, был һүҙ ни бары "Тура" һүҙенең боҙолған формаһы булырға мөмкин.

87Себер иле һәм Сулман башҡортҡа ҡарай.

88Хорезм Мангышлаҡҡа сиктәш, уның халҡы күп һанлы бөрйәндәр.

90Был мәғлүмәт Үтәмеш Хажиҙың "Тарих-и Дост-Солтан" китабында бар, минең нөсхәм. vr. 46a.

93Был хаҡта мин 1913 йылда Ырымбурҙа сыҡҡан "Шура" мәжмүғәһендә "Бөрйән башҡорттары араһында" тигән мәҡәләмдә яҙғайным, һуңынан ошо көйҙәрҙе белгән башҡорттарҙы бөрйәндәрҙең икенсе өлкәһендә Әхмәр ауылында таптым. Был көйҙө белгән зат Хәсән исемле ҡурайсы ине.

97Был шәжәрәләрҙең Башҡортостанды өйрәнеү йәмғиәте "Хеҙмәттәре"ндә сығарылған әҫәрҙәрендә мырҙаларҙың Кубанға күсеп китеү ваҡыты һижри буйына 959 йылда, миләди 1549 йылда тип күрһәтелгән, был иһә хата.

98Ҡара: А. Новосельский. Борьба Московского государства с татарами в первой половине XVII века. Москва – Ленинград, 1948. Был хеҙмәттә нуғай мырҙалары шәжәрәһе тураһындағы мәғлүмәт Хажи Абдулғафарҙағы шәжәрәгә тулыһынса тап килә.

99Ҡара: Бөгөнгө Төркөстан, 145-се бит.

100Был хаҡта ентекле мәғлүмәт "Бөгөнгө Төркөстан"дың 139–147-се биттәрендә бирелә.

102Шул уҡ әҫәр, шул уҡ бит. Рустарҙың Башҡортостан эштәренә ҡыҫылыуы көнбайыш башҡорттар арҡаһында башлана. Кама буйындағы башҡорттарҙың бер өлөшө Ҡазан ханлығы аҫтында булғанлыҡтан, был ханлыҡ рус идараһына күсеп 5 йыл үткәс, 1557 йылда рустарға һалым түләй башлауҙары арҡаһында 1572 йылда батша Иван IV фарманында "Ҡазан ханлығы һәм Башкурдия" һүҙе ҡулланыла.

103"Остяк" һүҙе Астиак һүҙенең рус телендәге әйтелешкә күрә "о" өнө менән әйтелеүенән килеп сыҡҡан. Золтан Гомбезждың аңлатыуына ҡарағанда, ул фин телендә Ас-йах һүҙенә тура килә. Төрктәр иһә был һүҙҙе "и" өнө менән әйтәләр. Ҡаҙаҡ-ҡырғыҙҙар "истәк" тип башҡорттарҙы һәм бараба татарҙарын атай (Потанин. Очерки Северо-западной Монголии. IV. 19). Әбүлғази хан башҡорттарҙы "башҡорт" тип тә, "истәк" тип тә исемләй. Ҡырым авторҙарында ла һәр ике һүҙ ҡулланыла. Рәшит тарихында "иштәк", Әүлиә Челебиҙә һәм башҡа бәғзе авторҙарҙа "һәшдәк" тип әйтелә. Ҡайһы саҡ башҡорттар Ҡырым авторҙары тарафынан "ҡырғыҙ" тип тә атала. Ибраһим Кәтиптең "Тарих-и Татархан"ында рус казагы Стенька Разиндың күтәрелешендә ҡатнашҡан башҡорттар ҡырғыҙ тип аталған. Рәшит тарихында III. 327 "иштәктәрҙең" союздаштары сифатында "Ҡара һәм ҡырғыҙ" (Ҡырғыра тип яҙылған) иҫкә алына, "Ҡарағалпаҡ һәм ҡырғыҙҙар" тигән мәғәнәлә. Үтәмеш Хажи ҙа, бөйөк Шейбан ханы Ибаҡ хан хаҡында булғар, Башҡортостан, Тура һәм Алтай тарафтарының дөйөм хәле мәғәнәһендә булһа кәрәк, "мәшһүр хан булып, бөтә ҡырғыҙ һәм Ҡазан мәмләкәтенә хакимлыҡ ҡылған", тип яҙа (Үтәмеш Хажи Тарихы, vr. 74 a). 1572 йылда Кама буйындағы остяктарға, башҡорттарға һәм Строгановтарға ҡараған сығанаҡ: Кеппен, Материалдар, 29-сы бит. Карамзин. "История...", IX том, 656.

109Ҡара: Бөгөнгө Төркөстан, 20-се бит.

113Һәм башҡорт илендә мөхтәбәр мосолман ҡазый. Тизенгаузен, 217-се бит. Аясуфыя, 3416, vr. 272; Морат Рәмзи, Талиф әл-Әкбәр, I. 241.

114Был ҡәбер ташы беренсе булып Вельяминов-Зернов тарафынан уҡылды. Труды восточного отдела, VI. Бында "Хөкөмөндә ғәҙел ғази (ҡази) Хөсәйен бәк ибн әл-Әмир әл-Кәбир (бөйөк) Ғүмәр бәкәт – Тәрби әт-Төркөстани" тип уҡыла, "Башҡорт аймағы"ның, 1925 йыл, 1-се һанында иһә: "хөкөмөндә ғәҙел хажи Хөсәйен ибн әл-Әмир әл-Кәбир Ғүмәр бәк Тәрсәни 744 йылдың мөхәррәм айының 7-се көнөндә вафат булған" (хата булараҡ арбалиә – 400) тип уҡылған.

115Был хаҡта Өфөлә баҫылған "Красная Башкирия"ның 20.10.1938 йыл нөсхәһендә белдерелә.

127Тимуриҙар дәүерендәге яһаҡлыларҙы Алишер Науаи "Маһжуб әл-Ҡулуб" исемле эҫәрендә иҫкә ала.

128П. Рычков. Топография Оренбургской губернии. Оренбург, 1762, икенсе баҫмаһы – Оренбург, 1887. Ҡәбиләләр: 65–71-се биттәр. С. И. Руденко. Башкиры. Опыт этнографический монографии. Петроград, 1916. Харис Кузеев. Очерки этнографии башкир. Уфа, 1946*. Рычков биргән мәғлүмәтте көнсығыш төрк һөйләшенә яҡынайтып бирәбеҙ:

Нуғай юлы.

Мең ырыуы, бөтәһе 477 йорт. Аймаҡ һәм түбәләре: Чубы, Ҡырҡкүл, Тайыҡ-Сүбен, Кули-мең, Ыслы-мең, Нуға йыла-мең, Меркет (бәлки, тарихтарҙағы Миркит), Өршәк-мең, Илкәй-мең, Саралы, Ҡабау, Ыҡ-меңе.

Табын ырыуы, бөтәһе 387 йорт.

Түбәләре: Биш ауыл, Кесе-табын, Йомран-Табын, Кәлсер-табын, Ҡумрут, Дыуан-табын, Мелле-табын.

Юрматы ырыуы, 521 йорт.

Түбәләре: Мишәр-юрматы, Тәлтим, Баҡай, Арлар, Биш-ҡаҙан, Маҡар.

Ҡыпсаҡ ырыуы, 1332 йорт.

Түбәләре: Бошман-ҡыпсаҡ, Сыуын-ҡыпсаҡ, Сәңкем-ҡыпсаҡ, Сарыш-ҡыпсаҡ, Игрес-ҡыпсаҡ, Ҡарағай-Ҡыпсаҡ.

Бөрйән ырыуы, 448 йорт.

Түбәләре: Янса-бөрйән, Байулы (Бай-оглы), Мушаш, Ямаш, Ҡарағай-бөрйән, Дир-бөрйән, нуғайҙар.

Үҫәргән ырыуы (асылында Ҡаңғлы), 381 йорт.

Түбәләре: Ай-үҫәргән, Яутүбә-үҫәргән, Шешәйҙәр, Бишәйҙәр, Сүрән, Сураш.

Түңгәүер ырыуы, 80 йорт.

Түбәләре: Урман-түңгәүер, Ялан-түңгәүер.

Тамъян ырыуы, 196 йорт.

Түбәләре: Ҡыуанай, Мылтыҡ, Мәсәғүт, Ыҡ-тамъяны.

Табын ырыуы, 472 йорт.

Түбәләре: Күбәләк, Тиләү, Ҡарағай, Кичи, Йомран-табын.

Ҡатай ырыуы, 300 йорт.

Түбәләре: Иҙел-Ҡатай, Көсөк-Ҡатай, Инйәр-Ҡатай, Ҡоҙғон-Ҡатай.

Себер юлы:

Көҙәй ырыуы, 415 йорт (был ырыу Хорезмда ла бар).

Түбәләре: Урман-Көҙәй, Бәләкәй Көҙәй, ҡыр-Көҙәй, Шайтан (йәғни Шаман, Ҡам)-Көҙәй, нуғайҙар, Сүбберди, Уҫраҡ-Көҙәй, Урсаба-Көҙәй, Ҡуллар-Көҙәй, Дыуан-Көҙәй (Дуван, йәғни төмән хөкүмәт үҙәге), Төркмән, Белгес-төркмән.

Танып ырыуы, 335 йорт.

Түбәләре: Ҡыр-Танып, Балыҡсы, Һыу-Танып, Ундар, Ҡыр-Ундар, Һыу-Ундар, Байҡы, Ҡайпан, Уҡуншы.

Әйле ырыуы, 113 йорт.

Түбәләре: Арш, Ялан-Әйле, Өпәй, Дыуан, Таҙ-Дыуан, Сызан, Эйәрле, Мырҙалар, Тарнаҡлы, Ҡаратаулы, һарт, Түбәләс, Сүплеһыҙғы.

Ҡыуаҡан ырыуы (Исәт виләйәтенә ҡарай).

Түбәләре: Ялан-Ҡыуаҡан, Тау-Ҡыуаҡан, Сатҡа-Ҡыуаҡан, Сегит-Ҡыуаҡан, Ҡыркули-Ҡыуаҡан.

Барын-Табын ырыуы (шулай уҡ Исәт виләйәтенә ҡарай).

Ҡара-Табын ырыуы (Исәт виләйәте).

Түбәләре: Әйле-Табын, Күксүрек-Табын, Ҡыпсаҡ-Табын, Мөсөл-Табын, Аҡшураз-Табын.

Ялан Ҡатай ырыуы.

Түбәләре: Бала-Ҡатай, Бичҡур, Һеңрән, Һыҙғы, Бал-Ҡатай, Чирли, Терсат, Бекети, Салжавут (Сальют), Сартлар.

Ҡазан юлы:

Ҡаршы ырыуы, 77 йорт.

Түбәләре: Аҡбаш, Ҡарғанар, Ҡадрей.

Ҡайлы ырыуы, 123 йорт.

Түбәләре: Иҙел-Ҡайлы, Ҡыр-Ҡайлы, Йөрәктау-Ҡайлы, Аҡтау-Ҡайлы.

Елдәт ырыуы, 201 йорт.

Түбәләре: Өфө-Елдәт, Ҡыр-Елдәт, Бура (Буғра)-Елдәт.

Гәрәй (Кирәйәт) ырыуы, 273 йорт.

Түбәләре: Урман-Кирәй, Иҙел-Кирәй.

Тогызлар ырыуы.

Йәнәй ырыуы, 400 йорт.

Бәйләр ырыуы, 61 йорт.

Дыуан ырыуы, 82 йорт.

Түбәләре: Дуваней, Хажи-Дуваней, Рысмәкәй, Баҡай, Талбазы.

Илан ырыуы, 382 йорт.

Түбәләре: Ҡыр-Илан, Иҙел-Илан, Бадраҡ.

Сирән Йорто ырыуы.

Ҡырғыҙ ырыуы, 113 йорт.

Бүләр ырыуы, 231 йорт.

Уса юлы:

Таҙлар ырыуы.

Уран (Ҡыпсаҡтың бер буйы) ырыуы, 218 йорт.

Уваныш ырыуы.

Ирекле ырыуы, 148 йорт.

Ғәйнә ырыуы, 562 йорт.

Түбәләре: Мул-Ғәйнә, Түл-Ғәйнә.

Бында һәр ырыу буйынса бирелгән йорт иҫәбендә 1750 йылда Рәсәйгә өлөшләтә генә бәйле булған башҡорттарҙан рус воеводалары ғәмәлдә идара иткән ғаиләләр генә иҫәпкә алынған. Шуларҙан Исәт виләйәтенә ҡараған башҡорттарҙың йорт иҫәбе бирелмәгән.

Руденко Ер бүлеү комиссияһы архивындағы ырыуҙарҙы ла иҫкә алған: шул арала Ҡазан юлында Бәйләр ырыуының түбәләре түбәндәгеләр: Һарайлы-мең, Базикәй, Салавуш, Ҡалмаш, Ҡыр-Йылан байлары. Йылан ырыуындағы түбәләр: Ҡыр-Йылан, Эске-Йылан, Челҡан, Ҡалмаҡ. Ҡырғыҙ ырыуы түбәләре: Ҡадыкей, Ҡырғыҙ.

Бүләр ырыуының түбәләре: Ҡадыр, Ҡурай, Мишиги. Иректе ырыуының түбәләре: Иректе, Абдалбей. Ғәйнә ырыуында түбәләр: Ғәйнә, Салавуш, Рахманғол, Азиғул, Ыр ивли. Ҡайлы исемен Руденко Ханлы тип яңылыш яҙған.

129Был дворяндар нәҫеле. Иҫәбе хаҡында ҡара: Новиков, История Уфимского дворянства, 1875, II т., 27, 31, 44, 88-се биттәр.

130Немецтарҙан Г. Фон Менде китабында (Национальная борьба Российских тюрков, Берлин, 1936, 135-се бит) был һүҙҙең ғәрәпсәнән килеүен аңламағанлыҡтан русса "особо"нан килә тип иҫкәртә.

133"Раздельная грамота" тип аталған был ҡағыҙ хаҡында ҡара: Оренбургские Губернские ведомости, 1849. 12–17-се һандар; Руденко, I, 13; ҡара: Т'оунч Пао, 1930, 40-сы бит.

134Был һүҙ хаҡында ҡара: Бартольд, Исламская энциклопедия. IV. 785 стр., статья "Тептяри".

135Ҡара: 1771 йылда көнсығыш Башҡортостанда барлыҡҡа килгән ауыл типтәрҙәренең рәйесе, старшинаһы Сағынбай Солтанай улы иҫкә алына. Ризаитдин бине Фәхретдин, Аҫар, II, 65-се бит.

138"Бағул" һүҙе хаҡында ҡара: Рәшитеддин, Жами әл-Тәуарих. Березин; I. 235.

146Соловьев, История России, Издания обществ. Толз. III. 577. 1631 йылдан бирле күренгән был зат һәм уның Иртыштағы улусы хаҡында ҡара: Миллер, Сибирская история, II. 101, 385, 443–444, 477-се биттәр.

150Алты оғул халыҡ телендә күберәк "алтавул" тип әйтелгәнлектән, "алты ауыл" тип иҫкә алына, ә дөрөҫө "алты ул" булыр.

152Ҡара: Миллер, История Сибири, II. 115, 227. Абуға менән Буғай исемдәренең бер үк икәнлеге лә унда аңлатыла.

156Был хаҡтағы Мадьяр сығанаҡтары "Бөгөнгө Төркөстан"дың 162-се титендә күрһәтелгән.

161Әүлиә Челеби. Сәйәхәтнамә, VII. 805–809; XIII, 824, 834, 868. Был "Муйик" ҡалаһы Иҙел менән Дон араһындағы бер рус ҡасабаһы булһа кәрәк.

162Шунда уҡ, VII. 761, 813. Әүлиә үҙенең етенсе климат һыҙатында сәйәхәт итеүен раҫлау өсөн боронғо Һарай һәм Ҡазанды күреүе хаҡында һөйләй.

173"Шабувул Мескев төринде" тигәне Мәскәү түре, йәғни Мәскәү алды, юғары күкрәге тигәнде аңлата. Тик бында ҡулланылған "Шабувул" һүҙе менән нимә аңлатырға теләгәнлеген белә алманым.

174"Ҡайтауыл" – татар хандарының, бигерәк тә Тимерҙең походтарында йыш иҫкә алынған ғәскәри көс. Ғәскәр йөгө һаҡланған урын, һөжүмгә дусар булғанда сигенеү урыны һәм арьергард.

175Тура тарафында Томбойоҡло исемле халыҡты һәм Яйыҡ башында Күкшымай исемле ер булыуын белмәйем. Ләкин һәр ике һүҙ ҡолағыма бик хуш килә.

176Тик "Албиз бей" сәйер яңғырай. Ихтимал, был исем Ҡәйеп Солтандың әсәһе яғынан ҡартатаһы булған берәй нуғай бейенең исемелер. Сөнки солтандың һәм хандың атаһы "бей" булмаҫ. Ихтимал, был һүҙ Аблайыр (йәғни Аблайыр урынына) күсереп яҙыусы тарафынан Албыйыз тип яҙылғандыр. Аблайыр Әбелхәйер тигән исем булып, был исем... (Иҫкәрмәнең дауамы юҡ. Ә.Ю.)

182Дополнение к актам историческим, IV. 284; "Быть себе царством как было при Кучуме Царе". Материалы по истории Башкирской Совет Республики. I. 29–30.

205Был аңлатмаларҙың Рәсәй география йәмғиәте архивында һаҡланып ҡалған бер нөсхәһе проф. Н. Пальмов тарафынан "Материалы по истории каракалпаков" йыйынтығында (Трулы института востоковедения, VII, 1935, 153–159-сы биттәр) нәшер ителгән.

206"История Татарии в документах": (Мат. Тат.), 392–396-сы биттәр һәм "Материалы по истории Башкирской АССР" (Мат. Башк.), I т., 1936, 238–243-сө биттәр. Был аңлатмалар Варанскиндың 1708 йылдың 14 апрелендә яҙған рапортында ла бар. Бында башҡорттарҙың төрөк солтанына һәм Ҡырым ханына илселәр ебәреп иттифаҡ ҡорорға теләүҙәре, Солтандың һәм Ҡырым ханының был тәкдимдән баш тартыуы, ләкин уларҙың Кубандан (йәғни ундағы нуғайҙар араһында йәшәгән Сыңғыҙ нәҫелдәренән) бер солтан алыуҙары, Ҡазан губернаһынан башҡа Сембер, Көңгөр һәм Вятка тарафтарында бер үк мәлдә рустарға ҡаршы һөжүм итеүҙәре һәм "Тирьяк" алырға ниәтләүҙәре, башҡорттарҙың был хәрәкәттәрҙе батшаға түләгән һалымдарының ауырлығы арҡаһында түгел, Рәсәйҙән айырылып, мөстәҡил дәүләт ҡорорға ынтылыуҙары арҡаһында башлауы яҙылған. Ҡара: История Татарии, 391-се бит.

237"Шура" мәжмүғәһе, 1916, ‹ 6. Нурғәли Надеев исемле берәү яҙған был мәҡәләнең сығанаҡтары, минеңсә, билдәһеҙ; ғәжәп, русса асылында ла "Улах" тип яҙылды микән?

257Бәхет Гәрәй солтан – Ҡырым хан Дәүләт Гәрәйҙең улы. Хажи Ғәбделғәфәр (163-сө бит) уны "киң билдәле Бәхет Гәрәй солтан" тип билдәләй. Рәсәй сиктәрендәге был һуғыштарҙа Бәхет Гәрәй етәкселек итеүе хаҡында ҡара: В.Д. Смирнов. Крымское ханство, II т., Одесса, 1889, 33, 46-сы биттәр. Рәшит Тарихы, III т., 28-се бит. Был ваҡиға Рәсәй сит илдәр министры Остермандың Төркиә хөкүмәтенә 1736 йылдың 12 апрелендә яҙған нотаһында "Ханзада иҫәпләнгән Тиле Солтан" тип уның Царицынға (хәҙерге Сталинградҡа) һөжүме иҫкә алынған; Хазинаи Эврак, Намеи Хумайун дәфтәрҙәре, VII т., 460-сы бит.

260Ҡара: "Хиуа сәйәхәтнамәһе һөм тарихы", Истамбул, 1923; Али Суави, "Хиуа", 1327, "Мөхәммәт Баһадир хан" тарафынан Истамбулға ебәрелеү тарихы, 1123/т. 1711 тип күрһәтелгән.

267Рустарҙың Себер архивтарындағы сығанаҡтарында "башкирский хан" (башҡорт ханы) тип аталыуы күренә.

268Мат. Башк., I т., 166, 1663 йылдың 16 ноябрендә Нуғай юлы башҡорт бейҙәренең рустарҙың Өфө воеводаһы кенәз А.М. Волконскийға аманаттарҙың кире ҡайтарылыуын талап итеүе һәм дәғүәләрен батшаға үҙҙәре еткерәсәктәре тураһындағы хаттары:

Улу падишаһ хан улу Алексейә Михайлуичкә барча улукче аҡ шәһәрне баҡтырған хатымыз башҡортлардан сүз әүүәл беҙдән йәсирне ничук теләйдер. Беҙдән ни яхшылыһ теләйдер. Без падишаһтан яхшылыһ көтәбез. Падишаһ борон безне аманат берлән тотҡан юҡ иде. Яхшылыһ рәхиме берлән саҡлаған иде. Имде падишаһ безне боронғодай ҡол итәрмен дисә аманатымызны үздемезгә ебәрсен. Кенәз безгә илче ебәрде ирсә без тотғар итмәй ебәрдек имде. Без барча нуғай юлы халҡы берлән ике кеше илче ебәрдек. Бере Аҡтай Рысмөхәммәт уғлы, бере Күчәй Бикеш уғлы. Ул кешеләремезне тотҡар итмәй үз сүзеңне әйтеп уҡ ебәр. Өч көндән безгә иманҡидай кеше ебәрчин. Падишаһның яхшылығы булғидай булса халҡыбыз берлән киңәшеп ул кешене тотҡар итмәй тиз уһ ҡайтарурмыз. Безгә падишаһдан яхшылыһ булғандай булса, безгә Юрий Алпаутны, Иванауны ебәрсен. Безнең ни эшемез булса ла син кенәз падишаһҡа еткермәйсен имде сүземезне падишаһға еткер, әгәр бу сүземезне падишаһға еткермәсәң безгә үфкәләмә. Падишаһдан ни сорау ...мизлау* булса үфкәләмә. Ни үземез беләндән (русса "окольный путь") юл тапсаһ үзең белүрсүн... мин безгә ебәрсүн алмаш биргән йәсирне Бәкер Булат ҡызын... (йәғни әсир рәһине олараҡ) ебәрсәк дә ул йәсиремезне аладур (әммә) алмашҡа ебәрмәйдер.

---

*Һүҙҙең башын уҡып булманы. (Ә.Ю.)

272"Абыҙ" һүҙе хаҡында ҡара: "Төрк иле тарихы", 149-сы бит.

274Мат. Тат., 402–406; М.А. Сәләхетдинов. Волга буйы халыҡтары тарихы тураһында бер фарсыса әҫәр. "Страны и народы Азии", IV 1965, 147–154-се биттәр.

275"Тамъян", "Бөрйән", "Үҫәргән", "Журан", "Ҡыуаҡан" Урта Азиялағы "Жилйан" (Чигилдар), "Барсаҡан" (Варсандар), "Йемган" (Йемектәр), "Ҡайҡан" (Ҡайғтар), "Гузан" (Гузан" (Оғуздар), "Һеңрән", "Халлухан" (Ҡарлуҡтар), Халажан (Халажалар) кеүек, бер заман Иран ҡәүемдәре тәьҫиренән килгән фарсыса "жем" аффикслы исемдәр. Тамъян да "Тамалар" тигән һүҙ булыр.

276Был һуғыштар һәм Дим башындағы һуғыш хаҡында Һиҙиәт Суфый "Шәжәрә"һендә яҙылған.

279Мат. Тат., 403. Был һуғыштар хаҡында Һиҙиәт Суфый "Шәжәрә"һендә бик яҡшы яҙылған.

297Алтай риүәйәттәре хаҡында "Проблемы народной литературы тюркских племен Южной Сибири", I. Петербург, 1864. Нөсхәһе 184–186-сы биттәр һәм тәржемәһе 206–208-се биттәр. Шул уҡ риүәйәт һәм ҡаҙаҡ риүәйәттәре Чоҡан –

Вәлиханов. Собрание сочинений. Петербург, 1904. 201–208-се биттәрҙә килтерелгән.

320Был күтәрелештең тарихы Чулошников тарафынан айырым әҫәр сифатынла нәшер ителгән. Шулай уҡ Неплюевтың хәтирәләре. Русский архив. 1871, ‹ 4, 667–

668-се биттәр һәм артабан.

321Иң элек Рыбаков тарафынан 1827 йылда Рәсәй Фәндәр Академияһының Вестниктарында нәшер ителгән "Тәфтиләү" 1939-сы йылда доктор Ғәлимйән Таған һәм проф. Г. Янский тарафынан Вена Фәндәр академияһы нәшриәтендә баҫып сығарылды. "Тефкилев" йырының ҡыҙҙы бер христиан дворянға кейәүгә бирергә тейеш булыуы хаҡындағы тарихын боронғо Тевкилевтарҙың нәҫеленән килгән Ҡотлоҡай Тевкелев (Рәсәй Думаһы ағзаһы) һөйләгәйне. Рыбаков мәҡәләһендә был ҡыҙ бер русҡа ғашиҡ булған икән тип иҫкә алына.

327Чоҡан Вәлиханов. Әҫәрҙәр йыйынтығы, 1, 1961, 431-436-сы биттәр.

328Ә.-З. Вәлиди Туған. "Бөгөнгө төрөк иле (Төркөстан) һәм уның яҡын замандағы тарихы". Истанбул. 1942-1947. 348-349-сы биттәр.

329Был ҡарарнамә "Башҡорт аймағы"нда нәшер ителгән. 1925, 1, 3-сө бит.

330Был мәсьәләләр буйынса "Бөгөнгө төрөк иле (Төркөстан) һәм уның яҡын замандағы тарихы", 369-372-се биттәр.

331Яңы Төркөстан. 1927, ‹ 7, 10-сы бит.

332Яңы мәжмүғә, 1918, ‹ 38.

333Төрөксәһе: Ишәгенең арҡаһында ултырған килеш хужаһы үлеп киткән. Әммә ишәк ахмаҡлығынан үле йөктө әле лә һөйрәп йөрөй икән.

334М. Мортазин китабы. 69-сы бит.

335Мортазин билдәләүенсә был ваҡиға 14 октябрҙә булған. 69-сы бит.

336Һуңынан ул Төркиәгә килгән һәм бында ла интригаларҙан ситтә ҡалмаған. Ниһәйәт, Төркиәнән сығарылып ебәрелгән. 1922 йылда яңынан Башҡортостанға ҡайтҡан һәм беҙҙең бәғзе арҡадаштарыбыҙға "Төркиә күренеклеләренең тәҡдиме буйынса Төркиә–Совет дуҫлығы менән мәшғүл булдым. Ләкин улар был сәйәсәттәрен хата тип иҫәпләй башлағас мин дә Төркиәнән китергә мәжбүр булдым", тигән. Башҡортостанда өйләнгән, бер кем дә үҙенә ышаныс күрһәтмәгән, эске менән мауыҡҡан, ниһәйәт, Советтар тарафынан ҡулға алынған. Артабанғы яҙмышын белешә алманым.

337"Бөгөнгө Төрөк иле тарихы" китабымдың 260, 374, 376, 396-сы биттәрендә Ҡязим бейҙең хәтирәләре хаҡында яҙғайным. Хәтирәләренең Төркөстанға бағышланған өлөштәре китапханамда һаҡлана.

338Юғарыла Тамьян-Ҡатай кантонында милиция башлығы булыуы иҫкә алынған был Муса Мортазин батша ғәскәрендә унтер-офицер булды. Большевиктарға ҡаршы һуғышта күрһәткән батырлыҡтары өсөн милли ғәскәребеҙҙә офицер итеп үрләтелде. Һуңынан дивизия сардары, Совет дәүерендә Башҡортостан хөкүмәтенең рәйесе булды. Башҡорт ғәскәре тарихы хаҡында урыҫса бер әҫәре нәшер ителде. Был әҫәрҙең төрлө урындарында мине лә иҫкә ала. 1937 йылдағы "таҙартыуҙарҙа" урыҫтар тарафынан язаланған тип ишеттем. Ул Башҡортостан хөкүмәте рәйесе булған заманда Төркиә милли мәжлесе ағзаларының береһе И. Субхи Сайсаллы оглы Стәрлетамаҡта Мортазиндың мосафиры булып, унан төрлө рәсемдәр һәм китаптар алып ҡайтты.

339Исмәғил Шәрипов мине "Йөмһүриәт рәйесе" сифатында телгә алған, ләкин был яңылыш. Башҡортостанда Йөмһүриәт рәйесе вазифаһы булманы. Хөкүмәт рәйесе Юныс Бикбов мне. Мин хәрби министр, "Башҡорт ғәскәре идараһы" (Войсковое

управление) рәйесе булдым. Башҡан һүҙен ул "Башҡорт ғәскәри шура"һының рәйесе булғаным өсөн ҡулланған. Быныһы дөрөҫ. Башҡорттар борондан бер хәрби йәмғиәт тәшкил иткәнлектән, ҡоралллы күтәрелештең үҙәге улар араһында булды. Бында Исмәғил мәрхүм минең хаҡымда "хәҙрәттәре" һүҙен ҡулланған, быны үҙгәртеүҙе монасип күрмәнем. Сөнки беҙҙең сәйәсәтебеҙ менән килешмәйенсә, беҙҙән айырылып, аҡ урыҫтарға, Деникиндарға киткән бер офицерҙың сит яҡтарҙа яҙылған хәтирәләрендә миңә ҡарата быңдай хөрмәтләү һүҙен ҡат-ҡат ҡулланыуы һәм минең турала иң яҡшы хистәр кисереүе, юғарыла иҫкә алғанымса, ул дәүерҙә татар һәм башҡорт менәүәрҙәре араһындағы мөнәсәбәттең ни тиклем самими бер төҫ алыуын аңлау йөҙөнән бик мөһим.

341Был хәтирәләрен Исмәғил хәтерҙән яҙғанлыҡтан даталары юҡ. Даталарын мин үҙем ҡуйҙым.

342Был Шотт хужалығына килгән Алаш Урҙа вәкилдәренең Азимбәк Беримжан һәм Мөхтәр Әүәзов булыуы хаҡында юғарыла һүҙ булғайны.

343Йөҙбашы Исмәғил Шәрипов ҡазанлыларҙың күпселегенең ғәҙәте буйынса төрки ауыл исемдәрен урыҫтарҙың әйтеүенсә ярашлы рәүештә яҙған, мин уларҙы төркисә яҙҙым.

344Исмәғил был ауылды К хәрефе менән билдәләгән.

345Исмәғил был ауылды Ғ хәрефе менән билдәләгән. Был һуғыш майҙандарын яҡшы белгәнлектән, ауыл исемдәрен үҙем белгәнсә яҙҙым.

346Был һуғыш октябрҙең 10 менән 12-һе араһында булһа кәрәк.

347Исмәғил Шәрипов был ауылды Ғ хәрефе менән билдәләгән. Был тирә минең тыуып үҫкән ерҙәрем. Ауылдың Яңырыҫ икәнлеге миңә мәғлүм.

348Йөҙбашы Исмәғил Шәрипов был ауылды Ғ хәрефе менән билдәләгән.

349Исмәғил Шәрипов был ауылды В хәрефе менән билдәләгән.

350"Бөгөнгө Төрөк иле (Төркөстан) һәм яҡын замандағы тарихы". 390–391-се биттәр.

351М. Мортазин китабы. 134-се бит.

352М. Мортазин китабы. 135-се бит.

353Ҡулъяҙма хәлендә ҡулымда булған был урыҫса әҫәрҙә Алишевтың исеме юҡ. Ләкин 27-се биттә фронттанғы хәл мәсьәләләре буйынса Троцкий менән үҙе осрашып, теләктәрен аңлатыуы хаҡында яҙыуына ҡарап әҫәрҙең авторы Алишев булыуын аңларға мөмкин.